# МИНЕҢ ГҮЗӘЛ ДИНЕМ

# 1



IslamicBook
Make Room For The Life

ҒИБӘҘӘТКӘ ӨЙРӘНӘМ

# МИНЕҢ ГҮЗӘЛ ДИНЕМ

**Әҙерләүселәр**

Рәжәб ӨЗДИРӘК - Фаруҡ СӘЛМАН - Нәзиф ЙЫЛМАЗ

## ҒИБӘҘӘТКӘ ӨЙРӘНӘМ

**ӨФӨ - 2020**

**Баһалаусылар:**
А.З. Салеев
Р.Р. Фасхудинов
К.Л. Жагипаров
Р.Ш. Мамедов

**Башҡорт теленә тәржемә итеүселәр:**
Резеда Суфиянова, Рәфисә Ҡиәмәтдинова
**Әҙәби редактор:**
Әҙибә Ғәҙел
**Дини редактор:**
Айҙар Хәбибуллин
**Дизайн:**
Рәсим Шакир улы

ВСЕ ПРАВА ЗАЩИЩЕНЫ
ISBN: 978-5-6041250-8-3
ИЗДАТЕЛЬСТВО ООО "МИР ЗНАНИЙ" 2020

**Книги можно заказать:**
Тел. 8(968)7693443
Веб-сайт: www.islamicbook.ru
mirznaniy571@mail.ru

IslamicBook
Make Room For The Life

# Инеш һүҙ

Беҙгә гүзәл Ислам динен биргән Раббыбыҙға сикһеҙ рәхмәттәребеҙ булһын! Бөтә тормошо менән беҙгә Ислам дине хәҡиҡәтен еткергән, барлыҡ рәсүлдәрҙең Әфәндеһенә һәм һуңғы Пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмгә, ғаиләһенә һәм Уның сәхәбәләренә Аллаһтың рәхмәте һәм сәләме булһын!

Һөйөклө балаларыбыҙ!

Аллаһҡа мөхәббәт – динебеҙҙең төп асылы. Хаҡ Тәғәләбеҙ йөрәктәребеҙҙе һөйөү өсөн бар ҡылған. Ул динебеҙҙе, Пәйғәмбәребеҙҙе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм), Ул һөйгәндәрҙе һөйөүебеҙҙе һәм улар юлынан барыуыбыҙҙы теләй.

Мөхәббәт күңелдә ярала, аҙаҡ ғәмәлдәребеҙҙә күренә. Иң бөйөк мөхәббәт – Аллаһҡа мөхәббәт – шулай уҡ күңелдә ярала. Был мөхәббәт беҙҙе яҡшылыҡ юлына баҫтыра, Аллаһтың ҡушҡандарын үтәп, тыйғандарынан тыйылыуға этәрә. Беҙ ҡылған игелектәр һәм ғибәҙәттәр ул мөхәббәтте һәм иманды көсәйтә.

Һөйөклө балалар!

Пәйғәмбәребеҙ ҡабыҙған иман нуры, быуындан-быуынға күсеп, беҙҙең көндәргә килеп етте. Һәр быуын, хәленән килгәнсә, шул дингә ярашлы йәшәргә һәм уны киләһе быуындарға тапшырырға тырышты. Шул рәүешле Ислам ғилемдәре инсандан инсанға, күңелдән күңелгә күсеп, беҙҙең көндәргә килеп етте.

Һәммәбеҙҙе лә яралтҡан, Үҙенең Һөйөклө Илсеһе Мөхәммәт Мостафаны (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) һәм гүзәл динебеҙҙе барлыҡҡа килтергән Аллаһу Тәғәләне ныҡ яратыуығыҙҙы беҙ beләбеҙ. Беҙ ҙә һеҙҙе бик тә яратабыҙ һәм һеҙҙең, балаларыбыҙҙың, динебеҙҙе ентекләп өйрәнеүегеҙҙе теләйбеҙ.

Һеҙ – беҙҙең киләсәгебеҙ. Беҙҙең ҡулдағы бөтә матди һәм рухи ҡиммәттәр оҙаҡламай һеҙҙең ҡулға күсәсәк, улар өсөн яуаплылыҡ та һеҙҙең өҫтә буласаҡ. Яратҡан Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) ҡабыҙған иман нурын беҙҙән ҡабул итеп, һеҙ уны артабан алып китәсәкһегеҙ. Шулай булғас беҙгә, оло быуынға, һеҙҙе был изге эшкә әҙерләү бурысы йөкмәтелгән. Оҙайлы тарихы булған динебеҙҙе иң камил сүрәттә беҙ һеҙгә тапшырырға тейешбеҙ. Был юлдағы тырышлығыбыҙ – Аллаһу Тәғәләгә мең шөкөр – тәүге емештәрен бирҙе.

Был китапта беҙ ғибәҙәт, тәһәрәт, намаҙ, ураҙа, зәкәт, хаж һәм ҡорбан хаҡында һөйләнек. Китапты әҙерләгәндә, элек нәшер ителгән китаптарҙы файҙаландыҡ һәм уларға ҡағылышлы бөтә тәнҡит һүҙҙәрен күҙ уңында тотоп эшләргә тырыштыҡ.

Рухи ғилемгә эйә булыу хеҙмәтенә ҙур теләк һәм кинәнес менән тотоноуығыҙҙы бик теләйбеҙ. Ошо маҡсаттан сығып, был китапта беҙ шундай материалдарҙы файҙаландыҡ:

• Гүзәл динебеҙ хаҡында яратып һәм ҡыҙыҡһынып уҡыр өсөн, һәр теманы бәләкәй генә хикәйәләрҙән башланыҡ.

• Динебеҙҙең сығанағы һәм нигеҙе булған Ҡөрьән аяттарына һәм Пәйғәмбәребеҙ хәҙистәренә иғтибарығыҙҙы йәлеп итеү өсөн, беҙ уларҙы рамкалар менән айырҙыҡ.

• Динебеҙҙең бер генә әмере һәм тыйыуы ла алъюсыҡҡа бирелмәгән. Әгәр уларҙың мәғәнәһен һәм файҙаһын белһәк, беҙ динебеҙ ҡанундарын тағы ла нығыраҡ яратып үтәйәсәкбеҙ. Бына ни өсөн һәр ғибәҙәт асылында ятҡан хикмәт һәм файҙаны аңлатып биреүҙе беҙ кәрәкле тип таптыҡ.

• Аңлайышлыраҡ булһын өсөн, ҡайһы бер темаларҙы һорауҙар һәм уларға яуаптар рәүешендә бирҙек.

• Һүрәттәрҙе яратыуығыҙҙы белеп, байтаҡ иллюстрациялар ҡулландыҡ.

• Һеҙҙең рухи донъяғыҙҙы Пәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм), Унын сәхәбәләре һәм Исламдың бөйөк эшмәкәрҙәре тураһындағы иҫтәлектәр менән байытырға тырыштыҡ.

• Уңайлы булһын өсөн, ҡайһы бер мәғлүмәттәрҙе таблица һәм схемалар рәүешендә бирҙек.

• Һеҙ алған белемдәрегеҙҙе тикшереп ҡарай алһын өсөн, һәр бүлем һуңында һорауҙар урынлаштырҙыҡ.

• Устарығыҙҙы күккә төбәп, Аллаһу Тәғәләгә доға ҡылыр өсөн, беҙ Һөйгән Пәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) уҡыған доғаларҙы урынлаштырҙыҡ.

Үҙ доғаларығыҙҙа ошо китапты әҙерләүҙә ҡатнашҡандарҙы ла онотмаҫһығыҙ, тип өмөтләнәбеҙ һәм «Минең гүзәл динем» серияһынан «Ғибәҙәт ҡылырға өйрәнәм» тип аталған тәүге китап менән яңғыҙығыҙҙы ҡалдырабыҙ.

Йөрәктәрегеҙ - Иман, тормошоғоҙ – Ислам, күңелегеҙ Ихсан менән тулһын. Фәрештәләр юлдашығыҙ булһын, яҡшы кешеләр – яҡын дуҫтарығыҙ, ә Аллаһу Тәғәлә - ярҙамсығыҙ. Йәннәт юлдары асыҡ булһын һеҙгә…

Аллаһ һәр саҡ һаҡлап торһон һеҙҙе!

# ЙӨКМӘТКЕҺЕ


## ҒИБӘҘӘТ / 11

Хикәйә: ҺАРАЙҘАҒЫ ТАБЫН ..... 12
Нимә ул ғибәҙәт ҡылыу? ..... 14
Беҙ ни өсөн ғибәҙәт ҡылабыҙ? ..... 15
Хикәйә: АЛЛАҺҠА ШӨКӨР ҠЫЛАМ ..... 16
Ғибәҙәт ҡылыу беҙгә нимә бирә? ..... 18
ҺОРАУҘАР ..... 19

## МҮКӘЛЛӘФТЕҢ ҒӘМӘЛДӘРЕ / 21

Хикәйә: ОЖМАХҠА ЮЛ ..... 22
Беҙҙең дини бурыстарыбыҙ ..... 23
Әфғәл Мүкәлләфин (Мүкәлләфтең ғәмәлдәре) ..... 24
Исламдың шарттары ..... 27
Шиғыр: ИҢ ӘҮҮӘЛ КӘРӘК НӘМӘ ..... 27
Хикәйә: НЕДЖД ЕРЕНӘН КИЛЕҮСЕ КЕШЕ ..... 28
ҺОРАУҘАР ..... 29

## ПАҠЛЫҠ / 31

Хикәйә: АЛЛАҺ ЙОРТОН ЙЫЙЫШТЫРЫУСЫ ҠАТЫН ..... 32
Ислам һәм паклыҡ ..... 34
Шиғыр: МОСОЛМАН ҺӘМ ПАКЛЫҠ ..... 35
Пакланыу төрҙәре ..... 36
Шиғыр: ПАКЛЫҠ ҺӘМ ҺАУЛЫҠ ..... 39
Пакланыу һәм ғибәҙәт ҡылыу бәйләнеше ..... 40
Беҙҙең Пәйғәмбәребеҙ паклыҡҡа айырым иғтибар бүлгән ..... 41
Шиғыр: ПАКЛЫҠ ..... 42
ҺОРАУҘАР ..... 43

## ТӘҺӘРӘТ – ҒӨСӨЛ - ТӘЙӘММҮМ / 45

Хикәйә: ТӘҺӘРӘТ ГОНАҺТАРҘАН АРЫНДЫРА ..... 46
ТӘҺӘРӘТ ..... 48
Тәһәрәттең мәғәнәһе ..... 48
Тәһәрәтһеҙ нимәләр эшләргә ярамай? ..... 48
Нисек тәһәрәт алырға? ..... 48
Хикәйә: ҺАЛҠЫН ШИШМӘ ..... 50
Тәһәрәттең файҙаһы ..... 52
Тәһәрәттең фарыздары ниндәй? ..... 53
Тәһәрәттең сөннәттәре ниндәй? ..... 54
Тәһәрәтте боҙа торған ғәмәлдәр ниндәй? ..... 55
Мөхәммәд Өммәте нуры ..... 55
ҒӨСӨЛ ..... 56
Ғөсөлдөң мәғәнәһе ..... 56

Ғөсөлһөҙ нимә эшләргә ярамай? ... 56
Ғөсөлдөң фарыҙдары ... 56
Ғөсөл ҡойоноу кәрәкле булған хәлдәр ниндәй? ... 57
Нисек ғөсөл ҡойонорға? ... 57
Ғөсөлдөң файҙаһы ... 58
Ғөсөл ҡойонғанда, ниндәй ғәмәлдәр хупланмай? ... 58
Ғөсөл ҡойоноуҙың сөннәттәре ниндәй? ... 59
Хикәйә: ҺЫУ КӨСӨ ... 59
ТӘЙӘММҮМ ... 63
Тәйәммүмдең мәғәнәһе ... 63
Тәйәммүм ҡылыр өсөн сәбәптәр ... 63
Нисек тәйәммүм ҡылырға? ... 63
Тәйәммүмдең фарыҙдары ниндәй? ... 64
Хикәйә: ҠЫУ ТӨБӘ МӘМЕРЙӘҺЕ ... 64
ҺОРАУҘАР ... 68

## НАМАҘ / 71

Хикәйә: ТӘҮГЕ НАМАҘ ... 72
Нимә ул намаҙ? ... 74
Ни өсөн намаҙ уҡыйбыҙ? ... 75
Намаҙ беҙгә нимә бирә? ... 76
Намаҙ кемдәр өсөн фарыҙ? ... 78
Намаҙ төрҙәре ... 78
Намаҙҙың фарыҙдары ... 82
Аҙан ... 83
Ҡамәт ... 85
Намаҙ нисек уҡыла? ... 86
Фарыҙ намаҙҙарын ҡылыу тәртибе ... 92
Намаҙҙан һуң уҡыласаҡ доға һәм тәсбихтар ... 96
Намаҙҙың вәжибтәре ... 98
Намаҙҙың сөннәттәре ... 99
Намаҙҙың әҙәптәре ... 100
Намаҙҙың мәкруһтары ... 100
Әйҙәгеҙ, намаҙҙарыбыҙҙы буйһоноусанлыҡ менән ҡылайыҡ ... 101
Намаҙҙы боҙоусы сәбәптәр ... 103
Йәмәғәт намаҙының ҡиммәттәре ... 104
Мәсеткә йөрөү әҙәбе ... 105
Йәмәғәт намаҙының төрҙәре ... 108
Ауырыу кешенең намаҙы ... 111
Юлсы намаҙы ... 112
Ҡаза намаҙы ... 112
Сәһү сәждәһе ... 114
Тиләүәт сәждәһе ... 115
Намаҙ уҡырға ярамаған ваҡыттар ... 116
Хикәйә: МИНЕҢ НАМАҘҘАРЫМ ... 117
Пәйғәмбәребеҙ намаҙ уҡырға ятаҡан ... 120
Мәсеттәр ... 121
ҺОРАУҘАР ... 124

## РАМАҘАН АЙЫ ҺӘМ УРАҘА / 131


Хикәйә: БЕРЕНСЕ УРАҘА ... 132
Нимә ул ураҙа? ... 135
Кемгә ураҙа фарыз? ... 135
Ураҙабыҙҙың дөрөҫ булыу шарттары ниндәй? ... 135
Рамаҙан менән бәйле терминдар ... 136
Беҙ Ураҙа тотҡанда, ул беҙҙе ҡурсалап тора ... 138
Ураҙа тотоу беҙгә нимә бирә? ... 139
Ураҙа төрҙәре ... 141
Ҡаза ураҙа ... 144
Кәффәрәт ураҙа ... 144
Ураҙаны нимә боҙа? ... 145
Кәффәрәт ураҙа һәм ҡаза ураҙа тотоу тейешле булған ғәмәлдәр ... 145
Тик ҡаза ураҙа тотоу тейешле булған ғәмәлдәр ... 146
Ураҙаны боҙмай торған ғәмәлдәр ... 147
Ҡайһы осраҡтарҙа ураҙа тотмаҫҡа ярай? ... 148
Ураҙа өсөн фидиә ... 149
Фитыр саҙаҡаһы ... 149
Нәҙер ураҙаһы ... 149
Тәрәүих намаҙы ... 150
Иғтикәф ... 150
Ҡәҙер кисе ... 151
Ураҙа Байрамы ... 152
Пәйғәмбәр әфәндебеҙ Рамаҙанды нисек үткәргән ... 153
Шиғыр: РАМАҘАНДА ТЫУҒАН УЙҘАР ... 156
ҺОРАУҘАР ... 157


## ЗӘКӘТ / 159


Хикәйә: ШӨКӨР ИМТИХАНЫ ... 160
Беҙҙең мөлкәттәребеҙҙең хужаһы кем? ... 162
Саҙаҡа һәм зәкәт ... 163
Нимә ул зәкәт? ... 165
Зәкәт беҙгә нимә бирә? ... 166
Хикәйә: ҺЕҘҘӘН КҮБЕРӘК ТҮЛӘҮСЕ БАР! ... 170
Зәкәт кемдәр өсөн фарыз һанала? ... 172
Дини ҡанундарға ярашлы бай булыу ... 172
Асыл кәрәкле әйберҙәр ... 172
Нисап дәүмәле һәм зәкәттең күләме ... 173
Һатыуҙан алған килемдән һәм аҡсанан түләнәсәк нисап һәм зәкәт ... 173
Йорт хайуандарының нисабы һәм зәкәте ... 174
Уңыштың нисабы һәм зәкәте ... 175

Хикәйә: ҺӘЛӘК БУЛҒАН БАҠСА 176
Зәкәт кемдәргә бирелә? 178
Зәкәт кемдәргә бирелмәй? 179
Хикәйә: ИҢ ЯРАТҠАН МӨЛКӘТЕГЕҘҘӘН САҘАҠА БИРЕГЕҘ 180
Зәкәт йә саҙаҡа биргәндә үҙеңде нисек тоторға? 181
Тир түгеп эшләү саҙаҡа йыйыуҙан хәйерлерәк 183
Пәйғәмбәребеҙҙең йомартлығы һәм Унның ярҙамсыллығы 184
Шиғыр: САҘАҠА 186
ҺОРАУҘАР 187

## ХАЖ / 189

Хикәйә: ЗӘМЗӘМ 190
Нимә ул хаж? 192
Хаж беҙгә нимә бирә? 193
Хикәйә: ШӘКӘРЛЕ СӘТЛӘҮЕКТӘР 196
Хаж кемдәр өсөн фарыз? 197
Шиғыр: ҠӘҒБӘ ЮЛЫ 198
Ҡәғбәтуллаһ 199
Хаж менән бәйле урындар 201
Шиғыр: БЕҘҘӘН СӘЛӘМ ӘЙТЕГЕҘ 204
Мәккә һәм Мәҙинәләге иҫтәлекле урындар 205
Хаждың фарыздары 208
Хаж ҡылыу өсөн йөкләмәләр 208
Хаж ғәмәле нисек ҡылына? 212
Ғөмрә 214
Хаждан ниндәй бүләктәр алып ҡайттығыҙ? 215
Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмдең) хажы 216
Шиғыр: ЭҘЛӘП-ЭҘЛӘП ТАПҺАМ ЭҘЕҢДЕ 218
ҺОРАУҘАР 219

## ҠОРБАН / 221

Хикәйә: ДУҪЛЫҠТЫ ҺЫНАУ 222
Нимә ул ҡорбан? 224
Ҡорбан ҡасан салына? 224
Ҡорбан салыу беҙгә нимә бирә? 225
Ҡорбан кемдәр өсөн вәжиб? 227
Ҡорбан өсөн яраҡлы хайуандар 228
Ҡорбан нисек салына? 229

Ҡорбан салғанда нимәләргә иғтибар итергә кәрәк? 230
Ҡорбан ите нисек бүленә? 230
Ҡорбан малының тиреһен ни эшләтергә? 230
Нәҙер ҡорбаны 231
Ғаҡиҡә ҡорбаны 231
Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) һәм ҡорбан 232
ҺОРАУҘАР 233
ҺОРАУҘАРҒА ЯУАПТАР 235





ЯРАЛЫУЫБЫҘҘЫҢ МАҠСАТЫ

# ҒИБӘҘӘТ

- Ғибәҙәттең билдәләмәһе
- Ғибәҙәттең маҡсаты
- Ғибәҙәттең файҙаһы





# ҺАРАЙҘАҒЫ ТАБЫН

Йәшәгән, ти, бик бай бер батша. Бер ваҡыт унда үҙенең байлығын, мөһабәтлелеген кешеләргә күрһәтеү теләге уянған. Бының өсөн ул, иҫ китмәле һарай төҙөтөп, хайран ҡалырлыҡ итеп биҙәтергә булған. Төрлө-төрлө һый менән тулы күп һанлы өҫтәлдәр ҡуйырға бойорған.

Мул табын әҙер булғас, вәзиренә кешеләрҙе саҡырырға һәм һарайҙа үҙенде нисек тоторға кәрәклеген аңлатырға ҡушҡан.

Вәзир, әмерҙе үтәп, ҡунаҡтарҙы һарай буйлап йөрөткән, батша һыйын, бүләктәрен тәкдим иткән. Вәзир, һарай һәм уның хужаһы тураһында мөмкин тиклем күберәк белдерергә теләп:

- Эй кешеләр! Был һарайҙың хужаһы - беҙҙең батша. Һеҙгә үҙенең кем икәнен белдерер өсөн, был һарайҙы һәм уның эсендәге йыһаздарҙы күрһәтте, мул табыны һәм бүләктәре - һеҙҙе яратыу билдәһе. Быға яуап итеп, уның йомартлығы һәм мәрхәмәтлелеге өсөн, үҙенә ҡарата хөрмәт һәм һөйөү булырына ышана, һеҙҙең рәхмәтле һәм итәғәтле булыуығыҙға өмөтләнә. Һарай эсендәге барлыҡ затлы әйберҙәрҙә батша мисәтен күрерһегеҙ. Бар байлыҡҡа эйә булған хужаның бөйөклөгө һәм мәрхәмәтенең киңлеге тураһында күберәк белергә тырышығыҙ, - тигән.

Был һүҙҙәрҙән һуң, ҡунаҡтар ике төркөмгә бүленеп киткән.

Бер төркөм ҡунаҡтар, вәзир әйткәнде диҡҡәт менән тыңлап, ризалашып, уны ҡабул иткән, һәм, һарайҙа булғанда, үҙҙәрен бик әҙәпле, итәғәтле, тейешенсә тотҡан. Һарайына саҡырып һыйлағаны, төрлө-төрлө бүләктәр биргәне өсөн, батшаға рәхмәт әйткән. Был төркөм ҡунаҡтарҙан батша ҡәнәғәт ҡалған һәм шуға ла уларҙы әлегенән дә гүзәлерәк һарайына индергән. Ҡунаҡтар унда бәхеттә һәм тыныслыҡта мәңгелеккә ҡалған.



Икенсе төркөмдәге ҡунаҡтарҙы ашау-эсеүҙән башҡа бер нимә лә ҡыҙыҡһындырмаған. Вәзирҙең һүҙҙәренә бөтөнләй иғтибар итмәгәндәр, береһен икенсеһенә ҡушыу тыйылған эсемлектәрҙе эсеп иҫергәндәр. Башҡа ҡунаҡтарға ҡамасаулап шаулашҡандар һәм ыҙғышҡандар. Һый һәм алған бүләктәр өсөн рәхмәт әйтмәгәндәр. «Был ғына аҙ, күберәк кәрәк!» - тип ҡысҡырышҡандар. Ошондай ҡылыҡтары өсөн, һарай һаҡсылары уларҙы төрмәгә япҡан, ә унда әҙәпһеҙ ҡунаҡтар ҡаты язаға тарттырылған.



* * *



## ҺОРАУҘАР

- Был хикәйәләге батша Аллаһты һынландыра. Һеҙҙеңсә, һарай нимәне күҙ алдына баҫтыра?
- Һарайҙағы һый һәм бүләктәр нимәне аңлата?
- Вәзир кемде һынландыра?
- Һарайға саҡырылған ҡунаҡтар кемдәр?
- Беренсе төркөм ҡунаҡтар кемдәргә оҡшаған?
- Икенсе төркөм ҡунаҡтар йөҙөндә кемдәрҙе күрәһегеҙ?
- Беренсе төркөм ҡунаҡтар ебәрелгән тағы ла гүзәлерәк һарай нимәне белдерә?
- Икенсе төркөм ҡунаҡтар оҙатылған төрмә нимәне күҙ алдына килтерә?
- Икенсе төркөм ҡунаҡтары ни өсөн төрмәгә ябыла?
- Нилектән икенсе төркөмдәге ҡунаҡтар вәзир һүҙҙәренә иғтибар итмәй?



# НИМӘ УЛ ҒИБӘҘӘТ ҠЫЛЫУ?

Ғибәҙәт ҡылыу - беҙҙе уратып алған бар донъяны барлыҡҡа килтереүсе Бөйөк Аллаһҡа мөхәббәтебеҙҙе белдереү, Унын ҡушҡандарын үтәү һәм тыйғандарынан тыйылыу.

Ғибәҙәт ҡылыу - йөрәгебеҙҙән сыҡҡан һәм ғәмәлдәребеҙҙән күренгән иман күрһәткесе. Намаҙға баҫыу, ураҙала булыу, Ҡөрьән уҡыу, доға ҡылыу, Аллаһ исемен иҫтә тотоу - барыһы ла ғибәҙәт. Ялғандан, урлыҡтан һәм башҡа гонаһтарҙан арыныу ҙа ғибәҙәткә инә. Ата-әсәгә изгелекле мөнәсәбәт, туғандарҙы күрә-белә йөрөү ҙә ғибәҙәт. Кешеләргә миһырбанлы булыу, ярҙамға килеү, зыян килтерә торған ғәмәлдәрҙән арыныу ғибәҙәт ҡылыуға тиң. Мосолман ҡәрҙәшенә сәләм биреп, йылмайып иҫәнләшеү ҙә ғибәҙәткә инә. Шулай итеп, Аллаһ ризалығы өсөн эшләнгән бөтә нимә – ул ғибәҙәт ҡылыу.

**Һөйөклө Пәйғәмбәребеҙ әйткән:**

“Доға – ғибәҙәттең асылы”.

(Тирмизи, Дәғүәт 1)

**Аллаһу Тәғәлә бойора:**

“Әйт һин: “Шик юҡ, минең намаҙым, ғибәҙәтем, тормошом һәм үлемем - барыһы ла ғаләмдәрҙең Раббыһы Аллаһ өсөндөр”, - тип”.

(Әнғәм сүрәһе, 162-се аят)



# БЕҘ НИ ӨСӨН ҒИБӘҘӘТ ҠЫЛАБЫҘ?

Йәшәйешебеҙҙең һәр мәлендә беҙ иҫәпһеҙ ниғмәттәр менән файҙаланабыҙ: һулаған һауа, эскән һыу, ашаған аҙыҡ, үҙ төҫө, еҫе, тәме булған йәшелсә-емеш, һөтө - эсемлек, ите ризыҡ булған мал-тыуар… Ошоларҙың һәр ҡайһыһы – Аллаһ бүләге, Уның беҙгә изгелекле мөнәсәбәте сағылышы.

Кемдер беҙгә ҙур булмаған игелек эшләһә, беҙ ҡыуанабыҙ. Ошо ғәмәле өсөн уға рәхмәтле булып, уға хөрмәт күрһәтәбеҙ. Әгәр ҙә ул, нимәләр һорап мөрәжәғәт итһә, беҙ кинәнес менән уның үтенесен үтәйбеҙ түгелме?

Шулай булғас, беҙ ҙә бар нәмәне юҡтан бар ҡылыусы һәм иҫәпһеҙ-һанһыҙ ниғмәттәрен бүләк итеүсе Аллаһҡа рәхмәтле булырға тейеш түгелбеҙме икән?

Моғайын, ҙур ҡыуаныс менән ул бойорған ғибәҙәттәрҙе үтәргә бурыслыбыҙҙыр.

Аллаһҡа ғибәҙәт ҡылғанда, Уға мөхәббәтебеҙҙе һәм тоғролоғобоҙҙо белдереп кенә ҡалмайбыҙ, Уның һөйөүен дә яулайбыҙ, уға лайыҡлы булырға тырышабыҙ. Аллаһ беҙҙе яратһа, һис шикһеҙ, беҙгә миһырбанлы буласаҡ һәм киләсәк тормошта, әхирәттә, быныһына ҡарағанда күберәк ниғмәттәр биреп, ожмахта сикһеҙ бәхет-сәғәҙәткә күмәсәк.

**Аллаһу Тәғәлә бойора:**

“Шөкөр итһәгеҙ, әлбиттә, һеҙгә ниғмәтте арттырасаҡмын”.

(Ибраһим сүрәһе, 7-се аят)

**Һөйөклө Пәйғәмбәребеҙ әйткән:**

“Тормош шарттары һеҙҙекенән насарыраҡ булғандарға ҡарағыҙ, һеҙҙекенән һәйбәтерәк булғандарҙы күҙәтмәгеҙ. Аллаһ биргән ниғмәттәрҙе түбәнһетеп ҡарамау өсөн, был уғата урынлы ҡылыҡ”.

(Мөслим, Зуһд 9)

## Аяҡ кейеме

Аяҡ кейеме булмау сәбәпле, бер кеше бик ыҙаланған. Бына ул бер көндө аяҡһыҙ кешегә тап булған: «Аяғыма кейергә юҡ, әммә Аллаһҡа рәхмәт - минең аяҡтарым бар. Уларҙы һатып алып булмай бит», - тигән ҡарарға килгән ул. Әгәр ҙә үҙебеҙ эйә булған барса бәрәкәттәрҙең баһаһын белһәк, беҙ улар өсөн Аллаһҡа рәхмәт уҡыясаҡбыҙ.

Үҙебеҙҙә булған ниғмәттәрҙең ҡәҙерен белгәндә генә, беҙ Аллаһҡа рәхмәтле буласаҡбыҙ.







# АЛЛАҺҠА ШӨКӨР ҠЫЛАМ

Бына бер нисә көн инде Айгөл ауырый һәм тышҡа сыға алмай. Бер аҙ хәле яҡшырҙы яҡшырыуын, тик әсәһе ятҡан урынынан тороп йөрөргә рөхсәт бирмәй. Тамам йүнәлер өсөн, яҡшы ризыҡланып, күпмелер ваҡыт һаҡланырға, көс йыйырға кәрәк.

Айгөлдөң карауаты тәҙрә янында тора. Көн дауамында ул үтеп йөрөүселәрҙе күҙәтә, китап уҡый, ата-әсәһе менән һөйләшә, ләкин уға күңелһеҙ. Ашағыһы ла килмәй, әхирәттәрен һағына. Шул көндө Айгөлдөң уҡытыусыһы хәлен белергә килде. Былдай көтөлмәгән хәлгә Айгөл бик ҡыуанды. Уҡытыусыһы, уның маңлайынан үбеп, эргәһенә ултырҙы ла хәлен һорашты. Айгөл тәмһеҙ дарыуҙарҙы эсеп, урында ғына ятыуҙың бөтөнләй оҡшамауын, тиҙерәк һауығыуына өмөтләнеүен белдерҙе.

Уҡытыусы, ҡыҙҙың башынан һыйпап, сабырлыҡ теләне. Айгөл уйға батты, сөнки уҡытыусы кәңәше уға бигүк оҡшаманы.

- Ниңә Аллаһ сирҙәрҙе барлыҡҡа килтергән һуң? - тине ул.

- Сәләмәтлегеңдең ҡәҙерен белеп, сабыр һәм рәхмәтле булыр өсөн, - тине уҡытыусы йылмайып.

- Нисек инде? – Айгөл аңламаны.

- Айгөл, гүзәлкәйем Айгөл, беҙҙең менән булған хәл-ваҡиғалар беҙҙе нимәгәлер өйрәтер өсөн ул. Сир сәләмәтлегебеҙҙең ҡәҙерен белер

өсөн кәрәк. Аслыҡ – аҙыҡ, һыуһаy һыу ҡәҙерен белергә өйрәтә. Шуны башыңдан үткәрмәйенсә, уларҙың баһаһын, нимәгә эйә икәнеңде аңламаясаҡһың.

- Һеҙ хаҡлы, уҡытыусым, - тип ризалашырға мәжбүр булды Айгөл, мин, сирләп киткәс кенә, һаулыҡтың ҡәҙерен белдем.

- Афарин, Айгөл, - тине уҡытыусы, ниндәй байлыҡҡа эйә булғаныбыҙҙы белмәйенсә, ысынлап тороп шуларҙы Бар ҡылыусыға рәхмәтле була алмайбыҙ. Был хәлдән һуң, һине сәләмәт бала итеп яралтҡан Аллаһҡа ныҒыраҡ рәхмәтле булырһың, тип уйлайым.

Уҡытыусыһының күҙҙәренә тура ҡарап:

- Эйе, һеҙ хаҡлы, - тине Айгөл, - мин быны онотмаясаҡмын.

Аҙ ғына уйланып торғандан һуң, башына йәнә бер уй килде һәм ул һорау биреүҙән тыйыла алманы:

- Уҡытыусым, - тине ул, - улай булғас, байҙар Аллаһҡа ныҒыраҡ рәхмәтле булырға тейешме?

- Уйлап ҡара әле, - тине уҡытыусы, - кемдер берәү һуҡыр, әммә бай булһа, яҡты донъяны күрер өсөн, бөтөн байлығын бирергә риза булмаҫ инеме? Йәки һаңғырау булһа, был донъяның барлыҡ тауыштарын ишетер өсөн, бөтә аҡсаларын сарыф итмәҫ инеме?

- Әлбиттә.

- Шулай булғас, күҙҙәре күргән, ҡолаҡтары ишеткән, аяҡтары йөрөгән һәр кеше бик бай, тәү сиратта ул - фекерләр өсөн зиһене булған кеше.

- Тимәк, мин бик бай,- тине Айгөл.

- Эйе, - тине уҡытыусы, - һин бик бай, шуға күрә Аллаһҡа бөткөһөҙ рәхмәтле булырға тейешһең.



- Мин бүтән зарланмаясаҡмын, уҡытыусым, Аллаһтың рәхмәтле ҡоло булырмын, - тип вәғәҙә бирҙе Айгөл. Уҡытыусы, ҡыҙҙың бәләкәй ҡулдарынан тотоп, маңлайынан үпте.

- Һауығып кит, Айгөл, мин Аллаһтан һине тиҙерәк һауыҡтырыуын үтенермен, - тине уҡытыусы хушлашҡанда.



# ҒИБӘҘӘТ ҠЫЛЫУ БЕҘГӘ НИМӘ БИРӘ?

### Ғибәҙәт беҙҙе Аллаһҡа яҡынайта

Беҙ Аллаһты танып-белер һәм Уға хеҙмәт итер өсөн яратылғанбыҙ. Беҙҙең бурыс - ғибәҙәт ҡылыу. Ғибәҙәт аша беҙ Уға яҡынаябыҙ. Бер ниндәй аралашсыларһыҙ Унан ярҙам һәм мәрхәмәт һорайбыҙ. Уның мөхәббәтен яулап, һөйөүенә лайыҡ булып, бәхеткә ирешәбеҙ.

### Ғибәҙәт беҙҙең әхлағыбыҙҙы яҡшырта

Ғибәҙәт ҡылыу ярҙамында гүзәл әхлаҡлы, йәмғиәткә файҙалы кешеләргә әүереләбеҙ. Беҙҙең йөрәктәребеҙ яман уй-хистәрҙән арына. Ғибәҙәт ҡылыу, тышҡы яҡтан да, эске яҡтан да сафландырып, әхлағыбыҙҙы юғары кимәлгә күтәрә.

### Ғибәҙәт ҡылыу иманыбыҙҙы нығыта

Ғибәҙәт ҡылыу - иманды һаҡлау һәм нығытыу өсөн тәүшарт. Әгәр беҙ ғибәҙәтебеҙҙе тейешенсә үтәһәк, иманыбыҙ нығынасаҡ.

Күреүебеҙсә, донъялыҡта ла, мәңгелектәге тормошта ла ғибәҙәт ҡылыуҙың файҙаһы бар. Ғибәҙәт ҡылыуҙың ни биргәнен аңлаған мосолман, ҡайҙа булыуына ҡарамаҫтан, Аллаһ алдындағы бурысын онотмаҫ. Беҙҙең һөйөклө Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) – һәммәбеҙ өсөн иң яҡшы өлгө. Ул ғибәҙәт ҡылырға бик ыраҡҡан, уны тырышып һәм ентекле үтәгән, мосолмандарҙы һәр ваҡыт шундай ғибәҙәткә өндәгән.

**Аллаһу Тәғәлә бойора:**

“Мин ендәрҙе лә, кешеләрҙе лә: бары тик Миңә ғибәҙәт итһендәр, тип яраттым”.

(Зәрийәт сүрәһе, 56-сы аят)

**Һөйөклө Пәйғәмбәребеҙ әйткән:**

Бер әҙәм, Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) янына килеп, Унан һораған:

- Йә Рәсүлуллаһ! Мине йәннәткә илтәсәк һәм йәһәннәмдән алыҫта тотасаҡ ғәмәл тураһында хәбәр бирһәң ине.

Быға Пәйғәмбәребеҙ шундай яуап бирҙе: “Аллаһҡа ғибәҙәт ҡылып, Уға һис бер тиңдәш алма. Намаҙ ҡыл, зәкәт бир һәм туғандарыңды ҡарап, тәрбиәләп тор”.

(Бохари, Әҙәп 10)

Бер көн Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) Муғаҙ бин Жәбәлде ҡулынан тотто һәм:

- Әй, Муғаҙ! Аллаһтың исеме менән ант итеп әйтәм, мин һине бик ныҡ һөйәм! – тине.

Муғаҙ ҙа Пәйғәмбәребеҙгә: “Әй, Аллаһтың Илсеһе! Мин дә һине һөйәм!” - тине.

Пәйғәмбәребеҙ дауам итеп шуны әйтте:

- Муғаҙ! Һиңә һәр намаҙҙан һуң шул доғаны мотлаҡ уҡыр өсөн тәҡдим итәм:

اَللَّهُمَّ اَعِنِّى عَلٰى ذِكْرِكَ وَ شُكْرِكَ وَ حُسْنِ عِبَادَتِكَ

“Аллаһым! Һине иҫтә тотоп зекер итеүҙә, ниғмәттәреңә шөкөр ҡылыуҙа, Һиңә лайыҡлы ғибәҙәт башҡарыуҙа миңә ярҙам әйлә!”

(Әбу Дауд, Витр 26)

# ҺОРАУҘАР

## Белемебеҙҙе тикшерәбеҙ

Дөрөҫ яуаптарҙы билдәләгеҙ.

| | | |
|---|---|---|
| Ғибәҙәт - ул беҙҙе һәм тирә-йүндәге бар нәмәне барлыҡҡа килтергән Бөйөк Аллаһҡа һөйөүебеҙ һәм тоғролоғобоҙ сағылышы. | ☐ дөрөҫ | ☐ хата |
| Беҙ үҫеп һөнәргә эйә булыр өсөн барлыҡҡа килгәнбеҙ. | ☐ дөрөҫ | ☐ хата |
| Кешеләргә ярҙам итеү, уларға сәләм биреү һәм ҡәрҙәш мосолман осрағанда йылмайыу ғибәҙәткә инмәй. | ☐ дөрөҫ | ☐ хата |
| Ғибәҙәт тәнебеҙҙе генә сәләмәтләндермәй, иманыбыҙҙы ла яҡшырта. | ☐ дөрөҫ | ☐ хата |
| Ғибәҙәт ҡылғанда, беҙгә биргән ниғмәттәре өсөн Аллаһҡа рәхмәт әйтәбеҙ. | ☐ дөрөҫ | ☐ хата |

## Үҙебеҙҙе тикшерәбеҙ

**1. Һаналғандарҙан нимә ғибәҙәт түгел?**

а) Намаҙға баҫыу.

б) Ялғандан тыйылыу.

в) Кешеләргә ҡамасаулап ятҡан нәмәләрҙе юлдан алыу.

г) Ғәйбәт һөйләү.

**2. I. Изге эш.**

II. Гонаһ.

III. Ғибәҙәт ҡылыу.

**Һаналған ғәмәлдәрҙең ҡайһыһын Аллаһ хуп күрә һәм беҙҙең үтәүебеҙҙе теләй?**

а) I-II

б) I-III

в) I-II-III

г) II-III

**3. “Бер тапкыр тоҙ татыған ереңә мең көн сәләм ебәр - рәхмәт укы”, - тигән мәкәлде нисек аңларға?**

а) Әгәр беҙ тоҙ татыһаҡ, мең көн уны онотмайбыҙ.

б) Беҙгә изгелекле кешеләрҙе ныҡ яратабыҙ.

в) Беҙгә изгелек ҡылған кешеләрҙе онотторға ярамай.

г) Һыйланыу тураһында мең көн иҫтә тоторға мөмкин.

**4. Түбәндә һаналғандарҙың ҡайһыһы ғибәҙәт һөҙөмтәһендә булмай?**

а) Ғибәҙәт арҡаһында тән һәм йән сәләмәтләнә.

б) Ғибәҙәт ҡылғанда, беҙ рухи яҡтан таҙарабыҙ һәм йәмғиәткә файҙалы кешеләр булабыҙ.

в) Ғибәҙәт ҡылып, Аллаһтың һөйөүенә лайыҡ булабыҙ.

г) Ғибәҙәт ярҙамында беҙ танылған һәм данлыҡлы кешеләр булабыҙ.

**5. “Беҙ ни өсөн ғибәҙәт ҡылабыҙ?” - тигән һорауға ҡайһы яуап дөрөҫ?**

I. Аллаһтың һөйөүен һәм ризалығын алыр өсөн.

II. Был - Аллаһтың әмере.

III. Тамуҡ ғазаптарынан ҡотолоп, Аллаһтың ожмахҡа эләккән бәхетле ҡолдары булыу өсөн.

а) I-II

б) I-III

в) I-II-III

г) II-III



## Төшөп ҡалған һүҙҙәрҙе тултырабыҙ

**(ғәмәлдәр / Аллаһтың / шөкөр / ғибәҙәтем / ғибәҙәт)**

- “Әйт һин: “Шик юҡ, минең намаҙым, ………….., тормошом һәм үлемем - барыһы ла ғаләмдәрҙең Раббыһы Аллаһ өсөндөр”, - тип”.
- Алдамау һәм урламау - …………..
- Ғибәҙәт - беҙҙең йөрәгебеҙҙәге иманыбыҙҙың ........... аша сағылышы.
- ........... ризалығы өсөн эшләнгән һәр нәмә ғибәҙәт була.
- “Аллаһым! Һине иҫтә тотоп зекер итеүҙә, ниғмәттәреңә ....... ҡылыуҙа, Һиңә лайыҡлы ғибәҙәт башҡарыуҙа миңә ярҙам әйлә!”




БЕҘҘЕҢ ДИНИ БУРЫСТАРЫБЫҘ

# Мөкәлләфтең ғәмәлдәре

- Беҙҙең дини бурыстарыбыҙ
- Мөкәлләфтең ғәмәлдәре
- Исламдың нигеҙҙәре




# ОЖМАХҠА ЮЛ

Бер ваҡыт сәхәбәләренең береһе - Муғаҙ бин Жәбәл - Пәйғәмбәрҙән (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) былай тип һораған:

- Әй Аллаһтың Илсеһе! Ниндәй ғәмәл, тамуҡтан алыҫ йөрөтөп, ожмахҡа юл асыр икән?

- Һин бөйөк ғәмәл тураһында һорайһың. Уны Аллаһ, кемгә еңеләйтергә теләй, шуға анһат итә, бының өсөн бары тик Аллаһҡа ғибәҙәт ҡыл, Уға һис бер тиңдәш алма. Намаҙҙы еренә еткереп үтә, зәкәт түлә, Рамаҙан айында ураҙа тот. Әгәр ҙә көсөңдән һәм хәлеңдән килһә, хаж ҡыл.

Унан дауам итә:

- Хәҙер һиңә изгелек - ниғмәт ҡапҡалары тураһында ла белдерергә кәрәктер. Ураҙа - ул тамуҡҡа һәм гонаһтарға ҡаршы ҡалҡан. Һыу ялҡынды һүндергән һымаҡ, хәйер гонаһ ыҙаланыуҙарынан арындыра. Төндә уҡылған намаҙ гонаһтарҙы юя.

Артабан Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) аяттар уҡыны: **“Ҡурҡыу менән өмөт араһында Раббыға ялбарғандар, йылы һәм рәхәт яҫтыҡтарынан айырылып, төндә тороп доға уҡый. Беҙҙең тарафтан индерелгән ризыҡтарынан (зәкәткә, хәйер-саҙаҡаға) сарыф итәләр. Ҡылған ғәмәлдәренә күрә бүләк булараҡ, ниндәй шатлыҡ күрәсәктәрен, күпме әжер аласаҡтарын берәү ҙә белмәҫ”** (Сәждә сүрәһе, 16-17-се аяттар).

Шунан һорап ҡуйҙы :

- Бар эштең башланғысы һәм нигеҙе нимә икәнен әйтергәме?

- Эйе, Аллаһ илсеһе, әйтегеҙ, - тине Муғаҙ.



Беҙҙең Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) былай тине:

- Бар эштең башы - Ислам, нигеҙе – намаҙ. Шунан өҫтәп ҡуйҙы:

- Бар нәмәнең этәргес көсөн белгең киләме?

- Эйе, әй Аллаһ Илсеһе, - тине.

Һөйөклө Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) үҙенең теленә күрһәтеп: "Һаҡла уны!" - тине.

Хөрмәтле Муғаҙ: "Әй Рәсүлуллаһ! Нимә һөйләгәндәребеҙ тураһында ла һораласаҡбыҙмы?" - тине.

- Аллаһ һиңә ниғмәттәр яуҙырһын, Муғаҙ. Кешеләрҙе тамуҡҡа йөҙтүбән ташлаған нәмә - уларҙың тик телдәренең эше. (Тирмиҙи, Иман, 8).



# БЕҘҘЕҢ ДИНИ БУРЫСТАРЫБЫҘ

Бөйөк Аллаһ беҙҙе күп төрлө ниғмәттәргә эйә иткән, шуларҙың иң мөһиме – аң (зиһен). Зиһен ярҙамында хаҡты ялғандан, изгелекте яуызлыҡтан айыра алабыҙ. Аң һәм фекерләү һәләте - кешене хайуандан айырыусы төп сифат. Аң яуаплылыҡты ла талап итә. Хаҡ Тәғәлә беҙҙе был ниғмәткә маҡсатһыҙ һәм яуапһыҙ эйә итмәгән. Ул файҙалы һәм изге ғәмәлдәр ҡылырға бойорған, зыянлы һәм әҙәпһеҙ эш-ҡылыҡтан тыйған. Әлеге һәм мәңгелек донъялыҡта бәхеткә ирешер өсөн, ҡайһы бер бурыстар йөкмәткән һәм уларҙың үтәлешен талап иткән. Беҙ үтәргә йәки тыйылырға тейешле бурыстар - дини бурыстар ул.

### Кеше ҡасан бәлиғ була?

Тән төҙөлөшө үҙенсәлектәренә һәм климат шарттарына ҡарап, кешенең бәлиғ булыу йәше үҙгәреүсән була. Малайҙарҙың был осоро 12-нән 15 йәшкә, ҡыҙҙарҙың 9-ҙан 15 йәшкә тап килә. Ун биш йәшлек ҡыҙ һәм малайҙа өлгөрөү билдәләре күҙәтелмәһә лә, улар бәлиғ булған тип иҫәпләнә һәм динебеҙ ҡушҡанды үтәргә, тыйғанынан тыйылырға бурыслы.

### Мүкәлләф" һүҙе нимәне аңлата?

Аҡылы теүәл булып, бәлиғ булыу йәшенә еткәндәрҙе "мүкәлләф" тиҙәр, улар дин ҡушҡандың барыһын да үтәргә тейеш.

Аҡыл йәһәтенән етлекмәгәндәр һәм бәлиғ булыу йәшенә етмәгән балалар "мүкәлләф" була алмай.

# ӘФҒӘЛ МҮКӘЛЛӘФИН (МҮКӘЛЛӘФТЕҢ ҒӘМӘЛДӘРЕ)

“Әфғәл Мүкәлләфин” нимәне аңлата?

Мүкәлләфтәрҙең дин ҡушҡан ғәмәлдәре “Әфғәл Мүкәлләфин” тип атала.

Был ғәмәлдәр нисек атала?

Мүкәлләфтәрҙең дин ҡушҡан ғәмәлдәре 8 төрлө:

| ӘФҒӘЛ МҮКӘЛЛӘФИН | |
|---|---|
| 1. Фарыҙ | ☺☺☺☺ |
| 2. Вәжиб | ☺☺☺ |
| 3. Сөннә | ☺☺ |
| 4. Мөстәхәб | ☺ |
| 5. Мөбәх | 😐 |
| 6. Мәкруһ | ☹☹ |
| 7. Харам | ☹☹☹☹ |
| 8. Мөфсид | 💣 |



## Фарыҙ ☺☺☺☺

**Фарыҙ:** ул динебеҙ бойорған мәжбүри ғибәҙәт. Мәҫәлән, намаҙ уҡыу, ураҙа тотоу, зәкәт түләү. Фарызды үтәгән һәр кем сауап ала. Ғәфү итерлек сәбәпһеҙ фарызды үтәмәгән һәр кем гонаһлы була.

Фарыздың мотлаҡ үтәлергә тейешле ғибәҙәттәренә ышанмаған һәм динебеҙ бойорған мәжбүрилеген ҡабул итмәгән һәр кем Ислам диненән сыға.

Фарыҙ ике төрлө була:

а) Фарыҙ-ғәйн: һәр мүкәлләф-мосолман үтәй торған фарыҙ ғәмәл. Мәҫәлән, көнөнә биш тапҡыр намаҙ уҡыу, Рамаҙан айында ураҙа тотоу.

б) Фарыҙ-кифая: бер нисә мосолман бергә үтәгән фарыҙ. Был ғәмәлдән һуң, башҡа мосолмандарҙан яуаплылыҡ (бурыс) алына (төшә). Әгәр был фарыҙ үтәлмәһә, ошо тирәләге бар мосолмандар ҙа яуаплы/гонаһлы булып ҡала. Мәҫәлән, әгәр мосолман вафат булып, мосолмандар төркөмө йыназа намаҙын уҡыһа, башҡа мосолмандар яуаплылыҡ тотмай.

## Вәжиб ☺☺☺

Вәжиб: фарыз кеүек теүәл генә сиктәре булмаған ғибәҙәт. Мәҫәлән, байрам намаҙҙары, Рамаҙан айында фытыр саҙаҡаһын биреү, ҡорбан ғәйетендә ҡорбан салыу.

Вәжиб ғибәҙәтен үтәгән кеше сауап ала, үтәмәгәне гонаһлы була. Фарызды инҡар иткән кеше Исламдан сыға, ә вәжибте инҡар иткәне Исламда була ала.



## Сөннә ☺☺

Сөннә: Мөхәммәд Пәйғәмбәрҙең (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) фарыздан һәм вәжибтән тыш үтәгән һәм үтәргә кәңәш иткән ғәмәлдәре.

Сөннә ике төрлө була:

а) Муәккәдә сөннәһе: Мөхәммәд пәйғәмбәрҙең һәр ваҡыт (бик һирәк осраҡтарҙа ғына ҡалдырған) үтәгән сөннә ғәмәле. Мәҫәлән, иртәнге, төшкө һәм киске намаҙҙар сөннәһе, тәрәүих намаҙы муәккәдә сөннәһенә инә.

б) Ғәйри муәккәдә сөннәһе: Мөхәммәд пәйғәмбәрҙең (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) һирәгерәк үтәгән сөннәһе. Мәҫәлән, төштән һуңғы һәм төнгө намаҙҙарҙан алдағы сөннә.

Сөннә үтәүселәр, сауап алып, Аллаһ ярлыҡауына ирешә. Сөннә үтәмәгәндәр сауап алыу мөмкинлегенән мәхрүм ҡала.



## Мөстәхәб ☺

Мөстәхәб: ул күркәм ҡылыҡ һәм маҡтаулы эш. Икенсе төрлө уларҙы “нәфел” йәки “мәндүб” тиҙәр. Мәҫәлән, Духа намаҙын уҡыу, дүшәмбе һәм кесаҙна ураҙа тотоу, мохтаждарға хәйер биреү, бүләк таратыу. Мөстәхәб эшләгән кеше сауап ала, әммә эшләмәгәне гонаһлы түгел.



## Мөбәх ☹

Мөбәх: һәр кем үтәргә йәки үтәмәҫкә ирекле ғәмәлдәр. Бының өсөн беҙ сауап та алмайбыҙ, гонаһлы ла булмайбыҙ. Мәҫәлән, ултырыу, йөрөү, йоҡлау - мөбәх.



## Мәкруһ ☹☹

Мәкруһ: насар, хупланмаған ғәмәлдәр.

Мәкруһ ике төрлө була:

а) Тәхримән мәкруһ (харамға яҡын): Теүәл иҫбатлауҙарға нигеҙләнмәгән үә тыйылған ҡылыҡ-ғәмәлдәр.

Бындай мәкруһ ҡылыусы гонаһлы тип иҫәпләнә. Мәҫәлән, тәмәке тартыу, байрам намаҙына сәбәпһеҙ баҫмау, ваҡытында төшкө намаҙҙа булмайынса, ҡояш байығанда намаҙға баҫыу.

б) Тәнзихан мәкруһ (хәләлгә яҡын): Динебеҙҙә хупланмаған эш-ҡылыҡтар. Бындай эш ҡылыусылар гонаһлы түгел, әммә әҙәпһеҙлек (насар ҡылыҡтар). Мәҫәлән, уң ҡул менән һемгереү, ашығып ашау – тәнзихән мәкруһ.



## Харам ☹☹☹☹

Харам: һис шикһеҙ Динебеҙ менән тыйылған эш-ғәмәлдәр. Мәҫәлән, кеше үлтереү, урлыҡ, ҡомарлы уйындар, усҡа итен ашау, ата-әсәне тыңламау, кешеләр тураһында ялған таратыу һәм ғәйбәт һөйләү. Харам ғәмәлдәр ҡылған әҙәм Аллаһҡа ҡаршы сыға һәм ҙур гонаһ эшләй. Гонаһтан тыйылыусы Аллаһтың һөйөүенә ирешә һәм сауап ала. Харамдың тыйылғанлығын инҡар итеүсе, Аллаһ тыйғандарҙы танымаусы Исламдан сыҡҡан тип иҫәпләнә.

## Мөфсид

Мөфсид: башланған ғибәҙәтте боҙоусы (бүлдереүсе) эш-ҡылыҡтар.Мәҫәлән, намаҙҙы боҙған һөйләшеү, ураҙаны боҙған ашап-эсеү. Боҙолған ғибәҙәтте яңынан үтәү (ҡайтарыу) зарур.

# ИСЛАМДЫҢ ШАРТТАРЫ

Беҙ - мосолмандар, шуға ла мосолманлыҡ бурыстарын үтәргә тейешбеҙ.

Иң мөһим шарттар биш:

**1. Кәлимә-шәһәҙәт әйтеү:** Аллаһ - берәү, унан башҡаһы юҡ һәм Мөхәммәд (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) - уның ҡоло һәм илсеһе.

**2. Намаҙ уҡыу:** - көн һайын биш тапҡыр намаҙға баҫыу.

**3. Ураҙа тотоу:** Рамаҙан айында ураҙа тотоу.

**4. Зәкәт түләү:** булған мөлкәтеңдән зәкәт түләү.

**5. Хажға барыу:** ғүмереңдә бер тапҡыр булһа ла хаж ҡылыу.

Исламдың иң мөһим 5 шарты - иманыбыҙҙың нигеҙе. Ҡалғандары - иманыбыҙға ярашлы булған төп ғибәҙәттәр.

Һөйөклө Пәйғәмбәребеҙ әйткән:

“Исламдың биш шарты бар: Аллаһ - берәү, унан башҡаһы юҡ һәм Мөхәммәд уның ҡоло һәм илсеһе булыуына шәһәҙәт килтереү; намаҙҙы дөрөҫ уҡыу; Рамаҙан айында ураҙа тотоу; тулыһынса зәкәт түләү һәм хаж ҡылыу”.

(Бохари, Иман 1)

Иң әүүәл кәрәк нәмә – иман, тигән,
Әхирәт эштәренә инан, тигән.
«Хоҙай, кисер!» - тигән менән эш бөтмәйҙер,
«Иман шарты»н өйрәнмәһә – Иван, тигән.

Икенсе ҡиммәт нәмә – күңел, тигән,
Күңеле боҙоҡ әҙәмдән төңөл, тигән.
Боҙоҡҡа ер өҫтөнән аҫты артыҡ,
Булмаһа күңел таҙа – күмел, тигән.

Өсөнсө ҡиммәт нәмә – аҡыл, тигән,
Аҡылһыҙҙа тәүфиҡ яғы таҡыр, тигән.
Аҙ эшкә асыуланып, динен боҙор,
Иманын көфөрлөккә һатыр, тигән.

Дүртенсе ҡиммәт нәмә – шөкөр, тигән,
Ниғмәткә шөкөрһөҙлөк – көфөр, тигән.
Ятҡан ерҙән: «Хоҙай, кисер», - тигән – хурлыҡ,
Сәбәп эҙләп, төҙ юл менән йүгер, тигән.

Бишенсе ҡиммәт нәмә – әҙәп, тигән,
Әҙәп тигән – мөхәббәткә сәбәп, тигән.
Көфөрлөк әҙәплелә тормағандай,
Әҙәпһеҙҙә иман тороу ғәжәп, тигән.

Алтынсы ҡиммәт нәмә – сабыр, тигән,
Сабыр кеше моратын табыр, тигән.
Һәр эштә сабырһыҙҙың төбө – хурлыҡ,
Сабырһыҙлыҡ башҡа бәлә һалыр, тигән...

Мифтахетдин Аҡмулла



# НЕДЖД ЕРЕНӘН КИЛЕҮСЕ КЕШЕ

Ҡасандыр бер ваҡыт Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) сәхәбәләре араһында булғанда, оҙон юлдан йонсоғанлығы күренеп торған бер кеше килгән. Неджд ерҙәренән килгән был әҙәм Мөхәммәд Пәйғәмбәргә яҡын уҡ килгән һәм Ислам дине тураһында һораша башлаған. Улар араһында ошондай һөйләшеү булған:

- Аллаһ Илсеһе, нимә һуң ул Ислам?

**- Көнөнә биш намаҙ уҡыу.**

- Тағы ла намаҙҙар бармы һуң?

**- Юҡ! Теләгең булһа, нәфел намаҙҙарын уҡый алаһың. Рамаҙан айында ураҙа тоторға тейешһең.**

- Ярай, тағы ла ураҙалар бармы?

**- Юҡ! Әммә теләгең булһа, нәфел ураҙаларын тоторға була. Зәкәт түләргә лә бурыслыһың.**

- Бынан тыш хәйер бирергә лә тейешменме?

**- Юҡ! Саҙаҡа бирә алаһың.**

Неджд еренән килеүсе, дингә өйрәнеүенә кинәнеп, Пәйғәмбәргә (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм):

- Аҙ ҙа түгел, күп тә түгел. Һеҙ мине нимәгә өйрәттегеҙ, шуны үтәйәсәкмен, - тигән һәм ары киткән!

Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм), сәхәбәләренә мөрәжәғәт итеп:

**- Әгәр вәғәҙәһендә торһа, ҡотоласаҡ,** - тигән.

(Бохари, Иман, 34)



# ҺОРАУҘАР

## Белемебеҙҙе тикшерәбеҙ

Дөрөҫ яуаптарҙы билдәләгеҙ.

| | | |
|---|---|---|
| Аллаһ файҙалы һәм изге ғәмәлдәр ҡылырға, зыяндан һәм ямандан тыйылырға бойорған. | ☐ дөрөҫ | ☐ хата |
| Аҡылы зәғиф һәм бәлиғ булмағандар ҙа мөкәлләф була ала. | ☐ дөрөҫ | ☐ хата |
| Фарызды үтәгән һәр кем сауап ала, үтәмәгәне гонаһ ҡыла. | ☐ дөрөҫ | ☐ хата |
| Фарыздың бер генә ғибәҙәтен динебеҙ ҡушҡаны тип ҡабул итмәгән кеше Исламдан сыға. | ☐ дөрөҫ | ☐ хата |
| Ата-әсә һүҙен тотмау – харам. | ☐ дөрөҫ | ☐ хата |

## Үҙебеҙҙе тикшерәбеҙ

**1. Нимә ул фарыз-ғәйн?**

а) аҙан әйтеү
б) Рамаҙан айы ураҙаһы
в) ҡамәт әйтеү
г) тәсбих әйтеү

**2. Нимә ул фарыз-кифая?**

а) намаҙ уҡыу
б) хажға барыу
в) зәкәт түләү
г) йыназа намаҙын уҡыу

**3. Нимә ғәйри мөәккәдә сөннәһе?**

а) икенде намаҙының сөннәһе
б) Аҡшам намаҙының сөннәһе
в) Витр намаҙы
г) иртәнге намаҙҙың сөннәһе

**4. Нимә харам түгел??**

а) алдау
б) урлашыу
в) спорт менән шөғөлләнеү
г) ҡомарлы уйындар уйнау

**5. Нимә тәхримән мәкруһка инмәй?**

а) ҡул менән һемгереү
б) байрам намаҙын уҡымау
в) икенде намаҙын әнерҙә уҡыу
г) тәмәке тартыу

## Төшөп ҡалған һүҙҙәрҙе тултырабыҙ

**(фарыз / мәкруһ / харам / вәжиб / мүкәлләф / мөбәх / мөстәхәб / фарыз-кифая / мүәккәдә сөннәһе / фарыз-ғәйн)**

- Бәлиғ булған, аҡылы теүәл, дин ҡушҡанды үтәп, тыйғанынан тыйылып йәшәгән кешеләрҙе .................. тиҙәр.
- ..................  - мотлаҡ үтәлергә тейеш булған ғибәҙәттәр.
- Һәр бер мосолман – мүкәлләф үтәргә тейешле фарыздар .................. тип атала.
- Күмәк яуаплылыҡ талап иткән фарыздар .................. тип атала.
- Фарыздар һымаҡ теүәл иҫбатлауҙарға ҡоролмаған тейешле ғибәҙәттәр .................. тип атала.
- Мөхәммәд Пәйғәмбәрҙең (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) һәр ваҡыт тиерлек үтәгән сөннәһе .................. тип атала.
- Гүзәл һәм изге ғәмәлдәр ҡылыу .................. тип атала.
- Эшләүҙә йәки эшләмәүҙә ирекле булған ғәмәлдәр .................. тип атала.
- Динебеҙ менән ҡәтғи тыйылған ғәмәлдәр .................. тип атала.
- Насар тип иҫәпләнгән һәм хупланмаған ғәмәлдәр .................. тип атала.






ИСЛАМ МӘҘӘНИӘТЕ БИЛДӘЛӘРЕ

# ПАКЛЫҠ

- Ислам һәм Паклыҡ
- Пакланыу төрҙәре
- Пакланыу һәм ғибәҙәт ҡылыу бәйләнеше
- Аллаһ Илсеһенең паклыҡҡа мөнәсәбәте




# АЛЛАҺ ЙОРТОН ЙЫЙЫШТЫРЫУСЫ ҠАТЫН

Пәйғәмбәр заманында Нурлы Мәҙинә ҡалаһы ситендә Оммө Михджан исемле оло ҡатын йәшәгән. Уйҙары тәрән һәм хистәре саф был ҡатын бер көн уйға ҡалып: "Иманһыҙлыҡтан Аллаһ мине аралаған икән, мин уның йортон таҙалыҡта тотайым әле", - тигән һәм Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) мәсетен көн һайын тәртиптә тоторға ниәтләгән. Шул көндән башлап, үҙенең хәленән килгәнсә, Пәйғәмбәр мәсетен тәртиптә һәм таҙалыҡта тотҡан. Был мәсеттә мосолмандар ғибәҙәт ҡылған, Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) әңгәмәләр үткәргән.

Сикһеҙ рухи байлыҡҡа эйә булған Оммө Михджан ярлы ҡатын булған. Ул, мәсетте йыйыштырғанда, үҙ йәнен дә сафландырғандай, һәр саҡ яҡты хистәр кисергән һәм рәхәтлек тойған.

Берҙән-бер көндө Оммө Михджан, ауырып урынынан да тора алмағас, Пәйғәмбәр (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) янында көн һайын намаҙ уҡыу бәхетенән мәхрүм ҡалған. Ҡатындың көүҙәһе урындыҡта ятһа ла, күңеле Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) янына ашыҡҡан, саф йөрәкле, гүзәл кешеләр менән бергә булған. Ҡатын, тиҙерәк һауығып, мәсеттәге игелекле эшен дауам итергә уйлаған, тик сир уға бындай мөмкинлекте бирмәгән. Йәндәргә шатлыҡ өҫтәгән Рәсүлуллаһ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) тауышы ҡолағында яңғырап торған, ә йөрәгендә - Аллаһ Тәғәлә алдында сәждәлә тороу теләге.

Бер нисә көн мәсеттә Оммө Михджан күренмәгәс, Пәйғәмбәр (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) уның ҡайҙалығын һораған. "Ул ауырый, әй Аллаһ Илсеһе", - тип яуап ҡайтарғандар. Быны ишеткәс, Пәйғәмбәр (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) хәл белешергә Мәҙинә ҡалаһы ситендәге Оммө Михджан йортона йүнәлгән.

Ауырыу ҡатынды шатландырыр өсөн, бер кеше алдан йүгергән:



- Яҡшы хәбәр, Оммө Михджан, Аллаһ Илсеһе һинең хәлеңде белергә килә.

Тулҡынланыуҙан ҡатын ни эшләргә белмәгән. Сирҙән хәлһеҙләнгән йөрәге йыш-йыш тибә башлаған, маңлайына тир бөрсөктәре бәреп сыҡҡан.

Бер аҙҙан Пәйғәмбәрҙең (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм): "Әссәләмәғәләйкүм!" - тигән йомшаҡ сәләмләүе ишетелгән. Иғтибары өсөн рәхмәтле булған Оммө Михджан ауырыуҙан көсһөҙләнгән тауыш менән: "Вәғәләйкүмәссәләм, Аллаһ Илсеһе", - тигән.

Пәйғәмбәр (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) оҙаҡ тормаған, әммә был бик ҡәҙерле ваҡыт булған, сөнки етемдәрҙе һәм көсһөҙҙәрҙе яҡлаусы һәм ҡурсалаусы Аллаһ Илсеһе (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) пак кешенең хәлен белергә килгән.

"Аллаһ Пак һәм пак кешеләрҙе ярата", - тигән Пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәд (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм), Ул үҙ тәненә, йәненә иғтибарлы һәм хәстәрлекле, саф йөрәкле кешеләрҙе бик яратҡан.

Бынан һуң Аллаһ Илсеһе (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) Оммө Михджандың сәләмәтлеге тураһында йыш белешеп торған, хатта бер тапҡыр ҡатындың күршеләрен: "Әгәр Оммө Михджан мәңгелек донъяға китеп барһа, миңә хәбәр итмәйенсә ерләмәгеҙ", - тип киҫәткән.

Иртәгәһе көндөң кисенә Аллаһҡа һөйөүҙә һәм хеҙмәт итеүҙә тәрбиәләнгән Оммө Михджан Ғазраилға йәнен биргән. Күршеләре, шундуҡ уны йыуындырып, кәфенгә төргән. Барыһы ла әҙер булғас, һуңғы юлға оҙатыусылар Рәсүлуллаһ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) йортона йүнәлгән.

Был ваҡытта, төнгө йәстү намаҙын тамамлап, Пәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) йоҡлаған булған. Йоҡлауы тураһында ишеткәс, килеүсе мосолмандар хәсрәтләнгәндәр, сөнки Оммө Михджанға йәшәгән ерендә бик ҙур хөрмәт менән



ҡарағандар, айырыуса Аллаһ Илсеһе (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) уның янына килеп киткәндән һуң ихтирам артҡан.

- Аллаһ Илсеһенең лайыҡлы намаҙына ирешә алмай, ер ҡуйынына тапшырабыҙмы инде? - тигәндәр улар.

- Тимәк, тәҡдиренә шулай яҙылғандыр, - тиеүселәр ҙә булған.

- Аллаһ Илсеһен борсоу килешмәҫ, - тигәндәр өсөнсөләр.

- Бәлки, был ваҡытта Аллаһ Илсеһенә күктән Аллаһ һүҙе киләлер, уятып, хата эшләрбеҙ, әйҙәгеҙ, борсоп тормайыҡ, - тип, Пәйғәмбәргә белдерә алмағанға икеләнә-икеләнә, Оммө Михджанды зыяратҡа алып киткәндәр. Йыназа намаҙын уҡып, ер ҡуйынына тапшырғандар.

Доға ҡылып, Аллаһтан Оммө Михджан өсөн ярлыҡау һорап, мосолмандар зыяраттан ҡайтҡан.

Иртән Рәсүлуллаһ ҡатындың сәләмәтлеге тураһында һорашҡан.

- Беҙ уның кәүҙәһен ергә тапшырҙыҡ. Ерләргә бар нәмә лә әҙер булғас, Һеҙҙең йортоғоҙға килгәндә, йоҡлай инегеҙ. Һеҙҙе уятыу дөрөҫ булмаҫ, - тип уйланыҡ, - тип яуап биргәндәр.

- Минең арттан барығыҙ! - тип бойорған Аллаһ Илсеһе һәм сәхәбәләре менән Баҡый зыяратына йүнәлгән. Күршеләре Оммө Михджандың ҡәберен күрһәткән.

Мөхәммәд Пәйғәмбәр (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) һәм Уның менән килгән мосолмандар Оммө Михджан өсөн йыназа намаҙын яңынан уҡыған, Аллаһтан уға мәрхәмәт һәм шәфҡәт һораған.

Әхмәт ЛЮТФИ КАЗАНЖЫ



# ИСЛАМ ҺӘМ ПАКЛЫҠ

Ислам - паклыҡ дине. Паклыҡ - беҙҙең ғибәҙәттәребеҙҙең нигеҙе. Тәнебеҙҙең, кейемебеҙҙең, әхлағыбыҙҙың паклығы - мосолманлығыбыҙ күрһәткесе. Сәләмәт булыу һәм сәләмәт тормош алып барыу өсөн, паклыҡ кәрәк, шуға күрә динебеҙ уға ҙур иғтибар бирә. Ҡөрьәндең: **“Кейемеңде паҡ тот”** (Мүдәҫҫир сүрәһе, 4-се аят) тигән өндәмәһе Исламдың паклыҡҡа ниндәй иғтибар бүлеүен дәлилләй. Беҙҙең һөйөклө Пәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм): **“Паклыҡ - имандың яртыһы”** (Мөслим, Тәһәрәт 1) тиеүе паклыҡ һәм имандың тығыҙ бәйләнешен белдерә.

Беҙҙең динебеҙ эргә-тирәне таҙалыҡта тотоуға айырым иғтибар бирә. Пәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) беҙҙең, уның вариҫтарының, тирә-яҡты таҙа тотоуын теләй. Кешеләр файҙаланған урынды таҙалыҡта тотоусылар һәм кешеләргә зыян килеү сәбәбен бөтөрөүселәр ғәмәле ожмахҡа юл асыусы ғәмәлдәр тигән шатлыҡлы хәбәр еткерә: **“Бер әҙәм, юлда ятҡан ағас ботағын күреп: “Аллаһ хаҡына, мосолмандарға ҡамасаулап ятмаһын өсөн, был ағас ботағын алам”, - тип юлда ятҡан ботаҡты алған өсөн, уны Аллаһ ожмахҡа индерә”** (Бохари, Аҙан 32, Мәҙалим 28).

Паклыҡ физик бысраҡтың ғына булмауын белдермәй, - ти Ислам дине, мәҫәлән, ағастан өҙөлөп төшкән алманы йыуыу - физик бысраҡтан арыныу, әммә алма урланған икән, беҙ уны күпме йыуһаҡ та, ул таҙармай, сөнки ул – харам. Хәләл аҙыҡ булмағанлыҡтан, уны ашарға ярамай.

Физик бысраҡ тәнебеҙҙе, кейемебеҙҙе, тирә-яғыбыҙҙы бысратҡан һымаҡ, гонаһтарыбыҙ, яман һүҙҙәребеҙ һәм ҡылыҡтарыбыҙ беҙҙең йөрәгебеҙҙе таплай. Бәхеттә һәм йән тыныслығында йәшәр өсөн, йән бозоҡлоҡтарынан сафланырға кәрәк. Унан арыныу үкенеү, ғәйебеңде таныу, ғибәҙәт ҡылыу һәм изге эштәр ярҙамында атҡарыла. Был турала Аллаһу Тәғәлә бойора: **“Аллаһ тәүбә иткәндәрҙе һәм таҙарынғандарҙы ярата”** (“Баҡара” сүрәһе, 222-се аят).

Шуға ла беҙ тәнебеҙҙе, кейемебеҙҙе, тирә-яғыбыҙҙы таҙалыҡта тоторға һәм, яман һүҙҙәрҙән, ҡылыҡтарҙан алыҫ булып, әхлаҡлығыбыҙҙы арттырырға тейешбеҙ.

Аллаһу Тәғәлә бойора:

“Аллаһ тәүбә иткәндәрҙе һәм таҙарынғандарҙы ярата”.

(Баҡара сүрәһе, 222-се аят)



## Мосолман һәм паклыҡ

Иң дөрөҫ һүҙ -
Аллаһ һүҙе.
Паклыҡ һәм дөрөҫлөк-
Иман нигеҙе.

Ғәфү үтенеүсе һәр кем
Йәнен сафлай.
Икеләнеү - шайтан ҡотҡоһо,
Унан өҫтөн булалмай.

Тәһәрәтле һәр кеше
Бик тә бәхетле,
Сөнки һыуҙың һәр тамсыһы
Төшөрә йыуып гонаһты.

Йәне, тәне пак мосолман
Данлы булыр,
Ғәҙеллекте алға ҡуйыр,
Артҡа сикмәҫ хаҡлыҡтан.

Ҡасым Аҡ



# ПАКЛАНЫУ ТӨРҘӘРЕ

Пакланыу – йәнде, ҡылыҡтарҙы, кейемдәрҙе, тирә-йүнде бысраҡтан һәм ямандан таҙартыу ул.

Пакланыуҙың ике төрө бар:

## 1. ФИЗИК ПАКЛЫҠ

Микробтар үрсей торған ҡан, һейҙек, эрен һ.б. шундай бүлендектәр Ислам дине буйынса бысраҡ - нәжес булып иҫәпләнә. Физик паклыҡ - ул тән, кейем, тирә-яҡ паклығы. Физик паклыҡҡа ирешеү өсөн, түбәндәгеләрҙе үтәү кәрәк:

**а. Тән паклығы:** беҙҙең тире тирҙән, туҙандан һ.б. бысранып (керләнеп) тора, шул уҡ ваҡытта тирелә үрсегән микробтар һаулыҡ өсөн хәүефлеләр. Һабын һәм шампундәр - тәнде керҙән, микробтарҙан һаҡлауҙы иң яҡшы саралар. Шуға күрә Аллаһ Тәғәлә биргән иң ҡиммәтле сәләмәтлегебеҙҙе һаҡлар өсөн, душта ҡойоноу йә мунса инеү кәрәк. Бынан тыш, ҡайһы бер ғибәҙәттәр алдынан тәнде һейҙектән, ҡандан һәм эрендән таҙартырға кәрәк.

**б. Ҡулдар таҙалығы:** беҙ бар нәмәне ҡулдар менән эшләйбеҙ, шуға күрә улар башҡа тән ағзаларынан күберәк бысрана. Ҡулдарҙағы бысраҡ (кер) – микробтар өсөн уңайлы мөхит, улар, аҙыҡ менән организмға эләгеп, ауырыу хәүефе булдыра. Һаулыҡты һаҡлау өсөн, ашағанға тиклем һәм унан һуң ҡулды һабынлап йыуырға кәрәк. Бәҙрәфкә барғандан һуң да ҡулды һабынлап йыуырға онотorға ярамай.

**в. Бит (йөҙ) таҙалығы:** бит тә, ҡулдар һымаҡ, бысраҡ һәм туҙан тәьҫирендә күберәк була. Йыуыныу арыуҙы һәм уның эҙемтәһе булған баш ауыртыуын баҫа, беҙгә хуш күңеллелек һәм илһам өҫтәй. Шунлыҡтан битте йыш йыуырға кәрәк.

**г. Ауыҙ һәм теш таҙалығы:** аҙыҡ ҡалдыҡтары теш һәм уның араһында йыш ҡалыусан була. Тештәрҙе ваҡытында таҙартмаһаң,

азыҡ ҡалдыҡтарында зыянлы бактериялар үрсей башлай. Ә улар кариесҡа һәм ауыҙҙан насар еҫ килеүгә сәбәпсе була. Кариеслы тештәр миндалиналарҙың, ашҡаҙандың, йөрәктең һ.б. эске ағзаларҙың ауырыуына булышлыҡ итә. Шуға күрә тештәрҙе көнөнә кәмендә 2 тапҡыр таҙартырға кәрәк.



**д. Табандар таҙалығы:** аяҡтар барлыҡ кәүҙә ауырлығын күтәрә. Аяҡ кейеме кейеп йөрөү аяҡтар тирләүенә килтерә. Табандарҙы һәм бармаҡ араларын йыуыу аяҡтар сәләмәтлеге өсөн файҙалы. Шунлыҡтан беҙгә аяҡтарҙы, бармаҡ араларын йышыраҡ йыуырға, ә төрлө бәшмәк ауырыуҙарын булдырмаҫ өсөн, йыуғандан һуң яҡшы итеп ҡоролорға һәм таҙа ойоҡ, аяҡ кейеме кейергә кәрәк.

**е. Тырнаҡтар таҙалығы:** тырнаҡтарҙы ҡарау ҡул-аяҡ гигиенаһын тамамлай. Тырнаҡтар аҫтындағы кер-микробтар йыйылмаһы икәнен иҫтән сығарырға ярамай. Ҡулдар менән ауыҙға, танауға, күҙҙәргә һ. б. ағзаларға туҡтауһыҙ тейәбеҙ, шунлыҡтан тырнаҡтар, микробтар үрсетмәһе булып, был ағзаларға ҙур хәүеф сығанағына әйләнә.

**ж. Бәҙрәфкә барыу:** таҙарыныу бәҙрәфтә тәртип ҡағиҙәләрен үтәүҙән башлана. Һаулыҡты һаҡлау һәм ғибәҙәтте дөрөҫ үтәү өсөн, бәҙрәфкә барыу ҡағиҙәләрен теүәл үтәү кәрәк.

Бәҙрәфкә инерҙән алда:

اَللّٰهُمَّ اِنِّى اَعُوذُ بِكَ مِنَ الْخُبْثِ وَالْخَبَائِثَ

“Әй Аллаһым! Мин, бысраҡ һәм насар нәмәләрҙән ҡотолор өсөн, Һиңә һыйынам”, - тип әйтергә кәрәк.

Бәҙрәфтән сыҡҡас:

**Һөйөклө Пәйғәмбәребеҙ әйткән:**

“Мисүәк ауыҙҙы таҙарта һәм Рабыбыҙҙың ризалығына өлгәштерә”.

(Нәсаи, Тәхәрәт 4)

Тышҡы яҡтан таҙа булыу бик мөһим, ләкин был ғына етмәй. Шуның өсөн Аллаһу Тәғәлә тыйған насар уйҙарҙан, теләктәрҙән, ҡыланыштарҙан арынырға ынтылам. Ошоларҙы үтәй алам икән, мине Аллаһ тағы ла нығыраҡ яратасағына ысын күңелдән ышанам.

**Һөйөклө Пәйғәмбәребеҙ әйткән:**

“Оҙонайған тырнаҡтарыңды киҫ! Сөнки зарарлы нимәләр оҙонайған тырнаҡтар аҫтында йыйыла”.

(Дәйләми, Мүснәдүл-Фирдәүс, 4579)

غُفْرَانَكَ اَلْحَمْدُ لِلّٰهِ الَّذِى اَذْهَبَ عَنِّى الْاَذٰى وَعَافَانِى

“Аллаһым, мине ғәфү ит! Миңә зыянлы булған нәмәләрҙән арындырып, сәләмәтлек бүләк иткән Аллаһҡа маҡтау булһын!”

**з. Кейем-һалым бөхтәлеге:** беҙҙе һалҡындан һәм эҫенән һаҡлаусы кейемебеҙ, ваҡыт үтеү менән, керләнә һәм тәнебеҙгә, беҙҙе уратып алған тирә-яҡҡа зыян килтерә башлай. Бысраҡтан һәм микробтарҙан һаҡланыр өсөн, кейемде даими йыуырға кәрәк.

**и. Аҙыҡ һәм эсемлек таҙалығы:** микробтар организмға күбеһенсә аҙыҡ һәм эсемлек аша эләгә. Һаулыҡты һаҡлар өсөн, тик йыуылған емеш-йәшелсә ашарға кәңәш ителә. Шулай уҡ һауыт-һабаның таҙалығына, аш-һыуға ла иғтибар итергә кәрәк.

**к. Тирә-яҡ мөхиттең таҙалығы:** тирә-яҡ мөхиттең таҙалығы беҙҙең йортобоҙҙағы, урамыбыҙҙағы, кварталыбыҙҙағы таҙалыҡтан тора, хатта һулар һауабыҙ ҙа шуға бәйле. Тирә-яҡ мөхит таҙалығы бар кешелек сәләмәтлеге, бар тереклек өсөн мөһим. Башҡаларға уңайһыҙлыҡтар булдырмаҫ өсөн, динебеҙ хуплаған тирә-йүнде таҙа тотоу бурысын үтәргә тейешбеҙ. Аллаһ Илсеһе (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) былай тигән: **“Бер кеше юлдағы сәнскеле ботаҡҡа һөрөнөп киткән һәм уны алып ҡуйған. Шул сәбәпле Аллаһ уның ҡылығы менән риза булған һәм уны ярлыҡаған”.** (Мөслим, Бирр 127, Имарә 164).

## Бәҙрәфкә барыу ҡағиҙәһе

1. Кейемде иҙәнгә тейеүҙән һәм уға бысраҡ сәсрәүҙән һаҡларға.
2. Бәҙрәфкә инерҙән алда: “Әй Аллаһым! Мин бысраҡ һәм насар нәмәләрҙән ҡотолор өсөн Һиңә һыйынам”, - тип әйтергә кәрәк.
3. Бәҙрәфкә һул аяҡ менән инәләр.
4. Хәжәтте ултырып башҡаралар.
5. Хәжәтте үтәгәндән һуң, хәжәт ағзаларын һыу менән яҡшылап йыуып, ҡоро сепрәк, йәки бәҙрәф ҡағыҙы менән яҡшылап һөртәләр.
6. Былар һул ҡул менән эшләнә.
7. Бәҙрәфтә ашамайҙар, эсмәйҙәр һәм һөйләшмәйҙәр.
8. Бәҙрәфтән уң аяҡ менән сығалар.
9. Бәҙрәфтән сыҡҡас: “Аллаһым, мине ғәфү ит! Миңә зыянлы булған нәмәләрҙән арындырып, сәләмәтлек бүләк иткән Аллаһҡа маҡтау булһын!”
10. Бәҙрәфтән сыҡҡас, ҡулдарҙы һабын менән ентекләп йыуалар.



## 2. РУХИ СӘЛӘМӘТЛЕК

Рухи сәләмәтлек – ул йөрәк һәм уй-хистәрҙең сафлығы.

Рухи сәләмәтлектең 2 нигеҙ ташы бар:

**а. Йән паклығы:** рухи яҡтан сәләмәт, гүзәл әхлаҡлы кешеләрҙән торған йәмғиәт бәхетле һәм маҡтаулы. Йәмғиәтебеҙ бәхетле булһын өсөн, беҙ йөрәгебеҙҙе Аллаһ тыйғандарҙан: мин-минлектән, ялғандан, ике йөҙлөлөктән, көнләшеүҙән, ғәйбәттән, яман ғәҙәттәрҙән, яман эш-ҡылыҡтан пакларға тейешбеҙ. Һауаланыуҙы, кешене күрә алмауҙы, унан ерәнеүҙе булдырмаҫҡа кәрәк. Изге аятта: **"Йәнен пак тотҡан кеше сәғәҙәткә ирешәсәк"**, - тиелгән. (Шәмс сүрәһе, 9-сы аят).

**б. Йола паклығы:** йола талап иткәндә, тәһәрәт һәм ғөсөл ҡойоноу үтәлә. Икенсе төрлө әйткәндә, ғибәҙәткә ҡамасаулаусы хәл-тороштан арыныу йәки хәдәс - йән боҙоҡлоҡтарынан пакланыу.

### Паклыҡ һәм һаулыҡ

Таҙа йөрө, бөхтә кейен.
Кеше алдында хур булма.
Һәр кем һине хөрмәтләһен,
Әрпеш үҙен кәмһетә

Һауаланыу һәм ялған,
Бел - йән боҙоғо.
Уларҙан алыҫ йөрөһәң,
Булырһың һин имен-һау.

Яман ергә яҡын килмә,
Тирә-яҡты бысратма.
Һаулыҡтан да ҡәҙерлерәк
Ни бар был донъяла.

Бар ер таҙа, таҙа тән,
Боҙоҡто яҡынайтма.
Һаулыҡтан да ҡәҙерлерәк
Ни бар был донъяла?

Әхмәт ЭФЕ

Һөйөклө Пәйғәмбәребеҙ әйткән:

"Шуны яҡшы бел: инсандың тәнендә бәләкәс ит киҫәге бар. Әгәр был ит киҫәге иҫән булһа, бөтөн тән сәләмәт булыр; боҙолһа, бөтә тән боҙолор.
Бына шул ит киҫәге - ҡәлб".

(Бохари, Иман 39)



# ПАКЛАНЫУ ҺӘМ ҒИБӘҘӘТ ҠЫЛЫУ БӘЙЛӘНЕШЕ

Ислам дине кешеләрҙе Аллаһҡа яҡынайта һәм улар араһындағы мөнәсәбәттәрҙе тәртипкә һала. Шул сәбәпле динебеҙ һәр саҡ пак булырға өндәй. Ҡайһы бер ғибәҙәттәр ғөсөлдө (тулыһынса ҡойоноу) йә тәһәрәтте (өлөшләтә йыуыныу) шарт итеп ҡуя.

Ғибәҙәт ҡылғанда, беҙ Аллаһ алдына баҫабыҙ. Был ваҡытта, һис шикһеҙ, тәнебеҙ, кейемебеҙ таҙа булырға тейеш. Кейемебеҙ бысраҡ, ә үҙебеҙҙән насар еҫ килһә, кеше араһында беҙгә ҡыйын буласаҡ. Беҙ шундай хәлдә хөрмәт менән ҡараған кеше йәки дуҫыбыҙ менән осрашыуға бармаясаҡбыҙ. Йыуынып йә душта ҡойоноп, таҙа кейенеп алабыҙ. Ғибәҙәт ваҡытында, Аллаһҡа иң яҡын саҡта, паклыҡҡа бигерәк тә ныҡ иғтибар итергә кәрәк.

Ҡайһы бер ғибәҙәттәр, йома һәм байрам намаҙҙары күмәкләп үткәрелә. Был ваҡытта кеше Аллаһ алдында һәм кешеләр араһында була, шунлыҡтан паклыҡҡа ҙур иғтибар талап ителә.

Ғибәҙәттәр бар булған мөнәсәбәттәрҙә лә саф булырға өйрәтә. Ғибәҙәт алдынан пакланыу һәм ғибәҙәт ваҡытындағы сафлыҡ беҙҙе тышҡы һәм эске яҡтан таҙарта.

Икенсе яҡтан ҡарағанда, беҙ үтәгән бөтөн ғибәҙәттәр ҙә йөрәгебеҙҙе сафландыра. Ғибәҙәттәр яман уй-хистәрҙән арындыра. Мәҫәлән, зәкәт түләү беҙҙең йөрәктәребеҙҙәге һаранлыҡты һәм көнсөллөктө юҡ итә. Ураҙа мин-минлектән, бәғерһеҙлектән, үҙеңде генә яратыуҙан ҡотолдора. Шулай итеп, бөтөн ғибәҙәттәр ҙә, гонаһтарыбыҙҙы йыуып, йәнебеҙҙе сафландыра.



Бер ваҡыт Аллаһ Илсеһе үҙенең сәхәбәләренән былай тип һорай:

- Һеҙ нисек уйлайһығыҙ? Әгәр бер кешенең йорто алдынан йылға ағып, ул шул йылғала көнөнә биш тапҡыр йыуынһа, булған бысраҡтарын йыуып төшөрһә, пакланһа, унда ниндәйҙер бысраҡ ҡалыр инеме?

Сәхәбәләр: “Юҡ! Ул кешелә бер бысраҡ та ҡалмаясаҡ!” - тип яуаплайҙар.

Аллаһ Илсеһе: “Көнөнә биш ваҡыт намаҙ уҡыу - ошоноң менән бер. Уҡылған намаҙҙар менән Аллаһу Тәғәлә булған гонаһтарҙы йыуып төшөрә!” - тип әйткән.

(Бохари, Мәүәкит, 6; Мөслим, Мәсәжид, 283)



# БЕҘҘЕҢ ПӘЙҒӘМБӘРЕБЕҘ ПАКЛЫҠҠА АЙЫРЫМ ИҒТИБАР БҮЛГӘН

Беҙҙең һөйөклө Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) паклыҡҡа ҙур иғтибар биргән. Ашар алдынан һәм ашағас та ҡулдарын йыуған. Уянғас та ҡулдарын йыумайынса ашамаған һәм эсмәгән. Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) һәр намаҙ алдынан иң беренсе мисүәк менән тештәрен таҙартҡан, хатта вафаты алдынан, урынынан тора алмағас, яҡындарынан мисүәк һорап, тештәрен таҙартҡан.

Беҙҙең һөйөклө Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) паклыҡҡа ҙур иғтибар биргән. Ашар алдынан һәм ашағас та ҡулдарын йыуған. Уянғас та ҡулдарын йыумайынса ашамаған һәм эсмәгән.

Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) йөрәк сафлығына ни тиклем иғтибар итһә, тән һәм кейем таҙалығына ла шундай мөнәсәбәттә булған. Ямалған кейем кейергә тура килгәндә лә бысраҡ һәм йыртыҡ кейемдә йөрөмәгән. Ҡунаҡтар ҡабул иткәндә, кейем бөхтәлеген тәүге урынға ҡуйған.

Аш-һыу әҙерләнгән һауыт-һабаның ҡапҡастарыябыҡ, юлдарҙың һәм юлсылар ағас күләгәһендә туҡтап ял итә торған урындарҙың таҙа булыуын талап иткән. Ергә төкөрөүҙе бөтөнләй ярамаған ҡылыҡ тип һанаған.



Беҙҙең һөйөклө Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) барыһының да таҙа, бөхтә кейенеп йөрөүен теләгән. Бысранған кейемдәге кешене күрһә;

- Ниңә һин кейемеңде йыумайһың? - тип һораған. Ә бер ваҡыт, туҙған бысраҡ сәсле кешене күреп, уның ниңә сәсен йыуып тарамауын һораған.

“Аллаһым! Мине тәүбе ҡылыусы һәм пакланыусыларҙан ҡыл!”

اَللَّهُمَّ اجْعَلْنِي مِنَ التَّوَّابِينَ وَمِنَ الْمُتَطَهِّرِينَ

“Раббыбыҙ!
Аҡ кейем керҙән нисек таҙарына,
беҙҙе лә гөнаһтарҙан шулай арындыр!”

رَبَّنَا نَقِّنَا مِنَ الذُّنُوبِ كَمَا يُنَقَّي
الثَّوْبُ الْأَبْيَضُ مِنَ الدَّنَسِ

# ПАКЛЫҠ

“Иманлылыҡтан – паклыҡ”, - тигән Пәйғәмбәр.
Сәләмәтлек баҡсаһында – сафлыҡ раузалары.
Пак кешеләр - гүйә фәрештәләр.
Паклыҡ – ожмах йылғаһына тиң беҙҙең донъялағы.

Йөрәк тә, тән дә бысраҡ һеңдерә.
Таҙарынырға һин унан тырыш.
Сафлыҡ тыныслыҡ килтерә
Һәм күктәргә күтәрә.

Тәнең таҙа булһа, Ай кеүекһең.
Йәнең саф була, ашаһаң хәләл.
Әрпешлек һис кемгә килешмәй,
Паклыҡ ҡына - әҙәмдең күрке.

Кейемде таҙа тоторға Аллаһ бойора,
Таҙаны ашаһаң, тән дә пак була.
Тыңласы, “болот бысраҡ булмай”,
Паклыҡ – көс ул, ауырға һис бирмәй.

Бысраныу һәм боҙоҡ булыу- гонаһ.
Ни тиклем яфа сигә шаҡшы әҙәм.
Сафланғандарҙы Аллаһ ярата,
Сөнки паклыҡ йөҙҙө балҡыта...

# ҺОРАУҘАР

## Белемебеҙҙе тикшерәбеҙ

Дөрөҫ яуаптарҙы билдәләгеҙ.

| | | |
|---|---|---|
| Паклыҡ - ғибәҙәтебеҙ нигеҙе. | ☐ дөрөҫ | ☐ хата |
| Пак булыр өсөн, физик бысраҡтан арыныу етә. | ☐ дөрөҫ | ☐ хата |
| Гонаһтарҙан таҙарыныу өсөн, тәүбә итергә һәм башҡа гонаһ ҡылмаҫҡа кәрәк. | ☐ дөрөҫ | ☐ хата |
| Бәҙрәфкә уң аяҡ менән инергә. | ☐ дөрөҫ | ☐ хата |
| Аллаһ тыйған нәмәләр беҙҙең йөрәкте һәм йәнде бысрата. | ☐ дөрөҫ | ☐ хата |

## Үҙебеҙҙе тикшерәбеҙ

**1. “Паклыҡ - имандың яртыһы” хәҙисенә мәғәнәһе буйынса нимә тура килмәй?**

а) Мөьмин булыр өсөн, пак булыу ҙа етә.

б) Дингә ышаныусы пак булырға тейеш.

в) Мөьмин һәр ваҡыт үҙенең тәнен һәм эргә-тирәһен таҙалыҡта тота.

г) Кем паклыҡҡа тейешле иғтибар бирмәй, шуның иманы көсһөҙ.

**2. Түбәндә һаналғандарҙың ҡайһыһы бәҙрәфкә йөрөү әҙәбенә ҡарай?**

а) Бәҙрәфкә һул аяҡ менән инергә кәрәк.

б) Бәҙрәфтә уң ҡул менән таҙарынырға кәрәк.

в) Бәҙрәфтә һөйләшергә ярай.

г) Бәҙрәфтән сыҡҡас, ҡул йыуыу мотлаҡ түгел.

**3. Нимә тура мәғәнәһендә таҙарыныу түгел?**

а) Йоҡо алдынан щетка йәки мисүәк менән теш таҙартыу.

б) Йома намаҙы алдынан ғөсөл ҡойоноу.

в) Икенсе кешенән тартып алған алманы ашар алдынан йыуыу.

г) Аллаһ тыйғандарҙан тыйылыу.

**4. Нимә ул йән паклығы?**

а) Намаҙ урынын таҙартыу.

б) Ашағандан һуң, һауыт-һабаны йыуыу.

в) Ағас күләгәһендә ял иткән кешеләр ҡалдырған сүп-сарҙы йыйыштырыу.

г) Намаҙ алдынан тәйәммүм үтәү.

**5. Нимә йән паклығы түгел?**

а) Тәнде һәм кейемде йыуыу.

б) Ваҡытында ғибәҙәт ҡылыу.

в) Гонаһтар өсөн тәүбә ҡылыу.

г) Саҙаҡа биреү һәм зәкәт түләү.





## Төшөп ҡалған һүҙҙәрҙе тултырабыҙ

**(пакланғандарҙы / яртыһы / таҙа / нәжес)**

- “Пакланыу - имандың ...........”
- Урланған алманы ни тиклем йыуһаң да ........... булмай, сөнки ул хәләл түгел.
- “Ысын мәғәнәһендә, Аллаһ ғәфү үтенгәндәрҙе һәм ........... ярата”.
- Ҡайһы бер ғибәҙәттәр алдынан ........... тип аталған һейҙек, ҡан, эрендән таҙарынырға кәрәк.




ЙӘН ПАКЛЫҒЫНЫҢ ӨС ТӨРӨ

# ТӘҺӘРӘТ - ҒӨСӨЛ ТӘЙӘММУМ

### ТӘҺӘРӘТ

Нисек тәһәрәт алырға

Тәһәрәттең хоҡуҡи нигеҙҙәре

Тәһәрәттең мәғәнәһе һәм файҙаһы

### ҒӨСӨЛ

Нисек ғөсөл ҡойонорға

Ғөсөлдөң хоҡуҡи нигеҙҙәре

Ғөсөлдөң мәғәнәһе һәм файҙаһы

### ТӘЙӘММУМ

Нисек тәйәммүм ҡылырға

Тәйәммүмдең хоҡуҡи нигеҙҙәре




# ТӘҺӘРӘТ ГОНАҺТАРҘАН АРЫНДЫРА

Был хәл Мәккәлә Исламды йәшерен таратыу дәүерендә булған.

Сүллектә йәшәгән кәбиләләрҙең береһендә Ғәмр бин Әбәсә исемле кеше йәшәгән. Ул, дин менән ҡыҙыҡһынып, Мәккәгә юл тотҡан. Бында килгәс, Пәйғәмбәрҙе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) күрергә теләгән һәм, ниһайәт, бер көндө уның менән осрашҡан. Ғәмр Пәйғәмбәребеҙҙән (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм):

- Һин кем, атың-затың кем һинең? - тип һораған.

- Мин - Пәйғәмбәр, - тигән Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм).

- Кем ебәрҙе һине? - тигән Ғәмр.

Пәйғәмбәребеҙ:

- Мине Аллаһ ебәрҙе, - тигән.

- Аллаһ Тәғәлә ниндәй бурыстар йөкмәтте һиңә?

- Туғандарға яҡшы мөнәсәбәттә булыуҙы, уларға ярҙам итеүҙе, һындарҙы бөтөрөп, Аллаһҡа бер кемде лә тиңләштермәйенсә, бер Аллаһты ғына ҡабул итеүҙе, - тигән Пәйғәмбәребеҙ.

- Бында һиңә кемдәр ярҙам итә?

- Бер азат ир һәм бер ҡол, - тигән Пәйғәмбәр. Был ваҡытта уның янында тоғролоҡ һаҡлаған Әбү Бәкер һәм Биләл (разыйаллаһу ғәнһүмә) ғына булған.

- Мин дә һиңә ярҙам итеп, эргәңдә ҡалырға теләйем, - тигән Ғәмр.

Быға яуап итеп Аллаһ Илсеһе:

- Бөгөн һин әйткәнеңде эшләй алмайһың. Мәккәләге һәм минең хәл-торошто күрмәйһеңме ни? Үҙ кәбиләңә ҡайт. Минең турала һүҙ таралғас та яныма килерһең, - тигән.



Ғәмр бин Әбәсә, шәһәҙәт кәлимәһен – Аллаһтың берлеген таныуын әйтеп, мосолман булған.

Ул, күпмелер ваҡыт Пәйғәмбәр (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) эргәһендә булғандан һуң, үҙенең сүллегенә ҡайтҡан.

Был заманда биш ваҡыт намаҙ тураһында Аллаһ Тәғәләнең бойороғо күктән төшөрөлмәгән булған, шунлыҡтан Аллаһ Илсеһе намаҙ тураһында бер ни ҙә өндәшмәгән.

Был ваҡиғанан һуң, күп йылдар үткән. Мосолмандар Мәккәнән Мәҙинәгә күсенгән.

Пәйғәмбәрҙең Мәккәнән Мәҙинәгә күсенгәне тураһында ишеткән Ғәмр бин Әбәсә Мәҙинәгә уны күрергә килгән.

- Йә, Аллаһ Пәйғәмбәре! Һеҙ мине иҫләйһегеҙме икән? - тигән ул.

- Эйе, - тип яуаплаған Пәйғәмбәр, - теге ваҡыт минең янға Мәккәгә килгән кеше түгелме һин?

- Эйе. Әй, Аллаһ Илсеһе, Аллаһ Тәғәлә мин белмәгән тағы ла нәмәләргә өйрәтте? - тип һораған Ғәмр бин Әбәсә.

Беҙҙең һөйөклө Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) һәр көн һайын үтәлә торған биш намаҙ һәм уларҙың ваҡыты тураһында һөйләгән. Шулай уҡ һәр намаҙ алдынан тәһәрәтләнеү кәрәклеге тураһында әйткән. Һәр кем, әгәр ауыҙ, танауын сайҡатһа, уның йөҙ, ауыҙ, танау гонаһтары йыуылыр. Әгәр ул йөҙөн Аллаһ ҡушҡанса йыуһа, уның йөҙ гонаһы һыу менән бергә һаҡалынан ағып төшөр. Әгәр ул терһәгенә тиклем ҡулын йыуһа, уның ҡул гонаһтары һыу менән бергә бармаҡ остарынан тамсылап ағып төшөр. Әгәр еүеш ҡулдары менән башынан һыпырһа, гонаһтары һыу менән сәс остарынан һарҡып төшөр. Шунан һуң, әгәр аяғын шайтан ашығына тиклем йыуһа, аяҡ гонаһтары һыу менән бергә аяҡ бармаҡтарынан ағып төшөр. Бына шул тәртиптә йыуынған кеше, намаҙға баҫып, Аллаһ Тәғәләне данлап һәм Уға рәхмәт әйтеп, Уға лайыҡлы хөрмәт күрһәтһә һәм Аллаһҡа йәне - йөрәге менән табынһа, ул мотлаҡ гонаһтарынан арына, таҙарына һәм донъяға тәү килгәндәге һымаҡ пактан-пак була. (Мөслим, Мүсафир, 294)



# ТӘҺӘРӘТ

## ТӘҺӘРӘТТЕҢ МӘҒӘНӘҺЕ

Дин талабынса ҡайһы бер тән өлөштәрен йыуыу һәм һөртөү.

### Тәһәрәтһеҙ нимәләр эшләргә ярамай?

**Тәһәрәтһеҙ**

- Намаҙ уҡылмай.
- Ҡәғбә тауаф ҡылынмай.
- Ҡөрьән Кәримгә ҡул менән ҡағылырға ярамай.



### НИСЕК ТӘҺӘРӘТ АЛЫРҒА?

1 Эстән: «Аллаһтың ризалығы өсөн ниәт иттем тәһәрәт алырға», - тип әйтелә.

2 Унан һуң: “Әғүүҙү билләәһи минәш-шайтаанир-раджиим. Бисмилләәһир-рахмәәнир-рахиим”.

3 Шунан ҡулдар беләккә ҡәҙәр йыуыла.



4 Бынан һуң, уң ус менән ауыҙға өс мәртәбә һыу алып сайҡарға һәм төкөрөргә.



5 Өс мәртәбә уң уҫҡа һыу алынып, танауға һыу тартыла, һул ҡул менән һемгерелә.



6 Маңлайҙа сәстәр үҫә башлаған ерҙән башлап, эйәк аҫтына ҡәҙәр йөҙҙө өс мәртәбә йыуырға.



7 Уң ҡул, һуңынан һул ҡул терһәккә ҡәҙәр өс мәртәбә йыуыла.



8 Һыулы уң ҡул менән баштың дүрттән бер өлөшөнә бер мәртәбә мәсих ҡылына.



9 Бер мәртәбә һыулы һуҡ бармаҡ менән ҡолаҡтарҙың эсен, баш бармаҡ менән ҡолаҡтарҙыңың тыш яғын һөртөргә. Өс бармаҡтың тышҡы яғы менән муйындың артына мәсих ҡылына.



10 Иң элек бармаҡ остарынан башлап, уң аяҡ, һуңынан һул аяҡ сираҡтарға ҡәҙәр өс мәртәбә йыуыла.

**Һөйөклө Пәйғәмбәребеҙ әйткән:**

“Кем камил рәүештә тәһәрәт алһа һәм һуңынан: “Әшһәду әлләә иләәһә илләллааһү үә әшһәду әннә Мүхәммәдәр-расүүлүһ (Таныҡлыҡ бирәм, Аллаһтан башҡа илаһ юҡ, Мөхәммәд салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм Аллаһтың Илсеһе булыуына)” тиһә, унын өсөн йәннәттең бөтә ҡапҡалары асылыр; ул кеше теләгән ҡапҡанан йәннәткә керер”.

(Әбү Дауыт, Тәһәрәт 65)

# ҺАЛҠЫН ШИШМӘ

Таһир уҡыу йылын уңышлы тамамланы. Ата-әсәһе уны, яҡшы йәйге ялға лайыҡлы тип, ауылға ағаһы янына ебәрергә булды. Таһир быға шатланды. Бер нисә көндән уны ағаһы алып ҡайтырға килде, малай унан ауыл тураһында күп һорашты, сөнки уға бар нәмә лә ҡыҙыҡ ине. Барыһынан да бигерәк Таһирҙы энеһе Сәлих ҡыҙыҡһындырҙы. Оҙон юлға кистән әҙерләнделәр. Таһир, тулҡынланыуҙан, хатта йүнләп йоҡлай алмайынса, көскә таң аттырҙы.

Таң һыҙыла башлағанда, улар ағаһы менән юлға сыҡты. Ниһайәт, ун сәғәт үтеүгә ауылға ҡайтып еттеләр. Таһир ауыл тормошона тиҙ күнекте. Сәлих менән дуҫлашып, яҡшы иптәштәр булып киттеләр, бергәләп яр башында балсыҡтан өй яһанылар, велосипедта йөрөнөләр, олатаһы урманда утын әҙерләгәндә, уйындар уйнанылар.

Берҙән-бер көндө кисен, карауатта мендәрҙәр менән һуғышҡан малайҙар янына инеп, Ғәли олатаһы уларҙы киҫәтте: "Һеҙ хәҙер йоҡларға ятмаһағыҙ, иртәгә минең менән йәйләүгә барырға тора алмаясаҡһығыҙ. Мин иртә таңдан китәсәкмен, уяна алмаған кеше өйҙә ҡала".

Был хәбәрҙән һуң, Таһир һәм Сәлих тиҙ йоҡлап китте. Икенсе көндө таң атҡансы уҡ Ғәли олатай улдары менән юлға сыҡты. Бер аҙ үргәрәк күтәрелә барған йәйләү юлы башта балаларға бик еңел булып күренде, ҡояш сығып ҡыҙҙыра башлағас, ташлы юл малайҙарға осһоҙ-ҡырыйһыҙ һымаҡ күренде. Ҡараҡасан исемле ишәктең йүгәненән тартып, Ғәли олатаһы, артына боролоп, уларҙы дәртләндерҙе: "Бына шулай, малайҙар, үрҙе артылыу менән, Һалҡын шишмәгә туҡтайбыҙ, саҡ ҡына сабыр итегеҙ!"

Таһирға был шишмәнең атамаһы оҡшаны: "Ниңә Һалҡын шишмә ул?"

Сәлих менән олатаһы йылмайыштылар.



- Һалҡын шишмә ошо тауҙын артында ағып ята. Йәйләүгә барған һәр кеше унық эргәһендә туктап ял итеп ала. Шул шишмәнең һалҡын һыуын кисһәләр, бар арыуҙары һыпырып ташлағандай була. Ҡарбуз, ҡауын алып китеп барһалар, уларҙы ла шишмәгә һалалар. Боҙҙай һалҡын ҡарбуздарҙы бүлгеләп тәмләп ашайҙар.

- Ай, олатай, беҙгә лә ҡарбуз менән ҡауын алырға кәрәк булған!

Арттан ғына һөйрәлеп килеүсе ишәккә ишаралап, олатаһы шатлыҡлы хәбәр әйтте:

- Беҙҙең ишәктең бер яғында аҙыҡ, ә икенсеһендә - ҡарбуз һәм ҡауын. Йәйләүгә барырға йыйынғас, нисек ҡарбуз, ҡауын алмайһың?!

Оҙаҡламай буласаҡ ял һәм һалҡын ҡарбуз менән ҡауын тураһындағы уй балаларҙы шатландырҙы. Тик яй ғына һөйрәлеүсе ишәк ләззәтле минуттарҙы һуҙлатты. Таһир ишәктең ҡолағына низер шыбырланы. Олатаһы быны күреп:

- Таһир, әллә һин ишәк менән һөйләшә беләһеңме? - тип ғәжәпләнде.



- Был тау артында һине һый - һалҡын ҡарбуз ҡабыҡтары көтә, тинем мин уға, - күрәһеңме, ул бит тиҙерәк атлай башланы.

Күпмелер ваҡыттан һуң, йыраҡтағы шишмә күренде. Байтаҡ яҡынлағас, малайҙар, олаталарын ҡалдырып, алға йүгерҙе, яҡ кейемдәрен сисеп, эҫе, туҙанлы оҙон юлдан ҡыҙған аяҡтарын шишмәнең ташлы төбөнә төшөрҙө, тик, аһылдап, күҙ асып йомғансы, кире алды.

- Ысынлап та, һыуы бик һалҡын икән, юҡҡа ғына Һалҡын шишмә түгел шул, - тине Таһир. Ҡаялағы бейек ҡарағай төбөнән бәреп сыҡҡан шишмә, Таһирҙың һушын алды. Томра эҫе көндә, таш араһынан боҙ һалҡынындай һыу бәреп сығыуы ғәжәпләндереүен ул йәшермәне.

- Олатай, быңдай эҫе көндә һыу нисек һалҡын килеш ҡала? Күп тонналы һыу һыйҙырған ҡаяның эсендә һыу һурҙырғыс насостар ҙа, машиналар ҙа юҡ бит? - тине ул.

Олатаһының яуабы ҡыҫҡа һәм аныҡ ине:

- Ошо һыуҙы, донъяны бар иткән Аллаһ Тәғәлә өсөн быныӊ бер ниндәй ауырлығы ла юҡ. Әгәр Ул нимәлер теләһә, Уның: “Бул!” тигәне лә етә. Уның ҡөҙрәтенең сиге юҡ.

Ғәли олатай ул арала, ҡапсыҡтан ҡарбуз һәм ҡауынды алып, һыуға һалды. Бер аҙҙан улар бергәләшеп икмәк, сыр менән һалҡын ҡарбуз һәм ҡауын киҫәктәрен кинәнеп ашаны.

Тамаҡ ялғап алғас, Сәлих менән Таһир тауға ҡырағай груша йыйырға барҙы. Улар ҡайтҡанда, Ғәли олатай, яр ситенә ултырып, ҡулдарын йыуа ине. Ҡулдарын йыуғас, ауыҙын һәм танауын өс мәртәбә сайҡаны. Усы менән һыу алып, өс мәртәбә битен йыуҙы. Башта уң ҡулын, аҙаҡ һул ҡулын йыуҙы. Еүеш бармаҡтары менән башынан һыпырҙы, ҡолаҡтарын һәм елкәһен сылатты. Ә иң аҙаҡтан аяҡтарын йыуҙы.

Таһир олатаһынан:

- Олатай, ниңә тәһәрәт алдың? Намаҙ ваҡыты етмәгән бит әле, - тип һораны.



- Беләм, улым. Төшкө намаҙҙы, Хоҙай насип итһә, мин йәйләүҙә уҡырмын, алдан йыуынып ҡуяйым, - тинем. Йыуынған хәлдә булыу ғибәҙәт иҫәпләнә. Кеше ҙур сауап ала, шул уҡ ваҡытта тәһәрәтле хәлдә булыу еңеллек, рәхәтлек бирә.

- Нисек инде улай? – тип, Сәлих менән Таһир бер тауыштан һорау бирҙе.

- Әгәр мөьмин, тәһәрәтле булып, төрлө боҙоҡлоҡтарҙан тыйыла икән, фәрештәләр уға сауап яҙа. Бынан тыш һаҡлап-яҡлап тороусы фәрештәләр тәһәрәтле кешене төрлө бәлә-ҡазанан ҡурсалай. Күрәһегеҙме, һөйөклө ейәндәрем, ниндәй еңел һәм файҙалы ғәмәл ул.

Быны ишеткәс, малайҙар, дәртләнеп, еңдәрен һыҙғанып, тәһәрәтләнеү йолаһын үтәргә тотондо.

Ишәккә йөктәрҙе тейәгәс, Ғәли олатай малайҙарға:

- Йыйынығыҙ, йәйләүгә тиклем ике сәғәтлек юл үтәһе бар, - тине.



# ТӘҺӘРӘТТЕҢ ФАЙҘАҺЫ

### Тәһәрәт ғибәҙәткә әҙерләй

Күп ғибәҙәттәрҙең алдынан, мәҫәлән, намаҙ, Ҡөрьән уҡыр алдынан тәһәрәт алабыҙ. Тәһәрәт арҡаһында, Аллаһтың һөйөүенә һәм ризалығына ирешеү өсөн таҙарынып, алдына баҫабыҙ.

### Тәһәрәт беҙҙе сафландыра

Көн дауамында, бигерәк тә ҡул, бармаҡ суҡтары, ауыҙ, танау, йөҙ һәм табан бысрана. Көнөнә бер нисә тапҡыр тәһәрәт алғанда, был тән өлөштәрен йыуып, төрлө микробтарҙан арынабыҙ, күп ауырыуҙарҙан ҡотолабыҙ, үҙебеҙгә һаулыҡ, шатлыҡ һәм тыныслыҡ табабыҙ.

Һаулыҡты һаҡлар өсөн, ауыҙ ҡыуышлығының таҙа булыуы ла бик мөһим. Билдәле булыуынса, ауыҙ ҡыуышлығы - микробтар үрсеүе өсөн иң ҡулайлы урын. Тәһәрәт ваҡытында ауыҙ ҡыуышлығын сайҡатыу микробтар барлыҡҡа килеүҙе һәм насар еҫ килеүҙе тотҡарлай.

### Тәһәрәт ҡан һәм нервы системаһы эшмәкәрлеген яҡшырта

Сәләмәт йәшәүҙең нигеҙ ташын ҡан һәм нервы системаларының дөрөҫ эшмәкәрлеге билдәләй. Тәһәрәт ваҡытында тән өлөштәрен йыуыу нервы һәм ҡан системалары эшмәкәрлеген яйға һала, ә был, үҙ сиратында, һаулығыбыҙҙы нығыта.

### Тәһәрәт йөҙҙө матурлай

Тәһәрәт, биттәге иң нәҙек ҡан тамырҙарының эшмәкәрлеген яҡшыртып, һырҙар барлыҡҡа килеүҙе тотҡарлай. Шунлыҡтан тәһәрәт алып, намаҙ уҡығандарҙың йөҙҙәре асыҡ һәм яҡты.

Һөйөклө Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) беҙҙе Ҡиәмәт көнөндә тәһәрәт яҡтылығынан балҡыған йөҙҙәребеҙҙән таныясағы хаҡында әйткән.

Тәһәрәт йөҙөбөҙгә нур, күңелебеҙгә хозур килтерә.

### Тәһәрәт йөрәгебеҙҙе яман хистәрҙән арындыра

Тәһәрәт алғанда, беҙ Аллаһты иҫкә төшөрәбеҙ. Шайтан беҙҙән алыҫлаша, фәрештәләр яҡыная. Шулай итеп, тәһәрәт беҙҙе гонаһтарҙан һаҡлай һәм йөрәгебеҙҙе насар уй-хистәрҙән арындыра.

### Тәһәрәт алыу менән рәхмәтле булабыҙ

Тәһәрәт мәлендәге һәр минутта беҙ гонаһтарҙан азат булғанлыҡтан, ул ғибәҙәт булып иҫәпләнә. Тәһәрәт ваҡытында донъя ҡуйһаҡ, ғибәҙәт ваҡытындағы үлемгә - шәһит үлеменә тиң була. Был – Аллаһтың оло рәхмәте.

**Аллаһу Тәғәлә бойора:**

“Әй, мөьминдәр, намаҙ уҡырға ниәтләгәс, йөҙөгөҙҙө, терһәктәрегеҙгә ҡәҙәр ҡулдарығыҙҙы, башығыҙҙы мәсех итеп, ашыҡ һөйәгенә ҡәҙәр аяҡтарығыҙҙы йыуығыҙ”.

(Мәидә сүрәһе, 6-сы аят)



### Тәһәрәттең фарыздары ниндәй?

Тәһәрәт алғанда ☺☺☺☺

1. Маңлайҙа сәстәр үҫә башлаған ерҙән башлап, эйәк аҫтына ҡәҙәр бер мәртәбә **йөҙҙө йыуыу**.
2. **Ике ҡулды** терһәккә ҡәҙәр бер мәртәбә **йыуыу**.
3. Һыулы уң ҡул менән **баштың дүрттән бер өлөшөнә** бер мәртәбә **мәсих ҡылыу**.
4. **Ике аяҡты** сираҡтарға ҡәҙәр бер мәртәбә **йыуыу**.

Фарыз ☺☺☺☺





Тәһәрәттең сөннәттәре ниндәй?

- Ҡибла тарафына ҡарап йыуыныу.
- Ниәтләнеү һәм “Әғүүҙү билләәһи минәш-шайтаанир-ражиим. Бисмилләәһир-рахмәәнир-рахиим” һүҙҙәрен әйтеү.
- Ауыҙҙы һым танауҙы йыуыу.
- Тештәрҙе мисүәк йәки теш щеткаһы менән таҙартыу.
- Ҡолаҡтарға һәм елкәгә мәсих ҡылыу.
- Тәндең һәр бер ағзаһын өс тапҡыр йыуыу.
- Йыуыныуҙы уң яҡтан башлау.
- Йыуыныуҙың сиратын боҙмау.

Тәһәрәт алғанда ☺☺ — Сөннә ☺☺

Тәһәрәтте боҙа торған ғәмәлдәр ниндәй?

Тәһәрәт хәле

- Кесе йәки оло ярау башҡарыу.
- Арттан һауа сығарыу.
- Тәндең берәй еренән ҡан, эрен, һары һыу килеүе.
- Намаҙ уҡығанда, башҡалар ишетелерлек итеп көлөү.
- Берәй нәмәгә һөйәлеп йоҡлау.
- Һуштан яҙыу.
- Ауыҙ тултырып ҡоҫоу.
- Иҫереү.

Тәһәрәт боҙола



## Мөхәммәд Өммәте нуры

Берҙән-бер көндө һөйөклө Пәйғәмбә-ребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм):

- Шул тиклем ҡәрҙәштәремде күргем килә, - тигән.

- Беҙ һинең ҡәрҙәштәрең түгелме ни, Аллаһ Илсеһе? - тигәндәр улар.

- Һеҙ - минең сәхәбәләрем. Минең ҡәрҙәштәрем донъяға килмәгәндәр әле, - тигән.

- Ҡиәмәт көнөндә Үҙеңдең өммәтеңдән булғандарҙы нисек таныраһың икән? – тип һораған сәхәбәләр.

- Берәйһе аяҡтары ла аҡ ҡашҡа атын ҡара аттар өйөрө араһынан танымаҫ инеме, нисек уйлайһығыҙ? - тигән.

- Әлбиттә, таныясаҡ, Аллаһ Илсеһе, - тигән сәхәбәләре.

- Бына шулай, Ҡиәмәт көнөндә лә тәһәрәтле булғанлыҡтан йөҙҙәре, ҡул-аяҡтары яҡтылыҡ таратып торған ҡәрҙәштәрем киләсәк. Мин Кәүҫәр шишмәһенә уларҙан алда барасаҡмын һәм уларҙы тәһәрәт алған тән ағзаларынан таныясаҡмын, - тигән. (Мөслим, Тәһәрәт, 39).

**Һөйөклө Пәйғәмбәребеҙ әйткән:**

“Мөьминдең нуры һәм аҡлығы тәһәрәт һыуы тейгән ергә тиклем”.

(Мөслим, Тәһәрәт 40)

# ҒӨСӨЛ

## ҒӨСӨЛДӨҢ МӘҒӘНӘҺЕ

Ҡоро ерен ҡалдырмай бөтә тәнде йыуыу.

Аллаһу Тәғәлә бойора:

“Әгәр ҙә һеҙ ғөсөлһөҙ икәнһегеҙ, ғөсөл алығыҙ!”

(Мәидә сүрәһе, 6-сы аят)



## ҒӨСӨЛҺӨҘ НИМӘ ЭШЛӘРГӘ ЯРАМАЙ?

Ғөсөлһөҙ ✗

- Намаҙ ҡылмайҙар.
- Ҡәғбәне тәуаф ҡылмайҙар.
- Изге Ҡөрьәнде уҡымайҙар.
- Изге Ҡөрьәнгә ҡағылырға ярамай.
- Мәсеткә кермәйҙәр.

## ҒӨСӨЛДЕҢ ФАРЫҘДАРЫ НИНДӘЙ?

Ғөсөл ҡойонғанда ☺☺☺☺

1. Ауыҙҙы тамаҡтың төбөнә саҡлы сайҡау.
2. Танауҙы йыуыу.
3. Ҡоро ерен ҡалдырмай бөтә тәнде йыуыу.

Фарыҙ ☺☺☺☺

## ҒӨСӨЛ ҠОЙОНОУ КӘРӘКЛЕ БУЛҒАН ХӘЛДӘР НИНДӘЙ?

✓ Жөнүб хәлендә булғанда,

✓ Ҡатын-ҡыҙҙар күрем хәленән һуң таҙарынғас,

✓ Ҡатын-ҡыҙҙар бала тапҡандан һуң таҙарынғас.

Ғөсөл ҡойоноу - фарыз

☺☺☺☺

## НИСЕК ҒӨСӨЛ ҠОЙОНОРҒА?

Әгәр тәндә бысраҡ булһа, уны таҙалау.

Өс мәртәбә ауыҙҙың эсен тамағына ҡәҙәр яҡшылап сайҡатыу.

Танауға өс мәртәбә һыу алып, уны яҡшылап таҙартыу.

Ҡулдарҙы өс мәртәбә йыуыу.

“Һәр мөьмин йома көн ғөсөл ҡойонорға тейеш”.

(Тирмиҙи, Саләт, 381)

Ғөсөл ҡойонорға ниәтләнеү.

Ҡәҙимге тәртип буйынса тәһәрәт алыу.

“Әғүүҙү билләәһи минәш-шайтаанир-ражиим. Бисмилләәһир-рахмәәнир-рахиим” һүҙҙәрен әйтеү.

Нисек ғөсөл ҡойонорға?

Баштан башлап ҡоро ерен ҡалдырмай бөтә тәнде йыуыу.

# ҒӨСӨЛДӨҢ ФАЙҘАҺЫ

### Ғөсөл тәнебеҙҙе таҙарта

Йән боҙоҡлоғона дусар булғанда, ғөсөл ҡойоноу мотлаҡ. Бындай хәлдәрҙә ҡайһы бер дини ғибәҙәттәрҙе үтәү тыйыла. Ғөсөл ҡойонғанда, беҙ йән боҙоҡлоғонан таҙарынабыҙ һәм йән тыныслығы табабыҙ.

### Ғөсөл Аллаһтың рәхмәтенә ирештерә

Ғөсөл ҡойоноу – иң тәү сиратта, Аллаһ бойороуы. Был бойороҡто үтәп, беҙ Аллаһ ҡушҡанын тормошҡа ашырабыҙ, Уның һөйөүенә һәм ризалығына лайыҡ булабыҙ. Аллаһ әмерен үтәгәс, йән тыныслана. Был күҙлектән ҡарағанда, ғөсөл - тән паклығына ирешеүҙән йән тыныслығы табыу.

### Ғөсөл тәнебеҙҙе таҙарта һәм һиҙемләүебеҙҙе яҡшырта

Беҙҙең тиребеҙ - тәнебеҙҙе тышҡы тирә-йүн тәьҫиренән һаҡлаусы ла һәм бүлендектәр сығарыусы ла. Шул сәбәпле тире саң-туҙан менән даими бысранып тора. Организм да, үҙ сиратында, даими рәүештә айырым биҙҙәр ярҙамында тышҡа тир һәм тире майы бүлеп сығара. Улар тирене, тир һәм май биҙҙәре юлдарын ҡаплай. Был осраҡта тиренең тын алыуы боҙола. Ғөсөл ҡойонғанда, тиреләге биҙҙәрҙең юлдары асыла, тире таҙара, уның эшмәкәрлеге яҡшыра. Организм еңеллек тоя, һиҙемләүе тәртипкә инә.

### Ғөсөл - беҙҙең тән һәм йән сәләмәтлегебеҙҙе һаҡлаусы, рухи паклығыбыҙҙы тәьмин итеүсе

Ғөсөл ҡойоноу тәндең статик электр көсөргәнешен ала, ҡан әйләнешен, нервы системаһы эшмәкәрлеген яҡшырта, эске көсөргәнеште кәметә. Ғөсөл – рухи һаулығыбыҙҙы тәьмин итеүсе пакланыу, шулай уҡ тәнебеҙгә сихәт биреүсе физик таҙарыныу.

**Ғөсөл ҡойонғанда, ниндәй ғәмәлдәр хупланмай?**

Ғөсөл ҡойонғанда ☹☹

- ☹ Һыуҙы исраф итеү.
- ☹ Ғәүрәт асыҡ хәлдә Ҡибла тарафына йүнәлеү.
- ☹ Юҡ-бар хәбәр һөйләшеү.

Мәкруһ ☹☹

Ғөсөл
ҡойоноуҙың сөннәттәре ниндәй?

Ғөсөл ҡойонғанда

- Ниәт әйтеү.
- “Әғүҙү... Бисмилләһ...”-те әйтеү.
- Ҡулдарҙы һәм енси ағзаларҙы йыуыу.
- Ҡәҙимге тәртип буйынса тәһәрәт алыу.

Сөннә



# ҺЫУ КӨСӨ

Фәрид, иртәнге аш ваҡытында, тәрилкәне ситенән тотоп әйләндергеләне. Һуңғы ваҡытта ул, сәбәбен үҙе лә аңламайынса, йыш һәм оҙаҡҡа һағышҡа батты. Быйылғы йылда һигеҙенсе синыфҡа күскәс, тәнендә һәм холҡонда үҙгәрештәр башланыуын һиҙҙе. Кинәт уның тән ауырлығы артты, тауышы тупаҫланды, ә өҫкө ирене өҫтөндә ҡара төктәр күренде. Уны шул уҡ ваҡытта элекккесә балалыҡҡа ла тартты. Ваҡыты менән йәнендә ололарса яуаплылыҡ өҫтөнлөк алды ла үҙ ҡылыҡтарының йәшенә бигүк тап килмәүен күрҙе. Был эске ҡаршылыҡтар һәм икеләнеүҙәр уны уйсанлыҡҡа һәм донъянан ситләшеүгә килтерҙе. Фәридте атаһының тауышы һиҫкәндерҙе;

- Фәрид, һин тағы әллә ҡайҙа алыҫтаһың, улым. Ашыңды ашап бөтөр. Йәйләһаң, мәктәпкә һуңларһың.

Был хәл-тороштан ҡотолоп ул;

- Хафаланма, атай, өлгөрөрмөн, -тине.

Күптән инде улындағы үҙгәрештәрҙе һиҙеп, уның кинәт кенә уйсанланып, һағышҡа батҡанына борсолоп йөрөгән атаһы улы менән күҙмә-күҙ һөйләшергә булды. Бөгөн уңайлы ваҡыт сығып та тора: әсәһе һәм һеңлеһе яңыраҡ ҡына балаһы тыуған апаһына ҡунаҡҡа баралар.

- Беҙ һинең менән ки-сте бергәләп үткәрербеҙ, рәхәтләнеп гәпләшербеҙ. Һинең менән мөһим әйберҙәр тураһында һөйләшеп алырға кәрәк, - тине атаһы.



Фәрид сумкаһын әләктерҙе лә тышҡа ашыҡты. «Атайым ни тураһында һөйләшергә теләй икән?» - тип уйланы ул юл ыңғайына һәм, география уҡытыусыһы Илһам Нәдир улынан һуңлағанға шелтә алмаҫ өсөн, аҙымын шәбәйтте.

Фәрид, уҡыу бүлмәһенә ингәс, иптәштәре менән һаулашты ла артҡы рәттәге парта артына

барып ултырҙы. Уҡытыусы килгәнсе, малайҙар футбол матчы, кем ниндәй гол һуҡты, судьяларҙың дөрөҫ баһаламауы, пенальтиҙың тәғәйенләнмәүе кеүек юҡ- бар хәбәрҙәр тураһында һөйләште.

Уҡытыусы ишектән инеү менән, тауыштар шундуҡ тынды. Класта себен осһа ла ишетелерлек тынлыҡ урынлашты. Уҡығанда кейә торған күҙлеге танау осонда ныҡлы ултырған география уҡытыусыһы, бер генә уҫал күҙ ҡарашы менән шаян малайҙарҙы тыйып, тәртип урынлаштыра ала. Ул бер кемде лә йәберләмәй, әммә дәрестә тәртип боҙоуға юл ҡуймай. Әгәр кемде булһа ла язалаһа, һуңынан яйын табып, ул уҡыусы менән уртаҡ тел таба ине.

Рушан, иптәштәренең арҡаһына ышыҡланып, дәрестә йоҡлап алырға ғына йыйынғайны, Илһам Нәдир улының уның бөтә пландарын боҙған тауышы яңғыраны:

- Рушан, улым, нишләп һин арттағы рәттә ултыраһың? Алда ана күпме урын бар.

Малай бик теләмәй генә алғы рәттәге беренсе парта артына барып ултырҙы.

Уҡытыусы яңғырауыҡлы асыҡ тауыш менән дәрес аңлата башланы:

- Тыңлағыҙ, балалар, мин һеҙгә һыу көсө тураһында һөйләйәсәкмен. Ниндәй һауытҡа һалынһа, шуның формаһын алған, үҙән буйлап тыныс, тауҙарҙан шаулап-гөрләп аҡҡан, йомшаҡ, үтә күренмәле, һалҡынса һыу турһында булыр хикәйәм. Беренсе сиратта һеҙгә Ерҙә һыуһыҙ тормошто күҙ алдына килтереп булмаясағын белеү кәрәк. Кеше аҙыҡһыҙ бер нисә аҙна тора ала, һыуһыҙ 3 көн дә йәшәй алмай. Беҙҙе Барлыҡҡа килтереүсе бар нәмәне һыуҙан яралтыуы тураһында хәбәр итә. Климат һәм көн торошо алмашыныуы, икенсе төрлө әйткәндә, Ерҙең елләтеү системаһы эше океандарҙағы һыу ағымдарының йоғонтоһонан барлыҡҡа килә. Ҡояш йылыһынан парға әйләнгән һыу тамсылары болотҡа әйләнә. Болоттар, ҡайһы ваҡыт меңәр километр юл үтеп, алыҫтағы тау-урмандарға, хайуандарға, үҫемлектәргә тереклек илтәләр. Бар тереклек һыу менән бәйләнештә.

Кластың уҡыу алдынғыһы Фәрид ҡул күтәреп:

- Уҡытыусым, һеҙ һөйләгәндәр биология дәресендә үҙләштерелгән кеше төҙөлөшө тураһындағы мәғлүмәттәр менән дә дәлилләнә. Бөтә организмдар ҙа күп өлөшө һыуҙан торған күҙәнәктәрҙән барлыҡҡа килә. Мин шуны әйтергә теләгәйнем, - тине.

- Рәхмәт, Фәрид. Ысынлап та, фән бүлектәре бер-берелһенә ҡаршы килмәй. Был донъяны барлыҡҡа килтергән Аллаһ күп миллион йылдар Ер һәм уны уратып алған Йыһан менән үҙе ҡуйған закондар менән бер ниндәй ҡаршылыҡһыҙ һәм ситләшмәйенсә хакимлыҡ итә. Әлегә тиклем һыу көсө тураһында һөйләгәндә, беҙ уның ыңғай яҡтарын ғына билдәләнек. Әммә һыуҙың ҡылыҡтары араһында шуҡлыҡ та, хатта яһиллыҡ та бар. Әйҙәгеҙ, шуның тураһында һөйләшеп алайыҡ. Һыуҙың был үҙенсәлектәре хаҡында уйлағыҙ һәм һөйләгеҙ.

Класта шундуҡ ҡулдар күтәрелде:

- Ташҡындар, һыу баҫыуҙар, дауылдар.

- Цунами.

- Эрозия шау-гөр килеп аҡҡан йылғаларҙан барлыҡҡа килә.

- Диңгеҙҙәрҙәге дауылдар, штормдар.

Яуаптар бер-бер артлы яуа башлағас, уҡытыусы көсәйеп барған геүләүҙе туҡтатып:

- Дуҫтар, һеҙҙең бар яуаптарығыҙ ҙа дөрөҫ. Дәрес аҙағында һыуҙың ни тиклем көскә эйә икәнен аңланыҡ, тик иң мөһименә әле генә килеп еттек. Беҙ Ерҙең физик төҙөлөшөн өйрәнгәндә, убаларҙың, далаларҙың, тауҙарҙың һыуҙың эш һөҙөмтәһе икәнен күрәбеҙ. Һыуҙа бер ҡасан арыуҙы белмәҫ, бөтмәҫ- төкәнмәҫ тырышлыҡҡа һәм ныҡышмалылыҡҡа эйә булған көс бар. Ул меңәр йылдар дауамында ҡаты таш



тоҡомдарынан барлыҡҡа килгән бейек тауҙарҙы емерә, уларҙы үҙәндәр кимәленә еткереп ҡуя. Йылғаларҙың диңгеҙгә ҡойған урынында һыу менән килтерелгән ләм һәм тупраҡ ундырышлы үҙәндәр барлыҡҡа килтерә. Әгәр һеҙ ҙә, һыуҙан үрнәк алып, шундай уҡ ныҡышмал булһағыҙ, һеҙҙең алда бейек тау булып ҡалҡып торған сиселмәгән мәсьәләләр иреп юҡҡа сығасаҡ.

География дәресе шулай мауыҡтырғыс булалыр тип, Рушан һис уйламағайны. Иртән география дәреслеген портфеленә һалғанда:

Артҡы рәткә ултырырмын да серем итермен, - тип уйлағайны.

Буталсыҡлы географик карталарҙы, географик зоналар тураһындағы мәғлүмәттәрҙе өйрәнеү, ҡайҙа ниндәй ҡаҙылмалар сыға, ҡайҙа ниндәй үҫемлектәр үҫеп, ниндәй хайуандар төйәк итеүен ҡарау Рушандың был фәнгә ҡыҙыҡһыныуын кәметкәйне. Әммә бөгөнгө дәрес уны икеләнергә мәжбүр итте. Йылға үҙәндәренән, тау шаршыларынан аҡҡан һыу бармаҡ араларынан аҡҡанда, беҙгә аңын асыусы һәм дәртләндереүсе ниндәйҙер мөрәжәғәтнамәләр еткереүен һиҙҙе.

Фәрид, мәктәптә сағында, атаһының иртәнге һүҙҙәре тураһында уйланды, нимә әйтергә теләне икән ул? Һәр ваҡыттағыса дәрестәр һиҙҙермәйенсә үтеп китте.

Өйөнә ҡайтып кергәндә, аш бүлмәһенән ҡыҙҙырылған балыҡтың тәмле еҫе сыға ине. Ата менән ул яңы салат һәм ҡыҙҙырылған балыҡтан торған киске ашты бик тәмләп ашанылар. Фәридтең тәмле-татлыны яратҡанын белгән атаһы кондитер магазинынан торт алырға ла онотмағайны. Өҫтәлдәге һауыт – һабаны икәүләп йыйыштырып йыуғас, залға сәй эсергә сыҡтылар. Фәрид һаман, атаһы унең менән нимә тураһында һөйләшер икән, тип уйланды. Атаһы ла быны һиҙә һәм уңайлы мәл көтә ине. Бер йотом сәй эскәс, ул:

- Фәрид, ҡара әле, кешеләр тыуа, үҫә, бала сағы һәм йәшлеге үтә, өлкәнәйә, ҡартая һәм үлә. Хәҙер һиңә 15 йәш. Бала саҡ менән хушлашып, егет ҡорона инер ваҡыт. Әсәйең менән икәүләп һиндәге үҙгәрештәрҙе, кәйефең алмашыныуын күҙәтәбеҙ. Аллаһҡа ни тиклем рәхмәтле булһаҡ та был ғына аҙ. Апайың да, һин дә сәләмәт балаларһығыҙ. Улыҡайым, бер ниҙән дә



ҡурҡырға кәрәкмәй. Аҙмы-күпме ваҡыт үтеүгә һинең йәнеңдәге һәм тәнеңдәге дауыл тынасаҡ, һин йәшлектең дә бала саҡ һымаҡ гүзәл икәнен белерһең. Был осорҙа ҡайһы ваҡыт үҙенсәлекле төштәр күрерһең, һәм, бәлки, уянып китһәң, эске кейемең еүеш булғанын тойорһоң. Был ваҡытта оло тәһәрәт - ғөсөл ҡойонорға кәрәк. Өлкәнәйә башлағас, дини ғәмәлдәрҙе үтәү яуаплылығы мәле етә. Бар ғибәҙәттәр өсөн дә ғөсөл - тәүге һәм мотлаҡ шарт. Ғөсөл үтәү өсөн, ауыҙҙы, танауҙы сайҡатырға, ә аҙаҡтан бар тәнде йыуырға кәрәк, һыуланмаған урын ҡалырға тейеш түгел. Әсәйең һәм мин- һинең иң яҡын кешеләрең, шулай булғас беҙҙең менән йәшеңә ҡарата теләһә ниндәй һораузар буйынса һөйләшергә мөмкин. Шуны онотма: беҙ һинең менән, һинең ололарса изге эштәрең менән һәр саҡ ғорурланабыҙ, - тип, атаһы һүҙен бөтөрҙө.

Атаһын диҡҡәт менән тыңлаған Фәрид:

- Рәхмәт. Атай, Аллаһ һинең менән риза булһын, - тине.

Атаһынан белгәндәрҙе иҫендә тотоп, йыуыныу бүлмәһенә йүнәлде. Ниәт әйтеп, башта тәһәрәт алды. Танауына һыу һурғанда әҙерәк ауыртыу һиҙҙе. Унан һуң бөтә тәнен һабынлы йыуғыс менән ышҡыны һәм ентекле йыуынды. Аҙаҡ мунса халатын кейеп, үҙенең бүлмәһенә үтте. Көҙгө алдында сәсен тарағанда иртәнге география дәресен иҫенә төшөрҙө. Һыу көсө тураһында ине дәрес. Мәсьәләнең бер яғы сиселмәй ҡалған икән: һыу тышҡы донъяны ғына түгел, беҙҙең эске донъяны ла формалаштыра икән. Ғүмерендә тәүге тапҡыр ғөсөл ҡойонған Фәрид быны тәрән кисерҙе. Ғөсөл тәнде генә пакламай, йәнде лә сафландыра һәм иң мөһим ғибәҙәттәрҙең береһе икән. Йоҡо урынында ятҡанда Фәрид, үҙе лә һиҙмәҫтән:

- Мин һыуҙың көсөн тағы ла яҡшыраҡ аңланым, - тип ҡысҡырып әйтте лә, һуңғы ваҡыттағы эске көсөргәнештән һәм тынысһыҙлыҡтан ҡотолоп, тәрән йоҡоға талды.

# ТӘЙӘММУМ

## ТӘЙӘММУМДЕҢ МӘҒӘНӘҺЕ

Тәйәммүм – ҡулды һәм битте таҙа ер менән һыпырыу.

Аллаһу Тәғәлә бойора:

“Һыу булмаған ерҙә булһағыҙ, таҙа тупраҡ-ҡом менән тәйәммүм итегеҙ, йөҙөгөҙҙө, терһәктәргә ҡәҙәр ҡулдарығыҙҙы һыпырығыҙ”.

(Мәидә сүрәһе, 6-сы аят)

## ТӘЙӘММУМ ҠЫЛЫР ӨСӨН СӘБӘПТӘР

Тәһәрәт йә ғөсөл алырлыҡ һыу булмаған осраҡтарҙа, һыу сығанағының бер саҡырымдан да алыҫта булыуы; кешенең ауырыу булыуы; көн ифрат һыуыҡ булһа.

Тәһәрәт йә ғөсөл урынына

Тәйәммүм ҡылабыҙ

## НИСЕК ТӘЙӘММУМ ҠЫЛЫРҒА?

1. “Әғүҙү... Бисмилләһ...”-те әйтеү.
2. Тәһәрәт йә ғөсөл урынына тәйәммүм алырға ниәтләнеү.
3. Устарҙы таҙа ергә батырыу һәм устар менән битте һыпырыу.
4. Тағы бер ҡат устарҙы таҙа ергә батырыу һәм устар менән ҡулдарҙы терһәккә ҡәҙәр һыпырыу.



ТӘЙӘММУМДЕҢ ФАРЫҘДАРЫ НИНДӘЙ?

| Тәйәммум алғанда ☺☺☺☺ | 1. Тәйәммум алырға ниәтләү.<br>2. Устарҙы таҙа ергә батырыу һәм устар менән битте, һуңынан ҡулдарҙы терһәккә ҡәҙәр һыпырыу. | Фарыҙ ☺☺☺☺ |
|---|---|---|

## Ҡыу Төбә мәмерйәһе

Әмир мәктәпкә атаһы менән бик иртә барҙы. Мәктәптә ул ағза булып торған эҙәрмәндәр клубы июндең тәүге ял көндәрендә йәйге лагерға барырға йыйынды. Әмир атаһы менән килеп еткәндә, мәктәп автобусы юлға сығырға әҙер ине. Күп тә үтмәне автобус йәйге лагерға табан юл тотто. Клуб етәксеһе Рәил Исмәғил улы микрофонға клубтың планы тураһында белдерҙе:

- Дуҫтар, беренсе сиратта, беҙҙең экскурсияның маҡсатын әйтәм: яҡшы ял итеү һәм белем тулыландырыу. Әлегә тиклем күрмәгән урындарҙы ҡарап, ҡала ығы-зығыһынан ситтә файҙалы ваҡыт үткәрербеҙ. Автобус беҙҙе “Ҡарағай урманы” лагерында ҡалдырасаҡ. Беҙ унда, палаткалар ҡороп, төрлө уйындар уйнаясаҡбыҙ. Экскурсияның икенсе көнөндә лагерҙан ике саҡрым алыҫлыҡта ятҡан Ҡыу Төбә мәмерйәһенә йәйәү барасаҡбыҙ. Был мәмерйә стенаһында боронғо кешеләрҙең һүрәттәре булыуы менән билдәле. Бөтәгеҙ өсөн дә айырым үтенес: бөтә ҡағыҙәләрҙе лә үтәргә, теләһә ниндәй осраҡта ла төркөмдән ситләшмәҫкә һәм таҙалыҡты һаҡларға. Шуны оноторға ярамай: уратып алған тирә-яҡтың таҙалығын хәстәрләһәк, үҙебеҙ ҙә таҙа мөхиттә йәшәйәсәкбеҙ, киләһе быуындарға ла уны саф, имен-һау көйөнсә ҡалдырасаҡбыҙ. Был беҙҙең мөһим бурыстарыбыҙҙың береһе.

Лагерға тиклем 1,5 сәғәт барҙылар. Башта палаткаларҙы ҡорорға урын һайланылар. Бер аҙҙан уҡытыусы ярҙамында уларҙы ҡороп та ҡуйҙылар. Иң ҙур палаткала йыйылып - һүтелеп алына торған өҫтәлдәре менән кухня урынлашты. Ырыу башлығы Рәил Исмәғил улы, борғо ҡысҡыртып, үҙенең эргәһенә лагерҙа йәшәүселәрҙе саҡырҙы ла:

- Дуҫтар, хәҙер сәғәт 11. Көндөҙгө сәғәт 1-ҙә төшкө ашҡа йыйылырбыҙ. Хәҙергә һеҙҙең буш ваҡыт, тик бер шарт: лагерҙан йыраҡ китергә ярамай. Һеҙҙең аранан өсәү миңә төшкө аш әҙерләргә ярҙам итәсәк, - тине.





Балалар, азатлыҡты һиҙеп, төркөмдәргә бүленделәр ҙә төрлө ҡыҙыҡлы уйындар уйнай башланылар. Ағымлы ҡояш нурҙарына ҡойоноп, ҡарағай урманының ылыҫ еҫен һулап, ҡала балаларына эләкмәгән йомшаҡ йәшел үлән балаҫында уйнау ҙур шатлыҡ һәм ҡәнәғәтлек килтерә ине.

Төшкө аш мәле етте. Шишмә тирәләй шау-гөр килеп бала-саға бит, ҡулдарын йыуғас, ҙур палаткалағы өҫтәлдәр артына ултырыштылар. Саф һауала улар асыҡҡайнылар. Өйҙәрендә аш өҫтәле артында йөҙ сәбәп табып мыжып ултырғандар бында тәрилкәләрен "һә" тигәнсе ялтыратып та ҡуйҙылар.

Төшкө аштан һуң, ошо матурлыҡты бар иткән Аллаһ алдына бергәләп йәшел үләнгә намаҙға баҫтылар. Һуңынан йәш эҙәрмәндәр Рәил Исмәғил улы етәкселегендә кискә тиклем урманда йөрөнөләр, лагерға ҡайтҡанда, усаҡ яғыр өсөн утын йыйҙылар. Лагерҙа уларҙы дежур булып ҡалған иптәштәре әҙерләгән киске аш көтә ине.

Киске намаҙҙан һуң, балалар, усаҡ тирәләй ултырып, үҙҙәренең һәләттәрен күрһәттеләр: кемдер йырланы, кемдер тарих һөйләне, кемдер иптәштәрен көлдөрҙө. Улар ваҡыттың уҙғанын һиҙмәй ҙә ҡалдылар. Сиңерткә сырылдауы оҙатыуында палаткаларына таралыштылар һәм, үткән көн тәьҫораттарына күмелеп, шундуҡ йоҡоға талдылар.

Таң атҡансы уҡ уҡытыусының тауышына барыһы ла уянып киттеләр. Өйҙә ата-әсәләре оҙаҡ ҡына торғоҙа алмаһа, бында, саф урман һауаһында, йоҡолары туйып, улар яҡшы ял итеп уяндылар. Һалҡын шишмә һыуы менән тәһәрәтләнеп, иртәнге намаҙҙы уҡығас, йоҡоноң әҫәре лә ҡалманы. Унан һуң уҡытыусылары Үмәр

Ислам улы һәм Рәил Исмәғил улы етәкселегендә иртәнге физзарядкаға теҙелделәр.

Ах, әгәр был ял көнөндә ҡалала булһалар, улар төшкә тиклем йоҡлап, көн буйы бер ни эшләмәҫтәр ине... Зарядканан һуң, лагерҙа йәшәүселәрҙең барыһы ла ҙур палатҡаға иртәнге ашҡа йүгерҙеләр. Иртәнге ашты етеҙ генә ашанылар, сөнки барыһы ла мәмерйәгә походҡа барырға ашыға ине. Уҡытыусы: "Балалар, барығыҙға ла эсергә һыу, аҙыҡ, ҡояш һуҡмаҫҡа баш кейеме алырға кәрәк, сөнки юлды ике сәғәт йәйәүләп үтәсәкбеҙ" - тине.

Әмир һәм уның иптәштәре, сылбыр булып теҙелеп, тар ғына һуҡмаҡтан тауға күтәрелә башланылар. Тәүге ярты сәғәттә йәнле аралашып, шаярышып барҙылар, бер-береһен баҫтырыштылар, тик бер аҙҙан уларҙы юл ялҡыта башланы. Ҡояш баш өҫтөндә тора һәм иртәнге кеүек яғымлы түгел ине. Эҫенән тамаҡтары, ирендәре кипте. Ниһайәт, хәлһеҙләнгән төркөм тау башына менеп еткәс, ҡоҡарғыс миләш күләгәһенә һуҙылып ятты. Аяуһыҙ ҡояш аҫтында оҙон юлда йөрөп өйрәнмәгән балалар ныҡ арығайны.

- Нимә, балалар, әллә арынығыҙмы? - тип "ырыу башлығы" Рәил Исмәғил улы әмәле ҡалмаған сәйәхәтселәрҙең сәменә тейҙе, - йыйынығыҙ, мәмерйәгә экскурсияны башлайбыҙ.

Мәмерйәгә, ике ҡая араһынан ҡулға-ҡул етәкләшеп, бер рәт булып теҙелеп инделәр һәм ғәжәпләнеп туҡтап ҡалдылар. Күҙ сағылдырғыс яҡтылыҡ һәм көйҙөргөс һауа тышта ҡалды, улар, күҙ асып йомғансы, боҙҙай һалҡын һәм дөм-ҡараңғы мәмерйә ауыҙында, әйтерһең дә, ҙур һыуытҡыста инеләр.

Үмәр Ислам улы, стеналарҙы фонарик менән яҡтыртып, мәмерйә тураһында һөйләне.

- Дуҫтар, беҙ хәҙер меңәр йыл элек яҙылған тарих биттәренә ҡағылабыҙ. Был-бик борондан беҙҙең көндәргә еткерелгән мөрәжәғәтнамә. Тәү ҡарашҡа аңлашылмаған кеүек өлөштәр, тарих күҙлегенән ҡарағанда, иҫәп-хисапһыҙ мәғлүмәткә эйә. Беҙ күргән ҡаялағы һүрәттәр ул заман кешеләренең йәшәйеше, нимә ашағандар, нисек көн күргәндәр һ. б. нәмәләр тураһында һөйләй.

Мәмерйә буйлап ҡыҙыҡлы экскурсия тамамланғас, балалар ял итергә ултырҙылар. Төшкө ашты ашап, хәлйыйғас ҡына сәйәхәтселәргә әүәлге йәнлелек, күңел күтәренкелеге ҡайтты. Уҡытыусы Үмәр командаһы буйынса улар ҡайтыр юлға йыйындылар.

- Дуҫтар, - тине уҡытыусы, - бөгөнгә ниәтләгән мәмерйәне ҡарау тамамланды. Хәҙер сәғәт 3 - төшкө намаҙ ваҡыты. Намаҙҙан һуң лагерға ҡайтабыҙ.

Фляжкаһында һыуы бөткән Айрат:

- Уҡытыусым, минең һыуым бөтөнләй ҡалманы, башҡаларҙыҡы ла юҡ тип уйлайым, яҡын тирәлә шишмә лә, һыу табырлыҡ ауыл да юҡ, намаҙ алдынан нисек тәһәрәтләнәбеҙ? - тине. Уҡытыусы Үмәр:

- Бик яҡшы һорау! Афарин, Айрат! Мин һеҙгә нәк шул турала аңлатмаҡсы инем. Беҙҙең гүзәл Ислам динебеҙ кешегә хәленән килмәҫлек һынауҙар ҡуймай, кеше тормошон ауырайтмай, ә еңеләйтә генә торған дин.

Али, ҡулын күтәреп, һүҙ һораны:

- Тимәк, беҙ хәҙер намаҙ уҡымайбыҙмы, уҡытыусым?

- Юҡ, Али, дини йолаларҙы үтәргә тейешле мосолман, бер ниндәй сәбәпкә ҡарамай, намаҙға торорға тейеш. Һыу булмаған һәм, намаҙ ваҡыты үткәнсе, уны табырлыҡ мөмкинлек тә булмаған осраҡта, тәйәммүм эшләп, намаҙ уҡырға була. Иң тәүҙә тәһәрәт урынына тәйәммүм эшләргә



ниәтләүебеҙ тураһында белдерәбеҙ. Артабан, таҙа ергә устарыбыҙ менән еңелсә бәреп, битебеҙҙе һыпырабыҙ. Икенсе тапҡыр ергә бәргәндән һуң, терһәккә тиклем ҡулдарыбыҙҙы һыпырабыҙ. Бына шулай ябай ғына, балалар.

Али яңынан һораны:

- Уҡытыусым, тәйәммүмдән һуң ғибәҙәттәрҙе тәһәрәттән аҙаҡ эшләгәндәге кеүек ҡылабыҙмы?

- Эйе, Али. Тик бер шарт менән: киләһе намаҙҙы уҡыр алдынан яңынан тәйәммүм эшләргә кәрәк.

- Балалар өр-яңы нәмә белгәндәренә ҡыуанып, уҡытыусылары менән тәйәммүм эшләргә булдылар.

Йәмәғәт намаҙҙан һуң, төркөм лагерға табан юл алды.

- Ҡайтып еткәс, иң тәүҙә шишмәнән һыу эсергә сиратҡа теҙелделәр, эстеләр - эсеп туя алманылар.

Йәкшәмбенең кисенә тиклем лагерҙа үткәрелгән ваҡыт Әмир һәм уның иптәштәренә бик файҙалы булды. Улар әлегә тиклем белмәгән-күрмәгән байтаҡ нәмәләрҙе үҙләштерҙеләр. Мәктәптәге арытҡыс дәрес түгел ине был, лагерҙағы ваҡыт мауыҡтырғыс һәм ҡыҙыҡлы үтте. Әмир автобус тәҙрәһенән бөркөт ояһына оҡшап торған тау түбәһенә һуңғы тапҡыр күҙ һалды. Киләһе йылда ла лагерға барырға ниәтләнеп, Әмир дуҫы Булаттың иңбашына башын һалып йоҡлап китте.

# ҺОРАУҘАР

## Белемебеҙҙе тикшерәбеҙ 1

Дөрөҫ яуаптарҙы билдәләгеҙ.

| | | |
|---|---|---|
| Тәһәрәт алғанда тән өлөштәрен 3 тапҡыр йыуыу - был сөннә. | ☐ дөрөҫ | ☐ хата |
| Тәһәрәтһеҙ Ҡәғбәне тәуаф итеү ярай. | ☐ дөрөҫ | ☐ хата |
| Тәһәрәт алғанда һыуҙы исраф итеү - мәкруһ. | ☐ дөрөҫ | ☐ хата |
| Ятып йә берәй нәмәгә һөйәлеп йоҡлау тәһәрәтте боҙмай. | ☐ дөрөҫ | ☐ хата |
| Тәһәрәт алғанда тәндә йәрәхәтте бәйләгән бәйләм бар икән, бәйләмдең өҫтөнән мәсех ҡылырға ярай. | ☐ дөрөҫ | ☐ хата |



## Үҙебеҙҙе тикшерәбеҙ 1

**1. Түбәндә бирелгәндәрҙең ниməһе тәһәрәт фарыҙдары?**

а) Ауыҙ сайҡау
б) Танау сайҡау
в) Башҡа мәсех ҡылыу
г) Ҡолаҡтарға мәсех ҡылыу

**2. Түбәндә бирелгәндәрҙең ниməһе тәһәрәт фарыҙдары түгел?**

а) Ҡулды терһәккә тиклем йыуыу
б) Аяҡтарҙы бәкәлгә тиклем йыуыу
в) Битте йыуыу
г) Ауыҙҙы сайҡау

**3. Түбәндә бирелгәндәрҙең ниməһе тәһәрәт сөннәһе?**

а) Битте йыуыу
б) Аяҡты бәкәлгә тиклем йыуыу
в) Танауҙы сайҡау
г) Башҡа мәсех ҡылыу

**4. Түбәндә бирелгәндәрҙән нимә тәһәрәтте боҙмай?**

а) Ҡан ағыу
б) Көлөү
в) Йоҡо
г) Аңды юғалтыу

**5. Түбәндә бирелгәндәрҙән нимә тәһәрәтте боҙа?**

а) Иҫнәү

б) Илау

в) Һөйләшеү

г) Тәбиғи хәжәттәрҙе үтәү

## Төшөп ҡалған һүҙҙәрҙе тултырабыҙ (1)

**(мисүәк менән / өсәр тапҡыр / сөннә / мәкруһ / фарыҙ)**

- Тәһәрәт ваҡытында тән өлөштәрен ..................... йыуыу - был сөннә.
- Тәһәрәт ваҡытында тән өлөштәрен тейешле тәртиптә йыуыу - был .....................
- Тәһәрәт ваҡытында теште́рҙе ..................... йәиһә теш щеткаһы менән йыуыу - был сөннә.
- Тәһәрәт ваҡытында һыу сайпылтыу йәиһә кейемгә сәсрәтеү - был .....................
- Аяҡтарҙы бәкәлгә тиклем бер тапҡыр йыуыу - был .....................



## Белемебеҙҙе тикшерәбеҙ 2

Дөрөҫ яуаптарҙы билдәләгеҙ.

- Ғөсөл ҡойонғанда ауыҙҙы һәм танауҙы сайҡатыу - был фарыҙ. ☐ дөрөҫ ☐ хата
- Көрьәнгә ғөсөлһөҙ ҡағылырға ярамай. ☐ дөрөҫ ☐ хата
- Ғөсөлһөҙ мәсеткә инергә мөмкин, фәҡәт намаҙ уҡырға ярамай. ☐ дөрөҫ ☐ хата
- Ниәт тәйәммүм ҡылыу өсөн шарт түгел. ☐ дөрөҫ ☐ хата
- Тәйәммүмле кешенең һыу менән файҙаланыу мөмкинлеге булып китһә, уның тәйәммүме боҙолмай. ☐ дөрөҫ ☐ хата

## Үҙебеҙҙе тикшерәбеҙ 2

1. **Түбәндә бирелгәндәрҙән нимә ғөсөл фарызы?**

а) Аяҡ йыуыу
б) Танау сайҡау
в) Башҡа мәсех ҡылыу
г) Ҡолаҡтарға мәсех ҡылыу

2. **Ниндәй осрактарҙа ғөсөл ҡойоноу кәрәк?**

а) Жөнүб хәлендә булғанда
б) Тәндән ҡан йә эрен аҡҡанда
в) Тәбиғи хәжәттәрҙе үтәгәндә
г) Ауыҙ тулы ҡоҫҡолоҡ булғанда

3. **Ҡайһы осрактар ғөсөлдә мәкруһ иҫәпләнә?**

а) Һыуҙы исраф итеү
б) Кәрәкмәгәндә һөйләшеү
в) Ғәүрәт асыҡ булғанда Ҡәғбәгә табан боролоу
г) Үрҙә һаналғандарҙың барыһы ла

4. **Түбәндә бирелгәндәрҙең нимәһен ғөсөлһөҙ башҡарырға була?**

а) Намаҙ
б) Ҡөрьән уҡыу
в) Ашау
г) Ҡәғбә тәвафы

5. **Түбәндә бирелгәндәрҙең ҡайһы тәйәммүмде боҙмай?**

а) Илау
б) Тәбиғи хәжәттәрҙе үтәү
в) Тәһәрәт өсөн һыу табыу
г) Танауҙан ҡан китеү



## Төшөп ҡалған һүҙҙәрҙе тултырабыҙ (2)

**фарыз / тәйәммүм / мәкруһ / ауыҙ-танау / сөннә /**

- Ғөсөл ҡойонғанда ..................... йыуыу - фарыз.
- Ҡатын-ҡыҙҙарға күремдән һуң ғөсөл ҡойоноу - .....................
- Ғөсөл ҡойонғанда ҡулдарҙы һәм ғәүрәт урындарҙы йыуыу - .....................
- Ғөсөл ҡойонғанда Ҡәғбәгә асыҡ ғәүрәт менән боролоу - .....................
- Тәһәрәт йәиһә ғөсөл өсөн һыу таба алмағанда ..................... башҡарыла.





МОСОЛМАНДЫҢ МИҒРАЖЫ - ДИНДЕҢ ТЕРӘГЕ

# НАМАҘ

- Нимә ул намаҙ?
- Ни өсөн намаҙ уҡыйбыҙ?
- Намаҙ беҙгә нимә бирә?
- Намаҙ кемдәр өсөн фарыҙ?
- Намаҙ төрҙәре
- Аҙан һәм Ҡамәт
- Намаҙ нисек уҡыла?
- Фарыҙ намаҙҙарын ҡылыу тәртибе
- Намаҙҙан һуң уҡыласаҡ доғалар
- Намаҙ фарыҙдары, вәжибтәре, сөннәләре
  Намаҙҙы боҙоусы сәбәптәр
- Йәмәғәт намаҙы
- Ауырыу кешенең һәм юлсының намаҙы
- Сәһү һәм тиләүәт сәждәләре
- Намаҙ уҡыу тыйылған ваҡыттар
- Пәйғәмбәребеҙ намаҙ уҡырға яратҡан
- Мәсеттәр





# ТӘҮГЕ НАМАҘ

Йылы ғына йоҡо урынымды ҡалдырып, өйҙә кейеп йөрөгән аяҡ кейемемә ялан аяҡтарымды тығыуым булды, бар тәнем буйлап дерелдәү үтте. Әйтерһең, төндөң бөтә һалҡынлығын үҙенә һеңдергән был аяҡ кейеме…

Офоҡта таң атыу билгеһе һиҙелмәй ҙә. Тәҙрә төбөнә таянып, төнгө урамды күҙәтә башланым. Өй ҡыйыҡтары аша үҙенең рухи бөйөклөгөн күрһәтеп, күккә олғашҡан ҙур булмаған Иҫке Мәсет манараһында әле бер кем дә күренмәй. Бына манара майҙансығында йәш мәзиндең күләгәһе сағылып үтте. Мин халатыма нығыраҡ төрөндөм. Һыуыҡтан ҡорошоп, уйҙарыма уралып, рухымды һәм бар булмышымды тулҡынландырғыс хискә ураған аҙан тауышын тыңлағанда, тәүге намаҙым иҫемә төштө. Ул бынан 15 йыл элек булған ине...



Донъялағы иң яҡшы әсәй, минең әсәйем, ун биш йыл элек тәүге иртәнге намаҙға уятҡайны ул саҡта. Бөгөнгө һымаҡ ул ваҡытта ла ҡыш ине, буғай. Минең бүлмәм әсәйемдең бүлмәһе менән йәнәш кенә. Бәләкәй генә карауатта йоҡлайым. Нәфис, йомшаҡ ҡулдары менән башымдан һыйпап уятҡаны һаман да хәтеремдә:

- Тор, Әхмәт! Тор, улым! Тор…

Мин күҙемде асыр-асмаҫ:

- Әсәәәй!.. Төн бит әле, - тип яуапланым кирелеп-һуҙылып.

Әсәйем, ғәҙәттәгесә, һул ҡашымдың си-тен үпте лә, намаҙ ваҡытын үткәреп ебәреүҙән ҡурҡыптыр инде, ҡултыҡ аҫтарымдан тотоп күтәреп торғоҙҙо. Күҙҙәремде йоҙроҡтарым менән ыуа-ыуа, уның артынан эйәрҙем.

Ҡараңғы алғы яҡ бүлмәне тиҙ генә үтеп, әсәйемдең бүлмәһенә индек. Мейестә сытырлап ут яна.

Әәә... Нурия апаһы ла торған икән! Ул мей-ес плитәһенән һары ҡомғанды алып маташа. Үҙем иртә тормағас, уның иртә тороуына бик ғәжәпләндем.

- Апайың һәр көн иртә тора! - тине әсәйем, уйҙарымды уҡығандай.

Еңдәремде һыҙғанып, алдымда ултырған биҙрәгә эйелдем. Әсәйем был тороштоң уңайһыҙ икәнен күреп, арыясағымды аңлап, ултырыр өсөн бәләкәй генә эскәмйә ҡуйҙы.

Тәһәрәт алғас, йылынырға мейескә яҡынлашҡанда, уның намаҙлыҡтар йәйеп йөрөгәнен күрҙем. Йәшел яулығын ябынды һәм үҙенең янына саҡырҙы.

Мин ул ваҡытта бәләкәй инем, шуға әсәйем менән бер намаҙлыҡҡа баҫтым. Ул, ҡатын-ҡыҙҙар өсөн тәғәйенләнгән хәрәкәттәр менән, ҡулдарын күкрәк тапҡырына күтәреп, тәкбир әйтеп баш-ланы. Мин дә уның хәрәкәттәрен ҡабатланым. Намаҙҙың сөннәтен тамамлағас, күҙҙәрен көләсләндереп:

- Улым! Һин ҡыҙыҡай булдыңмы әллә? Тик ҡатын-ҡыҙҙар ғына намаҙҙы ошолай башлай. Һин бит малай кеше. Ир заттары ҡулдарын ҡолаҡ тәңгәленә ҡуйырға тейеш, - тине һәм, үҙенең ҡайнар устары менән ҡулдарымды алып, ирҙәр тәкбирен күрһәтте.



Тәкбир әйтеп, намаҙымды яңынан үтәнем дә, нисек доға ҡылырға һораным. Әсәйем башын һелкте. Тик үҙенең ғәмәлен үтәп бөткәс кенә, түбәндәгесә доға ҡылырға өйрәтте:

«Ииии... Раббым! Әлхәмдүлилләһ, мине мосолман иткәнеңә! Илемде, Ватанымды дошмандарҙан һаҡла!... Бәләгә тарығандарға, ауырыуҙарға, ярлылыҡтан ыҙа сиккән мосолман ҡәрҙәштәремә ярҙамыңды бир, еңеллек килтер!» - тип һора. Яҡшы кеше булып үҫеүеңде, шайтан ҡотҡоһона, уның тоҙаҡтарына эләкмәүеңде ялбарып, теләктәр телә!...

Намаҙҙан һуң, намаҙлыҡ келәмдәрен йыйып ҡуйҙы ла, минең йоҡомдо дауам итеү- итмәү теләгемде һораны. Нисек яуап бирергә белмәгәс, миңә:

«Бар, улайһа, китаптарыңды алып кил, һабаҡтарыңды тикшерәбеҙ», - тине. Бүлмәмдәге асыҡ ятҡан китабымды эләктерә һалып, уның янына йүгерҙем. Дәрестәремде ҡабатлағанда, бер хатаһыҙ яуап бирҙем.

Әсәйем беҙгә кистәрен гел генә: «Йоҡлар алдынан һабаҡтарығыҙҙы өс тапҡыр уҡып сығығыҙ. Төшөгөҙҙә фәрештәләр килеп өйрәтер, иҫтә ҡалырға ярҙам итер», - ти торғайны.

Күрәһең, был төндә лә фәрештәләр, килеп, һабаҡтарымды өйрәткән. Әсәйем башымдан һыйпап маҡтаны, мәктәпкә тиклем йоҡлап алыр өсөн арыу уҡ ваҡыт барлығын әйтеп, карауатҡа һалды.

...Йоҡомһорап уны күҙәтәм. Яҡтырып бөтмәгән ҡараңғылыҡ ҡосағында йәшел яулыҡ ябынған әсәйем әкиәттәгесә күренә...

Бына ул, ҡулына Ҡөрьән китабын алып, тәҙрә эргәһендәге тахтаға ултырҙы, тыныс ҡына уҡый башланы...

Күңелемдә тәрән эҙ ҡалдырған, ағымлы тауыш менән яңғыраған тылсымлы һүҙҙәрҙе тыңлап, уның яҡты, матур йөҙөнә ҡарай-ҡарай йоҡлап киткәнемде һиҙмәй ҙә ҡалғанмын.

Ул миңә фәрештә кеүек күренде. Хыялым Изге Ҡөрьән уҡып ултырған әсәйемде фәрештәләр уратып алған кеүек итеп һүрәтләне...

Йоҡо аралаш һиҙәм: уларҙың ҡанаттары, әйтерһең, әсәйемдең ҡулдары, битемдән йомшаҡ ҡына һыйпай...

Ғүмәр Сәйфетдин
(ҡыҫҡартылып бирелде)

# НИМӘ УЛ НАМАҘ?

Ер йөҙөндәге һәр тере йән эйәһе үҙенә генә хас ысулдар менән Аллаһу Тәғәләгә ғибәҙәт ҡыла, уны данлай. Барлыҡ илаһи диндәрҙә лә намаҙ ғибәҙәте йәшәй. Ә намаҙ - ысын иман ғибәҙәте, бар ғәмәлдәрҙе үҙ эсенә туплап бирелгән табыныу. Ислам динендә намаҙҙы, Аллаһу Тәғәләне ололап, күңел һәм тән менән Уға баш эйеп башҡарыу мотлаҡ. Намаҙҙың мөһимлеге хаҡында Пәйғәмбәребеҙ шулай тип әйткән: “Диндең терәге - намаҙ!”

Һәр мөьмин бәндә намаҙ уҡырға тейеш. Ул Алаһтың ҡушыуы, әмере. Тәүлек әйләнәһенә, биш тапҡыр ҡылынған намаҙҙар ваҡытында, Раббыбыҙға яҡынлығыбыҙ арта, Уның менән рухи һөйләшәбеҙ, күңел рәхәтлеген табабыҙ, һәр ваҡыт Уның янибыҙҙа булыуын тоябыҙ. Хаҡ Тәғәләбеҙгә ысын күңелдән ышаныуҙы һәм Уға мохтаж булыуыбыҙҙы уҡыған намаҙҙар менән иҫбатлайбыҙ.

Шулай уҡ, Аллаһу Тәғәлә беҙгә биргән ниғмәттәренә шөкөр итеп, доға ҡылабыҙ. Уға булған хөрмәтебеҙҙе, оло һөйөүебеҙҙе күрһәтәбеҙ. Намаҙ - ғибәҙәттәрҙең иң бөйөгө! Намаҙ – Раббыбыҙҙан белеп тә, белмәй ҙә ҡылған гонаһтарыбыҙҙы ғәфү итеүен, ярлыҡауын үтенеү, ауыр саҡтарҙа ярҙам һорау, Уға ялбарыу. Ҡыҫҡаса әйткәндә, намаҙ - йән яҡтылығы, диндең терәге, рухи йәшәйештең нигеҙе. Беҙҙе, физик яҡтан таҙартып, рухи тормошобоҙға яңынан тыуҙырған ғәмәл ул намаҙ.

**Һөйөклө Пәйғәмбәребеҙ әйткән:**

“Намаҙ – кешенең күңелендә бер нурҙыр. Һеҙҙән кем теләй уның менән нурланһын, күңелендәге нурын арттырырға тырышһын”.

(Тирмиҙи, Дәғүәт 85)

# НИ ӨСӨН НАМАҘ УҠЫЙБЫҘ?

Намаҙ - һәр мосолманға йөкмәтелгән бурыс. Үҙенең ҡолдарын барлыҡҡа килтергәндән алып, Аллаһу Тәғәлә уларҙы һәр ваҡыт төрлө кәрәк - яраҡ һәм ниғмәттәр менән тәьмин итә. Ә инде беҙ, үҙебеҙҙең рәхмәтебеҙҙе, хөрмәтебеҙҙе һәм һөйөүебеҙҙе белдереү, Уға яҡынайыу өсөн, намаҙ уҡыйбыҙ.

Раббыбыҙ кешеләрҙе ер йөҙөндәге иҫәпһеҙ-хисапһыҙ байлыҡ һәм ниғмәттәр менән бүләкләгән. Шуларға рәхмәтле булып йәшәргә тейешбеҙ. Намаҙҙы ошо биргән ниғмәттәренә шөкөр итеү өсөн атҡарабыҙ.

Беҙгә биргән мөлкәттәре өсөн, мохтаждарға хәйер биреп, Аллаһу Тәғәләгә рәхмәт әйтәбеҙ. Унын биргән төрлө ризыҡтары, иҫәнлек-һаулығыбыҙ өсөн, ураҙалар тотоп, рәхмәтебеҙҙе еткерәбеҙ.

Беҙҙе кеше итеп барлыҡҡа килтергән, тән һәм йән биргән Хаҡ Тәғәләгә ғибәҙәттең иң олоһо булған намаҙ уҡып, шөкөр ҡылабыҙ. Һөйөклө Пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт Мостафа (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) әйткән: “Рәхмәт йөҙөнән үҙегеҙҙең һәр быуынығыҙ, һәр һөйәгегеҙ өсөн саҙаҡа биреү талап ителә. Тартҡан тәсбихыбыҙ, һәр әйткән хәмед - саҙаҡа. Һәр тәһлил, тәкбир - саҙаҡа. Изге ғәмәл ҡылырға өндәү – ул да саҙаҡа. Насарлыҡтан тыйылыуға ынтылыу ҙа - саҙаҡа. Ике рәкәғәт әд-Духа намаҙында былар барыһы ла бергә тупланған”. (Мөслим, Мосафирун, 84)

Пәйғәмбәребеҙҙең кәңәшен тотоп, намаҙҙарыбыҙҙы бик ентекле, тырышып атҡарырға тейешбеҙ. Шуның менән ғаләмдәр Хужаһы Аллаһу Тәғәләне яратыуыбыҙҙы иҫбатлайбыҙ. Унын биргән ниғмәттәренә һәм беҙгә бүләк ителгән тәнебеҙ-йәнебеҙ өсөн дә сикһеҙ рәхмәтебеҙҙе белдерәбеҙ.





Аллаһу Тәғәлә бойора:

“Мине зикер итеп, намаҙыңды дөрөҫ итеп уҡы!”

(Та-һа сүрәһе, 14-се аят)

Аллаһу Тәғәлә бойора:

“Әй, иман килтергән кешеләр, рөкүғҡа китегеҙ, сәждәгә йығылығыҙ, Раббыға ғибәҙәт ҡылығыҙ, изгелек ҡылһағыҙ - ҡотолорһоғоҙ!”

(Хаж сүрәһе, 77-се аят)

# НАМАҘ БЕҘГӘ НИМӘ БИРӘ?

Кешенең тәне һәм йәне, шулай уҡ беҙ йәшәгән йәмғиәт өсөн намаҙҙың файҙаһы әйтеп бөткөһөҙ ҙур. Бына уны иҫбатлаған миҫалдар:

Намаҙ Аллаһу Тәғәләбеҙҙе иҫтә тотоу ихтыярын бүләк итә.

Ғаләмдәр хужаһы хәбәр итә: "Аллаһты иҫкә алыу – йөрәктәргә тыныслыҡ бирә!" Яратҡан Раббыбыҙҙы һәм уның исемдәрен иҫкә алыу һағыш тулы күңелебеҙҙе нығыта, Уның менән рухыбыҙ серләшә, йөрәктәребеҙҙе шатлыҡ менән тултыра, йәнебеҙҙе сихәтләндерә.

Аллаһты иҫкә алыуҙың иң яҡшы төрө - намаҙ уҡыу. Уҡылған һәр намаҙ Уның хаҡында хәтергә төшөрә. Намаҙ – Аллаһу Тәғәләнең кешелеккә биргән әйтеп бөткөһөҙ ҙур бүләге! Ошо хаҡта яҡшы белгән һөйөклө Пәйғәмбәребеҙ, мөмкинлек булған һайын, намаҙ ҡылырға ынтылған. Намаҙ уҡыуҙан алған ҡыуаныс-шатлыҡтары менән уртаҡлашып әйтер булған: "Минең бәхетем - намаҙҙа".

Намаҙ Әхирәттәге мәңгелек тормошто һәм Ҡиәмәт көнөн иҫкәртә.

Был фани донъяла кешене әүрәткән алдатҡыстар бихисап. Улар мәңгелек тормош тураһында уйланыуҙарҙан ситләштерә, оноттора. Әхирәтте онотҡан, Хисап көнө тураһында фекерләмәгән кеше бик күп насар эштәр, хаталар, хатта енәйәт тә ҡылыуы бар, шуның өсөн әҙәм балаларына һәр саҡ улар хаҡында иҫкәртеп, белдереп тороу зарур.

Көнөнә 5 ваҡыт уҡылған намаҙҙар Аллаһты, Әхирәтте һәм Ҡиәмәтте һәр саҡ хәтерҙә тоторға, онотмаҫҡа мөмкинлек бирә. Улар хаҡында йыш уйлау беҙҙе насар эштәрҙән тыя, башҡаларҙың мөлкәтенә, ғүмеренә зыян һалыуҙан аралай.

**Аллаһу Тәғәлә бойора:**

"Әй, мөьминдәр, сабыр булып, намаҙ уҡып, Аллаһтан ярҙам һорағыҙ. Хаҡтыр, Аллаһ сабыр кешеләр менән бергә!"

(Бaҡара сүрәһе, 153-сө аят)

**Аллаһу Тәғәлә бойора:**

"Мәғлүмдер, Аллаһты зикер иткәндә күңелдәр рәхәт тыныслыҡҡа ирешә".

(Рәғд сүрәһе, 28-се аят)

**Аллаһу Тәғәлә бойора:**

"Көн башында ла, аҙағында ла намаҙ уҡығыҙ. Изгелектәр әшәке ғәмәлдәрҙе ҡаплар".

(Һуд сүрәһе, 114-се аят)

**Аллаһу Тәғәлә бойора:**

"Намаҙ ҡыл. Хаҡтыр, намаҙ боҙоҡлоҡтарҙан һәм шәриғәткә һыймаған нәмәләрҙән һаҡлай".

(Ғәнкәбут сүрәһе , 45-се аят)

### Намаҙ гонаһтарҙан таҙарта.

Намаҙ – ул Раббыбыҙ менән осрашыу, Уның менән һөйләшеү. Көндәлек тыуған ниндәйҙер ярамаған эште башҡарыу теләгенән, гонаһтарҙан тик намаҙ, Раббыбыҙ алдында баҫып торасағыбыҙ ғына аралай. Намаҙ ярҙамында йөрәктәребеҙҙе һәм күңелебеҙҙе насар уй һәм хистәрҙән таҙартабыҙ. Ҡулдарҙы, башҡа тән өлөштәрен яҙыҡ һәм боҙоҡ ғәмәлдәрҙән һаҡлайбыҙ.

### Намаҙ беҙҙең әхлағыбыҙҙы һаҡлай.

Намаҙ аша хаталарыбыҙ һәм ҡылған гонаһтарыбыҙҙы төшөнәбеҙ. Ғәфү үтенеп, тәүбәгә килеү мөмкинлеген дә бирә намаҙ. Биш ваҡыт намаҙ ҡылғанда, Раббыбыҙ алдында баҫып торасағыбыҙ, Уның барыһын да белеүен, күреүен, ишетеүен иҫтә тотабыҙ. Эшләгән эштәребеҙгә, ҡыланыштарыбыҙға, тәртибебеҙгә иғтибарлы һәм талапсан була барабыҙ.

### Намаҙ тормошобоҙға бәрәкәт бирә.

Ваҡытыбыҙҙы намаҙҙарға яраҡлаштырып бүләбеҙ. Таң атыр алдынан иртәнге намаҙҙы уҡып, көнөбөҙҙө бик иртә башлайбыҙ. Күп кешеләр йоҡлағанда, эштәребеҙҙең ниндәйҙер өлөшөн атҡарып та ҡуябыҙ. Пәйғәмбәребеҙ: “Иии.. Аллаһым! Минең өммәтемдең иртәнге сәғәттәрен бәрәкәтле ҡыл!” - тип ҡылған доғаларынан беҙ ҙә өлөш алабыҙ.

Эштәрҙең иң күп мәленә тура килгән Өйлә һәм Икенде намаҙҙарында, Бөйөк Аллаһты иҫкә төшөрөп, рухыбыҙҙы ял иттерәбеҙ. Намаҙҙа тынысланабыҙ, психологик яҡтан бушанабыҙ, тирә-яҡ мөхиттән алған кире энергиянан таҙарынабыҙ, алдағы эштәр өсөн көс йыябыҙ. Бындай тәнәфескә туҡтап алыу артабан һөҙөмтәле эшләргә мөмкинлек бирә.

Киске һәм төнгө намаҙҙар барышында үтелгән көнгә байҡау яһайбыҙ, көн буйы ҡылған ҡылыҡ-ғәмәлдәребеҙгә баһа бирәбеҙ, Аллаһу Тәғәлә ҡушҡан бурысты үтәүҙән ҡәнәғәтлек кисереп, йоҡоға талабыҙ.

### Намаҙ таҙалыҡҡа күндерә.

Тәһәрәт алғанда, көнө буйы бысранған тән өлөштәребеҙҙе нәжестән таҙартабыҙ. Намаҙ урынын, кейемдәр һәм тәндең таҙа булыуын хәстәрләйбеҙ. Көнөнә бер нисә тапҡыр тәһәрәт алып, таҙалыҡҡа күнегәбеҙ.



Бер ваҡыт Аллаһ Илсеһе үҙенең сәхәбәләренән былай тип һорай:

- Һеҙ нисек уйлайһығыҙ? Әгәр бер кешенең йорто алдынан йылға ағып, ул шул йылғала көнөнә биш тапҡыр йыуынһа, булған бысраҡтарын йыуып төшөрһә, пакланһа, унда ниндәйҙер бысраҡ ҡалыр инеме?

Сәхәбәләр: “Юҡ! Ул кешелә бер бысраҡ та ҡалмаясаҡ!” - тип яуаплайҙар.

Аллаһ Илсеһе: “Көнөнә биш ваҡыт намаҙ уҡыу - ошоноң менән бер. Уҡылған намаҙҙар менән Аллаһу Тәғәлә булған гонаһтарҙы йыуып төшөрә!” - тип әйткән.

(Бохари, Мәүәкит, 6; Мөслим, Мәсәжид, 283)

# НАМАҘ КЕМДӘР ӨСӨН ФАРЫЗ?

Көнөнә биш ваҡыт намаҙ уҡыу бәлиғ һәм аҡылында булған һәр мосолманға йөкмәтелгән бурыс (фарыз) ул. Был ғибәҙәт Миғраж кисендә индерелә.

Намаҙ уҡыу - Аллаһы Тәғәләбеҙҙең әмере. Кем дә кем ошо турала белеп тә, ялҡауы килеп намаҙ уҡымаһа, оло гонаһ ҡыла.

Беҙҙең Ислам дине балаларҙы бәләкәй сактан уҡ намаҙға ылыҡтырыуҙы хуплай. Пәйғәмбәребеҙ балаларҙы ете йәштән намаҙға баҫтырыуҙы, ун йәштән алып, был ғибәҙәтте даими рәүештә үтәүҙе талап иткән.

> **Һөйөклө Пәйғәмбәребеҙ әйткән:**
>
> “Ҡиәмәт көнөндә Аллаһтың ҡоло иң башта намаҙҙары өсөн хисап бирәсәк. Әгәр намаҙҙары бик яҡшы икән – хәле һәйбәт булыр һәм әжерен алыр. Намаҙҙары кәмселекле булһа - зарарын күрер!”
>
> (Тирмиҙи, Мәүәкит 188)



# НАМАҘ ТӨРҘӘРЕ

Намаҙ өс төркөмгә бүленә: фарыз, вәжиб, сөннәт.

НАМАҘ ТӨРҘӘРЕ

- ФАРЫЗ НАМАҘҘАР
- ВӘЖИБ НАМАҘҘАР
- СӨННӘТ НАМАҘҘАР

## А. ФАРЫЗ НАМАҘҘАР:

Фарыз намаҙҙар өс төркөм:

1. БИШ ВАҠЫТ НАМАҘ:

а) Иртәнге Намаҙ (ас-Субх): 2 рәкәғәт сөннәт, 2 рәкәғәт фарыз.

Башта сөннәт ҡылына, артабан фарыз.

б) Өйлә Намаҙы (әз-Зухр): 10 рәкәғәт. 4 рәкәғәт сөннәт башта уҡыла, шунан 4 рәкәғәт фарыз, һәм 2 рәкәғәт сөннәт.

> **Аллаһу Тәғәлә бойора:**
>
> “Намаҙ мосолмандарҙың теүәл ваҡыттарҙа уҡылырға фарыз ителгән ғибәҙәтелер”.
>
> (Нисә сүрәһе, 103-сө аят)

в) Икенде Намаҙы (әл-Ғаср): 8 рәкәғәт. 4 рәкәғәт сөннәт, 4 рәкәғәт фарыз.

г) Аҡшам Намаҙы (әль-Мәғриб): 5 рәкәғәт. 3 рәкәғәт фарыз, 2 рәкәғәт сөннәт.

д) Йәстү Намаҙы (әл-Иша): 10 рәкәғәт. 4 рәкәғәт сөннәт, 4 рәкәғәт фарыз, 2 рәкәғәт һуң сөннәт. Төнгө намаҙҙан һуң, 3 рәкәғәт Витр-вәжиб намаҙы уҡыла.

### Намаҙҙарҙа рәкәғәттәр һаны

| | Тәү Сөннәт | Фарыз | Сөннәт | Һуң Сөннәт | Витр | Барыһы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| Иртәнге | 2 | 2 | - | - | - | 4 |
| Өйлә | 4 | 4 | - | 2 | - | 10 |
| Икенде | 4 | 4 | - | - | - | 8 |
| Аҡшам | - | 3 | 2 | - | - | 5 |
| Йәстү | 4 | 4 | - | 2 | 3 | 10+3 |
| | | | | | | 40 |

2. ЙОМА НАМАҘЫ: йома көндө, өйлә ваҡытында, йәмәғәт менән уҡый торған фарыз намаҙ.

3. ЙЫНАЗА НАМАҘЫ: вафат булған мосолман өсөн доға һәм теләктәрҙән торған ғәмәл. Фарыз-кифая.



## Б. ВӘЖИБ НАМАҘҘАР:

1) Байрам намаҙҙары. Улар 2 рәкәғәттән тора, йәмәғәт менән үтәлергә тейеш.

2) Витр намаҙы. 3 рәкәғәттән тора Ул Йәстү намаҙынан һуң уҡыла. Үтәлмәгән витр намаҙының ҡазаһы ла вәжиб.






## В. СӨННӘТ НАМАҘҘАР.

Сөннәт намаҙҙар - Пәйғәмбәребеҙ фарыз һәм вәжиб намаҙҙарынан тыш ҡылған намаҙҙар.

Фарыз намаҙҙарына бәйле йәки бәйле булмауына ҡарап, улар ике төркөмгә бүленә:

1. Фарыз намаҙҙарына бәйле сөннәт намаҙҙар. Фарыз намаҙҙарының алдынан, йә аҙағынан килгән сөннәт намаҙҙар.

а) 5 ваҡыт намаҙ сөннәте: Биш вакыт уҡылған фарыз намаҙҙарының алдынан, йә аҙағынан килгән сөннәт намаҙҙар. (Мәҫәлән, иртәнге намаҙҙың сөннәте).

б) Йома намаҙ сәннәте: Йома намаҙының фарызы алдынан һәм һуңынан уҡыласаҡ сөннәт намаҙҙар.

2. Фарыз намаҙҙарына бәйле булмаған сөннәт намаҙҙар. Былар фарыздарға бәйле булмаған, үҙаллы ҡылынған айырым намаҙҙар.

Пәйғәмбәребеҙ ҡылған сөннәт намаҙҙар:

а) Тәрәүих намаҙы. Рамаҙан айында уҡыла торған 20 рәкәғәтлек сөннәт намаҙы, ул төнгө намаҙ менән витр намаҙы араһында атҡарыла.

б) Тәһәжжуд намаҙы (Төнгө намаҙ).: Төнгө намаҙҙан һуң иртәнге намаҙ башланыуға 15-20 минут ҡалғанға тиклем уҡыла торған 2, 4, 6, 8, 10, 12 рәкәғәтле намаҙ.

в) Духа намаҙы. Ҡояш ҡалҡып, 1 сәғәт үткәндән һуң һәм ҡояш байыуға бер сәғәт ҡалғанға тиклем уҡыла торған 2, 4, 6, 8 рәкәғәтле намаҙ.

г) Әүүәбин намаҙы. Аҡшам намаҙынан һуң, 2, 4, 6 рәкәғәт итеп уҡыла.

д) Тәхиәтүл мәсет намаҙы. Был 2 рәкәғәт намаҙ мәсеткә ингәс тә уҡыла.




## «Үҙең, күп намаҙҙар һәм сәждәләр ҡылып, миңә ярҙам ит!»

Пәйғәмбәребеҙҙең Рабиға ибн Ҡәғб исемле сәхәбәһе Аллаһтың Илсеһенә (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) бик күп хеҙмәттәр күрһәткән. Был сәхәбә түбәндәгеләрҙе аңлата:

- Бер ваҡыт кисен Аллаһтың Илсеһенә тәһәрәт алыу өсөн һыу әҙерләп йөрөйөм. Ул миңә: “Рабиға! Минән нимә теләйһең, шуны һора!” - тине.

Мин:

- Әй Аллаһ Илсеһе! Миңә әҙерәк уйларға ваҡыт бир, шунан теләгемде еткерермен, - тинем.

Ә үҙем: “Был фани доньяла миңә байлыҡ, мөлкәт кәрәкмәй. Ниғмәт, рәхәтлектәр былай ҙа килеп тора. Иң яҡшыһы - Аллаһтың Илсеһенән алдағы тормошом өсөн берәй нәмә һорайым эле. Ул бит Раббыбыҙ алдында юғары дәрәжәлә тора”, - тигән уйҙар менән Пәйғәмбәребеҙ янына килдем. Ул минән ниндәй ҡарарға килеүемде һораны. Йәннәттә уның менән бергә булыу теләгемде белдерҙем, мине тамуҡ уттарында яндырмауын Аллаһу Тәғәләнән һорауын үтендем.

– Башҡа бер нәмә лә теләмәйһеңме?- тип һораны Пәйғәмбәребеҙ.

Мин ошо әйткән теләктән башҡаһы кәрәкмәүен әйттем. Аллаһ Илсеһе: “Үҙең, күп намаҙҙар һәм сәждәләр ҡылып, миңә ярҙам ит!” - тип әмер бирҙе. (Мөслим, Саләт, 226).

* * *

# НАМАҘҘЫҢ ФАРЫЗДАРЫ

Намаҙҙың фарыздары ун ике. Алтыһын намаҙ алдынан үтәү шарт булһа, алтыһын намаҙ барышында атҡарыу мөһим. Уларҙың берәүһе генә лә үтәлмәһә, намаҙыбыҙ дөрөҫ булмаҫ:

### а. Намаҙҙан тыш фарыздар

Икенсе төрлө әйткәндә, улар "намаҙҙың шарттары" тип атала. Был фарыздарҙы намаҙ уҡыу алдынан үтәү мотлаҡ. Улар беҙҙе үтәләсәк ғәмәлгә физик һәм рухи яҡтан әҙерләй.

1. **Хәдәстән таҙарыныу:** тәһәрәт, ғөсөл, һәм тәйәммүм ярҙамында рухи бысраҡлыҡтан таҙарыныу.

2. **Нәжестән таҙарыныу:** тәндә, кейемдә, намаҙ уҡый торған урынды физик бысраҡлыҡтан таҙартыу.

3. **Ғәүрәтте ҡаплау:** тәндең тыйылған ерҙәрен кейем менән ҡаплау. Ирҙәрҙең кендектән алып тубыҡтың аҫҡы өлөшөнә тиклем, ҡатындарҙың бите, ҡул һәм аяҡ остарынан башҡа бөтөн тәне кейем менән ябыла.

4. **Ваҡыт:** һәр намаҙҙы үҙ ваҡытында уҡыу. Һәр намаҙҙың үҙ ваҡыты бар. Уны алдан уҡыу ярамай. Шулай уҡ намаҙҙарҙы күрһәтелгән ваҡытта уҡымау ҙа дөрөҫ түгел.

5. **Истиҡбал Ҡибла:** Ҡибла тарафына йүнәлгән булыу. Әгәр намаҙ барышында тәнең менән икенсе яҡҡа борғоланһаң, намаҙың боҙола.

6. **Ниәт:** намаҙ уҡырға ниәтләнеү. Йәмәғәт намаҙҙарында имамға ойоған кеше имамға ойоуҙы ниәтләргә тейеш.

Ошо шарттар үтәлгәс кенә, намаҙҙы башлайбыҙ.

Һөйөклө Пәйғәмбәребеҙ әйткән:

Ибн Мәсғүд (разыйаллаһу) шулай аңлата:
- Йә Рәсүллуллаһ! Ғәмәлебеҙҙең ҡайһыһын Аллаһ нығыраҡ ярата?
- Үҙ ваҡытында ҡылынған намаҙҙы, - тине.
- Ә унан һуң ҡайһыһын?
- Атай-әсәйгә яҡшылыҡ менән мөғәмәлә итеүҙе.
- Ә унан һуң?
- Аллаһ юлындағы йыһатты, - тип бойорҙо.

(Бохари, Мәүәҡит, 5)



Намаҙҙа тәнең менән Ҡәғбәтуллаға йүнәл, йәнең менән Аллаһҡа ынтыл, сөнки йәндең Ҡибләһы – Аллаһ.

(Мәүләнә Йәләлетдин Руми)

### б. Намаҙ эсендәге фарыздар

Былар намаҙ барышында үтәлергә тейеш фарыздар. Улар намаҙ рөкөндәре тип атала.

1. **Ифтитах Тәкбир:** намаҙҙы тәкбир менән башлау. Мәҫәлән: "Аллаһу әкбәр" һүҙҙәрен әйтеү.

2. **Ҡыям:** тотҡарлыҡ булмаһа, намаҙҙа баҫып тороу.

3. **Ҡыраәт:** намаҙҙа Изге Ҡөрьәнде уҡыу (иң кәме өс аят).

4. **Рөкуғ:** ҡул устарын тубыҡтар өҫтөнә ҡуйып, билдән эйелеү.

Һөйөклө Пәйғәмбәребеҙ әйткән:

"Ҡолдоң Раббыһына иң яҡын булған сағы – сәждәләге сағы".

(Мөслим, Саләт 215)

5. **Сәждә:** тубыҡтарҙы, ике усты, маңлайҙы, танауҙы ергә тейҙереү.

6. **Ҡағдә әхирә:** намаҙ һуңында "Әт-тәхиәт"те уҡыу өсөн ултырыу.

# АҘАН

### Аҙан һәм мәзин һүҙҙәре нимә аңлата?

Аҙан - ул мосолмандарҙы намаҙға саҡырыу. Намаҙ ваҡытының башланыуы аҙан әйтеү менән белдерелә. Уны әйткән кеше мәзин тип атала.

Һөйөклө Пәйғәмбәребеҙ әйткән:

"Инсандар аҙан уҡыуҙың һәм намаҙҙа беренсе сафта тороуҙың ни ҡәҙәр бәрәкәтле булыуын белһәләр ине; улар, быға лайыҡ булыр өсөн, хатта йәрәбә тартыу шарт булһа, уны тартырҙар ине".

(Бохари, Аҙан 9; Мөслим, Саләт 129)

### Аҙан ҡасан һәм нисек әйтелә?

Ваҡыты етеү менән, тәүлегенә биш ваҡыт намаҙ уҡыла, һәм һәр намаҙ алдынан биш тапҡыр аҙан әйтелә. Аҙан менән мосолмандар намаҙға саҡырыла. Уны мәсет манараһынан көслө тауышлы мәзин ҡысҡыра.

### Намаҙҙы ишеткәс ни эшләргә?

Аҙанды ишеткәндә, уны тыңларға һәм мәзин артынан һүҙҙәрен ҡабатлап барырға, аҙандан һуң Пәйғәмбәребеҙ ҡушҡан "Аҙан доғаһын" уҡырға тейешбеҙ.

Һөйөклө Пәйғәмбәребеҙ әйткән:

"Аҙанды ишеткәндә, мәзин әйткәнде ҡабатлағыҙ".

(Бохари, Аҙан 7)

## Аҙан һүҙҙәренең мәғәнәһе

| | | |
|---|---|---|
| اللّٰه أَكْبَرُ | Аллааһу әкбәр (4) | Аллаһ иң Бөйөк! |
| أَشْهَدُ أَنْ لاَ إِلَهَ إِلاَّ اللّٰه | Әшһәду әлләә иләәһә илләллаах (2) | Шәһаҙәт кылам: Аллаһтан башка илаһ юк! |
| أَشْهَدُ أَنْ مُحَمَّداً رَسُولُ اللّٰه | Әшһәду әннә Мөхәммәдәр – рәсүлүллаах (2) | Шәһаҙәт кылам: Мөхәммәд - Аллаһтың рәсүле! |
| حَيَّ عَلَى الصَّلاَة | Хәййә ғәләс-саләәһ (2) | Әйҙә намаҙға! |
| حَيَّ عَلَى الْفَلاَح | Хәййә ғәләл-фәләәх (2) | Әйҙә котолоуға! |
| اللّٰه أَكْبَرُ | Аллааһу әкбәр (2) | Аллаһ иң Бөйөк! |
| لاَ إِلَهَ إِلاَّ اللّٰه | Ләә иләәһә илләллаах (1) | Аллаһтан башка илаһ юк! |



Биш ваҡыт намаҙҙың да аҙаны бер үк һүҙҙәр менән әйтелә. Тик иртәнге намаҙҙа ғына “Хәййә ғәләл-фәләәх” һүҙҙәренән һуң ике тапҡыр “Әссәләәтү хәйрүм минән-нәүүм” (Намаҙ йоҡонан яҡшыраҡ) тип өҫтәлә.

### Аҙан нимә тураһында иҫкә төшөрә?

Көнөнә биш ваҡыт яңғыраған аҙан Аллаһу Тәғәләбеҙҙең барлығын һәм берлеген, ә Мөхәммәд (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) Унын Илсеһе икәнлеген еткерә. Беҙҙең был донъяла йәшәүебеҙҙең маҡсаты һәм Йәһәннәмдән ҡотолоу юлы булып Аллаһу Тәғәләгә ышаныу, Уға ғибәҙәт ҡылыу тора.

“Кем аҙанды тыңлағандан һуң был доғаны ҡыла, унын өсөн Ҡиәмәт Көнө минең шәфәғәтем вәжиб буласаҡ.

اللَّهُمَّ رَبَّ هَذِهِ الدَّعْوَةِ التَّامَّةِ
وَالصَّلاَةِ الْقَائِمَةِ آتِ سَيِّدَنَا مُحَمَّدٍ الْوَسِيلَةَ
وَالْفَضِيلَةَ وَالدَّرَجَةَ الرَّفِيعَةَ
وَابْعَثْهُ مَقَامًا مَحْمُودًا الَّذِى وَعَدْتَهُ
اِنَّكَ لاَ تُخْلِفُ الْمِيعَادَ

Әй был камил орандың һәм әле ҡылынасаҡ намаҙҙың Раббыһы – Аллаһым! Пәйғәмбәребеҙ Мөхәмматкә вәсилә (Йәннәтә юғары урын) һәм фазилиәт бүләк ит, Һин уны вәғәҙә иткән Маҡам-Мәхмүдкә (тик Пәйғәмбәребеҙгә насип буласаҡ) ирештер. Һис шикһеҙ, Һин үҙ Һүҙенде кире ҡаҡмайһың!”

(Бохари, Аҙан 8)

## ҠАМӘТ

### Нимә ул Ҡамәт?

Ҡамәт - фарыз намаҙҙары алдынан намаҙға баҫыу ораны ул.

### Ҡамәтте ҡасан һәм кем әйтер?

Йәмәғәт намаҙҙары алдынан мәзин көслө тауыш менән ҡамәт әйтә. Намаҙҙы яңғыҙ уҡыған ир-егеттәр уны яртылаш тауыш менән төшөрөрҙәр.Ҡатын-ҡыҙҙар аҙан һәм ҡамәт әйтмәҫтәр.

Ҡамәттең һүҙҙәре аҙандың һүҙҙәре менән бер иш тип әйтергә була. Тик “Хәййә ғәләл-фәләәх” һүҙҙәренән һуң “Ҡад ҡаамәтис-саләәһ” тип өҫтәлә. Аҙанды һәйләмдәр араһында туҡталыңҡырап һәм моңло тауыш менән һуҙып, ҡыҫҡырып әйтәләр. Ә ҡамәт һөйләмдәр араһында туҡталышһыҙ, асыҡ һәм тиҙерәк башҡарыла.

**Ҡамәттең һүҙҙәре:**

- Аллааһу әкбәр (4)
- Әшһәду әлләә иләәһә илләллаах (2)
- Әшһәду әннә Мөхәммәдәр – рәсүлүллаах (2)
- Хәййә ғәләс-саләәһ (2)
- Хәййә ғәләл-фәләәх (2)
- Ҡад ҡаамәтис-саләәһ  (2)
- Аллааһу Акбар (2)
- Ләә иләәһә илләллаах (1)

# НАМАҘ НИСЕК УҠЫЛА?

Намаҙ алдынан тәһәрәт алына. Тәндең күрһәтергә тыйылған ерҙәре кейем менән ҡаплана. Ҡиблаға табан йүнәлеп, намаҙлыҡҡа йәки таҙа урынға баҫабыҙ. Уҡыясаҡ намаҙға ниәт әйтелә: (мәҫәлән) “Аллаһ ризалығы өсөн бөгөнгө иртәнге намаҙымдың ике рәкәғәт сөннәтен (йәки, ике рәкәғәт фарызын) үтәргә ниәт ҡылдым. Йүнәлдем Ҡибла тарафына, хаалисан лилләәһи Тәғәлә!”

## I-се Рәкәғәт

1 (Ирҙәр)

“Аллаһу әкбәр!” тип тәкбир әйтеп, ҡул суҡтары ҡолаҡ осо тәңгәленә күтәрелә.

1 (Ҡатын-ҡыҙҙар)

“Аллаһу әкбәр!” тип тәкбир әйтеп, ҡул суҡтары яурын тәңгәленә күтәрелә.





“(Лоҡман улына өгөт бирә): Балам, намаҙыңды уҡы, башҡаларҙы изгелеккә өндә, яманлыҡтарҙан уаз кисергә саҡыр, бәләләргә сабыр ит. Хаҡтыр, былар рух ныҡлығы талап ителә торған нәмәләрҙер”.

(Лоҡман сүрәһе, 17-се аят)



2 (Ирҙәр)

Тура баҫып тороп, уң ҡул һул ҡул өҫтөнә һалына, баш һәм сәтәкәй бармаҡтары менән һул ҡулды beләҙеклəп, ҡул суҡтары кендек янына ҡуйыла.

Ҡулдарҙы ҡуйғандан һуң, эстән генә “Сүбхәнәкә” уҡыйбыҙ. Аҙаҡ, “Әғүүҙү билләәһи минәш-шайтаанир-раджиим. Бисмилләәһир-рахмәәнир-рахиим” тип әйткәс, “Фатиха” сүрәһен һәм белгән сүрәне уҡыйбыҙ.



2 (Ҡатын-ҡыҙҙар)

Тура баҫып тороп, уң ҡулдың усы һул ҡул усы өҫтөнә һалына һәм күкрәк өҫтөнә ҡуйыла.

Ҡулдарҙы ҡуйғандан һуң, эстән генә “Сүбхәнәкә” уҡыйбыҙ. Аҙаҡ, “Әғүүҙү билләәһи минәш-шайтаанир-раджиим. Бисмилләәһир-рахмәәнир-рахиим” тип әйткәс, “Фатиха” сүрәһен һәм белгән сүрәне уҡыйбыҙ.



3 (Ирҙәр)

“Аллаһу әкбәр!” тип рөкуғҡа эйеләбеҙ. Ҡулдар менән тубыҡтарҙы услап, башты һәм арҡаны төп-төҙ тотабыҙ. Рөкуғта өс мәртәбә “Сүбхәәнә раббийәл-ғаҙыйм” тиелә.



3 (Ҡатын-ҡыҙҙар)

“Аллаһу әкбәр!” тип рөкуғҡа эйеләбеҙ. Ҡатын-ҡыҙҙар ирҙәр эйелгән тиклем эйелмәй. Ҡулдар менән бер аҙыраҡ бөгөлгән тубыҡтарҙы услап, рөкуғта өс мәртәбә “Сүбхәәнә раббийәл-ғаҙыйм” тиелә.



4 (Ирҙәр)

Рөкуғтан “Сәмиғаллаһу лимән хәмидәһ” тип, турайып баҫып, “Рәббәнә ләкәл-хәмде” тиелә.

4 (Ҡатын-ҡыҙҙар)

Рөкуғтан “Сәмиғаллаһу лимән хәмидәһ” тип, турайып баҫып, “Рәббәнә ләкәл-хәмде” тиелә.

5 (Ирҙәр)

“Аллаһу әкбәр!” тип әйтеп, сәждәгә кителә. Сәждәлә тубыҡтар, унан ҡулдар, артабан маңлай һәм танау ергә тейҙерелә. Бармаҡтар бергә, баш менән ҡул бер үк тигеҙлектә. Терһәктәр ергә һәм кәүҙәгә теймәй. Аяҡ бармаҡтары ерҙән айырылмай. Ҡул һәм аяҡ бармаҡтары Ҡиблаға ҡаратыла. Ошо торошта өс тапҡыр “Сүбхәәнә раббийәл-әғлә” тиелә.

5 (Ҡатын-ҡыҙҙар)

“Аллаһу әкбәр!” тип әйтеп, сәждәгә кителә. Сәждәлә тубыҡтар, унан ҡулдар, артабан маңлай һәм танау ергә тейҙерелә. Бармаҡтар бергә, баш менән ҡул бер үк тигеҙлектә. Терһәктәр ергә һәм кәүҙәгә теймәй. Аяҡ бармаҡтары ерҙән айырылмай. Ҡул һәм аяҡ бармаҡтары Ҡиблаға ҡаратыла. Ошо торошта өс тапҡыр “Сүбхәәнә раббийәл-әғлә” тиелә.







6 (Ирҙәр)

“Аллаһу әкбәр!” тип әйтеп, һул аяҡты уңға бороп өҫтөнә ултырабыҙ. Уң аяҡ бармаҡтары ергә терәлә һәм алға ҡаратыла. Ҡул устары тубыҡтарҙың өҫтөндә ята. Ҡараш тубыҡҡа төбәлә.

6 (Ҡатын-ҡыҙҙар)

“Аллаһу әкбәр!” тип әйтеп, ике аяҡты ла уңға ҡаратып, үҙебеҙгә тартынҡырап, һул botобоҙға ултырабыҙ. Аяҡ бармаҡтары Ҡиблаға ҡаратыла. Ҡул устары тубыҡтарҙың өҫтөндә ята. Ҡараш тубыҡҡа төбәлә.

7 (Ирҙәр)

“Аллаһу әкбәр!” тип әйтеп, икенсе тапҡыр сәждәгә кителә. Өс мәртәбә “Сүбхәәнә раббийәл- әғлә” тип әйтелә.

7 (Ҡатын-ҡыҙҙар)

“Аллаһу әкбәр!” тип әйтеп, икенсе тапҡыр сәждәгә кителә. Өс мәртәбә “Сүбхәәнә раббийәл- әғлә” тип әйтелә.

8 (Ирҙәр)

“Аллаһу әкбәр!” тип әйтеп, икенсе рәҡәғәтте үтәр өсөн турайып баҫабыҙ.

8 (Ҡатын-ҡыҙҙар)

“Аллаһу әкбәр!” тип әйтеп, икенсе рәҡәғәтте үтәр өсөн турайып баҫабыҙ.

## II-се Рәҡәғәт

9 (Ирҙәр)

Уң ҡул һул ҡул өҫтөнә һалына, баш һәм сәтәкәй бармаҡтары менән һул ҡулды беләҙекләп, ҡул суктарын кендек янында тотабыҙ. “Бисмилләәһир-рахмәәнир-рахиим” тип әйткәс, “Фатиха” сүрәһен һәм белгән сүрәне уҡыйбыҙ.

9 (Ҡатын-ҡыҙҙар)

Уң ҡулдың усы һул ҡул усы өҫтөнә һалына һәм күкрәк өҫтөнә ҡуйыла. “Бисмилләәһир-рахмәәнир-рахиим” тип әйткәс, “Фатиха” сүрәһен һәм белгән сүрәне уҡыйбыҙ.

10 (Ирҙәр)

“Аллаһу әкбәр!” тип рөкуғҡа эйеләбеҙ. Рөкуғта өс мәртәбә “Сүбхәәнә раббийәл-ғаҙыйм” тиелә.

10 (Ҡатын-ҡыҙҙар)

“Аллаһу әкбәр!” тип рөкуғҡа эйеләбеҙ. Рөкуғта өс мәртәбә “Сүбхәәнә раббийәл-ғаҙыйм” тиелә.

11 (Ирҙәр)

Рөкуғтан “Сәмиғаллаһу лимән хәмидәһ” тип, турайып баҫып, “Рәббәнә ләкәл-хәмде” тиелә.

11 (Ҡатын-ҡыҙҙар)

Рөкуғтан “Сәмиғаллаһу лимән хәмидәһ” тип, турайып баҫып, “Рәббәнә ләкәл-хәмде” тиелә.

12 (Ирҙәр)

“Аллаһу әкбәр!” тип әйтеп, сәждәгә кителә. Сәждәлә өс тапҡыр “Сүбхәәнә раббийәл-әғлә” тиелә.

13 (Ирҙәр)

“Аллаһу әкбәр!” тип әйтеп, сәждәнән тороп, бер аҙ ултырабыҙ.

14 (Ирҙәр)

“Аллаһу әкбәр!” тип әйтеп, икенсе тапҡыр сәждәгә кителә. Өс мәртәбә “Сүбхәәнә раббийәл-әғлә” тип әйтелә.

15 (Ирҙәр)

“Аллаһу әкбәр!” тип әйтеп, һул аяҡты уңға бороп өҫтөнә ултырабыҙ. Уң аяҡ бармаҡтары ергә терәлә һәм алға ҡаратыла. Ҡул устары тубыҡтарҙың өҫтөндә ята. Ҡараш тубыҡҡа төбәлә. Ошо рәүешле “Әт-тәхиәт”, “Салауат (Салли һәм Бәрик)”, “Раббәнә” доғалары уҡыла.

12 (Ҡатын-ҡыҙҙар)

“Аллаһу әкбәр!” тип әйтеп, сәждәгә кителә. Сәждәлә өс тапҡыр “Сүбхәәнә раббийәл-әғлә” тиелә.

13 (Ҡатын-ҡыҙҙар)

“Аллаһу әкбәр!” тип әйтеп, сәждәнән тороп, бер аҙ ултырабыҙ.

14 (Ҡатын-ҡыҙҙар)

“Аллаһу әкбәр!” тип әйтеп, икенсе тапҡыр сәждәгә кителә. Өс мәртәбә “Сүбхәәнә раббийәл-әғлә” тип әйтелә.

15 (Женщины)

“Аллаһу әкбәр!” тип әйтеп, ике аяҡты ла уңға ҡаратып, үҙенә тартынҡырап, һул ботобоҙға ултырабыҙ. Аяҡ бармаҡтары Ҡиблаға ҡаратыла. Ҡул устары тубыҡтарҙың өҫтөндә ята. Ҡараш тубыҡҡа төбәлә. Ошо рәүешле “Әт-тәхиәт”, “Салауат (Салли һәм Бәрик)”, “Раббәнә” доғалары уҡыла.





16 (Ирҙәр)

Әйткән доғаларҙы уҡығандан һуң, башты уңға бороп, ҡарашты уң яурын осона төбәп, “Әс-сәләәмү ғәләйкүм үә рахмәтуллааһ”, һуңынан, башты һулға бороп, тағы “Әс-сәләәмү ғәләйкүм үә рахмәтуллааһ” тип сәләмләйбеҙ. Шулай итеп, ике рәкәғәт намаҙ тамам була.



16 (Ҡатын-ҡыҙҙар)

Әйткән доғаларҙы уҡығандан һуң, башты уңға бороп, ҡарашты уң яурын осона төбәп, “Әс-сәләәмү ғәләйкүм үә рахмәтуллааһ”, һуңынан, башты һулға бороп, тағы “Әс-сәләәмү ғәләйкүм үә рахмәтуллааһ” тип сәләмләйбеҙ. Шулай итеп, ике рәкәғәт намаҙ тамам була.



Хатам Эсам намаҙҙы нисек ҡылыуы хаҡында былай тип һөйләй:

“Намаҙ алдынан мин ентекләп тәһәрәт алам, намаҙ урынына барам, ултырам, бөтә иғтибарымды туплап, намаҙға баҫам. Ҡәғбәне ике ҡашым араһына ҡуям, сират күперен – табаным аҫтына, Йәннәтте – уң яғыма, Йәһәннәмде – һул яғыма; Ғазраил башым осонда икәнен һәм теләһә ниндәй мәлдә йәнемде алырын, был намаҙ һуңғыһы булыу ихтималлығын да аңлап торам; ҡурҡыу һәм өмөт менән Аллаһ ҡаршында баҫып торам, иғтибар менән тәкбирҙе әйтәм; мәғәнәһе тураһында уйланып, Ҡөрьән уҡыйым. Күндәмлек менән рөкүғка эйеләм, күндәмлек менән сәждә ҡылам. Намаҙымды ихлас рәүештә ҡылам, аҙаҡ доғаларым ҡабул ителерме икән тип борсолоп, Аллаһтан шәфҡәт һорайым”.



# ФАРЫЗ НАМАҘҘАРЫН ҠЫЛЫУ ТӘРТИБЕ

| ИРТӘНГЕ НАМАҘ | Беренсе рәкәғәт | Икенсе рәкәғәт | | |
|---|---|---|---|---|
| ИРТӘНГЕ НАМАҘЫҢ СӨННӘТЕ (2) | * Тәкбир<br>* Субхәнәкә<br>* Әғүүзү - Бисмилләәһ<br>* Фатиха сүрәһе<br>* Бер сүрә<br>* Рөкуғ<br>* Сәждә | * Бисмилләәһ<br>* Фатиха сүрәһе<br>* Бер сүрә<br>* Рөкуғ<br>* Сәждә<br>* Әт-тәхиәт<br>- Салауат<br>- Раббәнә<br>* Сәләм | | |
| ИРТӘНГЕ НАМАҘЫҢ ФАРЫЗЫ (2) | * Тәкбир<br>* Субхәнәкә<br>* Әғүүзү - Бисмилләәһ<br>* Фатиха сүрәһе<br>* Бер сүрә<br>* Рөкуғ<br>* Сәждә | * Бисмилләәһ<br>* Фатиха сүрәһе<br>* Бер сүрә<br>* Рөкуғ<br>* Сәждә<br>* Әт-тәхиәт<br>- Салауат<br>- Раббәнә<br>* Сәләм | | |

| ӨЙЛӘ НАМАҘЫ | Беренсе рәкәғәт | Икенсе рәкәғәт | Өсөнсө рәкәғәт | Дүртенсе рәкәғәт |
|---|---|---|---|---|
| ӨЙЛӘ НАМАҘЫНЫҢ ТӘҮ СӨННӘТЕ (4) | * Тәкбир<br>* Субхәнәкә<br>* Әғүүзү - Бисмилләәһ<br>* Фатиха сүрәһе<br>* Бер сүрә<br>* Рөкуғ<br>* Сәждә | * Бисмилләәһ<br>* Фатиха сүрәһе<br>* Бер сүрә<br>* Рөкуғ<br>* Сәждә<br>* Әт-тәхиәт | * Бисмилләәһ<br>* Фатиха сүрәһе<br>* Бер сүрә<br>* Рөкуғ<br>* Сәждә | * Бисмилләәһ<br>* Фатиха сүрәһе<br>* Бер сүрә<br>* Рөкуғ<br>* Сәждә<br>* Әт-тәхиәт<br>- Салауат<br>- Раббәнә<br>* Сәләм |

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| ӨЙЛӘ НАМАҘЫНЫҢ ФАРЫЗЫ (4) | * Тәкбир<br>* Сүбхәнәкә<br>* Әғүүҙү - Бисмилләһ<br>* Фатиха сүрәһе<br>* Бер сүрә<br>* Рөкүғ<br>* Сәждә | * Бисмилләһ<br>* Фатиха сүрәһе<br>* Бер сүрә<br>* Рөкүғ<br>* Сәждә<br>* Әт-тәхиәт | * Бисмилләһ<br>* Фатиха сүрәһе<br>* Рөкүғ<br>* Сәждә | * Бисмилләһ<br>* Фатиха сүрәһе<br>* Рөкүғ<br>* Сәждә<br>* Әт-тәхиәт<br>- Салауат<br>- Раббәнә<br>* Сәләм |
| ӨЙЛӘ НАМАҘЫНЫҢ ҺУҢ СӨННӘТЕ (2) | * Тәкбир<br>* Сүбхәнәкә<br>* Әғүүҙү - Бисмилләһ<br>* Фатиха сүрәһе<br>* Бер сүрә<br>* Рөкүғ<br>* Сәждә | * Бисмилләһ<br>* Фатиха сүрәһе<br>* Бер сүрә<br>* Рөкүғ<br>* Сәждә<br>* Әт-тәхиәт<br>- Салауат<br>- Раббәнә<br>* Сәләм | | |

| ИКЕНДЕ НАМАҘЫ | Беренсе рәкәғәт | Икенсе рәкәғәт | Өсөнсө рәкәғәт | Дүртенсе рәкәғәт |
|---|---|---|---|---|
| ИКЕНДЕ НАМАҘЫНЫҢ СӨННӘТЕ (4) | * Тәкбир<br>* Сүбхәнәкә<br>* Әғүүҙү - Бисмилләһ<br>* Фатиха сүрәһе<br>* Бер сүрә<br>* Рөкүғ<br>* Сәждә | * Бисмилләһ<br>* Фатиха сүрәһе<br>* Бер сүрә<br>* Рөкүғ<br>* Сәждә<br>* Әт-тәхиәт<br>- Салауат | * Сүбхәнәкә<br>* Бисмилләһ<br>* Фатиха сүрәһе<br>* Бер сүрә<br>* Рөкүғ<br>* Сәждә | * Бисмилләһ<br>* Фатиха сүрәһе<br>* Бер сүрә<br>* Рөкүғ<br>* Сәждә<br>* Әт-тәхиәт<br>- Салауат<br>- Раббәнә<br>* Сәләм |
| ИКЕНДЕ НАМАҘЫНЫҢ ФАРЫЗЫ (4) | * Тәкбир<br>* Сүбхәнәкә<br>* Әғүүҙү - Бисмилләһ<br>* Фатиха сүрәһе<br>* Бер сүрә<br>* Рөкүғ<br>* Сәждә | * Бисмилләһ<br>* Фатиха сүрәһе<br>* Бер сүрә<br>* Рөкүғ<br>* Сәждә<br>* Әт-тәхиәт | * Бисмилләһ<br>* Фатиха сүрәһе<br>* Рөкүғ<br>* Сәждә | * Бисмилләһ<br>* Фатиха сүрәһе<br>* Рөкүғ<br>* Сәждә<br>* Әт-тәхиәт<br>- Салауат<br>- Раббәнә<br>* Сәләм |

| АҠШАМ НАМАҘЫ | Беренсе рәкәғәт | Икенсе рәкәғәт | Өсөнсө рәкәғәт | |
|---|---|---|---|---|
| Аҡшам НАМАҘЫНЫҢ ФАРЫЗЫ (3) | * Тәкбир<br>* Сүбхәнәкә<br>* Әғүүҙү - Бисмилләәһ<br>* Фатиха сүрәһе<br>* Бер сүрә<br>* Рөкүғ<br>* Сәждә | * Бисмилләәһ<br>* Фатиха сүрәһе<br>* Бер сүрә<br>* Рөкүғ<br>* Сәждә<br>* Әт-тәхиәт | * Бисмилләәһ<br>* Фатиха сүрәһе<br>* Рөкүғ<br>* Сәждә<br>* Әт-тәхиәт<br>- Салауат<br>- Раббәнә<br>* Сәләм | |
| Аҡшам НАМАҘЫНЫҢ СӨННӘТЕ (2) | * Тәкбир<br>* Сүбхәнәкә<br>* Әғүүҙү - Бисмилләәһ<br>* Фатиха сүрәһе<br>* Бер сүрә<br>* Рөкүғ<br>* Сәждә | * Бисмилләәһ<br>* Фатиха сүрәһе<br>* Бер сүрә<br>* Рөкүғ<br>* Сәждә<br>* Әт-тәхиәт<br>- Салауат<br>- Раббәнә<br>* Сәләм | | |



| ЙӘСТҮ НАМАҘЫ | Беренсе рәкәғәт | Икенсе рәкәғәт | Өсөнсө рәкәғәт | Дүртенсе рәкәғәт |
|---|---|---|---|---|
| ЙӘСТҮ НАМАҘЫНЫҢ ТӘҮ СӨННӘТЕ (4) | * Тәкбир<br>* Сүбхәнәкә<br>* Әғүүҙү - Бисмилләәһ<br>* Фатиха сүрәһе<br>* Бер сүрә<br>* Рөкүғ<br>* Сәждә | * Бисмилләәһ<br>* Фатиха сүрәһе<br>* Бер сүрә<br>* Рөкүғ<br>* Сәждә<br>* Әт-тәхиәт<br>- Салауат | * Сүбхәнәкә<br>* Бисмилләәһ<br>* Фатиха сүрәһе<br>* Бер сүрә<br>* Рөкүғ<br>* Сәждә | * Бисмилләәһ<br>* Фатиха сүрәһе<br>* Бер сүрә<br>* Рөкүғ<br>* Сәждә<br>* Әт-тәхиәт<br>- Салауат<br>- Раббәнә<br>* Сәләм |

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| ЙӘСТҮ НАМАҘЫНЫҢ ФАРЫЗЫ (4) | * Тәкбир<br>* Сүбхәнәкә<br>* Әғүүҙү - Бисмилләһ<br>* Фатиха сүрәһе<br>* Бер сүрә<br>* Рөкүғ<br>* Сәждә | * Бисмилләһ<br>* Фатиха сүрәһе<br>* Бер сүрә<br>* Рөкүғ<br>* Сәждә<br>* Әт-тәхиәт | * Бисмилләһ<br>* Фатиха сүрәһе<br>* Рөкүғ<br>* Сәждә | * Бисмилләһ<br>* Фатиха сүрәһе<br>* Рөкүғ<br>* Сәждә<br>* Әт-тәхиәт<br>- Салауат<br>- Раббәнә<br>* Сәләм |
| ЙӘСТҮ НАМАҘЫНЫҢ ҺУҢ СӨННӘТЕ (2) | * Тәкбир<br>* Сүбхәнәкә<br>* Әғүүҙү - Бисмилләһ<br>* Фатиха сүрәһе<br>* Бер сүрә<br>* Рөкүғ<br>* Сәждә | * Бисмилләһ<br>* Фатиха сүрәһе<br>* Бер сүрә<br>* Рөкүғ<br>* Сәждә<br>* Әт-тәхиәт<br>- Салауат<br>- Раббәнә<br>* Сәләм | | |

| ВИТР НАМАҘЫ | Беренсе рәкәғәт | Икенсе рәкәғәт | Өсөнсө рәкәғәт | |
|---|---|---|---|---|
| ВИТР НАМАҘЫ (3) | * Тәкбир<br>* Сүбхәнәкә<br>* Әғүүҙү - Бисмилләһ<br>* Фатиха сүрәһе<br>* Бер сүрә<br>* Рөкүғ<br>* Сәждә | * Бисмилләһ<br>* Фатиха сүрәһе<br>* Бер сүрә<br>* Рөкүғ<br>* Сәждә<br>* Әт-тәхиәт | * Бисмилләһ<br>* Фатиха сүрәһе<br>* Бер сүрә<br>* Такбир<br>* Ҡунут доғаһы<br>* Рөкүғ<br>* Сәждә<br>* Әт-тәхиәт<br>- Салауат<br>- Раббәнә<br>* Сәләм | |

# НАМАҘҘАН ҺУҢ УҠЫЛАСАҠ ДОҒА ҺӘМ ТӘСБИХТАР

Һәр намаҙҙың сәләменән һуң:

اَللَّهُمَّ أَنْتَ السَّلاَمُ وَمِنْكَ السَّلاَمُ تَبارَكْتَ
يَا ذَاالْجَلاَلِ وَالْاِكْرَام

“Аллааһүммә әнтәс-сәләәмү үә минкәс-сәләәмү тәбәәрактә йәә ҙәл-джәләәли үәл икраам”, - тип әйтәбеҙ һәм,

سُبْحَانَ اللّٰهِ وَالْحَمْدُ لِلّٰهِ وَلاَ إِلٰهَ إِلاَّ اللّٰهُ وَاللّٰهُ أَكْبَرُ
وَلاَ حَوْلَ وَلاَ قُوَّةَ إِلاَّ بِاللّٰهِ الْعَلِيِّ الْعَظِيمِ

“Сүбхәәналлаһи үәлхәмдүлилләәһи үә ләә иләәһә илләллааһу үәллааһү әкбәр. Үә ләә хәүлә үә ләә ҡуүәтә илләә билләәһил-ғәлийил-ғаҙыийм”, - тип өҫтәйбеҙ.

“Әғүүҙү билләәһи минәш-шәйтаанир-рраджиим. Бисмилләәһир-рахмәәнир-рахиим”, - тип әйткәндән һуң “Аятел-Көрси” аятын уҡыйбыҙ.

33 سُبْحَانَ اللّٰه Сөбхәнәллаһ, 33 اَلْحَمْدُ لِلّٰه Әлхәмдүлилләһ һәм 33 اَللّٰهُ أَكْبَرُ Аллаһу әкбәр, тип тәсбих тартабыҙ:

لاَ إِلٰهَ إِلاَّ اللّٰهُ وَحْدَهُ لاَ شَرِيكَ لَهُ الْمُلْكُ وَلَهُ
الْحَمْدُ وَهُوَ عَلَي كُلِّ شَيْءٍ قَدِيرٌ
سُبْحَانَ رَبِّيَ الْعَلِيِّ الاَعْلَي الْوَهَّابِ

“Лә иләәһә илләллааһу үәхдәһу лә шәриикә ләһ. Ләһүл-мүлкү үә ләһүл-хәмду үә һүүә ғәләә күлли шәйин ҡадиир, Сүбхәәнә раббийәл-ғалийил-әғләл-ваһһаб” доғаһын уҡығандан һуң, ике ҡулдарҙың да устарын күкрәк тапҡырына күтәреп, бармаҡ остарын күккә йүнәлтеп, Аллаһҡа доға ҡылабыҙ, устар менән битте һыпырабыҙ.

Намаҙҙарҙан һуң, Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) тәҡдим иткәнгә таянып, доға ҡылабыҙ:

Йәә Аллаһым! Ер һәм Күктәрҙе күҙәтеүсе, ундағы тереклекте хәстәрләүсе тик Һине генә маҡтайым, Һине генә данлайым, ололайым!

Маҡтауҙарыбыҙ булһын Һиңә! Һин - Хәҡиҡәт, Һинең вәғәҙәң - хәҡиҡәт, Һине күреү - хәҡиҡәт, Һинең һүҙең – хәҡиҡәт, Йәннәт - хәҡиҡәт, Йәһәннәм - хәҡиҡәт, пәйғәмбәрҙәр (ғәләйһис-сәләм) - хәҡиҡәт, Мөхәммәт (салләллааһу ғәләйһи үә сәлләм) - хәҡиҡәт, Ҡиәмәт көнө - хәҡиҡәт!

Йәә Раббым! Һинең ҡушҡандарыңды үтәп, тыйғандарыңдан тыйылып, тик Һиңә генә һыйындым! Тик Һиңә генә таяндым! Һиңә генә ышандым! Йөҙөмдө һәм йәнемде, йөрәгемде тик Һиңә генә йүнәлттем!

Йәә Раббым! Минең намаҙымды шикһеҙ ҡабул ит инде! Һин бит бар нәмәне Ишетеүсе, бөтөн нәмәне Белеүсе!



Йәә Аллаһым! Минең белеп тә, белмәй ҙә эшләгән гонаһтарымды ярлыҡа! Һин Үҙең генә яҡшы белгән йәшерен гонаһтарымды ла кисер!

Йәә Раббым! Минең шаярып һәм ысынлап, хаталанып һәм белеп - ниәтләп ҡылғандарын да ярлыҡа!

Йәә Раббым! Һине һәр саҡ иҫемдә тоторға, биргән ниғмәттәреңә шөкөр итеп, тик Һиңә генә хеҙмәт итергә насип ит!

Йәә Раббым! Минең һәр эшемдең башы булған дин юлынан тайпылмаҫҡа насип әйлә, уға ҡарата хаталар ебәреүҙән арала. Ошо йәшәгән донъяла эштәремдең яҡшы барыуына, ҡайтаһы Мәңгелек донъямда яҡшы яҙмышҡа эйә булырға ярҙам ит! Фанилыҡта ҡалған ғүмеремдә тик изгелектәр генә эшләргә мөмкинлек бир!

Йәә Раббым! Берҙәмлекте, татыулыҡты емерә торған эштәрҙән һәм ҡылыҡтарҙан, ике йөҙлөлөктән, әхлаҡһыҙлыҡтың бар төрөнән дә арала.

Йәә Аллаһым! Беҙҙе дөрөҫ юлдарҙан алып бар. Ҡәлбемде, йөрәгемде, әхлағымды таҙартып, иң гүзәлдәрҙән ит! Хәрәмдән алыҫ тот!

Йәә Раббым! Насар ғәҙәттәрҙән, Һин тыйған яуыз эштәр эшләүҙән, иманымдың, ышанысымдың яңылышыуынан, аҙашыуынан ҡурҡып, Һиңә һыйынам, Һинән ярҙам өмөт итәм!

Йәә Раббым! Фәҡирлектән, аҙғынлыҡ һәм боҙоҡлоҡтан, кәмһетелеү һәм мыҫҡыллаңыуҙан, башҡаларҙы йәберләүҙән һәм йәберләнеүҙән яҡлау- ҡурсалау эҙләп Һиңә һыйынам.

Йәә Ғаләмдәр Хужаһы! Һин беҙҙе бар итеүсе, ниғмәттәреңдән өлөш биреүсе! Хисап көнөндә мине һәм минең ата- әсәмде, шулай уҡ барлыҡ һиңә инаныусыларҙы ғәфү ит!

Әмин!



Бер көн Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи уә сәлләм) Муғаҙ бин Жәбәлде ҡулынан тотто һәм: "Әй, Муғаҙ! Аллаһтың исеме менән ант итеп әйтәм, мин һине бик ныҡ һөйәм!" – тине.

Муғаҙ ҙа Пәйғәмбәребеҙгә: "Әй, Аллаһтың Илсеһе! Мин дә һине һөйәм!" - тине. Пәйғәмбәребеҙ дауам итеп шуны әйтте: "Муғаҙ! Һиңә һәр намаҙҙан һуң шул доғаны мотлаҡ уҡыр өсөн тәҡдим итәм:

اللهُمَّ اَعِنِّي عَلَى ذِكْرِكَ وَ شُكْرِكَ وَحُسْنِ عِبَادَتِكَ

"Аллаһым! Һине иҫтә тотоп зекер итеүҙә, ниғмәттәреңә шөкөр ҡылыуҙа, Һиңә лайыҡлы ғибәҙәт башҡарыуҙа миңә ярҙам әйлә!"

(Әбу Дауд, Витр 26)



# НАМАҘҘЫҢ ВӘЖИБТӘРЕ ☺☺☺

Вәжибтәр - намаҙ тулы булһын өсөн, мотлаҡ үтәлергә тейеш ғәмәлдәр. Әгәр белеп, намаҙҙың берәй вәжибен төшөрөп ҡалдырһаң, намаҙ ҡабул булмай. Әгәр онотоп төшөрөп ҡалдырһаң, намаҙҙан һуң ике тапҡыр сәһү сәждәһе эшләнелә.

Намаҙҙың вәжибтәре түбәндәгеләр:

- ☺ Намаҙҙарҙың һәр рәкәғәтендә “Фатиха” сүрәһен уҡыу.
- ☺ Фарыз намаҙҙарының тәүге һәм башҡа намаҙҙарҙың һәр рәкәғәтендә “Фатиха” сүрәһенән һуң тағы бер сүрә уҡыу.
- ☺ “Фатиха” сүрәһен башҡа сүрәләрҙән алда уҡыу.
- ☺ Сәждәлә маңлай һәм танауҙы ергә тейҙереү.
- ☺ Өс һәм дүрт рәкәғәтле намаҙҙарҙа икенсе рәкәғәтенән һуң ултырыу.
- ☺ Беренсе һәм икенсе ултырыуҙа “Әт-Тәхийәт” доғаһын уҡыу.
- ☺ Иртәнге, аҡшам һәм йәстү фарыздарының тәүге ике рәкәғәтендә, йәмәғәт менән ҡылынған йома, байрам, тәрәүих, Рамаҙан айындағы витр намаҙҙарында “Фатиха” һәм башҡа сүрәләрҙе имам ҡысҡырып уҡый. Өйлә һәм икенде намаҙҙарында Ҡөрьән сүрәләре шыбырлап әйтелә.
- ☺ “Фатиха” һәм башҡа сүрәләрҙе уҡығанда, имамға ойоған кешеләрҙең шым тороуы.
- ☺ Тәкбирҙән һуң, витр намаҙында “Ҡунут” доғаһын уҡыу.
- ☺ Намаҙ һуңында уң һәм һул яҡҡа сәләм биреү.
- ☺ “Тәғдили-әркәнде” үтәү, йәки, намаҙҙың һәр өлөшөнә баҫым яһап, тыныс ҡына, урын еренә еткереү.



## Намаҙҙы яңынан уҡы

Бер көндө Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) мәсеткә инә һәм мөйөшкә барып ултыра. Сәхәбәләр уның тирәләй ултырыша. Шул ваҡыт мәсеткә бер үү килеп инә лә намаҙ уҡый башлай. Пәйғәмбәребеҙ уны күҙәтеп тороуын ул һиҙмәй. Намаҙын тамамлағас, ул Пәйғәмбәр янына килә һәм сәләм бирә. Сәләменә яуап биргәс, Пәйғәмбәр (салләллаһу ғәләйһи үә сәләм) уға былай ти: “Бар, намаҙыңды яңынан ҡыл! Һин уны ҡылманың”.

Әҙәм йәнә барып намаҙ ҡыла. Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәләм) йәнә әйтә: “Бар, намаҙыңды яңынан ҡыл! Һин уны ҡылманың”. Был хәл өс тапҡыр ҡабатлана. Шунан әҙәм Пәйғәмбәребеҙгә мөрәжәғәт итә: “Һине ебәргән Аллаһ менән ант итәм, мин башҡаса ҡыла белмәйем. Дөрөҫ итеп ҡылырға өйрәт әле мине”.

Шунан Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) уны өйрәтә: “Намаҙға баҫҡас, тәкбир әйт. Аҙаҡ Ҡөрьәндән үҙең булдыра алғанса аяттар уҡы. Һуңынан рөкүғ ҡыл. Шул хәлдә бер аҙ ҡуҙғалмай тор. Өс тапҡыр: “Сүбхәәнә Раббийәл-ғаҙыиим” тип, турайып баҫ. Һуңынан сәждәгә кит. Шул килеш бер аҙ ҡуҙғалмай тор. “Сүбхәәнә Раббийәл-әғлә” тип ултыр. Ултырған килеш бер аҙ тор. Намаҙҙың бөтә рәкәғәттәрен шул рәүешле ҡыл”. (Бохари, Аҙан, 95; Мөслим, Саләт, 45; Тирмиҙи, Саләт, 110)

# НАМАҘҘЫҢ СӨННӘТТӘРЕ ☺☺

- ☺ Биш ваҡыт намаҙ алдынан һәм йома намаҙы алдынан аҙан әйтеү. Фарыз намаҙҙары алдынан ҡамәт төшөрөү.
- ☺ Беренсе тәкбирҙән һуң, эстән генә “Сүбхәнәкә” доғаһын уҡыу.
- ☺ Беренсе рәкәғәттә “Фатиха” сүрәһе алдынан “Әғүүҙү билләәһи минәш-шайтаанир-раджиим. Бисмилләәһир-рахмәәнир-рахиим”, башҡа рәкәғәт-тәрҙә “Фатиха” сүрәһе алдынан “Бисмилләәһир-рахмәәнир-рахиим” тип әйтеү.
- ☺ “Фатиха” сүрәһенән һуң, тауышһыҙ “Әмин!” тиеү.
- ☺ Рөкуғта һәм сәждәлә тәсбихтәрҙе иң әҙе өс мәртәбә әйтеү.
- ☺ Рөкуғта “Сүбхәәнә раббийәл-ғаҙыиим”, сәждәлә “Сүбхәәнә раббийәл-әғлә” тиеү.
- ☺ Ҡыям, рөкуғ һәм сәждә араһында тәкбир әйтеү.
- ☺ Рөкуғтан “Сәмиғаллаһу лимән хәмидәһ” тип турайып баҫҡас, “Рәббәнә ләкәл-хәмде” тип әйтеү.
- ☺ Һуңғы тәшәһһүдтән һуң, Пәйғәмбәребеҙгә “Салауат” әйтеү һәм “Рәббәнә” доғаларын уҡыу.



## НАМАҘҘЫҢ ӘҘӘПТӘРЕ

Һәр намаҙҙың үтәлеү тәртибе һәм әҙәбе бар. Уларҙы үтәгәндә, намаҙыбыҙ тулы һәм күркәм була. Бына уларҙың бер нисәүһе:

☺ Ҡыямда торғанда, сәждәгә китәсәк урынға, рөкүғта - аяҡтарға, ултырғанда – тубыҡтарға, сәләм биргәндә - иңбаштарға ҡарау.

☺ Рөкүғҡа эйелгәндә, сәждәлә өс һәм таҡ һандарҙа тәсбих әйтеү.

☺ Намаҙҙың башынан алып аҙағына тиклем Аллаһу Тәғәләбеҙ күҙәтеү аҫтында тороуыбыҙҙы иҫтә тотоу.

Бер ғалимдан һорайҙар: “Намаҙҙы нисек хошуғ хәлендә ҡылырға?” Ул шулай ти:

1 - Тик хәләл ризыҡ менән генә туҡланырға,

2 - Тәһәрәт ваҡытында иғтибарлы булырға, намаҙға әҙерләнеүеңдә иҫтә тоторға,

3 - Беренсе тәкбир ваҡытында Аллаһ ҡаршында тороуыңды тойоу һәм бөтә намаҙҙы шул хис менән ҡылыу,

4 - Намаҙҙан тыш та Аллаһ хаҡында, Уның беҙҙе күреп тороуы хаҡында һис ҡасан онотмау.



## НАМАҘҘЫҢ МӘКРУҺТАРЫ ☹☹

Намаҙҙа Аллаһу Тәғәләбеҙ күҙәтеү аҫтында тороуыбыҙҙы иҫтә тоторға һәм уны Аллаһу Тәғәлә Илсеһе өйрәткәнсә уҡырға тырышырға кәрәк. Фарыздарҙы нисек тырышып атҡарабыҙ, вәжиб һәм сөннәт намаҙҙарын да шулай үтәү мотлаҡ. Беҙҙең дин вәжиб һәм сөннәттәрҙең үтәлешенә иғтибарһыҙлыҡты хупламай, ул мәкруһ һанала. Бына төп мәкруһтар:

☹ Намаҙҙа кейем һәм тәнгә тейеү, улар менән уйнау.

☹ Бәҙрәфкә барыуҙы кисектереп, ҡыҫталған мәлдә намаҙ уҡыу.

☹ Йәмәғәт намаҙҙарында, сафтарҙа урын булып та, айырым баҫып тороп уҡыу.

☹ Алдыңдан берәй кеше йәки йән эйәһе үтеүе ихтималынан һаҡланып, кәртә (сүтрә) ҡуймайынса уҡыу.

☹ Рөкүғ һәм сәждәлә тәсбихтәрҙе әйтмәү йәки өсәүҙән кәм әйтеү.

☹ “Фатиханан” һуң уҡыласаҡ сүрәләрҙе Ҡөрьәндә килгән сиратында уҡыуға иғтибар итмәү. (Мәҫәлән, намаҙҙа “Кәүҫәр” һәм “Ихлас” сүрәләрен уҡығанда, беренсе рәкәғәттә “Кәүҫәр” сүрәһе, икенсе рәкәғәттә “Ихлас” сүрәһе уҡылыр).

☹ Намаҙҙы икенсе кешенең йөҙөнә ҡарап тамамлау.

# НАМАҘҒА КЕМ КИЛГӘН?

Хәлиф Харун Рәшит Рамаҙан айының бер көнөндә Бәхлүл Данаға әйтә:

- Әл-мәғриб намаҙына мәсеткә бар. Киске намаҙҙа кем була, һәммәһен ашҡа саҡыр.

Киске намаҙ ваҡыты етә. Мәсеттә бер рәттән күберәк кеше була. Аҙан тауышы яңғырай. Намаҙҙан һуң Бәхлүл Дана өс-дүрт кеше менән килә. Хәлиф Харун Рәшид аптырай:

- Шулай ғынамы? Мин бит һеҙҙе әл-мәғриб намаҙында булғандарҙың барыһын да һарайҙағы мәжлескә саҡырырға ҡуштым. Шул ҡәҙәр кешенән һеҙ бер нисә кешене алып килгәнһегеҙ.

Бәхлүл шулай яуап бирә:

- Солтаным! Һеҙ бит миңә мәсеткә килеүселәрҙе түгел, намаҙ ҡылыусыларҙы мәжлескә саҡырырға ҡуштығыҙ. Намаҙҙан һуң, мин ишек төбөнә баҫтым һәм сығыусыларҙың һәр береһенән намаҙ ваҡытында имамдың ниндәй сүрә уҡыуы тураһында һораным. Йәмәғәттең күпселеге имамдың ниндәй сүрә уҡыуын иҫкә төшөрә алманы. Мин алып килгәндәр генә хәтерләй алды. Мәсеткә килеүселәр күп булды, әммә ысын намаҙ ҡылыусылар ошолар ғына. Һәм мин, һеҙҙең әмерегеҙ буйынса, уларҙы һарайға алып килдем.

Әйҙәгеҙ, намаҙҙарыбыҙҙы буйһоноусанлыҡ менән ҡылайыҡ.



## Әйҙәгеҙ, намаҙҙарыбыҙҙы буйһоноусанлыҡ менән ҡылайыҡ

Беҙгә ниндәйҙер эш оҡшай икән, уны үтәгәндә, ҙур теләк һәм ҡыҙыҡһыныу менән башҡарабыҙ. Ҡайһы саҡта шул хәтлем бирелеп эшләйһең, хатта кемдер саҡырғанын да ишетмәйһең. Тирә-яҡта нимәләр булғанына ла иғтибар бирмәйһең.

Хошуғ - ул бөтә донъяуи хәлдәрҙән, уйҙарҙан, хистәрҙән арынып, Аллаһу Тәғәләбеҙ күҙәтеүе аҫтында тороуыбыҙҙы иҫтә тотоп, күңел йомшарып, түбәнселекле хәлдә намаҙ уҡыу ул.

Яраткан кешеләребеҙ менән аралашҡан саҡта, ваҡыттың үткәнен дә һиҙмәй ҡалабыҙ. Унын ҡыҫҡалағына зарланып уфтанабыҙ. Дуҫтар менән аралашҡан мәлдә башҡа эштәр менән шөғөлләнеү насар, йәмһеҙ күренеш икәнен дә беләбеҙ.

Шуның һымаҡ, намаҙҙа ла Аллаһ менән аралашҡанда, сит нәмәләр хаҡында уйлау һәм

Уға ҡарата иғтибарһыҙлыҡ күрһәтеү ярамаған эш. Намаҙ ваҡыты эш, мәктәп, өй, ғаилә, дуҫтар, һәм башҡа эштәр менән бәйле проблемаларҙы уйлау, ниндәйҙер эштәрҙе планлаштырыу өсөн бирелмәгән.

Ҡиблаға табан йөҙөбөҙҙө борғас та, йөрәгебеҙҙе Аллаһу Тәғәләгә таба йүнәлтергә, Уға тапшырырға тейешбеҙ. Уҡыған аяттарыбыҙҙың мәғәнәһен уйлап йәки бар ғаләмдәр Хужаһының күҙәтеүе аҫтында икәнебеҙҙе онотмай намаҙ уҡыу - Уға ҡарата оло хөрмәтебеҙҙе белдерә.

Аллаһыбыҙ алдында баҫып, телебеҙ Ул төшөргән аят-сүрәләрҙе уҡып, доғалар ҡылған саҡта, башҡа төр эштәр беҙҙе борсомаҫҡа тейеш. Аҙаҡтан ул беҙҙән: “Әй Минең ҡолом! Мин һинең менән бергә булғанда, һин кем менән инең?” тип һораһа, ни тип яуап бирербеҙ?

Шуның өсөн, һәр намаҙҙы ике дуҫтың, Хужаһы менән ҡолдоң осрашыу ваҡыты тип ҡабул итергә кәрәк. Намаҙҙы “тиҙерәк бушатырға кәрәк” тигән ауыр йөк һымаҡ түгел, ә уға булған оло мөхәббәтебеҙҙе сағылдырған осрашыу ваҡыты итеп үтәһәк, хошуғ хәленә ирешербеҙ

**Аллаһу Тәғәлә бойора:**

“Һис шикһеҙ, хошуғ менән намаҙ ҡылыусы мөьминдәр ҡотолоуға ирештеләр”.

(Мөьминүн сүрәһе, 1-2-се аяттар)

**Аллаһу Тәғәлә бойора:**

“Әй, иман килтергән әҙәмдәр, сабыр-түҙем булып, намаҙ уҡып, Аллаһтан ярҙам һорағыҙ. Хаҡтыр, Аллаһ түҙем кешеләр менән бергә”.

(Баҡара сүрәһе, 153-сө аят)

Намаҙҙы башлағанда, Аллаһтың бөйөклөгө хаҡында уйлайбыҙ һәм “Аллаһу Әкбәр” тип әйтеп, Аллаһ ҡаршына баҫабыҙ. Ҡулдарыбыҙҙы бағлап, Аллаһ алдында күндәм торабыҙ. Аяттарҙы уҡығанда йәки имамдың уҡығанын тыңлағанда, шулар аша Аллаһтың беҙҙең менән һөйләшеүе хаҡында уйлайбыҙ. Аллаһтың бөйөклөгөн иҫтә тотоп, рөкүғҡа эйеләбеҙ. Хөрмәт менән торайып, бөтә тәнебеҙ, бөтә асылыбыҙ менән Аллаһ алдында сәждәгә китәбеҙ. Аллаһҡа бик яҡын тороуыбыҙҙы иҫтә тотоп әйтәбеҙ: “Субхәәнә раббийәл-əғлəə” (Раббымды пак тип беләм). Барлыҡҡа килеүебеҙҙең маҡсаты Аллаһҡа хеҙмәт итеү һәм ололау икәнлеге тураһында, уның өсөн йәнебеҙҙе лә фиҙа ҡылырға әҙер булыуыбыҙ тураһында уйлайбыҙ. Башҡа рәкәғәттәрҙе лә шундай уҡ хистәр менән ҡылабыҙ. Аҙаҡ, Аллаһтың мәрхәмәтенә сикһеҙ мохтажлығыбыҙҙҙы аңлап, “әт-Тәхиййәт”, “Салли”, “Бәрик”, “Раббәнәә әәтинә” доғаларын, салауаттарын уҡыйбыҙ. Раббыбыҙға яҡынайтыусы ғибәҙәт ҡылыуыбыҙға шатланып, уңдағы, һулдағы фәрештәләргә һәм кешеләргә сәләм бирәбеҙ һәм шул рәүешле намаҙҙы тамамлайбыҙ.

# НАМАҘҘЫ БОҘОУСЫ СӘБӘПТӘР

- Намаҙҙа тәһәрәттең боҙолоуы.
- Намаҙҙың фарызы үтәлмәүе.
- Намаҙҙа ашау һәм эсеү.
- Намаҙ уҡығанда, кем менәндер һөйләшеү йәки кемделер сәләмләү.
- Намаҙ уҡығанда, донья хәлдәрен уйлап көрһөнөү йәки илау (Аллаһты яратып һәм Унан ҡурҡып илау намаҙҙы боҙмай).
- Башҡалар ишетерлек итеп көлөү һәм һөйләшеү тәһәрәтте лә, намаҙҙы ла боҙа).
- Кәүҙәне сәбәпһеҙ Ҡибланан ситкә йүнәлтеү.
- Күҙәтеүселәр күңелендә "был намаҙ уҡымай икән", тигән тәьҫир ҡалдырғандай үҙенде тотоу.
- Ҡөрьән аяттарының мәғәнәһен боҙоп, хата менән уҡыу.
- Ҡояш ҡалҡҡан ваҡытта Иртәнге намаҙҙы уҡыу.

## Уйынына ҡамасаулағым килмәне

Өйлә намаҙы ваҡыты ине, бәлки, икенде ваҡыты булғандыр. Елкәһенә ейәндәре Хәсән һәм Хөсәйенде ултыртып, Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) мәсеткә инә. Ул михрабҡа килә, Хәсән һәм Хөсәйенде иҙәнгә төшөрә, тәкбир әйтә һәм намаҙ уҡый башлай. Сәхәбәләр уның артына намаҙға баҫа. Пәйғәмбәр Әфәнде сәждәне ғәҙәттәгенән оҙағыраҡ ҡыла. Был ваҡытта ейәндәренең береһе елкәһенә атланған була. Намаҙ бөткәс, сәхәбәләр һорай:

"Әй Рәсүлуллаһ! Һеҙ сәждәне бик оҙаҡ ҡылдығыҙ, беҙ, бер-бер хәл булдымы, әллә Һеҙгә үәхи инә башланымы, тип уйланыҡ". Быға Пәйғәмбәр шулай тип яуап бирә:

**"Бер нәмә лә булманы. Тик ейәнем намаҙ ваҡытында елкәмә атланды. Ул төшкәнсе, мин сәждә хәлендә торҙом. Ашыҡманым, сөнки уйынына ҡамасаулағым килмәне"** (Нәсәи, Татбиҡ, 82).



# ЙӘМӘҒӘТ НАМАҘЫНЫҢ ҠИММӘТТӘРЕ

### “Имам” һәм “йәмәғәт” һүҙҙәре нимә аңлата?

Намаҙҙы етәкләгән һәм алып барған кеше “имам” була. Уның артынан намаҙ уҡыған кешеләрҙе “йәмәғәт” тип әйтәләр.

### Ни өсөн мәсетте “Аллаһ Йорто” тип атайҙар?

Мәсет - ул мосолмандарҙың бергә йыйылышып, йәмәғәт менән намаҙ ҡылыу урыны. Бындай биналарҙы “Бәйтуллаһ - Аллаһ Йорто” тип әйтәләр, сөнки унда мосолмандар Аллаһу Тәғәләгә ғибәҙәт ҡыла, Уға хеҙмәт итә һәм намаҙ уҡый.

### Йәмәғәт намаҙҙарының өҫтөнлөгө нимәлә?

Аллаһтың Илсеһе һәр ваҡыт йәмәғәт менән бергә намаҙ уҡыған, беҙгә лә шуны үтәргә тәҡдим иткән. Ул йәмәғәт менән уҡыған намаҙҙарҙың яңғыҙ уҡыған намаҙҙарға ҡарағанда 27 тапҡыр өҫтөнөрәк икәнлеген һәм шул саҡлы әжере буласағын хәбәр иткән. Пәйғәмбәребеҙ йәмәғәт намаҙҙарынан ситләшеүҙе, уны ҡалдырыуҙы хупламаған. Йәмәғәт менән бергә булыуҙы мосолмандарҙың иң гүзәл һыҙаты тип һанаған.

Аллаһ Илсеһе, кем ентекләп тәһәрәт алып, намаҙ уҡыр өсөн мәсеткә бара, уның атлаған һәр аҙымы һайын бер гонаһы юйылыуын һәм һәр атлаған аҙымына бер сауап яҙылыуы хаҡында изге хәбәр еткерҙе.

**Һөйөклө Пәйғәмбәребеҙ әйткән:**

“Йәмәғәт менән ҡылынған намаҙ яңғыҙ башыңа ҡылынған намаҙҙан егерме ете дәрәжәгә артыҡ!”

(Бохари, Аҙан, 30)

### Йәмәғәт намаҙы нимә бирә?

Йәмәғәт намаҙҙары мосолмандар араһында бер-береһен яратыу, яҡын күреү, хөрмәт итеү, туғанлыҡ хистәрен уята. Улар бергә намаҙ уҡый, бер-береһенең эштәре, хәлдәре тураһында белешә, бер-береһенә ярҙам итә.

Мәсеттә тыңланған өгөт-нәсихәттәр, вәғәз һәм әңгәмәләр барышында Аллаһ тарафынан диндә булған тыйыу һәм бойороуҙар, Уның әмерҙәре менән танышабыҙ. Һөйөклө Пәйғәмберебеҙ, уның әхлағы хаҡында тағы ла тәрәнерәк мәғлүмәт алабыҙ, белемебеҙҙе арттырабыҙ. Аллаһу Тәғәләгә бергәләп ғәмәл ҡылыуҙан оло шатлыҡ, күңелдә тыныслыҡ тоябыҙ. Беҙҙе тирә-яҡтан фәрештәләр уратып ала, Аллаһыбыҙҙан шәфәғәт, мәрхәмәт, бәрәкәт, рәхмәт төшә. Ул йәмәғәт менән ҡылған ғәмәлдәрҙе ярата, йәмәғәт менән башҡарған

**Һөйөклө Пәйғәмбәребеҙ әйткән:**

“Һис шөбһә юҡ, намаҙҙан иң күп сауап аласаҡ кеше - ул мәсеткә йыраҡтан йәйәү килеүсе кеше! Имам менән бергә намаҙ ҡылыуҙы көткән кешенең сауабы яңғыҙ башы намаҙ ҡылып йоҡларға ятҡандың сауабынан байтаҡ күп”.

(Бохари, Аҙан, 31)

**Һөйөклө Пәйғәмбәребеҙ әйткән:**

“Бер кеше, өйөндә ентекләп тәһәрәт алып, Аллаһтың фарыздарының бер фарызын (намаҙҙы) үтәр өсөн берәй мәсеткә китһә, йөрөгән һәр аҙымы бер гонаһты юйыр, икенсеһе уны бер дәрәжәгә күтәрер!”

(Мөслим, Мәсәжид, 282)

намаҙҙар аша беҙҙең намаҙ ваҡытындағы хаталарыбыҙҙы ярлыҡай.

### Намаҙҙағы рәттәрҙе нисек төҙөргә?

Намаҙ алдынан иң беренсе рәттәргә ирҙәр, уртала малайҙар, һуңғы рәттә ҡатын-ҡыҙҙар сафҡа баҫа. Әгәр бер генә кеше булһа, ул имам артынан уң яҡтан тора.

Намаҙ ваҡытында кешеләр араһында бушлыҡ ҡалмаҫҡа, улар бер-береһенә яҡын торорға, рәттәр тигеҙ булырға тейеш. Алғы сафтарҙа урын булып та, артҡы рәттәргә баҫыу дөрөҫ түгел.

Аллаһ Илсеһе былай тип өйрәткән: *“Сафтарҙы тигеҙ тотоғоҙ. Яурындар бер кимәлдә булһын. Арағыҙҙа бушлыҡтар, аралыҡтар ҡалдырмағыҙ. Рәттәрҙе тигеҙләр өсөн ҡулығыҙҙан тартҡан ҡәрҙәштәрегеҙ менән яҡшы, йомшаҡ мөғәмәләлә булығыҙ. Аралыҡтар ҡалған бушлыҡҡа шайтан инеп урынлашыуы ихтимал. Кемдәр сафтарҙы тығыҙ тота, уны Аллаһ шатландырасаҡ. Кем киреһенсә эшләй, уларға Аллаһ шәфәғәт ҡылмаясаҡ”* (Әбү Дауыт, Саләт 93).

Намаҙҙа рәттәрҙе тигеҙ тотоу намаҙ шарттарының береһе икәнлеген ул һәр саҡ хәтерләтеп торған. Үҙе сафтар араһынан үтеп, тигеҙләп йөрөгән. *“Берегеҙ яҡын, икенсегеҙ алыҫ тормағыҙ, аҙаҡ йөрәктәрегеҙ ҙә бер - берегеҙҙән айырылып торасаҡ”, - тип аңлатҡан ул* (Әбү Дауыт, Саләт 93).

### Йәмәғәт намаҙҙарының хөкөмө.

Йома намаҙын йәмәғәт менән уҡыу фарыҙ, башҡа намаҙҙарҙы йәмәғәт менән башҡарыу сөннәт-мүәккәҙә һанала. Сәбәпһеҙ йәмәғәт намаҙҙарын ҡалдырыу Аллаһ Илсеһенең сөннәтенә тап килмәй.

## Мәсеткә йөрөү әҙәбе

Иғтибар итеү тейешле:

- Мәсеткә тәһәрәтле көйө уң аяҡтан инеү кәрәк.
- Мәсеттән һул аяҡ менән сығыу тейешле.
- Мәсет келәмдәренә бысраҡ аяҡ йәки ойоҡбаш менән баҫырға ярамай.
- Башҡаларға уңайһыҙлыҡтар тыуҙырмаҫ өсөн, мәсеткә һуған, һарымһаҡ, тәмәке еҫе аңҡытып инергә ярамай.
- Мәсеттә аяҡты һуҙып ултырыу, ҡысҡырыу, шаулау, юҡ-бар хәбәр һөйләү - әҙәпһеҙлек.
- Әгәр мәсеттә Ҡөрьән уҡылһа йәки вәғәз һөйләнелһә, иғтибар һәм ихтирам менән тыңлау кәрәк.
- Мәсеткә һуңлап килгән осраҡта, кешеләрҙе бимазалап алға үтергә ярамай, ҡайҙа урын бар, шунда ултырырға кәрәк.



### Йәмәғәт намаҙҙары нисек ҡылына?

Имам йәмәғәт намаҙы алдынан, йәмәғәт намаҙын үтәр өсөн имам булам, тип ниәт ҡыла. Имам артынан намаҙ уҡыусылар, имам артынан ойорға, тип ниәтләй.

Миҫал өсөн, йәмәғәт менән Өйлә намаҙының фарызы нисек уҡылыуын ҡарап үтәйек:

1) Башта ниәт ҡылына: “Иләһи, ниәт ҡылдым, йәмәғәт менән бөгөнгө өйлә намаҙымдың фарызын Һинең ризалығың өсөн үтәмәккә”.

2) Имам йәмәғәт ишетерлек итеп “Аллаһу әкбәр!”, тип әйткәндән һуң, эстән генә тәкбир әйтеп, намаҙыбыҙҙы башлайбыҙ. (Имамдың һәр әйткән тәкбирен эстән генә ҡабатлайбыҙ).

3) Тәкбирҙән һуң, ҡулдарҙы ҡуйып, “Сүбхәнәкә” не уҡып шымып, туҡтап торабыҙ. Ҡыямда торғанда, башҡа рәкәғәттәрҙә бер нимә лә уҡымайбыҙ. (Имам ҡысҡырып уҡыған “Фатиха” сүрәләренән һуң, шыбырлап ҡына “Әмин” тип әйтәбеҙ).

4) Рөкуғта торғанда, өс мәртәбә “Сүбхәнә раббийәл-ғаҙыйм” тиелә. Имам рөкуғтан “Сәмиғаллаһу лимән хәмидәһ” тип, турайып баҫып, “Рәббәнә ләкәл-хәмде” тип әйткәндән һуң, беҙ ҙә уны ҡабатлайбыҙ.

5) Сәждәлә өс тапҡыр “Сүбхәнә раббийәл-әғлә” тип әйтәбеҙ.

6) Әттәхиәттә ултырғанда, имам кеүек, “Әт-тәхиәт”, “Салауат (Салли һәм Бәрик)”, “Раббәнә” доғаларын уҡыйбыҙ һәм унын һымаҡ итеп, ике яҡҡа сәләм бирәбеҙ.

Йәмәғәт намаҙҙарын уҡығанда, имам артынан ғына ҡабатлайбыҙ, унан алда бер ниндәй доға ла уҡылмай, хәрәкәттәр ҙә эшләнмәй.

### Йәмәғәт намаҙына һуңлаған кешене нисек итеп намаҙын атҡара?

Әгәр намаҙға һуңлаһаҡ, имам сәләм биргәндән һуң ғына, уҡылмай ҡалдырған рәкәғәттәрҙе уҡыйбыҙ. Имамдың рөкуғтан турайыуына тиклем өлгөрһәк, ул рәкәғәт уҡылғанға һанала. Был рәкәғәтте яңынан уҡырға кәрәкмәй.

Намаҙҙың икенсе рәкәғәтендә килеп ҡушылһаҡ, һуңғы ултырышта “Әттәхийәт”те уҡыйбыҙ ҙа, имамдың сәләм биргәнен көтәбеҙ. Шунан баҫабыҙ ҙа беренсе рәкәғәтте түбәндәгесә үтәйбеҙ:

| Беренсе рәкәғәт |
|---|
| * Сүбхәнәкә |
| * Әғүүҙү - Бисмилләәһ |
| * Фатиха сүрәһе |
| * Бер сүрә |
| * Рөкуғ |
| * Сәждә |
| * Һуңғы ултырыш<br>- Әт-тәхиәт<br>- Салауат<br>- Раббәнә |
| * Сәләм |



Әгәр өсөнсө рәкәғәткә килеп ҡушылһаҡ, имам сәләм биргәндән һуң баҫабыҙ һәм тәүге ике рәкәғәтте түбәндәгесә уҡыйбыҙ:



| Беренсе рәкәғәт | Икенсе рәкәғәт |
|---|---|
| * Сүбхәнәкә<br>* Әғүүҙү - Бисмилләәһ<br>* Фатиха сүрәһе<br>* Бер сүрә<br>* Рөкүғ<br>* Сәждә | * Бисмилләәһ<br>* Фатиха сүрәһе<br>* Бер сүрә<br>* Рөкүғ<br>* Сәждә<br>* Һуңғы ултырыш<br>- Әт-тәхиәт<br>- Салауат<br>- Раббәнә<br>* Сәләм |

Әгәр дүртенсе рәкәғәткә килеп ҡушылһаҡ, имам сәләм биргәндән һуң, баҫабыҙ һәм тәүге өс рәкәғәтте түбәндәгесә уҡыйбыҙ:

| Беренсе рәкәғәт | Икенсе рәкәғәт | Өсөнсө рәкәғәт |
|---|---|---|
| * Сүбхәнәкә<br>* Әғүүҙү - Бисмилләәһ<br>* Фатиха сүрәһе<br>* Бер сүрә<br>* Рөкүғ<br>* Сәждә<br>* Тәүге ултырыш<br>- Әт-тәхиәт | * Бисмилләәһ<br>* Фатиха сүрәһе<br>* Бер сүрә<br>* Рөкүғ<br>* Сәждә | * Бисмилләәһ<br>* Фатиха сүрәһе<br>* Рөкүғ<br>* Сәждә<br>* Һуңғы ултырыш<br>- Әт-тәхиәт<br>- Салауат<br>- Раббәнә<br>* Сәләм |

Әгәр киске намаҙҙың өсөнсө рәкәғәтенә килеп ҡушылһаҡ, имам сәләм биргәндән һуң, баҫабыҙ һәм тәүге ике рәкәғәтте түбәндәгесә уҡыйбыҙ:

| Беренсе рәкәғәт | Икенсе рәкәғәт |
|---|---|
| * Сүбхәнәкә<br>* Әғүүҙү - Бисмилләәһ<br>* Фатиха сүрәһе<br>* Бер сүрә<br>* Рөкүғ<br>* Сәждә<br>* Тәүге ултырыш<br>- Әт-тәхиәт | * Бисмилләәһ<br>* Фатиха сүрәһе<br>* Рөкүғ<br>* Сәждә<br>* Һуңғы ултырыш<br>- Әт-тәхиәт<br>- Салауат<br>- Раббәнә<br>* Сәләм |

Әгәр ниндәйҙер намаҙҙың һуңғы рәкәғәтенең рөкүғынан һуң килеп ҡушылһаҡ, имам сәләм биргәс торабыҙ һәм бөтөн рәкәғәттәрҙе лә яңғыҙ атҡарабыҙ.

# ЙӘМӘҒӘТ НАМАҘЫНЫҢ ТӨРҘӘРЕ

## А. ЙОМА НАМАҘЫ

Йома мосолмандарҙың байрам көнө һанала. Ул көндө мәсеттә осрашабыҙ, бер-беребеҙҙең хәл-әхүәлен һорашабыҙ, һаулыҡтарын белешәбеҙ. Дин ҡәрҙәштәребеҙҙең килеп сыҡҡан проблемаларын тыңлайбыҙ, ярҙам итергә тырышабыҙ.

### Йома намаҙында нисә рәкәғәт һәм уларҙы ҡасан атҡарабыҙ?

Беҙҙең динебеҙ мосолмандарға, намаҙ ваҡыты етеү менән, булған эштәрҙе ҡалдырып, йома намаҙына ашығырға бойора. Йома намаҙын уҡыр өсөн, имам һәм өс кешенән торған йәмәғәт кәрәк.

Йома намаҙы 10 рәкәғәттән тора. Ул төштән һуң уҡыла һәм шул уҡ көндөң өйлә намаҙын да алмаштыра, 4 рәкәғәт тәүге сөннәттән, 2 рәкәғәт фарыз һәм 4 рәкәғәт һуңғы сөнәттән тора. Ниндәйҙер сәбәп менән Йома намаҙын уҡымағандар, Өйлә намаҙын уҡыйҙар.

### Йома намаҙы кемдәргә фарыз?

Йома намаҙы бәлиғ булған мосолман ир-егеттәренә фарыз.

### Йома намаҙы кемдәр өсөн фарыз түгел?

Йома намаҙы ҡатын-ҡыҙҙарға, сабыйҙарға, сирлеләргә һәм уларҙы тәрбиәләгәндәргә, мосафирҙарға, зиндандағы тотҡондарға, ике күҙе лә һуҡырҙарға, фалиж һуҡҡандарға һәм аяҡһыҙҙарға Йома намаҙы фарыз түгел. Әммә мәсеткә барып Йома намаҙын уҡыһалар, ул да дөрөҫ булыр, һәм Өйлә намаҙын уҡымаҫҡа ла була.

### Йома намаҙының шарттары?

1. Өйлә ваҡытында уҡылыу.

2. Йома намаҙының фарызынан алда имамдың Хөтбә уҡыуы.

**Аллаһу Тәғәлә бойора:**

“Әй, иман килтергән кешеләр! Йома көндө аҙан әйтелгәс, Аллаһты зикер итергә ашығығыҙ һәм алыш-биреште ҡалдырып тороғоҙ”.

(Джумға сүрәһе, 9-сы аят)

**Аллаһу Тәғәлә бойора:**

“Намаҙ уҡылып бөтөүгә уҡ ҡайһығыҙ ҡайҙа таралығыҙ һәм Аллаһтан ниғмәт һорағыҙ. Аллаһты күп зикер иткән кешенең сәғәҙәткә ирешеүе ихтимал”.

(Джумға сүрәһе, 10-сы аят)

**Һөйөклө Пәйғәмбәребеҙ әйткән:**

“Оло гонаһтар ҡылынмаған саҡта, биш ваҡыт намаҙ намаҙҙар араһында ҡылынған Йома намаҙы ике Йома араһында ҡылынған гонаһтар өсөн кәффарәт!”

(Мөслим, Тәһәрәт, 14)

3. Һәр кемгә инергә рөхсәт булған урында (мәсеттә) уҡылыу.

4. Имамдан башҡа аҡылы камил тағы өс кеше булыуы.

### Йома намаҙын нисек уҡыйбыҙ?

- Мәзин беренсе аҙанды әйтә.
- Йоманың фарызы алдынан 4 рәкәғәт тәүге сөннәте уҡыла.
- Был намаҙ Өйлә намаҙының тәүге сөннәте кеүек уҡыла.
- Унан һуң имам минбәргә менә. Ултыра.
- Мәзин икенсе аҙанды ҡысҡыра.
- Аҙандан һуң, имам тороп баҫа һәм хөтбә уҡый. Йома хөтбәһен һөйләшмәй, сит эштәр менән булмай ғына тыңлау - ул фарыз һанала.
- Хөтбә һәм ҡамәттән һуң, имам артынан уға ойоп, ике рәкәғәт фарыз намаҙын уҡыйбыҙ.
- Йома намаҙының 4 рәкәғәт һуңғы сөннәте үҙаллы уҡыла. Был намаҙ Өйлә намаҙының тәүге сөннәте кеүек уҡыла.
- Аҙағынан тағы алты рәкәғәт намаҙ уҡырға мөмкин.

## Б. БАЙРАМ НАМАҘҘАРЫ

Мосолмандарҙың йыылына ике дини байрамы бар. Ураҙа һәм Ҡорбан байрамдары. Был байрамдарҙа, Аллаһу Тәғәләгә рәхмәтебеҙҙе белдереп, йәмәғәт менән ике рәкәғәт намаҙ уҡыйбыҙ.

### Байрам намаҙҙары кемдәргә вәжиб?

Йома намаҙы фарыз булған кешеләргә байрам намаҙҙары ла вәжиб.

### Байрам намаҙҙары ҡасан уҡыла?

Байрам намаҙҙары, ҡояш ҡалҡып 40-45 минут үткәндән алып, Өйләгә тиклем үтәлә.

### Байрам намаҙҙарын нисек ҡылабыҙ?

Байрам намаҙҙары йәмәғәт менән уҡыла. Аҙан һәм ҡамәт әйтелмәй. Ниәт әйтеп, имамға эйәреп, түбәндәге тәртиптә уҡыйбыҙ:

**Беренсе рәкәғәт:** Тәкбир-ифтитахтан һуң “Сүбхәнәкә”не уҡыйбыҙ. Имамға эйәреп, һәр намаҙҙың башындағыса ҡулдарҙы күтәреп, өс тапҡыр тәкбир әйтәбеҙ. Өсөнсө тәкбирҙән һуң, уң ҡулды һул ҡул өҫтөнә һалабыҙ. Имамдың “Фатиха” һәм башҡа сүрәләрҙе уҡыуын тыңлайбыҙ. Рөкуғ, сәждә һәм ултырыштан һуң, беренсе рәкәғәт тамамлана.

**Икенсе рәкәғәт:** Имам “Фатиха” һәм башҡа сүрәләрҙе уҡый. Уға эйәреп, һәр намаҙҙың башындағыса ҡулдарҙы күтәреп, өс тапҡыр тәкбир әйтәбеҙ һәм ҡулдарҙы аҫҡа төшөрәбеҙ. Дүртенсе тәкбирҙән һуң, ҡулдарҙы күтәрмәй генә рөкуғ, сәждә ҡылабыҙ һәм һуңғы ултырышҡа ултырып намаҙҙы тамамлайбыҙ.



### Байрам хөтбәһе нисек уҡыла?

Байрам хөтбәһе намаҙҙан һуң уҡыла һәм һөйөклө Пәйғәмбәребеҙҙең (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) сөннәте һанала.

Хөтбәлә имам байрамдың мәғәнәһен, әһәмиәтен, мөһимлеген һәм маҡсатын аңлата. Өгөт-нәсихәт, кәңәш һәм күрһәтмәләр бирә. Хөтбә һәм доғаларҙан һуң, мосолмандар бер-береһен тәбрикләйҙәр, байрам менән ҡотлайҙар. Асыуланышҡандары ярашалар, бер-береһен ғәфү итәләр.

### “Тәшрик тәкбире” һүҙенең мәғәнәһе нимәне аңлата?

Тәкбирҙең һүҙҙәре:

اَللّٰهُ أَكْبَرُ اَللّٰهُ أَكْبَرُ لَا إِلٰهَ إِلَّا اللّٰهُ وَاللّٰهُ أَكْبَرُ
اَللّٰهُ أَكْبَرُ وَلِلّٰهِ الْحَمْدُ

“Аллаһу Әкбәр, Аллаһу Әкбәр, ләә иләһә илләллаһу валлаһу Әкбәр, Аллаһу Әкбәр вә лилләһил-хәмд”.

Мәғәнәһе:

“Аллаһ Бөйөк! Аллаһ Бөйөк! Унан башҡа илаһ юҡтыр! Аллаһ Бөйөк! Һәр төрлө маҡтау Аллаһ өсөндөр!”

### Нимә ул тәшрик тәкбире, уны ҡасан әйтәләр?

Ҡорбан байрамы көндәрендә фарыҙ намаҙҙарынан һуң әйтелгән тәкбир “Тәшрик тәкбире” тип атала. Ул Ғәрәфә көнөнөң иртәнге намаҙынан башлана. Байрамдың дүртенсе көнөнөң икенде намаҙына тиклем дауам итә һәм фарыҙдарҙан һуң тәшрик тәкбирҙәрен әйтеү вәжиб булып иҫәпләнә. Йәмәғәт менәнме, яңғыҙмы, ҡатын-ҡыҙмы, ир-атмы йәки мосафир булһа ла һәр фарыҙ намаҙҙан һуң тәшрик тәкбире әйтеү мотлаҡ.

## В. ЙЫНАЗА НАМАҘЫ

Вафат булған дин ҡәрҙәштәребеҙҙең рухына бағышлап намаҙ уҡыу “Йыназа намаҙы” тип атала. Ғәҙәттә, был төр намаҙ йәмәғәт менән уҡыла. Яңғыҙ уҡырға ла мөмкин.

### Йыназа намаҙының хөкөмө.

Йыназа намаҙын үтәү - фарыҙ кифая ул. Мосолмандарҙың бер төркөмө ошо намаҙҙы уҡыһа, улар сауаплы булыр. Уҡымай ҡалған мосолмандарҙан был намаҙҙы уҡыу талап ителмәй. Ә инде йыназа намаҙын берәү ҙә уҡымаһа, ул саҡта был фарыҙдың яуаплылығы һәм үтәмәү гонаһы шул тирәлә йәшәгән бөтә мосолмандарға ята.

### Йыназа намаҙы нисек уҡыла?

Йыназа намаҙының рөкуғы, сәждәһе юҡ. Ул ниәт һәм дүрт тәкбирҙән тора.

Мәйеттең кәүҙәһе алдына саф-саф булып теҙелеп баҫабыҙ. Имамға эйәреп, Аллаһы ризалығы өсөн һәм вафат булған ҡәрҙәшебеҙҙең рухына арнап, намаҙ уҡырға ниәт ҡылабыҙ. Ҡулды күтәреп, беренсе тәкбирҙе әйтәбеҙ. Ҡулдарҙы кендек янына ҡуйып, “Сүбхәнәкә” доғаһын уҡыйбыҙ. Ҡулдарҙы күтәрмәйенсә, икенсе тәкбир әйтелә һәм “Салауат” доғаларын уҡыйбыҙ. Ҡулдарҙы күтәрмәйенсә, өсөнсө тәкбир әйтелә, шунан йыназа доғаһы уҡыла. Белмәгәндәр “Фатиха” сүрәһен йәки үҙе белгән берәй доға уҡый ала. Дүртенсе тәкбир әйткәндән һуң, ҡулдар төшөрөлә, уң һәм һул яҡҡа сәләм биреп, намаҙҙы тамамлайбыҙ.

Йыназа намаҙынан һуң, мәрхүмдең ғаиләһенең, туғандарының, яҡындарының, дуҫтарының оло юғалтыуын һәм ҡайғы-хәсрәттәрен уртаҡлашабыҙ.

**Һөйөклө Пәйғәмбәребеҙ әйткән:**

“Кем йыназа оҙатыуында, йыназа намаҙын ҡылыуға ҡәҙәр ҡатнаша, бер ҡырат, йыназаның ерләнеүенә тиклем унда ҡалһа, ике ҡырат сауап алыр!”
- Ике ҡырат ни ҡәҙәр? – тип һоранылар.
Расүлуллаһ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм):
“Ике бөйек тау тиклем”, - тине.

(Бохари, Жанаиз, 59)

### Г. ТӘРӘҮИХ НАМАҘЫ

Рамаҙан айында йәстү намаҙынан һуң уҡыла торған 20 рәкәғәтлек намаҙҙы Тәрәүих намаҙы тиҙәр. Был намаҙҙы уҡыу ирҙәр һәм ҡатын-ҡыҙҙар өсөн дә сөннәттер. Ниндәйҙер сәбәп менән ураҙа тота алмағандар өсөн дә сөннәт ул.

#### Тәрәүих намаҙын яңғыҙ уҡырға яраймы?

Пәйғәмбәребеҙ тәрәүихте ҡайһы саҡта яңғыҙ, ҡайһы саҡта йәмәғәт менән уҡыған. Был намаҙға бер ваҡытта ла иғтибарһыҙлыҡ күрһәтмәгән.

Хәлиф Ғүмәр заманынан башлап тәрәүих намаҙы йәмәғәт менән уҡыла башлай һәм бөгөнгә көнгәсә дауам итә.

Шулай итеп, тәрәүих намаҙын мәсеттә йәмәғәт менән, өйҙә яңғыҙын да уҡырға мөмкин. Ләкин йәмәғәт менән бергә уҡыуҙың сауабы күпкә өҫтөнөрәк.

#### Тәрәүих намаҙын ҡасан һәм нисек уҡыйбыҙ?

Тәрәүих намаҙы йәсиғ намаҙынан һуң, Витр намаҙынан алда уҡыла. Уны 20 рәкәғәт итеп үтәү сауаплыраҡ. Һәр ике рәкәғәт һайын сәләм бирелә. Дүрт рәкәғәт һайын сәләм бирергә лә була. Улай уҡыһаҡ, икенде намаҙының сөннәте кеүек тамамлайбыҙ (икенсе рәкәғәттән һуң ултырғанда, “Әт-тәхиәт” һәм “Салауат” доғалары уҡыла, ә өсөнсө рәкәғәткә баҫҡанда, “Сүбхәнәкә” доғаһы менән башлана).



Һөйөклө Пәйғәмбәребеҙ әйткән:

“Кем Рамаҙан айының өҫтөнлөгөнә ышанып һәм Аллаһтан сауабын көтөп тәрәүих намаҙын ҡыла, уның гонаһтары ғәфү ителер!”

(Бохари, Иман, 37)



## АУЫРЫУ КЕШЕНЕҢ НАМАҘЫ

#### Ауырыған саҡта, намаҙҙарыбыҙҙы нисек атҡарабыҙ?

Ғибәҙәттәребеҙҙе ваҡытында ҡылып барыу өсөн, беҙҙең гүзәл динебеҙ Исламда бик күп еңеллектәр ҡаралған. Сырхап киткәндә, намаҙҙы баҫып уҡый алмайбыҙ икән, ултырып уҡырға рөхсәт ителә. Ултырырға ла көсө етмәһә, ҡиблаға йөҙө менән боролап, берәй нәмәгә таянып, йә ҡырын ятып, баш хәрәкәттәре һәм күҙ ҡараштары ярҙамында намаҙыбыҙҙы уҡырға мөмкин. Мәҫәлән, рөкүғ һәм сәждәлә ауырыу кеше башын әйеп, күҙ ҡараштары менән ишара яһай. Был има (ым) тип атала.

#### Ауырыған саҡта баш хәрәкәттәре һәм күҙ ҡараштары (има-ым) менән дә намаҙҙы атҡара алмаһаҡ ни эшләргә?

Әгәр ҙә инде ым ярҙамында ла уҡый алмаһаҡ, уны һауыҡҡас, сәләмәтләнгәс ҡаза ҡылабыҙ.

# ЮЛСЫ НАМАҘЫ

Ҡасан юлсы булып һаналабыҙ?

Даими йәшәгән еребеҙҙән 90 саҡрым алыҫлыҡҡа сәфәргә сығып, ун биш көндән әҙерәк ҡалырға ниәтләһәк, юлсы булабыҙ.



Ҡасандан башлап юлсы булабыҙ һәм ҡасанға тиклем юлсы булыуҙан туҡтайбыҙ?

Даими йәшәгән еребеҙҙән 90 саҡрым алыҫлыҡҡа сәфәргә сыҡһаҡ, юлсы һаналабыҙ. Йәшәгән еребеҙгә ҡайтып инһәк, юлсы булыуҙан туҡтайбыҙ.

Юлда нисек намаҙ уҡыйбыҙ?

Сәфәрҙә йөрөгәндә, ҡайһы бер ауырлыҡтар осрағанға күрә, динебеҙ юлсыға еңеллектәр ҙә биргән. Дүрт рәкәғәттән торған Өйлә, Икенде, Йәстү намаҙҙарының фарыздары ике рәкәғәт итеп уҡыла. Ике рәкәғәттән торған Иртәнге һәм өс рәкәғәтле Аҡшам, Витр намаҙҙарын ҡыҫҡартмай уҡыйбыҙ. Ваҡыты булһа, сөннәт намаҙҙарын уҡый, булмаһа уҡымай. Әммә, уҡырға ниәтләгәс, дүрт рәкәғәтлек сөннәт намаҙҙарын да ҡыҫҡартмай үтәп ҡуябыҙ.

Юлда йәмәғәт менән намаҙҙарҙы нисек уҡыйбыҙ?

Әгәр юлаусылар (мосафирҙар) мөҡим булған имамға эйәреп намаҙ уҡыһалар, фарыз намаҙҙарын ҡыҫҡартмайынса, тулыһынса уҡыйҙар.

Имам мосафир булһа, мөҡимдәр нисек намаҙ уҡый?

Әгәр мосафир өйҙә тороусыларға (мөҡимдәргә) имам булһа, дүрт рәкәғәтле фарыздың ике рәкәғәтенән һуң сәләм биреп, намаҙҙы тамамлар. Йәмәғәт сәләм бирмәҫ, мөҡимдәр ҡалған ике рәкәғәтте үҙҙәре уҡып ҡуйыр.

# ҠАЗА НАМАҘЫ

Нимә ул Ҡаза намаҙҙары?

Ниндәйҙер сәбәптәр арҡаһында, үҙ ваҡытында уҡылмай ҡалған намаҙ Ҡаза намаҙы тип атала. Уны аҙаҡ үтәп ҡуйыу фарыз.

Ҡаза намаҙҙарының хөкөмө?

Намаҙҙарҙы үҙ ваҡытында уҡыу фарыз булған кеүек, ҡаза намаҙҙарын да үтәп ҡуйыу фарыз һанала. Намаҙҙы сәбәпһеҙ ҡазаға ҡалдырыу - ҙур гонаһ.

Ҡаза намаҙы нисек уҡыла?

Уҡылмай ҡалған иртәнге намаҙ өйләгә тиклем ҡаза ҡылынһа, сөннәте лә һәм фарызы ла ҡаза ҡылыныр. Өйлә ваҡыты етһә, фарызы ғына үтәлер. Алда ҡалдырылған иртәнге намаҙҙарҙың сөннәттәре уҡылмай. Башҡа намаҙҙарҙың да ҡазаларын үтәгәндә, фарыз һәм витр намаҙҙар ғына ҡаза ҡылына, сөннәттәр ҡаза ҡылынмай.

### Ҡаза намаҙының ниәте нисек әйтелә?

Ҡаза намаҙын уҡыр өсөн ниәт ҡылғанда, ҡайһы намаҙҙың ҡазаһы икәне әйтелә: “Ниәт ҡылдым ваҡытында уҡымай ҡалдырған иртәнге намаҙымдың ике рәкәғәт фарызын үтәмәккә”. Әгәр фарыз намаҙын ниндәй көндәрҙә ҡалдырғанды иҫләмәһәк, ниәт ошолай була: “Ниәт ҡылдым, ваҡытында уҡылмай ҡалған иртәнге намаҙҙарымдың иң һуңғыһына ҡаза ҡылмаҡҡа”.

### Ҡаза намаҙҙарын ҡасан ҡылырға була?

Ҡаза намаҙы өсөн айырым бүленгән ваҡыт юҡ. Уны намаҙ уҡыу тыйылған ваҡыттарҙан (ҡояш сыҡҡанда, күктең иң юғары нөктәһендә торғанда һәм байығанда) тыш тәүлектең теләгән ваҡытында уҡыу мөмкинлеге бар.

## Шайтан беҙҙе намаҙҙан ситләштерергә тырыша

Намаҙ - бөйөк ғибәҙәт. Һәм, әлбиттә, шайтан беҙҙе төрлө юлдар менән унан ситләштерергә ныҡ тырыша. Намаҙ ваҡыты етеп, беҙ намаҙға баҫырға йыйынғанда, ул беҙгә килеп шыбырлай: “Ваҡыт бар әле. Әле һинең эштәрең бик күп. Шуларҙы эшлә... Һин ныҡ арығанһың. Һәм йоҡоң да туймаған. Әҙерәк йоҡлап ал...”

Беҙ намаҙҙы һуңлатһын өсөн, ул бөтә көсөн һала. Ҡайһы саҡ, беҙҙе намаҙҙан ситләштереү өсөн, ул башҡа кешеләрҙе файҙалана. Беҙ кешеләр араһында булғанда, ул шундай уйҙарҙы күңелебеҙгә һалырға тырыша: “Ваҡыт бар әле. Һин әйтәһе һүҙеңде әйт. Дуҫың менән һөйләш, намаҙыңды ул киткәс уҡырһың”. Әгәр беҙ был осраҡта ныҡлы ҡарарға килһәк: “Аллаһ өсөн намаҙ уҡырға кәрәк. Ни ҡәҙәр иртәрәк уҡыһам, шул ҡәҙәр яҡшыраҡ булыр” һәм намаҙға баҫһаҡ, беҙ шайтанды еңербеҙ.

Шайтандың йәнә бер хәйләһе бар - намаҙҙы тиҙләтеү. Ул беҙҙе ашыҡтырырға тырыша: “Һинең эшләйһе эштәрең күп. Шәберәк бул, тиҙерәк намаҙыңды тамамлай һал”. Ул беҙҙең барса эштәребеҙ хаҡында иҫкә төшөрә һәм намаҙыбыҙҙы ашыҡ-бошоҡ тамамлатырға ынтыла. Шул рәүешле ул намаҙ рөкөндәре эҙмә-эҙлелеген боҙоп, рөкүғ рөкүғ, сәждә сәждә ише булмаһын тип тырыша. Ә бит ғәмәлдәреңә иғтибарлы булһаң, күпме ваҡытыңды бушҡа үткәреүеңде күрергә була...

Беҙҙе намаҙҙан тыйыу өсөн, шайтан башҡа төр хәйләләр ҙә уйлап таба. Бына уларҙың ҡайһы берҙәре: ул ярлыларға, мохтаждарға килә һәм күңелдәренә вәсүәсә һала: “Намаҙ - ул һеҙҙең өсөн түгел. Аллаһ муллыҡ, байлыҡ биргәндәр өсөн ул”. Ауырыуҙарҙы ышандырырға тырыша: “Намаҙыңды туҡтат. Аллаһ әйткән бит: “Сирлеләргә ауырлыҡ юҡ”. Һауығырһың, шунда намаҙыңды күп итеп уҡырһың”. Шикле, шөбһәле һүҙҙәрҙе күңелгә һалып, ул кешене намаҙҙан биҙҙерергә тырыша. Кешенең халәтенә ҡарап, ул шулай төрлө аҙҙырғыс саралар ҡуллана. Шайтан вәсүәсәһенән ҡотолоуҙың иң яҡшы сараһы - һәр саҡ тәһәрәтле килеш йөрөү һәм ваҡыты етеү менән намаҙға баҫыу.

# СӘҺҮ СӘЖДӘҺЕ

### Нимә ул сәһү сәждәһе?

Сәһү сәждәһе яңылышҡанда, йә онотҡанда ҡылына торған сәждә ул. Ул вәжиб һанала. Намаҙҙы боҙмай торған хаталар, яңылышлыҡ китһә, сәһү сәждәһен ҡылырға кәрәк. Уның менән намаҙҙың етшһеҙлектәрен тултырабыҙ.

### Сәһү сәждәһе ниндәй осраҡтарҙа ҡылына?

1. Онотолоу сәбәпле намаҙҙың берәй фарызын үтәргә һуңлаһаҡ, сәһү сәждәһен ҡылырға кәрәк. (Әгәр намаҙыбыҙҙың бер фарызы бөтөнләй үтәлмәһә, мәҫәлән, рөкуғ ҡылырға онотҡанбыҙ икән, намаҙыбыҙ дөрөҫ булмай. Уны яңынан уҡыу мотлаҡ).

2. Әгәр намаҙ вәжибтәре һуңлап, йә онотолоп ҡалдырылһа, сәһү сәждәһе ҡылына.



### Сәһү сәждәһен ҡылыу миҫалдары:

- Дүрт рәкәғәтле намаҙҙа өсөнсө рәкәғәттә ултырырға ярамай. Әгәр өсөнсө рәкәғәттән һуң ултырып, "Әттәхиәт" доғаһын уҡығанбыҙ икән, ул саҡта сәһү сәждәһе ҡылына, сөнки был дүртенсе рәкәғәттең фарызы булған ҡыямды тотҡарлау булып һанала.



- Һәр рәкәғәттә уҡыуы вәжиб һаналған "Фатиха" сүрәһененән алда икенсе сүрә уҡылһа, сәһү сәждәһен ҡылыу кәрәк.
- Әгәр "Фатиха" сүрәһенән һуң өҫтәлмә сүрә уҡылмай рөкуғ эшләнһә, кире турайып, өҫтәлмә сүрәне уҡып тороу кәрәкмәй. Рөкуғҡа тороп, сәждәгә китәбеҙ. Намаҙҙан һуң, сәһү сәждәһен ҡылабыҙ, сөнки "Фатиха" сүрәһенән һуң өҫтәлмә сүрә уҡыу вәжиб һанала.
- Әгәр Витр намаҙынан һуң, "Ҡунут" доғаһын уҡырға онотоп, рөкуғ эшләһәк, тәкбир һәм "Ҡунут" доғаһын уҡыр өсөн кире турайырға кәрәкмәй. Намаҙҙы артабан үҙ тәртибе менән тамамлап ҡуйыу мотлаҡ (рөкуғ, сәждә, "Әт-Тәхийәт", "Салауат", "Рәббәнә", "Сәләм"). Намаҙҙан һуң, сәһү сәждәһен ҡылабыҙ.
- Өс һәм дүрт рәкәғәттән торған намаҙҙа икенсе рәкәғәттән һуң ултырырға онотһаҡ, кире ултырмайбыҙ, намаҙҙы дауам итәбеҙ. Намаҙҙан һуң, сәһү сәждәһен ҡылабыҙ, сөнки беренсе ултырыш та һәм "Әт-Тәхийәт" доғаһын уҡыу ҙа вәжиб һанала.

### Бер нисә хата ебәрелһә, нисә сәһү сәждәһе ҡылына?

Бер намаҙ эсендә сәһү сәждәһен ҡылырлыҡ бер нисә хата ебәрелһә, бер генә сәһү сәждәһе ҡылына.

### Сәһү сәждәһе нисек ҡылына?

Намаҙҙың һуңғы ултырышында "Әт-Тәхийәт" доғаһын уҡығас, ике тарафҡа ла сәләм биргәндән һуң, "Аллаһу әкбәр" тип әйтеп, бер-бер артлы ике тапҡыр сәждә ҡылабыҙ. Икенсе сәждәнән һуң, "Әт-Тәхийәт", "Салауат", "Рәббәнә" доғаларын уҡып, уңға һәм һулға сәләм бирәбеҙ.

# ТИЛӘҮӘТ СӘЖДӘҺЕ

### Нимә ул тиләүәт сәждәһе?

Изге Ҡөрьән Кәримдә шундай аяттар бар, уларҙы уҡығандан һуң, сәждә ҡылыу кәрәк. Ул сәждә “тиләүәт сәждәһе” тип атала.

### Ҡөрьәндә тиләүәт сәждәһен ҡылыр өсөн нисә аят бар?

Изге Ҡөрьән Кәримдә тиләүәт сәждәһен ҡылыр өсөн ун дүрт аят бар.

### Сәждә тиләүәтенең хөкөмө?

Ҡөрьәндәге ошо ун дүрт аятты уҡыған һәм уны ишеткән кешеләргә тиләүәт сәждәләрен ҡылыу вәжиб һанала. Шулай уҡ, уларҙың тәржемәләрен уҡыған һәм ишеткән кешегә лә тиләүәт сәждәһен ҡылыу мотлаҡ.

### Намаҙ эсендә тиләүәт сәждәләре нисек ҡылына?

Намаҙ барышында тиләүәт сәждәһе ҡылына торған аяттар уҡыһаҡ, был хәлгә ике юл бар:

1. Әгәр тиләүәт сәждәһе ҡылына торған аят уҡылғандан һуң башҡа аяттар уҡылмаһа йәки был аяттың аҙағынан өстән артыҡ булмаған аяттар уҡылһа, көндәлек намаҙҙағы кеүек рөкуғ һәм сәждә ҡылына. Был осраҡта ҡылынған сәждә тиләүәт сәждәһе һанала.

2. Әгәр тиләүәт сәждәһе ҡылына торған аят уҡығандан һуң, өстән артыҡ аят уҡырға йыйынабыҙ икән, ул саҡта сәждә тиләүәт ҡылынырға тейеш аяттан һуң “Аллаһу Әкбәр!” тип әйтеп, тиләүәт сәждәһен ҡылабыҙ. Сәждәлә өс тапҡыр “Сүбхәнәкә раббийәл әғлә” тип әйтәбеҙ. “Аллаһу Әкбәр!” тип әйтеп тороп баҫабыҙ һәм артабан Ҡөрьән уҡыйбыҙ. Йәки намаҙҙы үҙ тәртибендә тамамлайбыҙ.

### Намаҙҙан тыш тиләүәт сәждәләре нисек ҡылына?

Ҡөрьән уҡығанда һәм намаҙҙан тыш ошо сәждә аяттары булған аяттар уҡыһаҡ, тиләүәт сәждәһен ҡылыу кәрәк. Уның өсөн намаҙҙағы кеүек тәһәрәтле булыу мотлаҡ. Ҡиблаға ҡарап, “Аллаһу Әкбәр!” тип әйтеп, сәждә ҡылабыҙ. Сәждәлә өс тапҡыр “Сүбехәнәкә раббийәл әғлә” тип әйтелә. Унан һуң ошо доғаны уҡыйбыҙ: “Сәмиғнә үә әтағнәә ғүфрәәнәкә Рәббәнәә үә иләйкәл мәсир” (Тәржемәһе: “Ишеттек һәм итәғәт ҡылдыҡ. Һинән ғәфү итеүеңде һорайбыҙ. Иии Раббым! Ҡайтыуыбыҙ тик Һиңә генә!”).



# НАМАҘ УҠЫРҒА ЯРАМАҒАН ВАҠЫТТАР (ҠӘРӘХӘТ ВАҠЫТТАРЫ)

**Тәүлектең ниндәй өлөшөндә намаҙ уҡыу мәкруһ һанала?**

Тәүлектең намаҙ уҡырға ярамаған өс ваҡыты бар. Был ваҡыттарҙа фарыз, сөннәт, вәжиб, нәфел, йыназа, ҡаза намаҙҙарының береһе лә уҡылмай. Тиләүәт сәждәләре лә ҡылынмай. Был ваҡыттар улар өсөн мәкруһ һанала.

1. Ҡояш ҡалҡҡандан алып 45 минут аралығында намаҙ уҡыу тыйыла. Әгәр иртәнге намаҙыбыҙҙы тамалаған саҡта ҡояш ҡалҡһа, намаҙыбыҙ дөрөҫ булмай. Аҙаҡтан ҡаза намаҙын уҡып ҡуйыу кәрәк.

2. Ҡояш күктең тап уртаһында (зәүәл ваҡытында) булып, өйлә намаҙына тиклем 45 минут тирәһе ваҡыт аралығында намаҙ уҡылмай.

3. Ҡояш байыуға 45 минут ҡалғанда, намаҙ уҡылмай. Был аралыҡта тик икенде намаҙының фарызы ғына уҡылыр.

**Тик нәфел намаҙҙары өсөн генә мәкруһ булған ваҡыттар бармы?**

Фарыз, вәжиб, йыназа, ҡаза намаҙҙары һәм сәждә тиләүәтен ҡылыр өсөн ике ваҡыт аралығы бар. Әммә был ваҡыттарҙа нәфел намаҙҙарын ҡылыу мәкруһ булыр.

1. Иртәнге намаҙ ваҡытында иртәнге намаҙҙың сөннәтенән башҡа бер ниндәй ҙә нәфел намаҙҙары уҡылмаҫ.

2. Икенде намаҙының фарызынан һуң нәфел намаҙҙары уҡыу - мәкруһ.



# МИНЕҢ НАМАҘҘАРЫМ

Ҡайҙалыр алыҫта, күңел төбөндә, өләсәйенең тауышы яңғыраны:

- Балам, улым! Ни эшләп намаҙҙарыңды шул хәтлеп һуңлатып уҡыйһың ул?

Өләсәйенә етмеш йәштәр тирәһе ине. Йәшенә ҡарамаҫтан, аҙан тауышының тәүге ауаздарын ишетеүе була, ололарға хас булмаған етеҙлек менән һикереп тора һала. Тәһәрәтләнә лә намаҙға баҫа ине...

Ә уның ейәне, күпме тырышһа ла, үҙ-үҙен еңә алмай. Намаҙҙарын иң аҙҙаҡҡа, тейешле ваҡытының һуңғы минуттарына тиклем һуҙып килә. Намаҙын да тиҙ генә, ашыҡ-бошоҡ ҡына башҡара шул. Ошо хаҡта уйланып урынынан ҡуҙғалғанда, күҙе сәғәткә төштө. Киске намаҙ тамамланыуға 15 минут ҡына ваҡыт ҡалған икән дәһа!

- Тағы намаҙыма һуңланым! - тигән үкенесле уй үтте башынан һәм, ҡәнәғәтһеҙлек менән өтәләнеп, тәһәрәтен арлы-бирле алды, бит - ҡулдарын таҫтамал менән ҡоротоп та тормайынса, намаҙлығы ятҡан бүлмәһенә ашыҡты. Ғибәҙәтен йәһәтләп, ихласһыҙлыҡ менән үтәргә тура килде уға. Намаҙҙан һуң, тәсбих тартҡанда, тағы өләсәһе иҫенә төштө.

- Әгәр ошо хәлдә мине күрһә, бик асыуланыр ине, - тип уйланы ул. Уны ныҡ яратты шул. Аҡыллы, намыҫлы, күркәм холоҡло өләсәһе намаҙҙарын шул хәтлем бирелеп атҡара, хатта, күк йөҙөндә көн күреүселәр ҙә һоҡланыу менән күҙәтерҙәр ине, моғайын. Намаҙға баҫҡанда, буйһоноусанлыҡ, Раббыбыҙға ҡарата оло һөйөү, хөрмәт, ихтирам сағыла, йөҙөнөң төҫө яҡтырып, нурланып китә ине. Өләсәһе тураһында уйлағас, үҙен башҡасараҡ һиҙә башланы.

Был көндө бик тә арығайны. Ниндәйҙер ауырлыҡ бар булмышын биләп алды. Доғаларын уҡып бөткәс, башын ике ҡулы араһынан намаҙлығына терәне. Ниңәлер ошо хәлдә оҙаҡ ҡына фекер йөрөтөргә ярата шул.



Күҙҙәрен йомдо. «Ҡайһылай арығанмын», - тигән уй башынан йүгереп үтте һәм ҡайҙалыр төпһөҙлөккә осто.

Ул Хисап көнөн күрҙе. Төркөм-төркөм кешеләр тирә-яҡтан Мәхшәр майҙанына ағыла. Унда бер бушлыҡ та юҡ. Кемдер, ян-яғын уратып алған хәлде күреп, ҡурҡышынан ҡатып ҡалған, ҡайһылары кемделер-нимәнелер эҙләп унда-бында йүгерешә, күбеһе баштарын эйеп, тубыҡланып өнһөҙ ҡалған.

Йөрәк күкрәктән атлығып сығырҙай булып тибә, тәндән һалҡын тир бәрә. Ғүмерендә бик күп ишетте ул Хисап көнө хаҡында. Уға ҡағылған һорау-яуаптар менән дә таныш. Кешеләрҙең фани донъяла эшләгән изге һәм насар ғәмәлдәрен күрһәткән Мизан исемле үлсәү хаҡында ла хәбәрҙар. Былар барыһы ла уның донъяға ҡарашының төп нигеҙе булды. Ләкин бер ҡасан да, бер ваҡытта ла ул көндөң был хәтлем дә ҡурҡыныс, ауыр икәнен башына ла килтермәне.

Һорау алыу һәм хисап дауам итте. Ошо мәл уның исемен яңғыратып әйттеләр. Ҡаушаған хәлдә ян-яғына ҡарап, ҡалтыраған тауыш менән: «Мине саҡырҙығыҙмы?» - тип, көскә генә әйтә алды. Төркөм, уға юл биреп, икегә айырылды. Ике яҡтан ике фәрештә ҡултыҡлап алды. Күренеп тора: улар үҙ хеҙмәттәрен еренә еткереп атҡара. Уны, шаҡ ҡатҡан хәлдә, төркөм аша үткәреп, майҙандың үҙәгенә баҫтырҙылар ҙа ситкә тайпылдылар. Ошо мәлдә йәшәлгән бар ғүмере кино таҫмаһындағы кадрҙар кеүек күҙ алдынан үтте.

Күҙен асҡанда, үҙен тик яҡшы эштәр эшләп һәм изгелек кенә ҡылып йәшәгән таныштары араһында күрҙе лә ҡыуанды: «Аллаһу Тәғәләгә шөкөр! Улар менән бергә икәнмен!» - тип һөйөндө. Уның атаһы Ислам юлынан барған дини һәм ғилемле кешеләр менән осрашыуҙарға йыш ҡына йөрөй торғайны. Ауыр йәшәгәндәргә, мохтаждарға ярҙам итергә, рухи яҡтан аҙашҡандарҙың йөрәктәренә Исламдың илаһи нурын һуҙырға тырышты. Ә әсәһе йыш килгән ҡунаҡтарҙы бар ризыҡтарын ҡуйып һыйлай торғайны.

«Мин дә бит ошо юлдан тайпылманым. Кешеләрҙең бәхете өсөн хеҙмәт итергә, кешелекте һәм бар донъяны барлыҡҡа килтергән Аллаһтың барлығы, берлеге хаҡында ысынбарлыҡ мәғлүмәттәрҙе еткерергә тырыштым. Намаҙҙарымды уҡыным.Ураҙа тоттом. Булған фарыздарҙы үтәнем. Харамдан һаҡландым...»

Уның күҙҙәренән сөбөрләп йәш аға, сикәләрен яндырып төшә.

«Мин бит Раббымды яратам! Моғайын, яратамдыр!» - тип уйланы ул. Әммә икенсе яҡтан: «Нимә генә эшләһәм дә бик аҙ Уның ризалығына һәм рәхмәтенә ирешергә! Ожмах хозурҙарына лайыҡ булыр өсөн, Уға дәрәжәле хеҙмәттәрем дә етмәҫ!» - тип уйланы. Тәненең, аҡылының бар күҙәнәктәре һәм мейеһенең һәр йыйырсығына тиклем, яҙмышы тик Аллаһу Тәғәләнең ризалығына, шәфҡәтенә, мәрхәмәтенә генә өмөтләнергә кәрәк икәнен аңланы.

Һорау алыу бик ҡаты һәм ауыр барҙы. Хисап дауам итте. Бөтә тәне дер ҡалтыраны, шыбыр тиргә батты. Уның ғәмәлен ап-асыҡ күрһәтеп, үлсәп торған мизандан күҙен дә алманы. Ниһайәт, хөкөм сығара башланылар. Майҙанға, ҡулдарына ниндәйҙер ҡағыҙ тотҡан тамуҡ фәрештәләре яҡынлашты.

Башта уның исемен әйттеләр, аяҡтары тыңламаҫ булды, бына-бына ҡоларға әҙер тора ине. Күҙҙәрен йомған килеш һуңғы һүҙҙәрҙе ишетергә әҙерләнде. Фәрештәнең тауышы яңғыраны. Бәлки, ул яңылыш ишетәлер?

Уның исеме тамуҡҡа тәғәйенләнгәндәр рәтендә булып сыҡты. Хәле бөтөп, аяҡ быуындары тотмаҫ булды.

«Юююүк!!! - тип ҡысҡырып тубыҡланды, һәм, ҡапыл һикереп торҙо ла, бер фәрештәнән



икенсеһенә йүгереп йөрөп, - ни өсөн мин улар менән бергә булырға тейешмен? Кем мине тамуҡҡа тәғәйенләне? Ғүмер буйы Аллаһу Тәғәләнең ризалығын алыу теләге менән, Уның ҡушҡандарын үтәп, тыйғандарынан тыйылып йәшәүселәр араһында булдым, улар менән бергә хеҙмәт иттем. Халыҡҡа Раббыбыҙ хаҡында теүәл белем бирергә тырыштым!..» - тип, өмөтһеҙләнеп, өҙгөләнеп һораны.

Күҙҙәренән туктауһыҙ йәш аға... Әммә был эшкә вәкиллек бирелгән фәрештәләр ҡулдарынан нығ итеп тотоп алдылар ҙа, йыйылған халыҡ төркөмөн йырып, тамуҡҡа табан өҫтөрәп алып киттеләр.

Тамуҡтың ялҡындары күк көмбәҙенә етеп, алыҫтан уҡ ҡурҡыу һәм ҡотолғоһоҙ хис тыуҙыра ине. Аяҡтары атламай, ерҙән һөйрәлеп бара. Ул ысҡынырға теләне.

- Бер кемдән дә, бер ҡайҙан да ярҙам булмаҫмы ни? - тине ул үҙе менән һөйләшкәндәй.

Кипкән ирендәре ыңғырашыу, ялбарыу ҡатыш:

- Минең тотҡан ураҙаларым... Уҡыған Ҡөрьәнем... Намаҙҙарым... Ғибәҙәттәрем... Уларҙың береһе лә мине был ҡот осҡос тамуҡтан ҡотҡармаҫмы ни!?..

Уның йөрәк өҙгөс ыңғырашыу ҡатыш ялбарыуҙары ҡысҡырыуға күсте. Ә тамуҡ фәрештәләре уны өҫтөрәп, һөйрәп алып барыуҙарын дауам итте. Барыһын да ҡурҡыуға һалған, ялҡын бәреп торған тамуҡтың упҡынына яҡынлаштылар. Боролоп артҡа күҙ һалды. Упҡын ситенә еткәндә, һуңғы тапҡыр ҡаршылыҡ күрһәтеп ҡараны. Ярҙам, өмөт көтөп, әйләнеп тағы артҡа ҡараны...

- Аллаһтың Илсеһе, һөйөклө пәйғәмбәребеҙ әйткән бит: «Әгәр бер кешенең йорто алдынан йылға ағып, ул шул йылғала көнөнә биш тапҡыр йыуынһа, булған бысраҡтарын йыуып төшөрә, паклана. Көнөнә биш тапҡыр намаҙ уҡыған



кеше лә, шул йылғала йыуынған кеше кеүек, гонаһтарынан арына, рухы сафлана, - тип. Мине лә намаҙҙарым ҡотҡармаҫмы икән?

- Минең намаҙҙарым... намаҙҙарым... намаҙҙарым... - тигән уйҙар йүгереп үтте уның башынан.

Тамуҡ фәрештәләре, үҙҙәренең эштәрен оҙаҡҡа һуҙмай, утлы упҡынға һөйрәүҙәрен дауам итте. Ут-ялҡын йөҙҙө көйҙөрә. Ул һуңғы тапҡыр артҡа әйләнеп ҡараны. Хәҙер инде ул иламай, иларға күҙ йәштәре лә кибеп бөткән ине... Өмөт тә ташлап китте... Башы күкрәгенә һалынып төштө, кәүҙәһе төшөнкөлөк менән һығылды.

Ҡулдарынан тотоп килгән бармаҡтар яҙылды. Фәрештәләрҙең береһе уны упҡынға этте. Утлы диңгеҙ ҡосағына төшөп барғанын аңланы... Ике метр самаһы үткәс, кемдер уның ҡулынан эләктереп алғанын һиҙҙе. Башын күтәреп ҡарағанда, сал һаҡаллы ҡарт уны геүләп янған ҡурҡыныс утлы упҡындан ҡотҡарып маташа ине. Бына упҡындан тартып сығарҙы. Шул арала хасил булған көл һәм туҙанды ҡаға-ҡаға ҡартҡа ҡарап: «Һеҙ кем?» - тип һораны. Ҡарт йылмайып:

- Мин һинең уҡыған намаҙҙарың, - тип яуапланы.

- Ни өсөн шул тиклем һуңланың? Иң һуңғы сиккә еткәндә генә килеп өлгөрҙөң, упҡынға тәгәрәргә саҡ-саҡ ҡына ҡалған ине бит! - тине. Ҡарт йылмайып, башын һелкте:

- Иҫеңдәме? Һин дә бит мине намаҙ ваҡытының һуңғы минуттарында ғына уҡый инең!

Урамда ишетелгән ауаздан иҫенә килде. Намаҙлыҡтан башын күтәрҙе, маңлайындағы тирҙе һөрттө. Яңғыраған тауыш төнгө намаҙға саҡырған аҙан ине. Тәһәрәт алыу теләге менән йәһәт кенә урынынан һикереп торҙо ла, атылған уҡтай, йыуыныу бүлмәһенә юлланды.

# Пәйғәмбәребеҙ намаҙ уҡырға яратҡан

Бөйөк Аллаһыбыҙға оло һөйөүен һәм тоғролоғон Пәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) намаҙҙа күргән, һәм былай тип әйткән: "Намаҙ - ул минең күҙ нурым!" Ул намаҙҙарын үҙ ваҡытында уҡыуға бик иғтибарлы булған. Уларҙың ваҡыты етеү менән, һуңламай уҡырға яратҡан. Пәйғәмбәребеҙ намаҙҙы һуңға ҡалдырғанды хупламаған һәм һәр саҡ былай тип иҫкәрткән: **"Намаҙ ваҡыты етеү менән үк уҡылған намаҙҙа Аллаһтың рәхмәте бар, намаҙ ваҡытының һуңында уҡығандарға – Унын ярлыҡауы"** (Тирмиҙи, Саләт, 13). Ул быны ошолай аңлатҡан: "Бөйөк Аллаһыбыҙ кем намаҙҙы намаҙ ваҡыты етеүендә уҡый, унан ҡәнәғәт була. Ә инде кем үҙенең вайымһыҙлығы арҡаһында намаҙын азаҡҡа ҡалдыра, ул кешене Үҙенең мәрхәмәте менән ғәфү итә".

Беҙҙең Пәйғәбәребеҙ намаҙ ваҡыты етеү менән, булған эштәрен ташлап, Аллаһу Тәғәләгә ғибәҙәт ҡылырға ашыҡҡан. Был турала мөьминдәрҙең әсәһе Ғәйшә (разыйаллаһу ғәнһә) ошоларҙы һөйләгән:

**"Аллаһ Илсеһе менән йыш ҡына әңгәмәләшә инек. Әммә намаҙ ваҡыты етеү менән, Ул беҙҙе танымаҫ хәлгә етеп, бар булмышы менән Аллаһу Тәғәләбеҙ хозурына ашыға торғайны"** (Фәҙаил-Әғмәл, 303).

Мотлаҡ һаналған фарыҙ намаҙҙарынан тыш, мөмкинлек булған һайын, нәфел намаҙҙарын атҡарған. Берәй нәмәгә шатланһа, шөкөр ҡылып, ыңғай намаҙға торған. Берәй хәсрәткә тарыһа ла намаҙға баҫҡан.

Бер ваҡыт Аллаһ Илсеһе (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) аяҡтары шешкәнсе, оҙаҡ итеп намаҙ уҡыған. Мөьминдәрҙең әсәһе Ғәйшә (разыйаллаһу ғәнһә): "Иии, Аллаһ Илсеһе! Һеҙҙең алдағы һәм һуңғы гонаһтарығыҙ ҙа ғәфу ителгән бит. Ни өсөн үҙегеҙҙе ыҙалатаһығыҙ?!" - тип һораған. Ул: **"Әй, Ғәйшә! Мин Раббыма шөкөр итеүсе ҡол түгелме ни?"** - тип яуаплаған. Һөйөклө Пәйғәмбәребеҙ үлемесле ауырыу ваҡытында ла намаҙҙарын ҡалдырмаған.

Сире бик ауыр булыуға ҡарамаҫтан, Пәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) ике яҡтан да ҡултыҡланған хәлдә, мәсеткә килеп, йәмәғәт менән Өйлә һәм Икенде намаҙҙарын уҡый. Хатта вафаты алдынан да, өммәте өсөн хафаланып, былай тип әйтә: **"Намаҙығыҙҙы ҡалдырыуҙан һаҡланығыҙ! Намаҙығыҙҙы ҡалдырыуҙан һаҡланығыҙ! Ҡолдарығыҙҙың, ҡатын-дарығыҙҙың һәм балаларығыҙҙың хоҡуҡтарын һаҡлау мәсьәләһендә Аллаһтан ҡурҡығыҙ!"** (Әбү Дауыт, Әҙәп, 123-124).

**Аллаһу Тәғәлә бойора:**

"Ғаиләңә намаҙ уҡыуҙы бойор. Үҙең дә намаҙ ҡалдырма. Һинән ризыҡ һорамайбыҙ. Беҙ һине ризыҡландырабыҙ. Тәҡүә кешеләр матур нәтижәгә ирешәсәк".

(Та-һа сүрәһе, 132-се аят)

**Һөйөклө Пәйғәмбәребеҙ әйткән:**

"Намаҙҙа торғанда, уны ғүмереңдәге һуңғы намаҙ шикелле! Иртәгә һине үкендерәсәк нәмәләрҙе һөйләмә!"

(Ибн Мажә, Зөһд, 15)

Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) бөтә тормошон Исламды иң гүзәл рәүештә алдағы быуындарға еткерергә һәм сәхәбәләрен илаһи бер алым менән тәрбиәләргә ынтылған. Хозур сығанағы булған намаҙҙы һәр бер мосолмандың үрнәк рәүешенә еткереп ҡылыуын теләгән Ул. Бер көндө Мутға һуғышына китергә әҙерләнеүсе Ғабдуллаһ бин Рәүаһа, Әфәндеһенең нурлы йөҙөн һағынасағын уйлап, уның янына килеп һаубуллаша һәм былай тип һорай:

- Йә Рәсүлүллаһ! Миңә зиһенемдән сыҡмаслыҡ бер кәңәш бирсе!

Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) уға:

- Һин иртәгә Аллаһҡа бик һирәк сәждә ҡылынған ергә китәсәкһең. Ул ерҙә йыш сәждә ҡыл, күп намаҙ уҡы! - тип бойора. (Уаҡиди, II, 758)



# МӘСЕТТӘР

**Нимә ул мәсет?**

“Сәждә ҡылынған ер” мәғәнәһе һалынған мәсеттәр - Аллаһҡа ғибәҙәт ҡылыу өсөн төҙөлгән мөҡәддәс биналар. Ҡайһы бер мосолман илдәрендә бик аҙ кеше ғибәҙәт ҡылған бәләкәс биналарға “мәсет” тиҙәр, ә бик күп кеше ғибәҙәт ҡылырлыҡ бейек биналарҙы “джами” тип атайҙар. Йома намаҙҙары шундай илдәрҙә джамиҙарҙа ҡылына. Беҙҙең илебеҙҙә ғибәҙәт ҡылынған һәр бинаға “мәсет” тип әйтәләр. Мәсет һәм джамиҙарҙы “мәбәд” һүҙе менән атау ҙа ярай.

Динебеҙҙә намаҙ һым доға ҡылыу өсөн, йәғни ғибәҙәт өсөн, айырым бер ер, бина, урын булыу шарт түгел. Беҙ ғибәҙәттәребеҙҙе һәр ерҙә ҡыла алабыҙ. Әммә бер ҡалала йә ауылда мәсеттәр һәм күк йөҙөнә уҡталған манаралар бар икән, ул ерҙәргә мосолмандар хужа булыуына ишара был.

Мәсеттәрҙә йәмәғәт менән бергә ҡылынған ғибәҙәттәр яңғыҙ хәлдә үтәлгән ғибәҙәттәрҙән мең ҡат ҡиммәт. Һәр мәсет, әгәр унда көнөнә биш тапҡыр намаҙҙар ҡылынһа, йома намаҙҙары үткәрелһә, - иң мөҡәддәс һарай.

**Ҡайны мәбәд Аллаһҡа ғибәҙәт ҡылыр өсөн беренсе булып төҙөлгән?**

Ҡөрьән Кәримдә Аллаһҡа ғибәҙәт ҡылыр өсөн төҙөлгән иң беренсе бина Ҡәғбә булыуы тураһында бәйән ителә. Ислам тарихына бағышланған китаптар буйынса, Ҡәғбәне иң беренсе төҙөгән кеше - Әҙәм Пәйғәмбәр (ғәләйһис-сәләм).

Ибраһим Пәйғәмбәр улы Исмәғил менән (ғәләйһимәс-сәләм) емерелгән Ҡәғбәне элекке нигеҙе өҫтөнә ҡайтанан төҙөй.

Ер йөҙөндә икенсе мәсет - Ҡуддустағы (Иерусалимдағы) Сөләймән Пәйғәмбәр (ғәләйһис-сәләм) төҙөгән Мәсжидүл-Аҡса.



**Пәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) мәсет төҙөгәнме?**

Пәйғәмбәребеҙ Мәккәлә йәшәгән йылдарҙа Ҡәғбәлә намаҙ ҡылған, Аллаһҡа ғибәҙәт иткән. Мөшриктәрҙең баҫым-золомо артыуы арҡаһында, “Дарул-Эркам” тип аталған өйҙә мосолман йәмәғәтенә намаҙ ҡылдырған һәм Ислам динен өйрәткән. Ул дәүерҙә, Әбү Бәкер һымаҡ, өйҙәрен ваҡытлыса мәсет итеүсе ҡайһы бер сәхәбәләр ҙә булған.

Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ, Мәккәнән Мәҙинәгә һижрәт ҡылғанда, Ҡуба исемле бер ерҙә мәсет төҙөргә әмер биргән. Бер нисә көн эсендә өҫтө асыҡ бәләкәс кенә мәсет төҙөп ҡуйылған. Мәҙинәгә килгәс тә, мосолмандарҙың иң тәүге эше һатып алынған бер буш ерҙә “Мәсджид Нәбәуи” мәсетен төҙөү булған. Мәсетте төҙөүҙә Һөйөклө Пәйғәмбәребеҙ үҙе лә ҡатнашҡан - мөбәрәк ҡулбаштарына һалып кирбестәр ташыған. Мәҙинәләге мөҡәддәс “Мәсджид Нәбәуи” - ана шул беренсе мәсеттең киңәйтелгән дауамы.

**Мәсеттәр ни өсөн мөһим?**

Манаралары күккә олғашҡан мәсеттәр алыҫтан уҡ ул ерҙәрҙең мосолмандар йәшәгән төбәк булыуы тураһында һөйләй. Мәсеттәр - Аллаһҡа арналған ерҙәр. Мәсеткә килеүселәр, унда хозурға ирешеп, имен хәлдә Аллаһҡа ғибәҙәт ҡыла, ғилем ала, бер-береһе менән аралаша.

Һис бер кеше мәсетте үҙенә ала алмай, сөнки был оло гонаһ. Кем быны ҡыла йәки мәсеттәрҙә Аллаһҡа ғибәҙәт ҡылырға ҡамасаулай, ул кеше инсандарҙың иң залимы. Һәр мәсет - ер йөҙөндә Тәүхид Диненең символы, Ҡәғбәтуллаһтың бер бүлеме. Шуға күрә мосолмандар ҡайҙа ғына күсеп барһалар ҙа, тәүге нәүбәттә һәр яңы ерҙә мәсеттәр төҙөгәндәр, халыҡ ишәйә барған һайын, мәсеттәр ҙә артҡан.

**Мәсеттәрҙә намаҙ ғына ҡылынамы?**

Мәсеттәр намаҙ ҡылыу өсөн генә тәғәйенләнмәгән. Тарихтан да күрәбеҙ: мәсеттәр борон-борондан бөйөк мәҙәниәт үҙәге булған. Һөйөклө Пәйғәмбәребеҙ заманында, “Мәсджид Нәбәуи” төҙөлгәс, уның бер өлөшөндә “суффа” исемле мәктәп асыла һәм ул уҡыу йорто ғилем үҙәгенә әйләнә. “Суффа” мәктәбенең беренсе остазы һөйөклө Пәйғәмбәребеҙ үҙе була. Мәсджид Нәбәуи мосолмандарҙың йыйылышып бергә намаҙ ҡылыу, Ҡөрьән Кәрим уҡыу, Пәйғәмбәребеҙҙең сохбәттәрен тыңлау, бөтә мәсьәләләр хаҡында кәңәшләшеү, сит илдәрҙән килгән илселәрҙе ҡабул итеү урыны була, ҡыҫҡаһы мосолман дәүләтенең идара итеү үҙәгенә әүерелә.

Мосолмандар һәр оло мәсет янында мәҙрәсәләр (мәктәптәр, университеттар), фәҡир-фоҡара өсөн ашханалар, китапханалар, шифаханалар, мунсалар һәм йәмәғәттең ниндәй ихтыяжы бар – шуға кәрәкле биналар төҙөгәндәр. Һәр мәсет - ғилем, мәғрифәт һәм мәҙәниәт үҙәге, кешеләрҙең берләшеү һәм тәрбиәләнеү урыны.

### Мәсет хеҙмәткәрҙәре ниндәй вазифалар үтәй?

**Имам.** “Имам” һүҙе “юлбашсы, лидер, дәүләт башлығы” мәғәнәһен аңлатһа ла, Ислам динендә имам – мосолмандарҙың йәмәғәт намаҙы етәксеһе, дини мәсьәләләрҙе хәл итеүсе кеше. Имам намаҙҙарға етәксе генә түгел, ул мәсет янында йәшәүсе бөтә халыҡ өсөн ғилем биреүҙә һәм әҙәптә үрнәк бер шәхес булырға тейеш. Йәмәғәттең әхлаҡи һәм рухи тәрбиәһенә яуаплылыҡ та уның өҫтөндә.

**Мәзин.** Намаҙ ваҡыттары еткәс, көнөнә биш тапҡыр аҙан әйтеүсе һәм мәсет эсендә төрлө вазифалар ҙа үтәүсе кеше ул. Әгәр имам берәй ергә китһә, уның урынына йәмәғәт намаҙын ҡылдыра. Имам менән бергә мосолмандарға дин дәрестәре лә бирә.

**Вәғиҙ.** Йома һәм байрам көндәрендә, Рамаҙан айында һәм айырым бер көндәрҙә намаҙҙан алда йәки намаҙҙан һуң мосолмандарҙы дингә өгөтләй, уларға нәсихәт бирә. Ҡайһы бер мәсеттәрҙә улар көрси исемле бер махсус ерҙә ултыра. Вәғиҙҙәр халыҡҡа ғилем өйрәтә, сөхбәттәр үткәрә. Улар – өгөт-нәсихәттәре менән мәсеткә килгән мосолмандарҙың күңелдәрен яҡтыртыусылар. Халыҡты тәрбиәләүҙә вәғиҙҙәрҙең әһәмиәте ифрат ҙур.

**Ҡәйүм.** Был вазифа тик оло мәсеттәрҙә генә бар. Ҡәйүмдәрҙең вазифаһы - мәсеттәрҙе таҙа килеш, тейешле бер тәртиптә тотоу.

### Мәсеттең эсендә ниндәй махсус урындар бар?

**Михрап.** Имам йәмәғәт алдында намаҙ уҡый торған махсус урын.

**Мимбәр**. Йома һәм байрам көндәрендә хөтбә уҡыла торған ҡалҡыу урын. Ул михраптың уң яғында тора. Хөтбә уҡыр өсөн, имам мимбәргә баҫҡыс буйлап менә.

**Көрси.** Көрси-мөнбәр, кафедра, ултырғыс, тәхет мәғәнәһен аңлата. Имам йәки вәғиз йәмәғәткә вәғәз уҡыған, уларға сөхбәт алып барған күтәренке бер урын. Ул михраптың һул яғында тора.

**Мәзин мәхфиле.** Мәзиндәрҙең ҡамәт әйткән һәм намаҙ ҡылған урыны. Мәхфил, ғәҙәттә, тик оло мәсеттәрҙә була.


Михрап


Мимбәр


Көрси


Мәзин мәхфиле

# ҺОРАУҘАР

## Белемебеҙҙе тикшерәбеҙ 1

Дөрөҫ яуаптарҙы билдәләгеҙ.

- Биш ваҡыт намаҙ уҡыу Миғраж кисендә фарыз ҡылынды. ☐ дөрөҫ ☐ хата
- Иртәнге намаҙ 8 рәкәғәттер: 4 сөннәт, 4 фарыз. ☐ дөрөҫ ☐ хата
- Өйлә намаҙы 10 рәкәғәттер: 2 тәү сөннәт, 4 фарыз, 4 һуң сөннәт. ☐ дөрөҫ ☐ хата
- Йәстү намаҙы 10 рәкәғәттер: 4 тәү сөннәт, 4 фарыз, 2 һуң сөннәт. ☐ дөрөҫ ☐ хата
- Витр намаҙын үтәү – фарыз. ☐ дөрөҫ ☐ хата
- Байрам намаҙҙарын үтәү – вәжиб. ☐ дөрөҫ ☐ хата
- Тәнде, кейемде, намаҙ уҡый торған урынды физик бысраҡлыҡтан таҙартыу - “хәдәстән таҙарыныу”, тип атала. ☐ дөрөҫ ☐ хата
- Витр намаҙы Аҡшам намаҙынан һуң башҡарыла. ☐ дөрөҫ ☐ хата
- Йәмәғәт намаҙын уҡыусылар намаҙ алдынан, “имамға ойоном”, тип ниәтләй. ☐ дөрөҫ ☐ хата
- Намаҙҙы башлағанда “Аллаһу әкбәр” һүҙҙәрен әйтеү, “Ифтитах тәкбир” тип атала. ☐ дөрөҫ ☐ хата



## Белемебеҙҙе тикшерәбеҙ 2

Дөрөҫ яуаптарҙы билдәләгеҙ.

| | | |
|---|---|---|
| Ҡамәт - фарыз намаҙҙары алдынан намаҙға баҫыу ораны ул. | ☐ дөрөҫ | ☐ хата |
| “Ҡунут” доғаһы өйлә намаҙының 3-сө рәкәғәтендә уҡыла. | ☐ дөрөҫ | ☐ хата |
| Намаҙ уҡырға ниәт ҡылыу – сөннәт. | ☐ дөрөҫ | ☐ хата |
| Намаҙды башлағанда “Ифтитах тәкбир” әйтеү – фарыз. | ☐ дөрөҫ | ☐ хата |
| Беренсе тәкбирҙән һуң “Сүбхәнәкә” доғаһын уҡыу – фарыз. | ☐ дөрөҫ | ☐ хата |
| Намаҙҙа сәждә ҡылыу – сөннәт. | ☐ дөрөҫ | ☐ хата |
| Намаҙҙа яңылышлыҡ китһә, сәһү сәждәһен ҡылыу – вәжиб. | ☐ дөрөҫ | ☐ хата |
| Бәҙрәфкә барыуҙы кисектереп намаҙ уҡыу - харам. | ☐ дөрөҫ | ☐ хата |
| Намаҙҙа ашау һәм эсеү – мәкрүһ. | ☐ дөрөҫ | ☐ хата |
| Кәүҙәне сәбәпһеҙ Ҡибланан ситкә йүнәлтеү намаҙҙы боҙа. | ☐ дөрөҫ | ☐ хата |



## Белемебеҙҙе тикшерәбеҙ 3

Дөрөҫ яуаптарҙы билдәләгеҙ.

| | | |
|---|---|---|
| Йома намаҙы алдынан Хөтбә уҡыу шарт. | ☐ дөрөҫ | ☐ хата |
| Мосолмандарҙың йылына ике дини байрамы бар: Ураҙа байрам һәм Ҡорбан байрам. | ☐ дөрөҫ | ☐ хата |
| Ҡорбан байрамы көндәрендә фарыз намаҙҙарынан һуң әйтелгән тәкбир “Тәшрик тәкбире” тип атала. | ☐ дөрөҫ | ☐ хата |
| Өс рәкәғәтле намаҙҙар юлсылар өсөн ике рәкәғәткә тиклем ҡыҫҡартылып уҡыла. | ☐ дөрөҫ | ☐ хата |
| Ҡояш ҡалҡҡанда, күктең тап уртаһында булғанда һәм байығанда, һис бер намаҙ уҡылмаҫ. | ☐ дөрөҫ | ☐ хата |

## Үҙебеҙҙе тикшерәбеҙ 1

1. I. Намаҙҙа Аллаһу Тәғәләне һәр саҡ иҫтә тотабыҙ.

   II. Намаҙ беҙгә мәңгелек тормошто һәм Ҡиәмәт көнөн иҫкәртә.

   III. Намаҙ уҡығанда, физик күнегеүҙәр эшләгән кеүек, тәнебеҙҙе нығытабыҙ.

   IV. Намаҙ беҙҙе гонаһтарҙан паклай.

   **Ошо һанағандарҙан намаҙ беҙгә нимә бирә?**

   а) I-II-III
   б) I-II-IV
   в) II-III-IV
   г) I-III-IV

2. **Был кисәләрҙең ҡайһыһында биш ваҡыт намаҙ фарыз ҡылынған ?**

   а) Миғраж кисендә
   б) Ҡәҙер кисендә
   в) Мәүлит кисендә
   г) Рәғәиб кисендә

3. **Кемдәр өсөн намаҙҙың фарыз булыуы кәрәкмәй?**

   а) Аҡылда булыу
   б) Тырыш булыу
   в) Бәлиғ булыу
   г) Мосолман булыу

4. **Түбәндәге ҡайһы намаҙҙар вәжиб?**

   а) Өйлә намаҙы
   б) Витр намаҙы
   в) Аҡшам намаҙы
   г) Йома намаҙы

5. **Түбәндәге ҡайһы намаҙҙар сөннәт?**

   а) Байрам намаҙы
   б) Витр намаҙы
   в) Тәрәүих Намаҙы
   г) Йыназа намаҙы

6. **Түбәндәге ҡайһы намаҙҙар фарыз?**

   а) Байрам намаҙы
   б) Йыназа намаҙы
   в) Витр намаҙы
   г) Тәһәжжуд намаҙы

7. **Ҡайһы намаҙҙың фарызы сөннәт алдынан ҡылына?**

   а) Өйлә намаҙы
   б) Иртәнге намаҙ
   в) Аҡшам намаҙы
   г) Йәстү намаҙы

8. **Намаҙҙың тышҡы фарызына ҡайһылары инмәй?**

   а) Ғәүрәтте ҡаплау
   б) Ваҡыт
   в) Ниәт
   г) Ҡыям

9. **Намаҙҙың эске фарызына нимәләр инмәй?**

   а) Ҡыям
   б) Ваҡыт
   в) Ҡыраәт
   г) Рөкуғ

**10. Намаҙ эсендәге фарызға нимәләр инә?**

а) Хәдәстән таҙарыныу
б) Нәжестән таҙарыныу
в) Ғәүрәтте ҡаплау
г) Сәждә

**11. Намаҙ ваҡытын белдергән саҡырыу нисек атала?**

а) Аҙан
б) Ҡамәт
в) Салауат
г) Тәкбир

**12. Ҡайһы сөннәт намаҙы 4 рәкәғәт түгел ?**

а) Өйлә намаҙының тәү сөннәте
б) Икенде намаҙының сөннәте
в) Аҡшам намаҙының сөннәте
г) Йәстү намаҙының тәү сөннәте

**13. Ҡайһы сөннәт намаҙы 2 рәкәғәт түгел?**

а) Өйлә намаҙының тәү сөннәте
б) Өйлә намаҙының һуң сөннәте
в) Аҡшам намаҙының сөннәте
г) Йәстү намаҙының һуң сөннәте

**14. Ҡайһы фарыз намаҙы 4 рәкәғәт түгел?**

а) Өйлә намаҙының фарызы
б) Икенде намаҙының фарызы
в) Аҡшам намаҙының фарызы
г) Йәстү намаҙының фарызы

**15. Намаҙҙың вәжибенә нимәләр инә?**

а) “Сүбхәнәкә” уҡыу
б) “Сүбхәнә раббийәл-әғлә” тип әйтеү
в) “Фатиха” сүрәһен уҡыу
г) “Сәмиғаллаһу лимән хәмидәһ” тип әйтеү



## Үҙебеҙҙе тикшерәбеҙ 2

**1. Намаҙҙың һуңғы ултырышында ниндәй доғаны уҡымайҙар?**

а) Әт-тәхиәт
б) Раббәнә
в) Салауат
г) Ҡунут доғаһы

**2. Намаҙ ҡылғанда нимә мәкрүһ булмай?**

а) Кәрәкһеҙгә кейем һәм тәнгә  тейеү
б) Рөкуғ һәм сәждәлә тәсбихтарҙы өсәүҙән артыҡ әйтеү
в) Бәҙрәфкә барыуҙы кисектереп, ҡыҫталған мәлдә намаҙ уҡыу
г) Намаҙҙы икенсе кешенең йөҙөнә ҡарап тамамлау

**3. Ниндәй намаҙ йәмәғәт менән генә уҡыла?**

а) Йома намаҙы

б) Өйлә намаҙы

в) Икенде намаҙы

г) Аҡшам намаҙы

**4. Ваҡытында уҡылмаған намаҙҙың урынына ҡылынған намаҙ нисек атала?**

а) Духа намаҙы

б) Ҡаза намаҙы

в) Ауырыуҙың намаҙы

г) Тәхийәтул-Мәсжид намаҙы

**5. Ҡайһы айҙа Тәрәүих намаҙы ҡылына?**

а) Рәжәп

б) Шағбан

в) Рамаҙан

г) Мөхәррәм

**6. Ниндәй намаҙҙа рөкүғ һәм сәждә ҡылынмай?**

а) Йыназа намаҙында

б) Тәрәүих намаҙында

в) Йома намаҙында

г) Байрам намаҙында

**7. Намаҙҙа мосолмандар нимәгә төбәләләр? Ул мәсет ҡайҙа?**

а) Ҡәғбәтуллаһ - Мәккә

б) Ҡәғбәтуллаһ - Мәҙинә

в) Аҡса мәсете - Ҡудус

г) Пәйғәмбәрҙең мәсете - Мәҙинә

**8. Ҡамәт ҡасан әйтелә?**

а) Фарыз намаҙы алдынан

б) Байрам намаҙы алдынан

в) Йыназа намаҙы алдынан

г) Витр намаҙы алдынан

**9. Намаҙҙы нимә боҙмай?**

а) Һөйләшеү

б) Иҫәнәү

в) Ашап-эсеү

г) Башҡалар ишетерлек итеп көлөү

**10. Өйлә намаҙы ниндәй өлөштәрҙән тора?**

а) 10 рәкәғәттән: 2 тәү сөннәт, 4 фарыз, 4 һуң сөннәте

б) 10 рәкәғәттән: 4 тәү сөннәт, 4 фарыз, 2 һуң сөннәте

в) 10 рәкәғәттән: 4 тәү сөннәт, 2 фарыз, 4 һуң сөннәте

г) 8 рәкәғәттән: 4 тәү сөннәт, 4 фарыз

## Үҙебеҙҙе тикшерәбеҙ 3

1. **Барыһы ике рәкәғәт фарыз. Фарыздан алда хөтбә уҡыла. Яңғыҙ уҡылмай, йәмәғәт менән үтәлә. Фарыз тик ирҙәр өсөн.**

Былар ниндәй намаҙға ҡағыла?

а) Байрам намаҙы
б) Иртәнге намаҙ
в) Йыназа намаҙы
г) Йома намаҙы

2. **Тәһәрәтте лә, намаҙҙы ла нимә боҙа?**

а) Ҡибланан ситкә боролоу
б) Намаҙҙа ашау һәм эсеү
в) Намаҙ барышында һөйләшеү
г) Кеше ишетерлек итеп көлөү

3. **Ир-егеттәр тәндәренең ҡайһы өлөшөн ҡапларға тейеш?**

а) Яурындан үксәгә тиклем
б) Кендектән тубыҡҡа тиклем
в) Кендектән үксәгә тиклем
г) Яурындан тубыҡҡа тиклем

4. **Ҡатын-ҡыҙҙар тәндәренең ҡайһы өлөшөн ҡапларға тейеш?**

а) Йөҙө, ҡул суҡтары һәм үксәһенән башҡа барыһын да
б) Баштан башҡа өлөштәрҙе
в) Яурындан үксәгә тиклем
г) Яурындан тубыҡҡа тиклем

5. **Ниндәй намаҙҙа Ҡунут доғаһын уҡыйҙар?**

а) Йома намаҙында
б) Тәрәүих намаҙында
в) Витр намаҙында
г) Йыназа намаҙында

6. **Йома намаҙы нимә булып һанала?**

а) Вәжиб
б) Фарыз-ғәйн
в) Фарыз-кифая
г) Сөннәт

7. **Тәрәүих намаҙы нисә рәкәғәттән тора?**

а) 18 б) 10 в) 20 г) 13

8. **Нимәләр Байрам намаҙына ҡағылмай?**

а) Йәмәғәт менән ҡылына, ҡаза булып уҡылмай
б) Йылына ике тапҡыр ҡылына
в) Рөкуғ менән сәждә ҡылынмай
г) Хөтбә уҡыла

9. **Йома һәм Байрам намаҙҙары өсөн Хөтбә уҡылған урын нисек атала?**

а) Мимбәр б) Михрап
в) Шәрәфә г) Көрси

10. **Нисә саҡрымлы сәфәрҙә, дүрт рәкәғәт фарыз намаҙы урынына, ике рәкәғәт ҡыҫҡартылып уҡыла?**

а) 9 км б) 90 км
в) 190 км г) 900 км

## Төшөп ҡалған һүҙҙәрҙе тултырабыҙ (1)

**( ҡыраәт / тәһәжжүдд / сәждә / истиҡбал Ҡибла / сәтр ғәүрәт )**

- Төндә уҡылған нәфилә намаҙ …………, тип атала.
- Тәндең тыйылған ерҙәрен кейем менән ҡаплау …………, тип атала.
- Намаҙ уҡыу алдынан Ҡибла тарафына йүнәлеү …………, тип атала.
- Намаҙҙа Изге Ҡөрьәнде уҡыу (иң кәме өс аят) …………, тип атала.
- Намаҙҙа тубыҡтарҙы, ике усты, маңлайҙы, танауҙы ергә тейҙереү …………, тип атала.

## Төшөп ҡалған һүҙҙәрҙе тултырабыҙ (2)

**( тәшрик / уң / тиләүәт / ғонаһ / хөтбә / сәһү / има / кифая )**

- Мәсеткә тәһәрәт алып ………… аяҡ менән кереү тейешле.
- Йома намаҙы алдында имам ………… уҡый.
- Ҡорбан байрамы көндәрендә, фарыз намаҙҙарынан һуң әйтелгән тәкбир – ………… тәкбире тип атала.
- Йыназа намаҙын үтәү - фарыз - …………………
- Ултырырға көсө етмәгән кеше ҡырын йә арҡаһына ятып ………………… менән намаҙ ҡылыр.
- Намаҙҙы сәбәпһеҙ ҡазаға ҡалдырыу - ҙур ………….
- Әгәр намаҙ вәжибтәре һуңлап, йә онотолоп ҡалдырылһа, ………… сәждәһе ҡылына.
- Изге Ҡөрьән Кәримдең “сәждә аяттары” уҡығандан һуң ҡылынған сәждә “…………  сәждәһе” тип атала.







Мәрхәмәт һәм ғибәҙәт хәлендә

# РАМАҘАН
# һәм
# УРАҘА


- Рамаҙан айының фазилиәте
- Рамаҙан айының һәм ураҙаның терминдары
- Ураҙа безгә нимә бирә?
- Ураҙа төрҙәре
- Ураҙа ҡағиҙәләре
- Тәрәүих, иғтикәф, Ҡәҙер кисе һәм Ураҙа Байрамы
- Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) һәм Рамаҙан айы






# БЕРЕНСЕ УРАҘА

Булат менән атаһы арып ҡайтып инделәр. Уларҙың ҡулдарында тығыҙ тултырылған пакеттар - ифтар өсөн һатып алынған аҙыҡ-түлек ине. Әйберҙәрҙе аш бүлмәһенә индереп ҡуйғас, Булаттың атаһы креслоға ял итергә ултырҙы, ә малай диванға ауҙы. Улар баҙарға иртә таңдан уҡ юлланғайнылар, ә өйгә төш ауғас ҡына ҡайтып еттеләр. Баҙарҙа йәнең теләгән бары ла бар. Әллә күпме сортлы бал, һәр төрлө майҙар, тәмле сырҙар, киптерелгән ит һәм колбасалар. Булаттың иң ҡыҙыҡҡаны шоколад ине, шуға күрә ул ифтар өсөн бер нисә төрлө шоколад та алды.

Ә инде Булаттың әсәһе алдан уҡ Рамаҙан айын ҡаршылауға әҙерләнә башлағайны. Иң башта фатирҙы яҡшылап таҙартып алды, шунан тәмле ризыҡтар бешереп ҡуйҙы, емеш-еләктән эсемлектәр ҡайнатты. Иртәгәһен башланасаҡ Изге айҙы ҡаршылауға бары ла әҙер ине.

Булатка ун йәш инде. Ул быйыл беренсе тапҡыр ураҙа тоторға йыйына, быға тиклем Булат һынау ураҙаһы ғына тота ине. Бәләкәй балаларға шулай ярай. Бындай ураҙаны төшкә тиклем генә тоталар. Хәҙер инде Булат ҙур үҫте, шуға күрә ололарса тулы ураҙа тота башлаясаҡ.

Атаһы Булатка:

- Улым, бөгөн беренсе тәрәүих намаҙы буласаҡ. Теләһәң, минең менән мәсеткә бар. Тик башта дәрестәреңде әҙерлә, - тине.

- Ярай, атай, мин хәҙер үк әҙерләргә ултырам, - тине малай.

Киске аштан һуң, Булат атаһы менән мәсеткә юлланды. Әсәһе уға, һандыҡтан сығарып, төҫлө ептәр менән сигелгән матур түбәтәй бирҙе. Уны кейеп алғас, малай үҙен ысын оло итеп хис итте. Намаҙҙан алда вәғәз тыңланылар. Аҙан әйтелгәндән һуң, намаҙ башланды. Булат тәрәүих намаҙын бик ихлас үтәне. Ә бит ул оҙаҡ ҡына дауам итте. Тәрәүихтең айырым намаҙҙары араһында матур итеп салауаттар башҡарҙылар. Атаһы менән өйгә ҡайтҡанда, Булаттың ғәҙәттәге йоҡлау ваҡыты үтеп киткән ине. Йоҡларға ятыр алдынан ул әсәһенән уны мотлаҡ сәхәргә уятыуын һораны.

- Әгәр ҙә уянмаһам, битемә һыу һиберһең, яраймы, әсәй?.. - тине малай үтенеп.

- Борсолма, улым, уятырмын, - тип тынысландырҙы әсәһе.

Булат, башы мендәргә тейеү менән, йоҡлап та китте. Иртән ул әсәһенең йомшаҡ ҡулдары битенән һыйпауын тойоп уянып китте.



- Тор, ҙур кеше, сәхәргә һуңлама, - тип әйҙәне уны яғымлы тауыш.

Йоҡоһонан уянып етмәгән килеш, Булат йыуыныу бүлмәһенә йүнәлде. Һыуыҡ һыу менән йыуынып, йоҡоно бөтөнләй ҡасырҙы ла, өҫтәл янына ултырҙы. Әсәһе унын яратҡан бәлештәрен бешергән ине сәхәр сәйенә.

- Рәхмәт, әсәкәйем, бик тәмле. Мин бер үҙем ашап бөтөрөр инем был бәлештәрҙе, - тип, рәхмәтен белдерҙе малай.

Ул, көн буйы асыҡмаҫ өсөн, яҡшылап ашап алды.

Атаһы уға:

- Улым, һыу эсеп алырға онотма, тиҙҙән иртәнге намаҙға аҙан әйтеләсәк.. Кискә тиклем ашарға ла, эсергә лә ярамағанын иҫләйһеңдер бит, - тине.

Булат тағы бер стакан һыу эсеп алды. Тештәрен таҙартҡандан һуң, ураҙа тоторға ниәт итеп, атаһының Ҡөрьән уҡыуын тыңланы. Иртәнге намаҙҙы башҡарғас, ҙур кинәнес менән яңынан йоҡларға ятты.

Йоҡоһо туйып уяныу менән, Булат бик ныҡ һыуһауын тойҙо. Һыу эсеү теләге уны аш бүлмәһенә алып килде. Һыулы кружканы иренենә тейҙерәм генә тигәндә, малай ураҙа тотҡанын иҫләне. Ирекһеҙҙән Булат сәғәткә ҡараны. Ваҡыт әле иртәнге ун ғына ине.

Булат бер аҙ аптырап ҡалды: нисек итеп кискә хәтле һыу эсмәй сыҙар икән?.. Ниндәйҙер икеләнеү ҙә барлыҡҡа килде хатта. Ләкин шул саҡ уға күңеле төпкөлөндәге тауыш: «Эй, һин ҙур бит инде!.. Ниәтеңде үтәргә тейешһең...» - тип иҫкәртте. Һәм Булат ныҡлы ҡарарға килде - нисек кенә ауыр булмаһын, Аллаһ алдында биргән һүҙҙе тоторға кәрәк. Сөнки ураҙа тоторға ниәт итеү - Аллаһ алдында һүҙ биреү тигән һүҙ.

Булатҡа нисек тә ваҡытты уҙғарырға кәрәк ине. Ул бер аҙ уйынсыҡтары менән уйнап алды. Ләкин кипкән ирендәре һәм өҫтәлдәге графин менән һыу уға тынғы бирмәнеләр. Төшкө аш мәле етеүгә, һыуһауға асығыу ҙа ҡушылды. Кис етә башлағас, Булат аш бүлмәһендә киске аш әҙерләү менән булышҡан әсәһе янына инеп ултырҙы. Шымтайып ҡалған улына ҡарап, әсәһе борсолоп һорай һалды:

- Нисек, улым, ураҙа тотоуы бик ауырмы әллә һиңә?..

- Беләһеңме, әсәй, мин әле шул тиклем Мыраубайҙан көнләшәм - уның сеүәтәһендәге һөтөнән. Мин хәҙер рәхәтләнеп һин теге көндө миңә ашата алмаған ҡарабойҙан бутҡаһын да ашап ҡуйыр инем.

Әсәһе былай тип яуап бирҙе:

- Минең үҫкәнем һин!.. Күрәһеңме, күпме фәһем алдың һин бер көн генә ураҙа тотоуҙан!.. Хәҙер һин ашарҙарына булмай интеккән ярлыларҙың хәлен аңлайһың, бер телем икмәк һәм бер йотом һыуҙың ҡәҙерен беләһең. Беҙҙең өҫтәлдәрҙе төрлө ризыҡ менән тултырған Аллаһтың ҡөҙрәте ниндәй киң икәнен дә аңлайһың. Әйҙә, улым, миңә ярҙам ит. Атайың ҡайтыуына өҫтәлде әҙерләп ҡуйайыҡ.

Булат аҙыҡ тултырылған тәрилкәләрҙе хазиналар итеп тойҙо, уларҙы һаҡлыҡ менән генә өҫтәлгә теҙҙе. Ә бит элек ул быға иғтибар ҙа бирмәй ине.

Ифтар ваҡыты еткәс, ғаилә аш өҫтәле янына йыйылды. Аҙан тауышын көткән мәлдә, атаһы Булатҡа:

- Афарин, улым!.. Ураҙаның беренсе көнөн уңышлы тамамланың. Шуның өсөн бына һиңә минән бүләк, - тиеп, атаһы уға аҡса һондо, - Ваҡтөйәк кәрәгеңә тотонорға, бер аҙнаға.

Төрлө тәмле ризыҡтар Булаттың алдында ымһындырып ултыра. Әле кисә генә ул ҡасан теләй, шунда ашай ала ине. Ә бөгөн ул, нисек кенә асыҡһа ла, сабыр ғына Аллаһ ҡушҡан ауыҙ асыу ваҡытын көтөп ултыра. Ниһайәт, манараларҙа уттар ҡабынды һәм моңло аҙан тауышы ишетелде. Был мәлдә Ураҙаның беренсе көнөн тамамлаған Булат үҙен бик бәхетле тойҙо. Ул, Аллаһ алдында биргән һүҙен тота алғаны һәм ауыр һынауҙы үтә алғаны өсөн, күңелендә сикһеҙ шатлыҡ кисерә ине.

Хәсән Тахсин ҠАРАМАН


Рамаҙан айында Көрьән Кәрим төшөрөлә башлай.
Рамаҙан - көндөҙ Ураҙа тотоу һәм төнөн тәрәүих намаҙын уҡыу айы.
Рамаҙан айында ғибәҙәт ҡылыуҙың сауабы күберәк.
YA ŞEHRİ RAMAZAN
РАМАҘАН – УН БЕР АЙҘЫҢ СОЛТАНЫ
Рамаҙан айындағы Ҡәҙер кисе - мең айҙарҙан да сауаплыраҡ.
Рамаҙан айында ризығыбыҙ бәрәкәтләнә.
Рамаҙан - сабырлыҡ айы. Сабырлыҡтың әжере - йәннәт.
Рамаҙан айы – ярҙамлашыу айы.
Рамаҙан айының башында - мәрхәмәт, уртаһында – ярлыҡау, аҙағында - тамуҡ утынан ҡотолоу.
IMAN ALLAHADIR

# НИМӘ УЛ УРАҘА?

**Ураҙа** - ул таң яҡтылығы йәйелгән ваҡыттан алып ҡояш батҡансы ашап - эсеүҙән, енси мөнәсәбәттәрҙән тыйылып тороу.



> Аллаһу Тәғәлә бойора:
>
> “Әй, иман килтергән бәндәләр, һеҙҙән алда килеп-киткәндәргә фарыз ителгәне кеүек, ураҙа тотоу һеҙгә лә фарыз ҡылынды”.
>
> (Баҡара сүрәһе, 183-сө аят).

## Кемгә ураҙа фарыз?

- Аҡылы сәләмәт,
- бәлиғ булған

→ һәр мосолманға → Рамаҙан айында → Ураҙа тотоу фарыз ☺☺☺☺

Балалар өсөн ураҙа тотоу фарыз булмаһа ла, сәләмәтлектәренә зыян килмәҫлек дәрәжәлә ураҙа тотоу уларға зарур. Балалар шулай итеп ураҙа тоторға һәм ололарҙың байрам шатлығын уртаҡлашырға өйрәнә.



## Ураҙабыҙҙың дөрөҫ булыу шарттары ниндәй?

Ураҙабыҙ ҡабул булыуы өсөн

- ниәт әйтеү һәм
- таңдан ҡояш батҡанға тиклем ураҙаны боҙа торған ғәмәлдәрҙән тыйылыу,

мотлаҡ.

☺☺☺☺

# *Рамаҙан менән бәйле терминдар*



Таң алдынан доғалар ҡабул була. Сәхәрҙәге аҙыҡ ураҙала беҙгә көс бирә. Аллаһ Илсеһе сәхәр ҡылырға кәңәш иткән: *“Сәхәр аҙығын ашағыҙ, сөнки ул аҙыкта муллыҡ һәм бәрәкәт бар”* (Бохари, Саум, 20).

Бәрәкәте яуған саҡта, таң алдынан ашарға кәрәк. Сәхәр - Аллаһ ризалығына бай мәл. Үҙ йәндәрен Аллаһҡа тапшырыусылар шул ваҡытта тәүбә, зекер, доға ҡылалар. Был ваҡытта ғибәҙәт ҡылыусылар әйтәләр һымаҡ:

“Әй Раббым! Бөтә маҡтауҙарым тик һиңә булһын! Һиңә яҡынайыр өсөн йоҡонан торҙом. Бөгөн һинең ризалығың өсөн Ураҙа тоторға ниәт ҡылдым! Аллаһым, һин минән риза булыуыңды теләйем! Әмин!”







Ифтар ваҡыты - Аллаһ өсөн көн буйы ас һәм һыуһап йөрөгәндәр өсөн иң шатлыҡлы ваҡыт. Ифтар ваҡытында Ураҙаны тота алыуына кинәнә ул. Әммә тотҡан Ураҙа өсөн ысын шатлыҡты мәңгелек тормошта ғына тоясаҡбыҙ.

**Һөйөклө Пәйғәмбәребеҙ әйткән:**

“Ураҙа тотоусыға ике шатлыҡ бар: береһе - ифтар ҡылғанда, икенсеһе - ураҙа сауаптары аша Раббыһына яҡынайғанда”.

(Бохари, Саум, 9).

Рамаҙан айында Ураҙа тотоусыларҙы Ифтарҙа һыйлау - оло сауаплы эш.

**Һөйөклө Пәйғәмбәребеҙ әйткән:**

“Кем ураҙа тотоусыны ифтарға саҡырып, уны ашатһа, ул ураҙа тотоусы һымаҡ сауап алыр. Ураҙа тотҡандың да сауабы кәмемәҫ”.

(Тирмиҙи, Саум, 82).

Ифтар ваҡытында, сәхәрҙәге кеүек, доғалар ҡабул була. Аллаһ ысын доғаларҙы ғына ҡабул итә. Был мәлдә доға ҡылырға тырышырға кәрәк.

**Һөйөклө Пәйғәмбәребеҙ әйткән:**

“Өсәүҙең доғалары кире ҡағылмаҫ: ураҙа тотоусының ифтар мәлендәге, ғәҙел хөкөм итеүсенең һәм йәберләнгәндең”.

(Тирмиҙи, Дәғүәт, 128).



**Ифтар доғаһы:**

Ифтар ваҡытында был доғаны әйтеү - сөннә:

اَللَّهُمَّ لَكَ صُمْتُ وَبِكَ آمَنْتُ وَعَلَيْكَ تَوَكَّلْتُ وَ عَلَي رِزْقِكَ أَفْطَرْتُ فَاغْفِرْ لِي مَا قَدَّمْتُ وَمَا أَخَّرْتُ

“Аллаһүммә ләкә сумту үә бикә әмәнту үә ғәләйкә тәүәккәлтү үә ғәлә ризҡыкә әфтарту фәғфирлии мә ҡаддәмту үә мә әххәрту!”

“Аллаһым! Һинең ризалығың өсөн ураҙа тоттом, Һиңә инандым, Һинең яҡлауыңа ышандым һәм Үҙең насип иткән ризыҡ менән ифтар ҡылам. Минең элекке гонаһтарымды ла, киләсәктә буласаҡ гонаһтарымды ла ярлыҡасы!”

# БЕҘ УРАҘА ТОТҠАНДА, УЛ БЕҘҘЕ ҠУРСАЛАП ТОРА

## БЕҘ НИСЕК УРАҘА ТОТАБЫҘ?




## УРАҘА БЕҘҘЕ НИСЕК ҠУРСАЛАЙ?

Ураҙа - таңдан эңергәсә ашау - эсеүҙән тыйылыу ғына түгел. Ул барлыҡ гонаһлы, яман ғәмәлдәр: ыҙғышыу, ялғанлау, ғәйбәт һөйләү кеүек кешеләрҙең күңелен китерлек эш - ҡылыҡтарҙан тыйылыу ҙа. Аллаһ Пәйғәмбәре әйтеүе буйынса, бындай Ураҙа: *“Гонаһтан һәм тамуҡтан ҡалҡан”* булып тора.

Әгәр беҙ, хәләл ризыҡтан баш тартып та, харамдан тыйылмаһаҡ, Аллаһ алдында беҙҙең ураҙабыҙ бер ни ҙә тормай. Быны Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) шулай аңлатҡан:

*“Алдау юлы менән эш иткән, алдаҡтан арынмағандарҙың ураҙаһына Аллаһ иғтибар итмәй”* *(Бохари, Саум, 8).*

# УРАҘА ТОТОУ БЕҘГӘ НИМӘ БИРӘ?

## Ураҙа тотҡан саҡта беҙ

- Аллаһтың ризалығына һәм мөхәббәтенә ирешәбеҙ.
- Аллаһҡа рәхмәтебеҙҙе күберәк белдерәбеҙ.
- Үҙебеҙҙә сабырлыҡ тәрбиәләйбеҙ.
- Насар ғәҙәттәрҙән һәм ҡылыҡтарҙан арынып, тамуҡтан һаҡланабыҙ.
- Аслыҡ һәм фәҡирлек ни икәнен тоя башлайбыҙ.
- Һаулығыбыҙҙы нығытабыҙ.

Сөнки Ураҙа - ул Аллаһтың ҡушыуы буйынса башҡарыла торған ғәмәл. Бер кем күрмәгән ерҙә ҡалып тотһаҡ та Ураҙаны, Аллаһ барыбер күрә. **Шуның өсөн беҙ Аллаһтың ризалығын, һөйөүен яулайбыҙ**.

Пәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) беҙгә Аллаһтың ошо һүҙҙәрен еткерә:

*“Минең ҡолом, ризалығымды алыу өсөн, үҙен ашау-эсеүҙән тыйып тора. Быны өсөн әжерен Үҙем бирермен”.*

(Бохари, Саум, 4)



Ғәҙәттә беҙ күп нимәнең ҡәҙерен уны юғалтҡас ҡына беләбеҙ. Ураҙа ваҡытында көнө буйы ашамай-эсмәй тороп, беҙ ризыҡ ҡәҙерен күпкә нығыраҡ белә башлайбыҙ һәм **шул саҡ Аллаһҡа рәхмәтебеҙҙе күберәк белдерәбеҙ, сөнки бар ниғмәттәрҙе беҙгә Ул ғына бирә**.

Аллаһ бойора:

“Һеҙ Мине зикер итегеҙ, Мин дә һеҙҙе зикер итәсәкмен. Миңә шөкөр итегеҙ. Аң булығыҙ, Миңә кәферлек ҡылмағыҙ!”

(Бәҡара сүрәһе, 152-се аят)

Тормош юлында беҙгә һәр төрлө ҡыйынлыҡтарҙы һәм һынауҙарҙы үтергә тура килә. Быны өсөн кешелә ныҡлы рух, сабырлыҡ булырға тейеш. Сабырлыҡ - һәр саҡта уңыш сығанағы. Ураҙа айында һәр көн иртәнән кискә тиклем ашамай-эсмәй тороу **беҙҙә сабырлыҡ тәрбиәләй**.

Аллаһ Илсеһе бойора:

**“Ураҙа – сабырлыҡтың яртыһы”**.

(Ибн Мәджә, Сыйам, 44)



139

Ялған, ғәйбәт, ғауға, кешеләрҙең хоҡуҡтарын ҡыҫыу, уларҙы рәнйетеү - былар барыһы ла тамуҡҡа илтеүсе гонаһтар. Уларҙан ҡотолоу юлы берәү - нәфсене тыйыу. Рамаҙан айы - ошо нәфсене тыйырға өйрәтеүсе мәктәп. Ураҙа тотҡан саҡта, беҙ һәр саҡ Аллаһҡа табыныуҙабыҙ, нәфсене тыйырға өйрәнәбеҙ, насар ҡылыҡтарҙан тыйылабыҙ һәм **шуның менән тамуҡҡа илтеүсе гонаһтартарҙан һаҡланабыҙ.**

Аллаһ Илсеһе бойора:

“Ураҙа - ямандан һәм гонаһтарҙан һаҡлаусы ҡалҡан ул. Ураҙа тотоусы яман һүҙҙәр әйтмәһен һәм бәхәскә инмәһен. Әгәр ҙә берәй кеше уны әрләй икән, уның уға яуабы ошолай булыр: “Мин - ураҙала”.

(Бохари, Саум, 9)



Бер ҡасан да асыҡҡаны булмаған кеше фәҡирҙең хәлен һис аңламаç. Кемгә тормош бик еңел бирелә, ул ярлының иңенә төшкән ыҙаларҙы тоя белмәç. **Ураҙа тотҡан саҡта, беҙ ас һәм ярлы хәлендә булабыҙ, улар татыған ауырлыҡтарҙы татыйбыҙ.** Шуның менән беҙ рәхимлерәк һәм шәфҡәтлерәк була башлайбыҙ һәм фәҡирҙәргә ярҙам ҡулы һуҙабыҙ.



Аллаһ Илсеһе
(саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) бойора:

“Кем һеҙҙән насарыраҡ йәшәй, шуларға ҡарағыҙ һәм үҙегеҙҙе һеҙҙән яҡшыраҡ йәшәгәндәр менән сағыштырмағыҙ. Был һеҙгә Аллаһ тарафынан бирелгән байлығығыҙҙы кәм күрергә бирмәç”.

(Мөслим, Зөһд, 9)

Беҙҙең ашҡаҙан һәм башҡа ағзаларыбыҙ ун бер ай буйына туҡтауһыҙ эшләй. Барыһына ла мәғлүм булғанса, ашҡаҙан ауырыуҙары ас тороу менән дауалана. Ураҙа тотоу - ул ас тороу. Тимәк, ураҙа менән беҙ аш эшкәртеү системаһына һәм бөтә организмға ял бирәбеҙ һәм шуның менән **һаулыҡты нығытабыҙ**.

Аллаһ Илсеһе бойора:
“Ураҙа тотоғоҙ һәм һау булырһығыҙ”.
(Тәбарани, Муғжәмүл-Әвсат, VIII, 174)



# УРАҘА ТӨРҘӘРЕ

- **ФАРЫЗ УРАҘА** ☺☺☺☺
  - Рамаҙан айындағы Ураҙа
  - Рамаҙан айындағы Ураҙа өсөн Ҡаҙа
  - Рамаҙан айындағы Ураҙа өсөн Кәффәрәт
- **ВӘЖИБ УРАҘА** ☺☺☺
  - Нәҙер Ураҙаһы
  - Нәфел Ураҙаһы өсөн Ҡаҙа
- **СӨННӘ УРАҘА** ☺☺
  - Мөхәррәм айындағы Ураҙа
  - Шәүүәл айындағы Ураҙа
  - Дүшәмбе һәм кесаҙна көндәрендәге Ураҙа
  - Ай торошо календары буйынса һәр айҙың 13, 14, 15-се көндәрендәге Ураҙа
  - Дауыт пәйғәмбәр Ураҙаһы
- **МӘКРУҺ УРАҘА** ☹☹
  - Тәхримән Мәкруһ ☹☹☹
    - Рамаҙан байрамының беренсе көнөндәге Ураҙа
    - Ҡорбан байрамы көндәрендәге Ураҙа
  - Тәнзихан Мәкруһ ☹☹
    - Ғәшүрә көнөндәге 1 көнлек кенә Ураҙа
    - Йома көнөндәге генә 1 көнлек Ураҙа
    - Шәмбе көнөндәге генә 1 көнлек Ураҙа






# УРАҘА ТӨРҘӘРЕ

Ураҙаның 4 төрө бар: фарыз, вәжиб, сөннәт, мәкруһ.

## ФАРЫЗ УРАҘА ☺☺☺☺

- Рамаҙан айындағы Ураҙа;
- Рамаҙан айындағы Ураҙа өсөн Ҡаза;
- Рамаҙан айындағы Ураҙа өсөн Кәффәрәт.

## ВӘЖИБ УРАҘА ☺☺☺

- Нәҙер Ураҙаһы;
- Нәфел Ураҙаһы өсөн Ҡаза.

## СӨННӘ УРАҘА ☺☺

Беҙҙең Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) шулай уҡ Рамаҙандан тыш та Ураҙа тотҡан, һәм сәхәбәләренә лә уларҙы тәҡдим иткән. Бына шуларҙың бер нисәһе:

- Мөхәррәм айының 9-сы һәм 10-сы йәиһә 10-сы һәм 11-се көндәрендәге Ураҙа;
- Рамаҙан Ураҙаһынан һуң Шәүүәл айындағы 6 көн Ураҙа;
- Дүшәмбе һәм кесаҙна көндәрендә Ураҙа;
- Ай торошо буйынса һәр айҙың 13, 14, 15-се көндәрендәге Ураҙа;
- Рамаҙан айынан башҡа бөтә айҙарҙа ла көн аша Ураҙа тотоу (Дауыт Пәйғәмбәр Ураҙаһы).



## МӘКРУҺ УРАҘА ☹☹

Ниндәйҙер сәбәптәр арҡаһында тоторға ярамаған Ураҙа төрҙәре:

1. Тәхримән Мәкруһ ☹☹☹
   - Рамаҙан байрамының беренсе көнөндәге Ураҙа;
   - Ҡорбан байрамы көндәрендәге Ураҙа.

2. Тәнзихан Мәкруһ ☹☹
   - Ғәшүрә көнөндәге 1 көнлек генә Ураҙа (Мөхәррәм айының 10-сы көнө);
   - Йома йәиһә шәмбе көндәрендә 1 көнлек генә Ураҙа.

✎ (Әгәр ҙә Ғәшүрә көнөндәге, йома, шәмбе көндәрендәге Ураҙалар уларҙан алда йәки аҙаҡ килгән көндәрҙә лә тотолһа, мәкруһ һаналмай).

# ҠАЗА - УРАҘА

Нимә ул ҡаза - ураҙа?

✍ Ҡаза ураҙа - ул ниндәйҙер сәбәптәр арҡаһында боҙолған, ваҡытында үтәлмәй ҡалған Фарыз Ураҙалар өсөн түләү (бурысты ҡайтарыу).

## ҠАЗА - УРАҘА ҠАСАН ТОТОЛА?

Ҡаза - Ураҙаһын Рамаҙан айынан һуң теләгән һәр көндә тоталар, әммә Ураҙа тотоу Тәхримән Мәкруһ булған көндәрҙән башҡа.





# КӘФФӘРӘТ - УРАҘА

Нимә ул кәффәрәт - ураҙа?

✍ Кем аңлы рәүештә һәм етди сәбәпһеҙ Рамаҙан айында Ураҙаһын боҙған, шул гонаһынан ҡотолор өсөн 2 ай дауамында бер өҙлөкһөҙ Ураҙа тоторға тейеш. Бындай яза Ураҙа “Кәффәрәт - Ураҙа” тип атала.

## КӘФФӘРӘТ - УРАҘАНЫҢ ОҘАЙЛЫҒЫ

Кәффәрәт - Ураҙаның оҙайлығы 2 ай - 60 көн. Тағы ла Ҡаза - Ураҙаның 1 көнөн (боҙолған Ураҙа өсөн) өҫтәһәң, 61 көн була. Халыҡ уны шуға ла “61 көнлөк” Кәффәрәт - Ураҙаһы тип атай.



# УРАҘАНЫ НИМӘ БОҘА?

Ураҙаны боҙоусы ғәмәлдәр ике төркөмгә бүленә:

## Кәффәрәт ураҙа һәм ҡаза ураҙа тотоу тейешле булған ғәмәлдәр

Рамаҙан айында ураҙа тотмау йәки ғәфү итерлек сәбәпһеҙ уны боҙоу - оло гонаһ. Әгәр ҙә беҙ ураҙала булып, аңлы рәүештә (оноҡандан түгел) уны боҙабыҙ икән, Аллаһтан ғәфү үтенергә тейешбеҙ. Һәм гонаһты юйыр өсөн, ике ай кәффәрәт - ураҙа һәм бер көн ҡаза - ураҙа тотоу мотлаҡ.

- Ғәфү итмәҫлек сәбәп арҡаһында ашаһаң, эсһәң,
- Енси мөнәсәбәттәргә инһәң -

кәффәрәт ураҙа һәм ҡаза ураҙа тотоу мотлаҡ.





## Тик ҡаза ураҙа тотоу тейешле булған ғәмәлдәр

Ҡайһы ваҡыт, ғәфү итәрлек сәбәп арҡаһында, ураҙа боҙолоуы мөмкин. Был осраҡта ураҙа боҙолған көндәр өсөн ҡаза - ураҙа тотолорға тейеш.

Ҡаза ураҙа мәжбүри булған ҡайһы бер хәлдәр:

- Ураҙа тотоуыбыҙҙы онотоп, ашаған, эскән булһаҡ, һәм, иҫебеҙгә төшөп тә ашап - эсеүебеҙҙән туҡтамаһаҡ*;
- Әгәр ҙә азыҡ ҡушымтаһына инмәгән (мәҫәлән, ҡағыҙ йәки тупраҡ ) нәмәләрҙе ашаһаҡ йә эсһәк;
- Имсаҡ ваҡытының еткәнен белмәйенсә, ашау - эсеүҙе дауам итһәк;
- Эңер етмәгәнен белмәй, ҡояш батты, тип уйлап, ифтар ҡылып ҡуйһаҡ;
- Тештәр араһына ҡыҫылған борсаҡтай аҙыҡты йотоп ебәрһәк;
- Ауыҙ йә танау сайҡатҡанда һыу йотоп ебәрһәк;
- Әгәр беҙ ауыҙға эләккән ямғыр тамсыһын, ҡарҙы, боҙҙо аңғармайынса йотоп ебәрһәк;
- Танау йә ҡолаҡҡа дарыу тамыҙһаҡ;
- Әгәр ҙә бойороу йә янау арҡаһында ураҙаны боҙһаҡ;
- Аңлы рәүештә йә берәй сәбәп менән Рамаҙандан башҡа теләһә ниндәй ураҙаны боҙһаҡ.

Ҡаза ураҙа тотоу тейешле.

* Кем дә булһа, Ураҙа тотоуын онотоп, ашап - эсеп ҡуйһа, ураҙаһы боҙолмай. Тик ураҙаһы иҫкә төшөү менән ашау - эсеүҙе туҡтатырға тейеш. Иҫенә төшкәндән һуң нимәнелер йотһа, уның ураҙаһы боҙола.

# УРАҘАНЫ БОҘМАЙ ТОРҒАН ҒӘМӘЛДӘР

- Ураҙа тотоуыңды онотоп, ашау йәки эсеү*;
- Тештәр араһына ҡыҫылып ҡалған борсаҡ дәүмәленән бәләкәйерәк аҙыҡ киҫәген йотоп ебәреү;
- Төкөрөктө йотоу;
- Ауыҙ сайҡатҡандан һуң, төкөрөклө һыуҙы йотоу;
- Ирекһеҙҙән танауға йә ауыҙға эләккән туҙан һәм төтөндө һулау;
- Ҡолаҡҡа һыу кереү;
- Ихтилам;
- Йыуыныу;
- Күҙгә дарыу һалыу;
- Сәскә һәм хуш еҫле нәмәләрҙе еҫнәү;
- Тештәрҙе һурҙырыу**;
- Ирекһеҙҙән ҡоҫоу;
- Ауыҙға һыйышлы ҡоҫҡолоҡто йотоп ебәреү;
- Аҙыҡты йотмай тәмләп ҡарау***;
- Тештәрҙе таҙартыу;
- Ҡан биреү.

Ураҙаны боҙмай.

Һөйөклө Пәйғәмбәребеҙ әйткән:

«Әгәр кеше ураҙа тотоуын онотоп, ашаған йә эскән икән, ураҙаһын дауам итһен. Сөнки уны Аллаһ ашатҡан һәм эсергән».

(Бохари, Саум, 9)

* Әгәр кеше ураҙа тотоуын онотоп ашаған йә эскән икән, иҫенә төшөү менән ашау йә эсеүенән туҡтаһа, ураҙа боҙолмай. Ул ауыҙын сайҡатырға һәм ураҙаһын дауам итергә тейеш. Әгәр кеше ураҙа тотҡанын иҫенә төшөрөп тә ашау - эсеүен дауам итһә, ураҙаһы боҙола ҡаза - ураҙа мотлаҡ үтәлергә тейеш.

** Теш һурҙырғанда ауыртыуҙы баҫа торған “спрей” ҡулланыу ураҙаны боҙмай, ә энә менән сәнсеп ауыртыуҙы баҫыу боҙа.

*** Аҙыҡты йотмайынса тәмләп ҡарау мәкруһ һанала. ☹☹



# ҠАЙҺЫ ОСРАҠТАРҘА УРАҘА ТОТМАҪҠА ЯРАЙ?

Ислам - еңеллек дине. Аллаһ Тәғәлә үҙенең ҡолдарына хәлдәренән килмәҫлек һынауҙар ебәрмәй. Был ураҙаға ла ҡағыла. Рамаҙан айында сәбәпһеҙ ураҙа тотмау - гонаһ. Әммә ҡайһы бер осраҡтарҙа Рамаҙан айында ураҙа тотмау, йә булмаһа башлаған ураҙаны туҡтатыу мөмкин, тик ураҙа тоторға мөмкинлек булыу менән, үтәлмәгән көндәр өсөн ҡаза ураҙа тотоу мотлаҡ.

Беҙҙең динебеҙ Рамаҙан айында ураҙа тотмауҙың һәм башланған ураҙаны туҡтатыуҙың түбәндәге осраҡтарын билдәләй:

| | | |
|---|---|---|
| 1 | Сәйәхәт | Рамаҙан айында 90 саҡрымдан алыҫыраҡ сәйәхәт ҡылыусы, барып етеү урынында 15 көндән кәмерәк буласағын ниәтләгән кешегә ураҙа тотмаҫҡа мөмкин. Тик ураҙа тотоу һәйбәтерәк . |
| 2 | Сир | Ауырыуының көсәйеүенән йә һауығыуын кисектереүенән хәүефләнгән кешегә ураҙа тотмаҫҡа мөмкин.<br>“Ураҙа сирҙе көсәйтәсәк һәм һауығыуҙы кисектерәсәк”, - тигән һығымтаны Ислам динен ҡабул иткән табип ҡына билдәләй ала. Шундай мөмкинлек булмағанда, кеше үҙенең һиҙемләүе буйынса эшләргә тейеш. |
| 3 | Өлкән йәш | Ураҙа тотарлыҡ хәле булмаған ололар ураҙа тотмаһалар ҙа була.<br>Ҡаза ураҙаны ла тота алмаған ололар, ураҙаның һәр көнө өсөн бирәр фидиә бирәләр. |
| 4 | Йөклө һәм бала имеҙеүсе ҡатындар | Йөклө йәки бала имеҙеүсе ҡатындар, ураҙа уларға һәм балаларының сәләмәтлегенә зыян килтерәсәк, тип иҫәпләһәләр, ураҙа тотмаһалар ҙа була. |
| 5 | Күрем һәм ҡатындарҙың бала тапҡандан һуңғы хәл-торошо | Ураҙа тотҡанда күрем башланһа йәки бала тыуһа, ураҙа боҙола. Был хәл-торош тамамланғансы, ураҙа тотоу тыйыла. |
| 6 | Һуғыш | Рамаҙан айында яуҙа булған ир-егет ураҙа уны хәлһеҙләндерә, - тип иҫәпләһә, ураҙа тотмаһа ла гонаһ түгел. |
| 7 | Баҫым эһау, йә иһә янау | Кешегә үлем йәки түҙәлмәҫлек яра менән янап, ураҙаһын туҡтатыуын талап итһәләр, ураҙаны тотмаҫҡа мөмкин. |
| 8 | Аслыҡ һәм һыуһау | Ураҙа тотоусы, ураҙа ваҡытында кисерелгән асығыу һәм һыуһау уның сәләмәтлегенә һәм зиһененә һиҙелерлек зыян килтереүенә хәүефләнһә, ураҙаны туҡтата ала. |

## УРАҘА ӨСӨН ФИДИӘ

Ураҙа тоторға хәле етмәгән ололар, һауығыуға өмөтө булмаған сирлеләр Рамаҙан айында үтәлмәй ҡалған ураҙа өсөн ҡаза ураҙа тотмайҙар. Уның урынына Рамаҙан ураҙаһының һәр көнө өсөн ярлыларға һәм мохтаждарға аҙыҡ йә ашар өсөн өсөн аҡса бирәләр. Был “фидиә” тип атала.

Фидиә күләме Рамаҙан айында бирелә торған фитыр саҙаҡаһының күләменә тигеҙ булырға тейеш. Ураҙаның бер көнө өсөн фидиә - бер кешене иртәле-кисле ашатыуға йә шуға етерлек аҙыҡ алыр өсөн аҡсаға тиң. Фидиәнең күләме һәр кемдең донъяуи мөмкинлектәренә бәйле.

## ФИТЫР САҘАҠАҺЫ

**Фитыр саҙаҡаһы** - ул беҙҙең динебеҙ буйынса бай мосолмандарҙың үҙе һәм ғаилә ағзалары өсөн биргән хәйере. Рамаҙан айында фитыр - саҙаҡа биреү вәжиб һанала.

Фитыр саҙаҡаһының иң аҙ күләме көн буйы бер кешене туйындырыуға киткән аҙыҡ йәки шул аҙыҡты һатып алыр өсөн аҡса миҡдары. Фитыр саҙаҡаһы күләменең сиге юҡ. Кем күберәк бирә, шул күберәк сауап ала.

Фитыр саҙаҡаһын Ураҙа байрамына тиклем бирергә кәрәк. Сөнки бының менән мохтаж һәм ярлыларға Ураҙа байрамын булдырабыҙ, байрам итергә мөмкинлек бирәбеҙ.

Фитыр саҙаҡаһы - ул беҙҙең тән һәм сәләмәтлек өсөн хәйер. Ул беҙҙе бар иткән, мосолман итеп булдырған, именлектә һәм һаулыҡта Рамаҙан айында ураҙа тоторға мөмкинлек биреп, Ураҙа байрамына тиклем йәшәткән Аллаһҡа рәхмәт әйтеү сараһы.

## НӘҘЕР УРАҘАҺЫ

Нәҙер ураҙаһы - ул Аллаһ өсөн ураҙа тотоу. Был ураҙаны тотоу вәжиб һанала.

Нәҙер ураҙаһының ике төрө бар:

1. Ниндәйҙер шарт менән үтәлгән нәҙер ураҙаһы.
   - Мәҫәлән, “Әгәр әсәйем һауыҡһа, мин Аллаһ ризалығы өсөн өс көн ураҙа тотам”, әгәр ҙә әсәй һауыҡһа, өс көн ураҙа тотоу зарур.
2. Ниндәйҙер шарт ҡуйылмаған нәҙер ураҙаһы.
   - “Мин Аллаһ өсөн бер көн ураҙа тотам”, тип вәғәҙәләгәндә, теләһә ниндәй көндә ураҙа тотоп, вәғәҙәне үтәйбеҙ. “Киләһе дүшәмбелә ураҙа тотасаҡмын”, тип вәғәҙәләһәк, шул дүшәмбелә ураҙа тотоу кәрәк.

# ТӘРӘҮИХ НАМАҘЫ ☺☺

- Тәрәүих намаҙы - ул Рамаҙан айында уҡыла торған егерме рәкәғәтле намаҙ. Ирҙәр һәм ҡатын-ҡыҙҙар өсөн был намаҙҙы үтәү - сөннә-мөәккәдә була.
- Тәрәүих намаҙҙы мәсеттә йәмәғәт менән дә, өйҙә яңғыҙ ҙа уҡырға мөмкин. Әммә йәмәғәт менән уҡыу күпкә сауаплыраҡ.
- Ниндәйҙер сәбәптәр арҡаһында ураҙа тотмаған кеше өсөн тәрәүих намаҙ уҡыу - сөннә.

# ИҒТИКӘФ ☺☺

✍ Мәсеттә Аллаһҡа ғибәҙәт ҡылыу маҡсаты менән яңғыҙ ҡалыу “иғтикәф” тип атала.

- Рамаҙан айында Ураҙа фарыз ғәмәл булып киткәндән һуң, беҙҙең Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) ғүмеренең аҙағына тиклем Рамаҙан айының һуңғы ун көнөндә иғтикәфтә булған. Шунлыҡтан Рамаҙан айының аҙаҡҡы ун көнөндә иғтикәфтә булыу - сөннә.
- Иғтикәф алдынан хуш еҫтәр аңҡыған таҙа кейем кейергә кәрәк. Иғтикәфтә Ҡөрьән Кәрим, хәҙистәр, дини китаптар уҡыу, зекер ҡылыу, нәфел һәм ҡаза намаҙҙарын үтәү зарур. Аллаһ янында икәнлегеңде белгәнлектән, һәр саҡ доғала булырға, кәрәкмәгән буш һүҙ - хәбәрҙән тыйылырға, үҙ тәртибең һәм ҡылыҡтарыңды күҙәтергә тырышырға кәрәк.



### БЕРЕНСЕ ТӘРӘҮИХ

Рамаҙан айының хәйерле кистәренең береһе. Рамаҙан айы тамамланыуға өсе көн ҡалған саҡ. Әлеге көнгә тиклем Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) Йәстү намаҙынан һуң өйөнә ҡайта ине. Тик был төндә ул тәүге тапҡыр тәрәүих намаҙын үтәне һәм йәмәғәт тә уның артынан тәрәүих намаҙ уҡыны. Тәрәүих төндөң өстән бер өлөшө дауамында булды.

Иртәгеһе көндө кешеләр телдән - телгә Аллаһтың Пәйғәмбәренең (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) тәрәүих намаҙ уҡыуын еткерҙеләр. Әммә шул уҡ көндөң кисендә ул йәмәғәт менән тәрәүих намаҙ уҡымай. Артабанғы көндә ул тағы ла мәсеттә тәрәүих намаҙ уҡый. Намаҙ төн уртаһына тиклем дауам итә. Ә киләһе көндә ул тағы ла йәмәғәт менән тәрәүих намаҙ үтәмәй.

Һәм, ниһайәт, Рамаҙан айы тамамланыуға өс көн ҡалғас, ул йәмәғәт менән төн буйы тәрәүих намаҙ уҡый. Әммә, тәрәүих намаҙ фарыз икән, тигән хаталы фекер ҡалмаһын өсөн, ул йәмәғәт менән тәрәүих намаҙ уҡымай, өйҙә яңғыҙ үтәргә тәҡдим итә.

Йәмәғәт менән мәсеттә тәрәүих - намаҙ уҡыу Хәлиф Ғүмәр (разыйаллаһу ғәнһү) замаынында расҙана.





# ҠӘҘЕР КИСЕ

Рамаҙан айы башҡа айҙар араһында нисек айырым урын биләһә, Ҡәҙер кисе лә башҡа кистәр араһында шундай уҡ айырым урын биләй. Был төн хаҡында Аллаһ Сүбхәнә вә Тәғәлә: **“Хәҡикәт шулдыр: Беҙ уны (Ҡөрьәнде) Ҡәҙер кисендә индерҙек. Ҡәҙер кисенең нәмә икәнен һин белмәйһеңме? Ҡәҙер кисе мең айҙан да хәйерлерәк. Ул төндә фәрештәләр менән Изге Рух (Ябраил), Раббының рөхсәте менән, Унын әмерҙәрен еренә еткерер өсөн, бер-бер артлы төшөр. Ҡәҙер кисе - именлек кисәһе - таң ата башлағанға саҡлы дауам итер”** - тиеп бойора.

Ҡәҙер төнө - ул изге төн, ул төн Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләнең рәхмәте төшә, гонаһтар ярлыҡана һәм мөьминдәрҙең доғалары ҡабул ителә.

Пәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) Рамаҙандың һуңғы ун көнөндә бигерәк тә күп ғибәҙәт ҡылған. “Мең айҙан да яҡшыраҡ” булған “Ләйләтүл-Ҡәҙер” кисенең ошо кистәр араһында булыуы - бының сәбәптәренең береһе.

Беҙ ҙә Рамаҙандың һуңғы ун көнөнә, бигерәк тә 27-се төнөнә, шундай айырым иғтибар бүлергә тейешбеҙ. Ҡиммәте буйынса һикһән өс йыл ғүмергә тиң был төндә беҙ Аллаһ Сүбхәнә вә Тәғәләнең ризалығын алырға тырышырға тейешбеҙ. Ҡөрьәндең беренсе аяттары индерелгән, Исламдың ҡояшы ҡалҡҡан был төндә,

мәсеттә вәғәздәр тыңлап,

Ҡөрьән уҡып,

намаҙҙа булып,

доға ҡылып,

салауат әйтеп,

Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләнән гонаһтар өсөн ярлыҡау һорап

һәм ул көндөң юғары дәрәжәһен белеп үткәрергә кәрәк был төндә.

**Һөйөклө Пәйғәмбәребеҙ әйткән:**

“Фазилиәтле булыуына ышанып һәм Аллаһтан әжерен көтөп, Ҡәҙер кисен тейешенсә үткәргән кешенең элекке гонаһтары ғәфү ителер”.

(Бохари, Иман, 25)

Ғәйшә (разыйаллаһу ғәнһә) бер көн Пәйғәмбәребеҙҙән һораған:

“Йә Расүлүллаһ! Ҡәҙер кисе ҡайһы төндә буласағын белһәм, ул төндә ниндәй доға ҡылайым?”

Пәйғәмбәребеҙ уға ошо доғаны өйрәткән: “Аллаһым! Һин - Ярлыҡаусыһың, ғәфү итеүҙе һөйәһең, мине ғәфү ит!”

(Тирмиҙи, Дәғүәт, 84)

**Ҡәҙер кисе уҡынасаҡ доға**

اَللّٰهُمَّ اِنَّكَ عَفُوٌّ تُحِبُّ الْعَفْوَ فَاعْفُ عَنِّى

Аллаһуммә иннәкә ғәфуун тухиббуль-ғәф’үә фәғфу ғәнни!

*“Аллаһым! Һин - Ярлыҡаусыһың, ғәфу итеүҙе һөйәһең, мине ғәфу ит!”*






# УРАҘА БАЙРАМЫ

Ислам ҡанундары буйынса, Рамаҙан айында ураҙа тотоу - фарыз ғәмәл. Шәүүәл айының беренсе көнө мосолмандар өсөн байрам һанала.

Ураҙаның һуңғы көндәрендә Рамаҙан айы менән хушлашыу һағышы, икенсе яҡтан байрам яҡынлашып килеү шатлығы кисерәбеҙ. Рамаҙандың һуңғы төнөндә беҙ был айҙың дәрәжәһен баһалай һәм Рамаҙандың мәнфәғәте менән файҙалана алдыҡмы, шул хаҡта уйлап һәм киләһе ураҙаға ҡәҙәр йәшәүебеҙҙе һорап доға ҡылып, байрамға әҙерләнергә тейешбеҙ. Икенсе көндә иртәнсәк, байрамса кейенеп, мәсеткә ашығабыҙ. Байрам көнө байрам намаҙынан, Раббыға рәхмәт белдереүҙән башлана.

Байрам – ул ял түгел, ә йәмәғәт менән шатлыҡ һәм ҡыуаныста үткәргән көн. Байрам көнөндә ата-әсәйҙәребеҙҙе, туғандар һәм дуҫтарыбыҙҙы ҡотлайбыҙ, хәл-әхүәлдәрен белешәбеҙ һәм беҙгә яҡшылыҡ теләп уҡыған доғаларын ҡабул итәбеҙ. Ата-әсәй, туғандар һәм дуҫтарыбыҙға барабыҙ. Кешене йылмайып ҡаршы алабыҙ, уларҙы байрам менән ҡотлайбыҙ. Етем һәм үгәйһетелгәндәрҙе шатландырырға тырышабыҙ, сырхау һәм ҡарттарҙың хәлен беләбеҙ. Бер-беребеҙҙән ғәфү үтенәбеҙ, дуҫлыҡты тергеҙәбеҙ, асыуланышҡандарҙы татыулаштырабыҙ. Шуға күрә байрамда туғанлыҡ һәм дуҫлыҡ ептәре нығына. Тағы ла күберәк мәрхәмәт хистәре, кешеләрҙең үҙ-ара ярҙам һәм хәстәрлеге беленә. Күңел ишектәребеҙ мохтаж, етем һәм яңғыҙ кешеләр өсөн асыла.

# ПӘЙҒӘМБӘР ӘФӘНДЕБЕҘ РАМАҘАНДЫ НИСЕК ҮТКӘРГӘН

## Рамаҙан өсөн Пәйғәмбәр Әфәндебеҙҙең ҡыуаныслы хәбәре

Аллаһ Рәсүле Рамаҙан айын һағышланып көткән. Өс мөбәрәк ай еткәс, шатланып: “Әй, Аллаһым, Рәджәб һәм Шәғбанды беҙгә бәрәкәтле ҡыл һәм беҙҙе (сәләмәтлектә) Рамаҙан айына өлгәштер”, - тиеп доға ҡылған.

Рәжәп һәм Шәғбан айҙарында ғәҙәттәгегә ҡарағанда күберәк ураҙа тотҡан. Ә Рамаҙан тураһында ошондай ҡыуаныслы хәбәр еткергән:

*“Рамаҙан еткәс, ожмах ишектәре шар асылыр, тамуҡ ишектәре ябылыр, шайтан яуызлығы йөйылыр”.*

*“Ожмахтың һигеҙ ҡапҡаһы бар. Бер ҡапҡаның исеме – Райан. Был ҡапҡа аша кем ураҙа тотҡан, шулар ғына үтер. Һуңғы ураҙа тотоусы ингәс, Райан ҡапҡаһы ябылыр. Был ҡапҡа аша инеүселәргә, эсемлек тәҡдим ителер, уны эскәндән һуң, бер ҡасан да сарсау кисермәҫтәр”.*



## Пәйғәмбәр Әфәндебеҙҙең сәхәре

Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ сәхәр ваҡытын айырыуса баһалаған. *“Һаҡ булығыҙ, сәхәргә тормай ҡалмағыҙ, сөнки сәхәр ризығы - ул мөбәрәкле ризыҡ”*, - тиеп әйткән.

Пәйғәмбәр Мәсетендә йәшәүсе ярлы сәхәбәләрҙең береһе Ирбаз Сәриәне сәхәргә саҡырып, уға: *“Мөбәрәкле ризыҡҡа рәхим итегеҙ”*, - тиеп әйткән.

Ә икенсе тапҡыр сәхәрҙең мәғәнәһен ошолай аңлатҡан: *“Сәхәр ризығы - мөбәрәкле ризыҡ. Уны ашамай ҡалмағыҙ. Бер йотом һыу менән булһа ла сәхәр ҡылығыҙ. Сөнки Аллаһ Сүбхәнә вә Тәғәлә һәм Уның фәрештәләре, кем сәхәр ҡыла, шуға мәрхәмәт яуҙырыр”.*

## Пәйғәмбәр Әфәндебеҙҙең ифтары

Кем Аллаһ Сүбхәнә вә Тәғәләгә тоғро һәм итәғәтле, шул ҡолонан Ул риза булыр. Ифтар - ул тоғролоҡ һәм итәғәтлелектең күпкә асыҡ сағылған осоро. Шуға күрә Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ ифтар ваҡытын иғтибар менән күҙәткән. Унын әйтеүе буйынса, Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә ҡолдарының, бала кеүек ҡыуанып, ифтар ҡаршылап ураҙаларын тамамлағандарынан ҡәнәғәт: «Минең өммәм бер мәлгә булһа ла ифтарға һуңламаҫҡа тырышһа, уларҙы изгелек һәм бәрәкәт ҡалдырмаҫ».

Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ ифтар ваҡытында доға кире ҡағылмай тиеп әйткән һәм ифтар алдынан түбәндәгесә доға ҡылған: «Әй, Аллаһ! Бер Үҙеңдең ризалығың өсөн ураҙа тоттом. Һинең ебәрелгән ризығың менән ураҙамды тамамлайым». Бынан һуң финик менән, әгәр булмаһа, йотом һыу менән ризыҡлана башлаған һәм быны үҙенең сәхәбәләренә кәңәш иткән.




## Пәйғәмбәр Әфәндебеҙҙең Рамаҙан айындағы йомартлығы

Пәйғәмбәр Әфәндебеҙҙең барыһында ла һоҡланыу тыуҙырған йомартлығы Рамаҙан айында айырыуса артҡан. Изге өс ай дауамында Ул «туҡтауһыҙ иҫкән елгә» ҡарағанда ла йомартыраҡ була. Әгәр ҡулына ниндәй ҙә байлыҡ килһә, шунда уҡ уны мосолмандарға тараткан. Әгәр унан низер һораһалар, шунда уҡ һорағандарын бирергә тырышҡан. Әгәр үҙенеке булмаһа, башҡаларҙан бурысҡа алған. Саҙаҡаның ниндәйе яҡшы, тиеп һораһалар: «Рамаҙан ваҡытында бирелгән саҙаҡа», - тиеп яуаплаған.



## Пәйғәмбәр Әфәндебеҙҙең Рамаҙан айындағы ғибәҙәте

Рамаҙан аҙағына яҡынлашҡанда, Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ тағы ла күберәк ғибәҙәт ҡыла башлаған. Мең айҙан да өҫтөнөрәк Ләйләтүл-Ҡәҙер төнө Рамаҙандың һуңғы ун көнөнөң береһенә, моғайын да 25, 27, йә 29-сы төнөнә тура киләләр, һәм был Пәйғәмбәр Әфәндебеҙҙе, төндөң бәрәкәтен ебәрмәҫ өсөн тағы ла күберәк ғибәҙәт ҡылырға дәртләндергән. Ул әйткән:

«Кем дә кем, Ләйләтүл-Ҡәҙер төнөнөң бөйөклөгөн ҡабул итеп һәм Аллаһ Сүбхәнә вә Тәғәләнең әжеренә өмөтләнеп намаҙ ҡыла, үткән гонаһтары ғәфү ителер».

Рамаҙандың һуңғы ун көнөн Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ үҙенең мәсетендә, иғтикәфтә уҙғарған. Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләне зурлап зекер әйткән һәм доға менән мөрәжәғәт иткән. «Раббым, мин һинең ишегең төбөндә. Һәм һин мине ғәфү итмәйенсә, бынан китмәйем», тигән, намаҙ ҡылған.

М. Йәшәр Ҡандемир

### Ураҙа һәм Ҡөрьән Кәрим кешегә шәфәғәт ҡылыр

Рамаҙан айында Ҡөрән уҡыу айырыуса күңелдәрҙе байытыуын иғтибар өҫтөнә алып, Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ әйткән:

*“Рамаҙан айында тотолған ураҙа һәм уҡылған Ҡөрьән Кәрим кешегә шәфәғәт ҡылыр.*

Ураҙа әйтер:

*“Әй Раббым! Көн дауамында был колдо мин ризыҡтан һәм тән теләктәренән ситләттем. Минең шәфәғәтемде был колоң өсөн ҡабул ит!”*

Ҡөрьән Кәрим әйтер:

*“Әй Раббым! Был колдо мин төнгө йоҡонан ситләттем. Минең шәфәғәтемде был колоң өсөн ҡабул ит!”*

Шулай итеп улар икеһе лә ул кешегә шәфәғәт ҡылырҙар”.

Әхмәд бин Хәнбәл, Мүснәд, VI, 188

## *РАМАҘАНДА ТЫУҒАН УЙҘАР*

*Асып ҡуй алдыңа Ҡөрьән,*
*Уҡы һәр даим ихлас менән,*
*Табырһың ҡәлбеңә дарман.*
*Кис, көндөҙ уҡы Ҡөрьән.*

*Донъямды паклайым, тиһәң,*
*Йөҙөмдө аҡлайым, тиһәң,*
*Үҙемде һаҡлайым, тиһәң,*
*Кис, көндөҙ уҡы Ҡөрьән.*

*Шәфәғәт табайым, тиһәң,*
*Мәғрифәт алайым, тиһәң,*
*Раббыма барайым, тиһәң,*
*Кис, көндөҙ уҡы Ҡөрьән.*

*Бәрәкәт табайым, тиһәң,*
*Әжер-сауап алайым, тиһәң,*
*Ҡөрьән әһеле булайым, тиһәң,*
*Уҡы ихлас менән Ҡөрьән.*

*Күңелем һаҡлайым, тиһәң,*
*Ҡәберемде нурлайым, тиһәң,*
*Йәннәт әһеле булайым, тиһәң,*
*Кис, көндөҙ уҡы Ҡөрьән.*



# ҺОРАУҘАР

## Белемебеҙҙе тикшерәбеҙ

Дөрөҫ яуаптарҙы билдәләгеҙ.

- Ураҙа тотҡан саҡта, беҙ һәр саҡ Аллаһҡа табынабыҙ, нәфсене тыйырға өйрәнәбеҙ, насар ҡылыҡтарҙан тыйылабыҙ һәм шуның менән тамуҡҡа илтеүсе гонаһтарҙан һаҡланабыҙ. ☐ дөрөҫ ☐ хата
- Ураҙаны сәбәпһеҙ һәм үҙ ирке менән боҙоусы кеше кәффәрәт һәм ҡаза ураҙаһы тоторға бурыслы. ☐ дөрөҫ ☐ хата
- Фидиә - оло йәштәге һәм һауығыуға өмөттәре булмаған сирле кешеләрҙең тота алмаған ураҙаһының һәр көнөнә биргән аҡсаһы йәки аҙыҡ-түлеге ул. ☐ дөрөҫ ☐ хата
- Кәффәрәт ураҙаһы - Аллаһу Тәғәлә ризалығы өсөн тотолған нәҙер ураҙаһы ул. ☐ дөрөҫ ☐ хата
- Ифтар - ғибәҙәт ҡылыу маҡсаты менән мәсеттә яңғыҙ ҡалыу. ☐ дөрөҫ ☐ хата
- Рамаҙан айының Миғраж кисендә Изге Ҡөрьәндең тәүге аяттары төшөрөлдө. ☐ дөрөҫ ☐ хата
- Ураҙа мәлендә онотолоп китеп ашап - эсеү ураҙаны боҙа. ☐ дөрөҫ ☐ хата
- Пәйғәмбәрбеҙ әйтеүе буйынса, ураҙа: “Гонаһтан һәм тамуҡтан ҡалҡан” булып тора. ☐ дөрөҫ ☐ хата

## Үҙебеҙҙе тикшерәбеҙ

**1. Нимәләр Рамаҙан айы менән бәйләнмәгән?**

а) Хаж ҡылыу.

б) Ураҙа тотоу.

в) Ҡөрьәндең төшөрөлә башлауы.

г) Ҡәҙер кисе.

**2. Ураҙа тотоусыларға ҡайһыһы ҡағылмай?**

а) Ураҙа аша Аллаһтың Һөйөүенә һәм Ризалығына лайыҡ булабыҙ.

б) Ураҙа тотоп, ярлыларға ярҙам итәбеҙ.

в) Ураҙа мәлендә, гонаһтарҙан ситләшеп, үҙебеҙҙе тамуҡтан һаҡлайбыҙ.

г) Ураҙа аша сабырлыҡҡа өйрәнәбеҙ.

**3. Ураҙаның ниндәйе вәжиб?**

а) Нәфел ураҙа
б) Мөхәррәм айындағы ураҙа
в) Нәҙер ураҙаһы
г) Рамаҙан айындағы ураҙа

**4. Төн үтеп, таң һыҙыла башлауы нисек атала?**

а) Имсак б) Сәхәр
в) Ифтар г) Иғтикәф

**5. Ураҙаны нимә боҙмай?**

а) Аҙыҡ-түлектә ҡулланылмаған нәмәләрҙе ашау.
б) Төкөрөктө йотоу.
в) Үҙ ихтыярың менән ямғыр тамсыһын йәки ҡар бөртөгөн йотоу.
г) Тәһәрәт алғанда һыу йотоу.

**6. Нимә ураҙаны боҙа һәм ҡаза ҡылырға мәжбүр итә?**

а) Йыуынғанда ҡолаҡҡа һыу инеүе.
б) Ихтыярһыҙҙан тамаҡҡа туҙан, төтөн инһә.
в) Ураҙаны баҫым яһау йәки янау нигеҙендә туҡтатыу.
г) Ихтыярһыҙҙан ҡоҫоу.

**7. Мосолмандар ниндәй төп сәбәп менән Рамаҙан айында ураҙа тоталар?**

а) Тәндең теләктәрен тыйыу ниәте менән.
б) Сәләмәт булыу теләге менән.
в) Тирә-йүндәге кешеләр менән араларҙы боҙмаҫ өсөн.
г) Аллаһтың әмерен үтәү өсөн.

**8. Ураҙаны нимә боҙмай?**

а) Ҡояш байыған, тип уйлап, ифтарға тиклем ашау.
б) Арыуҙы бөтөрөү өсөн ҡойоноу.
в) Тештәр араһында ҡалған борсаҡ ҙурлығында аҙыҡты йотоу.
г) Ихтыярһыҙҙан ямғыр тамсыһын йәки ҡар бөртөгөн йотоу.

**9. Ниндәй сәбәп менән Рамаҙан айы ураҙаһын өҙөргә ярамай?**

а) Ҡунаҡ килһә.
б) Үлем йәки ауыр яра менән янау.
в) Һуғыш.
г) Сәйәхәт.



## Төшөп ҡалған һүҙҙәрҙе тултырабыҙ

**( Ҡәҙер / мәрхәмәтлелек / ғәфү ит / алтмыш бер / ярлыҡау / ҡаза / нәҙер / сәләмәт / Раййән )**

1. Рамаҙан айының башы - ..........., уртаһы - ..........., аҙағы - Йәһәннәм Утынан ҡотолоу.
2. Ураҙа тотоғоҙ - ........... булырһығыҙ.
3. Кәффәрәт ураҙаһын, ғәҙәттә, ........... көн тоталар.
4. Онотолоп китеп ашап-эсһәң, барыбер ураҙам боҙолдо, тип, ашау-эсеүҙе дауам итһәң, .......... ураҙаһын тотоу талап ителә.
5. Аллаһ ризалығы өсөн тоторға вәғәҙә иткән ураҙа - ........... ураҙаһы тип атала.
6. Ҡәҙер төнөндә Аллаһ Илсеһе ошолай тип доға ҡылған: “Аллаһым! Һин - Ярлыҡаусыһың, ғәфү итеүҙе һөйәһең, мине ...........!”
7. Ожмахтың һигеҙ ҡапҡаһы бар. Береһенең атамаһы - ............ Был ҡапҡа аша тик ураҙа тотҡандар ғына үтә ала. Ураҙа тотоусыларҙың иң һуңғыһы ингәндән һуң, Раййән ҡапҡаһы ябыласаҡ. Ошо ҡапҡанан ингәндәргә эсемлек тәҡдим ителер. Уны эскәндәр бер ҡасан да сарсау кисермәҫ”.






БАЙ МЕНӘН ФӘҠИР АРАҺЫНДАҒЫ КҮПЕР

# ЗӘКӘТ

- Саҙаҡа һәм зәкәт
- Нимә ул зәкәт?
- Зәкәт беҙгә нимә бирә?
- Зәкәт биреү ҡағиҙәләре
- Зәкәт нисек түләнә?
- Пәйғәмбәребеҙҙең йомартлығы





# ШӨКӨР ИМТИХАНЫ

Бөйөк Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) үҙенең сәхәбәләренә йыш ҡына боронғо халыҡтарҙың тормошонан хикәйәттәр һөйләр булған. Шул хикәйәттәрҙең береһе.

«Йәшәгән, ти, өс йәһүд. Уларҙың береһе - пеләш, икенсеһе - шаҙра, өсөнсөһө һуҡыр булған. Аллаһ, уларҙы һынап ҡарамаҡ булып, яндарына фәрештә ебәргән. Фәрештә шаҙра янына килеп:

- Иң ҙур теләгең нимә булыр? - тип һораған. Шаҙра уға былай яуаплаған:

- Таҙа тиреле, матур кәүҙәле булырға теләр инем, сөнки, ошо ауырыуым арҡаһында, кешеләр мине урап үтә.

Фәрештә уның тәнен бер генә һыйпай, һәм шунда уҡ Шаҙраның тиреһендәге йәмһеҙ тимгелдәре юҡҡа сыға, кәүҙәһе һомғол булып китә.

Шунан Фәрештә унан тағы ла һорай:

- Ҡайһы хайуан һиңә айырыуса оҡшай?

- Дөйә, - тип яуаплай элекке Шаҙра.





Шунда уҡ Фәрештә уға туғыҙ айлыҡ йөклө дөйә бүләк итә.

Шунан ул: «Был бүләктәр Аллаһтың ризалығы менән бирелһен!» - ти ҙә, шунда уҡ юҡҡа сыға.

Бынан һуң Фәрештә, Пеләш янына килеп, уның иң ҙур теләге хаҡында һорай.

- Пеләш булмауымды бик теләр инем, сөнки кешеләр минән көләләр, - тип яуап бирә Пеләш.

Фәрештә уның башынан һыйпауы була, шунда уҡ ҡуйы сәстәре үҫеп тә сыға. Шунан ул кешенән ниндәй хайуан теләүен һорай.

- Һыйыр, - тип яуаплай күптән түгел генә пеләш булған кеше.

Фәрештә уға быуаҙ һыйыр бүләк итә һәм шулай уҡ Аллаһ ризалығын һорап хушлаша.

Һуҡыр янына килгәс, Фәрештә шул уҡ һорауҙы уға ла бирә.

- Мин Аллаһтан күҙҙәрем күреүен һорар инем, кешеләрҙе күрәһем килә минең! - ти уға Һуҡыр.

Фәрештә уның күҙҙәренә ҡағылыуы була - был кешегә күреү һәләте ҡайта. Шунан Фәрештә унан ниндәй хайуанды теләүен һорай.

- Һарыҡ, - тип яуаплай кеше.

Фәрештә, уға быуаҙ һарыҡ бүләк итеп, хушлашып, күҙҙән юғала.

Бер аҙ ваҡыт үткәс, дөйә менән һыйыр быҙаулап, һарыҡ бәрәсләп бирә. Шунан һуң Шаҙраның дөйәләре көтөү булып үрсей, Пеләштең һыйырҙары ла, һуҡырҙың һарыҡтары ла шулай уҡ тиҙ арала күбәйеп китә. Фәрештә, быларҙы тағы ла һынап ҡарамаҡсы булып, яндарына килә.

Фәҡир ҡиәфәтенә инеп, иң башта ул Шаҙра янына килә һәм уға былай тип өндәшә:

- Мин хәйерсе хәленә ҡалған сәйәхәтсе. Сәфәр ваҡытында мин бар аҡсамды тотоноп бөттөм һәм хәҙер тыуған еремә ҡайта алмайым. Аллаһтан миңә ҡайтырға ярҙам итеүен һорайым. Һиңә шундай матур йөҙ һәм ҡиәфәт, шул тиклем байлыҡ бүләк иткән Аллаһ хаҡы өсөн, миңә бер дөйәңде биреүеңде үтенеп һорайым!

Ҡасандыр Шаҙра булып йөрөгән кеше былай ти:

- Һинең кеүек хәйерселәр күп булыр ул!.. Барыһына ла дөйә бирә башлаһам, үҙемә ни ҡала!?..

Хәйерсе ҡиәфәтендәге Фәрештә уға былай ти:

- Мин һине ҡасандыр белгән кеүекмен. Шаҙра йөҙлө һәм ярлы кеше һин түгел инеңме ул? Аллаһ һиңә бирҙе түгелме матур йөҙ һәм бар байлыҡтарҙы?

- Юҡ, былар бары ла миңә ҡартатайҙарымдан ҡалды, - тип алдай Шаҙра.

- Һин алдаштың! Бының өсөн Аллаһ бар биргәнен кире тартып алһын! - тигән Фәрештә, нәфрәтләнеп.

Шунан ул Пеләш янына барған һәм уны ла һынап ҡараған. Пеләш шулай уҡ Фәрештәне алдаған.

- Алдағаның өсөн, Аллаһ һинең булған байлығыңды кире тартып аласаҡ! - тигән дә Фәрештә, күҙҙән юғалған.

Элекке һуҡыр янына килгәс, Фәрештә, тағы ла фәҡир ҡиәфәтенә инеп, унан юлға түләү өсөн бер һарыҡ биреүен һораған.

- Мин ҡасандыр һуҡыр инем - Аллаһ миңә күреү һәләтен бирҙе, мин ярлы инем - Аллаһ мине бай кеше итте. Күпме кәрәк, шул тиклем һарыҡ бирәм мин һиңә. Аллаһ ризалығы өсөн, мин һиңә бер ни ҙә йәлләмәйем, - тип әйткән уға элекке Һуҡыр.

- Бар байлығың үҙеңә ҡалһын. Аллаһ һеҙҙе һынап ҡарар өсөн мине ебәрҙе. Һинең менән ул бик риза. Ә Шаҙра менән Пеләш һынауҙы үтмәне, - шулай тигән дә Фәрештә, күҙҙән юғалған». (Бохари, Әнбийә, 51; Мөслим, Зөһд, 10)

# БЕҘҘЕҢ МӨЛКӘТТӘРЕБЕҘҘЕҢ ХУЖАҺЫ КЕМ?

Ислам дине кешеләрҙе тырышып хеҙмәт итергә һәм йәшәү кәрәк-яраҡтарын хәләл юл менән табырға саҡыра. Әммә түбәндәгеләрҙе һәр саҡ иҫтә тоторға кәрәк:

Бөтә булған ниғмәттәрҙе беҙгә тик Аллаһ биргән. Ул беҙҙең мөлкәттәребеҙҙең хаҡ Хужаһы. Ул ҡушҡанса ҡулланыуыбыҙҙы һынар өсөн, уларҙы ваҡытлыса файҙаланырға биргән. Аллаһ милектәребеҙҙең кәрәгенән артығын ярлы һәм мохтаждарға бирергә ҡуша.

Әгәр беҙ Аллаһ биргән мөлкәтебеҙҙе Ул ҡушҡанса тотонһаҡ, Уның һынауын үткән булабыҙ.

Аллаһу Тәғәлә бойора:

“Әйт: “Эй Аллаһ! Батшалыҡтың батшаһы! Һин теләгән кешеңә хакимлыҡ бирәһең, теләгән кешеңдән тартып алаһың; теләгән кешеңде күтәрәһең, теләгән кешеңде төшөрәһең. Һинең ҡулыңда - яҡшылыҡ. Һин, ысынлап та, бөтә нәмәгә ҡеҙрәтле”.

(Ғимран сүрәһе, 26-сы аят)





# Саҙаҡа һәм зәкәт

Аллаһ биргән мөлкәттәребеҙҙе Уның ризалығы өсөн тотоноу **“инфаҡ”** тип атала. Инфаҡтың иң гүзәл төрҙәре - зәкәт менән саҙаҡа.

Мосолмандарҙың мохтаждарға үҙ теләге менән ярҙам итеүе саҙаҡа тип атала. Ғәҙәттә, **“саҙаҡа”** һүҙе ауыр йәшәгәндәргә һәм фәҡирҙәргә ярҙам итеүҙе аңлата. Әммә, саҙаҡа ярлыларға,мохтаждарға биргән аҡса йәки ниндәйҙер мөлкәтте генә аңлатмай.

Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) һәр эшләгән яҡшылыҡ һәм изгелек тә саҙаҡа икәнен әйтә. Бына улар:

- Мохтаждарға матди ярҙам күрһәтеү - ул саҙаҡа.
- Бурысын бирә алмай ауырлыҡтар кисергәндәргә ваҡытты кисектереп тороу- саҙаҡа.
- Кешеләрҙе яҡшылыҡҡа саҡырыу һәм яуызлыҡтан ҡурсалау - саҙаҡа.
- Юлда кешеләргә ҡамасаулап ятҡан таш, ағас кеүек ҡаршылаҡтарҙы ситкә алыу- саҙаҡа.
- Кемгәлер юл күрһәтеү йәки аңлатыу - саҙаҡа.
- Транспортҡа ултырырға йәки уның әйберҙәрен урынлаштырырға ярҙам итеү - саҙаҡа.
- Талашҡандарҙы татыулаштырыу - саҙаҡа.
- “Аллаһу Әкбәр”, “Әлхәмдулилләһ”, “Лә иләһә иллаллаһ” тип әйтеп, Аллаһты иҫтә тотоу - саҙаҡа.
- Алсаҡ йөҙлө булыу - саҙаҡа.



- Йомшаҡ һәм ярымлы һөйләшеү - саҙаҡа.
- Белем алыу һәм башҡаларға ғилем биреү - саҙаҡа.
- Мәсеткә намаҙ уҡырға барғандағы һәр аҙым - саҙаҡа.
- Ағас ултыртыу - саҙаҡа.
- Ирҙәрҙең ғаилә бәхете өсөн эшләгән бөтә эштәре лә - саҙаҡа.
- Ирен һәм балаларын бәхетле итергә теләгән ҡатындарҙың бөтә эштәре лә - саҙаҡа.
- Балаларының ата-әсәһенә, туғандарына ярҙамы һәм уларға яҡшы мөнәсәбәте - саҙаҡа.

Ҡыҫҡаһы:

**Аллаһу Тәғәлә бойора:**

“Эй, һеҙ, иман килтергән кешеләр! Беҙ биргән ризыҡтан инфаҡ ҡылығыҙ!”

(Бәҡара сүрәһе, 254-се аят)

“Аллаһ ризалығы өсөн эшләнгән һәр изге эш - саҙаҡа”. (Бохари, Әдәб, 33).

Беҙҙең диндә “саҙаҡа” һүҙенең аңлатмаһы киң мәғәнәлә ҡулланыла. Саҙаҡа биреү өсөн бай булыу мотлаҡ түгел. Һәр мосолман, хәленә ҡарап, саҙаҡа бирә ала йәки, изге эштәр эшләп, сауап алыу мөмкинлегенә эйә. Шулай уҡ тулыһынса матди сығымдарға бәйләнгән “инфаҡ” тигән төрө лә бар. Бөйөк Аллаһ етеш тормошло мосолмандарға мөлкәтенең бер өлөшөн мохтаждарға биреүҙе йөкмәтә. Был мөлкәткә бәйле ғибәҙәт Исламдың биш шартының береһе булып тора. Ул **“зәкәт”** тип атала.

Бер ваҡыт Аллаһ Рәсүле (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) иғлан итә:

- Саҙаҡа биреү - һәр мосолмандың бурысы.

Сәхәбәләре: «Ә ул кешенең саҙаҡа бирергә мөмкинлеге булмаһа, ни эшләргә?» - тип һорағандар.

Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм): «Эшләһен! Үҙенә лә файҙа булыр, саҙаҡаһын да бирә алыр», - тип яуаплаған.

- Әгәр уны ла үтәй алмаһа?

- Мохтаждарға ярҙам итһен!

- Ә уға ла көсө етмәһә?

- Изгелеккә, яҡшылыҡҡа өндәһен!

- Быны ла эшләй алмаһа?

- Исмаһам, насарлыҡтан баш тартһын. Уның өсөн был да саҙаҡа.

(Бохари, Зәкәт, 30)







# НИМӘ УЛ ЗӘКӘТ?

✍ **Зәкәт** - динебеҙ ҡуйған маҡсаттарға байҙарҙың йыллыҡ килеменән хәйергә бирелергә тейеш булған өлөшө ул.

Аллаһу Тәғәлә бойора:

“Намаҙ уҡығыҙ, зәкәт бирегеҙ. Яҡшылыҡ менән үҙегеҙгә нимә әҙерләйһегеҙ, Аллаһ ҡаршыһында шуны табырһығыҙ: ни эшләгәнегеҙҙе Аллаһ күреп тора”.

(Бәҡара сүрәһе, 110-сы аят)

Зәкәт - таҙарыныу

“Зәкәт” һүҙенең тағы бер мәғәнәһе - “таҙарыныу”. Мосолмандың үҙ мөлкәтенең бер өлөшөн мохтаждарға биреүе уның тәнен дә, рухиәтен дә паклай. Кеше гонаһтарҙан һәм һаранлыҡтан таҙарына, донъяуи алдатҡыстарҙы яҡын күреү теләгенән арына.

“Уларҙың малынан зәкәт ал, шуның менән уларҙы пакларһың да аҡларһың”.

(Тәүбә сүрәһе, 103-сө аят)

# ЗӘКӘТ БЕҘГӘ НИМӘ БИРӘ?

**ЗӘКӘТ**

- Беҙгә бирелгән ниғмәттәр өсөн рәхмәтле булыу.
- Мәрхәмәтлелек һәм миһырбанлыҡ хистәрен уята.
- Милекте таҙарта.
- Һаранлыҡ һәм мин-минлектән һаҡлай.
- Арабыҙҙа ярҙамсыллыҡты көсәйтә һәм дуҫлыҡты нығыта.
- Мөлкәтебеҙҙе юғалтыуҙан һәм боҙолоуҙан һаҡлай.
- Байлыҡ һәм муллыҡтың үҫешенә этәргес була.



Аллаһу Тәғәлә бойора:

“Үҙ малын Аллаһ юлында сарыф иткән кеше бер бөртөктән ете башаҡ, һәр башаҡтан йөҙәр бөртөк уңыш биргән орлоҡҡа оҡшар. Теләгән бәндәһенә Аллаһ ишләтә арттырып бирә. Ысынлап та, Аллаһ бөтә донъяны биләй. Ул беләә!”

(Бәҡара сүрәһе, 261-се аят)

Бөйөк Аллаһ биргән ниғмәттәргә ҡәнәғәт һәм рәхмәтле булыу кәрәк. Рәхмәтле булыуҙың иң яҡшыһы-мөлкәтебеҙҙе Аллаһ ҡушҡанса тотоноу. Милкебеҙҙең мохтаждарға тейешле 40-тан бер өлөшөн биреп, Аллаһу Тәғәләгә шөкөр итеп ғибәҙәт ҡылабыҙ. Биргән зәкәтебеҙ өсөн бер кемдән дә рәхмәт көтмәйбеҙ. Шулай итеп, зәкәт түләү аша **беҙгә бирелгән ниғмәттәр өсөн рәхмәтебеҙҙе белдерәбеҙ**.

Аллаһу Тәғәлә бойора:

*“Үҙҙәре ризыҡты яратһа ла, ярлыны, йәтимде, тотҡондо ла ашата. Улар: “Беҙ һеҙҙе Аллаһтың ризалығын алыр өсөн ашатабыҙ, бының өсөн хаҡ та, рәхмәт тә кәрәкмәй. Беҙ Аллаһтың ҡурҡыныс, ҡара көнөнән ҡурҡабыҙ”, - ти. Аллаһ уларҙы шул көндөң яманлығынан ҡотҡарыр, нурлы йөҙ, шатлыҡ бирер”.*

(Инсан сүрәһе, 8-11-се аяттар)

Бөтә нәмә менән тәьмин ителгән бай кешеләр ярлы йәшәгән мохтаждарҙың хәлдәрен тулыһынса аңламауҙары ла мөмкин. Зәкәт түләр өсөн ундай кешеләрҙе тапҡас ҡына, уларҙың ҡайғы - хәсрәттәрен күреп, нисек ауыр йәшәгәнен, хәлдәренең аяныслығын аңлайбыҙ. Ауыр йәшәү шарттарын күрәбеҙ. Ярлыларға һәм мохтаждарға ярҙам итеп, ауырлыҡтарын һәм ғазаптарын еңеләйтәбеҙ. Былар барыһы ла күңелдәрҙә **мәрхәмәтлелек һәм миһырбанлыҡ хистәрен уята**.

Һөйөклө Пәйғәмбәребеҙ әйткән:

*“Әгәр йөрәгеңдең йомшарыуын теләһәң, фәҡирҙе ашат, йәтимде башынан һыйпа”.*

(Әхмәд бин Хәнбәл, II, 263)



Аллаһу Тәғәлә: *«Уларҙың малдарынан һораныусыларға ла, мохтаждарға ла өлөш булды»,* - тип әйтеп, байҙарҙың мөлкәтендә ярлы һәм мохтаждарҙың да өлөшө барлығын аңлата (Зәриәт сүрәһе, 19-сы аят). Был өлөштө уларға бирмәһәк, уларҙың өлөшөн үҙләштерәбеҙ. Был - харам. Әгәр йыйған мөлкәтебеҙҙә харам бар икән, тимәк, ул бысраҡ һанала. Милкебеҙҙән тейешле өлөштө ярлы һәм мохтаждарға биреп, беҙ мөлкәтебеҙҙе харамдан таҙартабыҙ. Шулай итеп, зәкәт **милекте таҙарта**.

Аллаһу Тәғәлә бойора:

*“Уларҙың малынан зәкәт ал, шуның менән уларҙы пакларһың да аҡларһың”.*

(Тәүбә сүрәһе, 103-сө аят)



167

Зәкәт һәм саҙаҡа байлыҡҡа булған һөйөүҙе күҙәтеү аҫтында тота, дөрөҫ булмаған маҡсаттарға ҡулланыуҙан һаҡлай. Байлыҡтың тормошта мөһим түгеллеген өйрәтә. Зәкәт башҡаларҙы ла ҡайғыртыу, байлығыңды улар менән бүлешеү мөмкинлеген бирә. Зәкәт **һаранлыҡ һәм мин-минлектән һаҡлай**.

Һөйөклө Пәйғәмбәребеҙ әйткән:

*“Зәкәт биреүсе, ҡунаҡтарын һыйлаусы, бәләгә ҡалғандарҙы ҡотҡарыусы - һаранлыҡтан ҡотола”.*

(Тәбәрани, Муғджәмүл-Кәбир, IV, 256)

Зәкәт - байҙарҙың артыҡ мөлкәтен мохтаждарға еткереү күпере ул. Зәкәт - байҙар менән ярлыларҙың бәйләнешен нығыта. Көнләшеү хистәрен алып ташлай. Бер-беребеҙгә **ярҙам итеү теләген уята һәм һөйөүҙе нығыта**. Зәкәт аша байҙар мохтаждарҙы йәлләүен, миһырбанлығын күрһәтә. Ә ярлылар байҙарҙы хөрмәт итә башлайҙар. Шулай итеп, зәкәт ярлы һәм мохтаждарҙың ихтяжын ҡәнәғәтләндерә. Йәмғиәттең тотороҡлоғона һәм тыныс йәшәүенә нигеҙ булып тора.

Һөйөклө Пәйғәмбәребеҙ әйткән:

*“Зәкәт - Исламдың күпере”*

*(байҙар менән ярлылар араһындағы).*

(Һәйсәми, Мәджмәғүз-Зәүәид, I, 480)

Зәкәт һәм саҙаҡа **мөлкәтебеҙҙе юғалтыуҙан һәм боҙолоуҙан һаҡлай**. Халыҡ мәҡәлендә ошо хаҡта: «Бәләкәй генә хәйер ҙә оло бәлә-ҡазаларҙан һаҡлай», тип әйтә. Сөнки бер мохтаж кешегә ярҙам итеү, һәм уның беҙгә именлек-бәхет теләп доға ҡылыуы, күп кенә ҡайғы-хәсрәттәргә ҡаршылыҡ булып тора. Кем мохтаждарға ярҙам итә, Аллаһ уларға үҙенең мәрхәмәтен төшөрә һәм һаҡлаусыһы, яҡлаусыһы була.

Һөйөклө Пәйғәмбәребеҙ әйткән:

*“Мөлкәтегеҙҙе зәкәт ярҙамында һаҡлағыҙ!”*

(Бәйхаҡи, Шуабүл-Иман, V, 184)

**Байлыҡ һәм муллыҡтың үҫешенә этәргес була.** Бөйөк Аллаһ үҙенең аятында: *«Байлыҡ үҫтерер өсөн (рибаға) биргән нәмәгеҙҙе өҫтәп алып түләтһәгеҙ, Аллаһ каршыһында ул өҫтәлмәҫ. Аллаһтың ризалығын алыр өсөн биргән зәкәтегеҙ икеләтә артып ҡайтыр* (Рум сүрәһе, 39-сы аят)», тип зәкәт һәм саҙаҡа биреүсенең байлығы артыуын күрһәтә. Бындай үҫештең нигеҙендә беҙ ярҙам итеп шатландырған кешеләрҙең һәм фәрештәләрҙең ихлас күңелдән ҡылған доғалары ята. Ярлы, мохтаждар һәм фәрештәләрҙең доғаһы - был етеш тормош эйәләре өсөн именлек һәм тыныслыҡ сығанағы булып тора.

Һөйөклө Пәйғәмбәребеҙ әйткән:
*“Көн һайын, таң алдынан, ергә ике фәрештә төшә. Береһе Аллаһтан: “Йә Раббым! Байлығын Һинең юлыңда тотоноусыға тотолған мөлкәте урынына яңыһын бир!” - тип һорай. Ә икенсеһе: “Аллаһым! Һарандың байлығын юҡ ит!” - тип, бәдд-доға ҡыла”.*
(Мөслим, Зәкәт, 57)





# ҺЕҘҘӘН КҮБЕРӘК ТҮЛӘҮСЕ БАР!

Бер ваҡыт, Хәлиф Әбү Бәкер (разыйаллаһу ғәнһү) идара иткән замандарҙа, Мәҙинәлә аслыҡ була. Хатта, икмәк бешерергә иген табыуы ла ауырлаша. Был хәлдә күргән Мәҙинә сауҙагәрҙәре иген һатып алыу өсөн каруандарын әҙерләргә тотоналар.

Ә хәҙрәти Усман (разыйаллаһу ғәнһү) ошо мәл, Дамасктан йөҙ дөйәнән торған каруанына иген тейәп, Мәҙинәгә ҡайтып төшә. Уның алып ҡайтҡан был игене Мәҙинә халҡының икмәккә ҡытлығын ҡәнәғәтләндерә ала ине. Сөнки ул заманда Мәҙинәнең халҡы күп һанлы булмай.

Сауҙагәрҙәрҙең ҡайһы берҙәре, хәҙрәти Усмандан (разыйаллаһу ғәнһү) Дамасктан алып килгән игенен һатып алыу ниәте менән уға киләләр. Үлсәү күләменә ҡарап, иген өсөн, дүрт дирһәм тәкдим итәләр. Әммә хәҙрәти Усман (разыйаллаһу ғәнһү) улар тәкдим иткән хаҡтың бик түбән икәнлеген күрә. «Һеҙҙән күберәк түләүсе бар!» - тип кенә яуаплай ул, бер кемгә лә игенде һатырға теләге юҡлығын күрһәтеп. Сауҙагәрҙәр хаҡты күтәрәләр. Хәҙрәти Усман (разыйаллаһу ғәнһү) яңынан: «Һеҙҙән дә күберәк түләүсе бар!» - тип яуап ҡайтара. Ниһәйәт, сауҙагәрҙәр хаҡты ете дирһәмгә тиклем еткерәләр. Был уларҙың үҙ мөмкинлегенә ҡарап тәкдим иткән иң юғары хаҡ була. Ләкин хәҙрәти Усмандың яуабы (разыйаллаһу ғәнһү) шул бер көйө ҡала: «Һеҙҙән күберәк түләүсе бар!»

Сауҙагәрҙәр араһында уның был тәртибен килеп сыҡҡан ауыр хәлдән юғары килем алыу менән бәйләгәндәр ҙә була. Халыҡ ҡытлыҡ кисергән ошондай ауыр мәлдә, уның үҙен шулай тотоуы күптәргә оҡшамай. Һуңғы сиктә, килеп тыуған хәл тураһында хәлиф Әбү Бәкергә (разыйаллаһу ғәнһү) еткереп, унан хәҙрәти Ус-

Аллаһу Тәғәлә бойора:

“Улар - саф мосолмандар; муллыҡта ла, юҡлыҡта ла йомарт булғандар...»

(Ғимран сүрәһе, 134-се аят)

Аллаһу Тәғәлә бойора:

“Үҙ малын Аллаһ юлында сарыф иткән кеше бер бөртөктән ете башаҡ, һәр башаҡтан йөҙәр бөртөк уңыш биргән орлоҡҡа оҡшар. Теләгән бәндәһенә Аллаһ ишләтә арттырып бирә. Ысынлап та, Аллаһ бөтә донъяны беләй. Ул белә!”

(Бәҡара сүрәһе, 261-се аят)



ман (раҙыйаллаһу ғәнһү) менән килешеү төҙөргә ярҙам итеүен һорарға булалар.

Сауҙагәрҙәр хәлифкә килеп тыуған хәлде аңлаталар. Уларҙы тыңлап бөткәс, Әбү Бәкер (раҙыйаллаһу ғәнһү) былай тип әйтә: «Бында ғәҙәти булмаған нимәлер бар. Минеңсә, һеҙ Усманды дөрөҫ аңламағанһығыҙ. Ул бит Аллаһ Рәсүленең (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) яҡын дуҫы һәм кейәүе. Ул кешеләрҙең ауыр хәлен үҙ файҙаһына ҡуллана торған кеше түгел. Әйҙәгеҙ, бергәләшеп барып унан барыһын да һорашайыҡ».

Барыһы бергә хәҙрәти Усманға (раҙыйаллаһу ғәнһү) юлланалар. Хәлиф Әбү Бәкер (раҙыйаллаһу ғәнһү) унан, ни өсөн үҙенең тауарын сауҙагәрҙәр тәҡдим иткән юғары хаҡҡа һатыуҙан баш тартыуын һорай.

Хәҙрәти Усман (раҙыйаллаһу ғәнһү) ошондай аҡыллы яуап бирә:

«Эй, Аллаһ Рәсүленең (раҙыйаллаһу ғәнһү) хәлифе! Улар бит минән тауарымдың бер ауырлыҡ үлсәменә ете генә дирһәм биреп алырға теләйҙәр. Ә мин тауарымды ете йөҙ дирһәм вәғәҙә итеүсегә бирергә теләйем. Бөйөк Аллаһ эшләнгән бер изге эшкә әжерен ете йөҙҙән арттырып бирергә вәғәҙә итмәйме ни? Миңә былдай отош һәм бәрәкәтте алыу мөмкинлеге булғанда, ни өсөн уларға һатырға тейешмен?»

Хәҙрәти Усмандың (раҙыйаллаһу ғәнһү) яуабынан һуң сауҙагәрҙәр, уның тураһында насар уйлауҙарын аңлап, тәрән уйға ҡалалар.

Хәҙрәти Усман (раҙыйаллаһу ғәнһү) йөҙ дөйәгә тейәлгән игенде Мәҙинә халҡына саҙаҡа итеп тарата. Был мохтаждар һәм ярлылар өсөн оло шатлыҡ була. Шулай итеп, Мәҙинәләге аҙыҡ-түлеккә бәйле был ҡытлыҡ ыңғай хәл ителә.



## Зәкәт кемдәр өсөн фарыҙ һанала?

- Аҡылы сәләмәт,
- бәлиғ булған,
- дини ҡанундарға ярашлы бай булған

→ Һәр мосолманға → Йылына бер тапҡыр → Зәкәт түләү фарыҙ ☺☺☺☺

### Дини ҡанундарға ярашлы бай булыу

Кешенең сығымдарынан, бурыстарынан һәм көндәлек ихтыяждарынан һуң ҡалған милке, йәки нисап миҡтарындағы мөлкәте, йәки аҡсаһы булһа, ул кеше дини ҡанундар буйынса етеш һәм бай иҫәпләнә. Мөлкәтенең иң аҙ өлөшөнән түләнгән зәкәт "нисап" тип атала. Әгәр мөлкәте ошо сиккә килеп етә икән, ҡорбан һәм фытыр саҙаҡаһын биреү ҙә уға вәжиб һанала.

Зәкәт фарыҙ булһын өсөн, кешенең йыл әйләнәһенә (354 көн) нисап миҡдарында, йәки унан күберәк мөлкәте булыу шарт.

### Асыл кәрәкле әйберҙәр

Табыш алыу өсөн ҡулланылмаған:

- Торлаҡ,
- Йорт кәрәк-яраҡтары, йыһаздар,
- Кейем,
- Шәхси транспорт,
- Китаптар,
- Һөнәргә бәйле ҡоралдар,
- Йыл әйләнәһенә ғаиләһен аҫырар өсөн бүленгән аҡса һәм ризыҡтар.



## Нисап дәүмәле һәм зәкәттең күләме

- Әгәр кеше йыл әйләнәһенә дини ҡанундар нормаһына тап килгән нисап күләмендәге мөлкәткә эйә икән, ул зәкәт түләргә бурыслы.
- Түләнәсәк зәкәт кешенең сығымдарынан, бурыстарынан һәм көндәлек ихтыяждарынан һуң ҡалған милкенә ҡарап билдәләнә.
- Нисаптың ҙурлығы һәм зәкәттең күләме мөлкәтенең төрөнә ҡарап үҙгәрә.

### ҺАТЫУҘАН АЛҒАН КИЛЕМДӘН ҺӘМ АҠСАНАН ТҮЛӘНӘСӘК НИСАП ҺӘМ ЗӘКӘТ

| Мөлкәт төрө | Нисап дәүмәле | Зәкәт күләме |
|---|---|---|
| Алтын | 80,18 грамм | Ҡырҡтан бер өлөшө (2,5 %) |
| Көмөш | 561 грамм | |
| Тауар | 80,18 грамм алтын хаҡы | |
| Ҡулаҡса | 80,18 грамм алтын хаҡы | |



## ЙОРТ ХАЙУАНДАРЫНЫҢ НИСАБЫ ҺӘМ ЗӘКӘТЕ

Йорт хайуандарынан биреләсәк зәкәттең һаны һәм төрө:

- **Кәзә һәм һарыҡтарҙан:** 40-тан 120 башҡа тиклем 1 кәзә йәки 1 һарыҡ.

Малдың һаны күп икән, зәкәт күләме дини белешмәләрҙән асыҡлана.





- **Һыйыр малынан:** 30 һыйырҙан 39-ға тиклем 1 ике йәшлек бызау бирелә

- **Дөйәнән:** 5-тән алып 9-ға тиклем дөйәнән - 1 һарыҡ йәки 1 кәзә ҡаралған.







## УҢЫШТЫҢ НИСАБЫ ҺӘМ ЗӘКӘТЕ

➲ Ер үҫемлектәренең зәкәте **“ғөшөр”** тип атала.

❖ Уңыштан нисап - яҡынса 611 килограмм.

❖ Һуғарылмаған ялан ерҙәренән зәкәт күләме 10% тәшкил итә,

❖ ә һуғарылған ерҙәрҙән 5%.

✍ Зәкәт түбәндәге бөтә төр уңыштарҙан: бойҙай, арыш, арпа, тары, дөгө, ҡуҙаҡлылар, сөгөлдөр, ҡауын, ҡарбуз, баклажан һәм зәйтүн, алма, әфлисун, сейә, персик емештәренән дә алына.

✍ Уңыш йыл әйләнәһенә хужаһының ҡулында булыуы шарт түгел. Зәкәт уңышты йыйып алғандан һуң ғына түләнә.

“Иген сәскәндә, келәттәр бушап ҡала. Уның байы йыйып алынған яңы уңыш сәселгән игендән ни ҡәҙәр күберәк!

Бушап ҡалған бер келәт урынына күпме келәт иген менән тула!..

Келәттә сәселмәй ҡалған игенде иһә бөжәктәр һәм сысҡандар әләф-тәләф итеп бөтә”.

(Мәүләнә Руми)

# ҺӘЛӘК БУЛҒАН БАҠСА

Йәшәгән, ти, бик йомарт бер кеше. Уның йөҙөм һәм финик ағастары үҫкән баҡсаһы булған. Дин ҡушыуы буйынса, был кеше йыл һайын йыйылған уңыштың бер өлөшөн зәкәт итеп ярлыларға таратыр булған.

Ул мәрхүм булғас, матур баҡсалары мираҫ булып балаларына ҡалған. Ләкин улар, ҡомһоҙлоҡтарын тыя алмайынса, баҡса уңышын кемгәлер бүлеп биреүҙән баш тартҡан.

Аталарының ярлыларға таратҡан мул сәҙәҡәһы быларҙың баҡсаһын Аллаһтың оло фатихаһы менән һуғарып торған, сөнки унын емештәре менән барса мохтаж туҡланған. Тик аталарының быға тиклем биргән зәкәте уларға артыҡ күп булып тойолған.

Ярлыларға уңыштың бер өлөшөн таратыуҙан зыян килер, байлыҡ кәмер, тип ҡурҡандар. Баҡсаларындағы муллыҡ мохтаждарға ярҙам итеү сәбәбендә Аллаһтың мул фатихаһынан икәнен аңламаған улар. Барса байлыҡҡа эйә булыу теләге һәм диндән йыраҡ булыу был әҙәмдәрҙең йөрәген томалаған.

Зәкәт бирмәҫ өсөн, улар төрлө һылтау эҙләгән.

«Беҙҙең үҙебеҙҙең ғаиләләр зур. Баҡса уңышы үҙебеҙҙән дә артмаясаҡ. Иртән иртүк баҡсаға барып, ярлылар килгәнсе, бар уңышты йыйып алырға кәрәк!» - тип һөйләшкән баҡса хужалары.

Ул баҡсаның ысын хужаһы - Аллаһ икәнен дә, уңыштың муллығы мохтаждарға бирелгән өлөш арҡаһында икәнен дә береһе лә уйламаған...

Аллаһ, әлбиттә, хаттин ашҡан хужалар йоҡлаған арала, уларҙың баҡсаларына оло һәләкәт ебәргән: баҡсалар урынлашҡан ерҙә дауыл ҡупҡан, яман итеп йәшен йәшнәгән, янғын сыҡҡан һәм тиҙ арала бар баҡсалар көл-күмергә әйләнгән.

Ә иртә таңда, ни булғанын да белмәгән хужалар, уңыш йыйырға тип, үҙ биләмәһенә юлланған. Ярлылар күреп ҡалмаһын тип, бик ашыҡҡан улар.

Бына улар баҡсалары янына килеп еткән. Ләкин элекке гөрләп ултырған баҡсалар урынында көл-күмер генә күреп шаҡ ҡатҡандар. Үҙ күҙҙәренә үҙҙәре ышанмайынса, яңылыш килмәнекме икән, тип аптырашҡандар. Мул баҡсаларының, янып бөтөп, ҡуҙлы яланға әйләнгәненә уларҙың һис ышанғыһы килмәгән.

Араларындағы иң аҡыллыһы был хәлде шулай аңлатҡан:

- Беҙҙең ҡомһоҙлоғобоҙ өсөн, Аллаһ, беҙгә яза ебәреп, баҡсаларыбыҙҙы яндырып юҡ иткән. Уңышты ярлылар менән бүлешергә теләмәгәнде белгән ул.

Элекке баҡса хужалары бик ҡаты ҡайғыға ҡалған. Баштарына төшкән оло бәләлә, «һин ҡотороттоң да, һин әйҙәнең!..» - тип, бер-береһен ғәйепләй башлағандар. Араларындағы аҡыллырағы, быларҙың ғауғалашыуын тыңлап торғас, былай тигән:

- Туғандарым!.. Бер-беребеҙҙе ғәйепләүҙән файҙа юҡтыр. Әйҙәгеҙ, Аллаһтан ғәфү үтенәйек. Бәлки, Ул беҙҙе йәлләр һәм ярлыҡар.

Барыһы ла аңлаған ниндәй ҙур хата эшләгәнен. Бар ниғмәттәрҙең ысын хужаһы – Аллаһ, шуның өсөн беҙгә ебәргән бар байлығын Уның ҡушыуы буйынса тотонорға кәрәк. Шул ваҡытта ғына беҙ фатихалы булабыҙ һәм беҙгә ожмах юлдары асыла.

Үҙ хатаһын һәм ғәйебен аңлаған туғандар, Аллаһтан ғәфү үтенеп, былай тигәндәр:

- Оло ғәйепле беҙ! Ҙур хата эшләнек. Ғәйебебеҙҙе тулыһынса танайбыҙ. Аллаһу Тәғәлә бар етешһеҙлектәрҙән дә пак. Бөтмәҫ-төкәнмәҫ ышаныс менән Уға бағайыҡ. Ҡылған гонаһыбыҙ өсөн, Ул беҙҙең баҡсаларҙы тартып алды. Ләкин, ысын күңелдән һораһаҡ, Ул беҙҙе ғәфү итер һәм тағы ла яҡшыраҡ ниғмәттәрен бирер. (Ҡәләм сүрәһе, 17-33 аяттар)





# ЗӘКӘТ КЕМДӘРГӘ БИРЕЛӘ?

Зәкәт бирелә торған төркөмдәр:

☞ Фәкирҙәр: дин буйынса нисап күләмендәге байлыҡҡа эйә булмаған кешеләр.

☞ Месҡендәр: кейемгә, аҙыҡ-түлеккә һәм көндәлек ихтыяждарға мохтажлыҡ кисергәндәр.

> Аллаһу Тәғәлә бойора:
>
> “Улар фани донъяла изгелек ҡылған шәхестәр... Мохтаждар һәм фәкирҙәр өсөн малдарынан өлөш сығарғандар...”
>
> (Ҙәрийәт сүрәһе, 16 һәм 19-сы аяттар)

☞ Бурыслылар: мөлкәтенән бурысын түләһә, фәҡир булып ҡаласаҡ кешеләр. Бындай кешеләргә бурыстарын түләү өсөн, мөлкәте нисап күләменә барып еткәнгә тиклем зәкәт бирелә.

☞ Юлда ҡалғандар: йортонда мөлкәте булып та, сәфәрҙә саҡта ҡулында бер нәмә лә ҡалмаған, ярҙамға мохтажлыҡ кисергәндәр. Өйҙәренә әйләнеп ҡайтыу өсөн, уларға зәкәт бирелә. Ләкин уларға зәкәт урынына бурысҡа алыу хәйерлерәк.

☞ Аллаһ юлындағылар: кем Аллаһтың хаҡ дине - Исламды таратыу, уны өйрәнеү, ғилем алыу һәм башҡаларҙы өйрәтеү юлында йөрөп тә, үҙен кейем-һалым, аҙыҡ-түлек һәм башҡа кәрәк-яраҡтар менән тәьмин итә алмай икән, зәкәтте уға биреү лазым.

- “Тәүбә” сүрәһенең 60-сы аятында алда һанап үтелгән 5 төркөмдән тыш зәкәт бирергә мөмкин тағы 3 төркөм күрһәтелә: ҡолдарға, күңелдәрен иманға йәлеп ителәсәктәргә, зәкәт йыйыусыларға.

- Зәкәтте ошо төр төркөмдәрҙең береһенә, йәки бөтә төркөмдәргә бүлеп бирергә мөмкин.

- Зәкәтте таратҡанда, үҙеңдең яҡындарыңдан, туғандарыңдан башлау яҡшы һанала.

> Аллаһу Тәғәлә бойора:
>
> “Зәкәт Аллаһтан бер фарыз булараҡ, бары тик фәкирҙәргә, месҡендәргә, зәкәт эштәрен башҡарыусыларға, күңелдәре Исламға яҡкандарға, (ирекә сығыу өсөн йән атҡан) ҡолдарға, бурысҡа батҡандарға, Аллаһ юлында көс сарыф иткәндәргә, юлсыларға бирелергә тейеш. Аллаһ барыһын да белеп тороусы һәм хикмәттәр эйәһелер”.
>
> (Тәүбә сүрәһе, 60-сы аят)

# ЗӘКӘТ КЕМДӘРГӘ БИРЕЛМӘЙ?

- ⊗ Байҙарға,
- ⊗ Мосолман булмағандарға,
- ⊗ Хәстәрләү беҙҙең бурысыбыҙ булғандарға (атай-әсәй, өләсәй-олатай, балалар, ейән-ейәнсәрҙәр),
- ⊗ Мәктәп, хәстәхана, мәсет, юлдар, күпер, ҡоҙоҡ һәм башҡа төҙөлөштәр өсөн

Зәкәт бирелмәй ⊗

⊗ Зәкәтте хәләл ефеттәр бер-береһенә бирә алмаç.

☑ Ир һәм ҡыҙ туғандарға (ағай, эне, апай, һеңле), атай-әсәйҙең туғандарына бирергә мөмкин.



# ИҢ ЯРАТКАН МӨЛКӘТЕГЕҘҘӘН САҘАКА БИРЕГЕҘ

Әбү Талха Пәйғәмбәребеҙҙең яраткан дуҫтарының береhе hәм Мәҙинә халкы араhында бай, абруйлы кешеләрҙең араhынан булған. Күпләп баҡса, баҫыу, мал көтөүенә эйә булған. Уның ҙур ғына ҡыйбатлы бер баҡсаhы булған, Пәйғәмбәр Мәсете янында. Әбү Талханың баҡсалары араhында иң ҡиммәтлеләренән hаналған. Әбү Талха был финик баҡсаhын нык яраткан, унда сөсө hыулы ҡоҙоғо ла бар икән. Бик йыш ҡына, Пәйғәмбәребеҙ менән иптәштәрен баҡсаhына саҡырып, шунда hыйлаған. Финик пальмаларының күләгәhендә йыш ҡына рухи әңгәмә ҡорғандар. Бер ваҡыт Пәйғәмбәребеҙ мәсеттә сәхәбәләренең даирәhендә ултырған. Шунда ошо аятты уҡыған: *“Әй, Исламға эйәреүселәр, һеҙ һөйөклө мал-мөлкәтегеҙҙе Аллаh юлында сарыф итмәhәгеҙ, изгелеккә ирешә алмаçhығыҙ. Һеҙ нәмә сарыф иткәнегеҙ-итмәгәнегеҙҙе лә Аллаh белеп тора”* (Ғимран сүрәhе, 92-се аят).

Әбү Талхаға был аят бик көслө тәьҫир яhай hәм Пәйғәмбәр Әфәндегә мөрәжәғәт итә:

- Әй, Аллаh Илсеhе! Мөлкәтем араhында иң яраткан hәм ҡиммәтле hаналғаны - мәсет ҡашыhындағы баҡса. Ошо мәлдән алып Аллаh Сүбхәнә вә Тәғәләнең ризалығы өсөн был баҡсаны мохтаждар файҙаhына бирәмен. Ярлы мосолмандар был баҡсаның емештәре hәм hыуы менән файҙаланhындар.



Һуңынан Әбү Талха, ҡарарын үтәр өсөн, үҙенең баҡсаhына бара. Унда баҡсалағы ағастың күләгәhендә ултырған ҡатыны Умми Сүләймде күрә лә уның сығыуын hорай. Умми Сүләйм hорай:

- Әбү Талха! Ни өсөн баҡсаны ҡалдырабыҙ? Ҡайҙалыр китәбеҙме ни?

Әбү Талха яуап бирә:

- Юҡ, бер ҡайҙа ла китмәйбеҙ. Әммә был баҡса башҡаса беҙгә түгел, ә Мәҙинәнең ярлыларына ҡарай, - hәм Пәйғәмбәр Мәсетендә ни булғанын hөйләп бирә. Шул саҡ Умми Сүләйм hорай:

- Фәкирҙәргә баҡсаны беҙҙең исемдән бирҙеңме, әллә үҙеңдең исемдән генәме?

- Икебеҙҙең исемдән, - тигән яуап була.

- Аллаh Сүбхәнә вә Тәғәлә риза булhын hинән, Әбү Талха! – ти Умми Сүләйм. – Фәкирҙәрҙе күреп, уларҙың урынында үҙем дә булыуым мөмкинлеген уйлай, ләкин hиңә бер нисек тә әйтергә ҡыймай инем. Аллаh Сүбхәнә вә Тәғәлә беҙҙең был изге эшебеҙҙе ҡабул ҡылhын.

Хәлиф Ғүмәр бин Ғәбделғәзиз тоҡлап шәкәр hатып алған hәм фәкирҙәргә тараткан. Унан hорағандар:

- Әгәр аҡсалата таратhаң, яҡшыраҡ булмаç инеме?

- Мин бик нык шәкәр яратам. Шуға күрә, ни яратам, шуны тараткым килә, - тип яуап биргән Ғүмәр бин Ғәбделғәзиз.





# ЗӘКӘТ ЙӘ САҘАҠА БИРГӘНДӘ ҮҘЕҢДЕ НИСЕК ТОТОРҒА?




### Мәрхәмәтле булырға кәрәк

Зәкәтте изгелек ҡылыу теләге, шәфҡәтлелек хистәре, мохтажлыҡ кисергәндәр урынында үҙебеҙ булыуыбыҙ мөмкинлеге хаҡында уйлап бирер кәрәк.




### Ғибәҙәт ҡылғаныңды онотмаҫҡа кәрәк

Саҙаҡа йә зәкәт биргәндә, Аллаһ Сүбхәнә вә Тәғәләнең бер бойороғон үтәгәнебеҙҙе, йәғни ғибәҙәт ҡылғаныбыҙҙы онотмаҫ кәрәк. Шуға күрә, фәҡир һәм мохтаждар беҙгә ғибәҙәтте үтәргә ярҙам иткәндәренә рәхмәтле булырға тейешбеҙ.

### Зәкәт биргәндә, ихтирамлы булырға кәрәк




Оноторға ярамай, зәкәт һәм саҙаҡаны беҙ Аллаһ Сүбхәнә вә Тәғәләнең ризалығы өсөн бирәбеҙ. Зәкәт һәм саҙаҡаны матур ҡаптағы бүләк тапшырғандағы ише, шулай уҡ матур итеп тапшырырға тейешбеҙ. Игелекле мөнәсәбәт һәм йылмайыу менән бирергә кәрәк.

Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә ризалығынан башҡа бер нимә лә көтөргә тейеш түгелбеҙ. Кешене: “Был минең һиңә зәкәтем”, – тигән, һүҙҙәр менән яраларға ярамай. Иң мөһиме - зәкәттең фәҡиргә барып етеүе. Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләгә алыусының зәкәт икәнен белеүе мөһим түгел.

**Аллаһу Тәғәлә бойора:**

“Әй һеҙ, иман килтергәндәр! Хәйерҙәрегеҙҙе шелтә йәки ғәҙәти иҫкәртеү менән кәметмәгеҙ...”

(Бәҡара сүрәһе, 264-се аят)

### Ысынлап та мохтаж булғандарҙы эҙләп табырға кәрәк




Зәкәтебеҙ ҡабул булһын өсөн, беҙгә уны ҡабул итеп алыусыны эҙләр кәрәк. Биреүе мөһим түгел, ә тапшырыуы мөһим. Зәкәттең асылы - кемдең уға хоҡуғы бар, шуға биреү. Әгәр зәкәт тейешһеҙ ҡулға эләгә икән, уны яңынан бирергә кәрәк.

Бигерәк тә үҙ ихтыяждары тураһында әйтеп бармағандар тураһында хәтерҙә тотоу мотлаҡ, сөнки улар - ысын фәҡирҙәр.

**Һөйөклө Пәйғәмбәребеҙ әйткән:**

«Кемде ишек төбөнән ике киҫәк икмәк йәки ике финик менән ҡыуалар - ундай теләнселәр фәҡир булып һаналмай. Ысын мохтажлыҡ кисереүсе үҙенә ризыҡ таба алмай, уға хәйер бирмәйҙәр, һәм ул бирәүҙән дә бер нәмә лә һорамай».

(Бохари, Зәкәт, 53)

# ТИР ТҮГЕП ЭШЛӘҮ САҘАҠА ЙЫЙЫУҘАН ХӘЙЕРЛЕРӘК

Һөйөклө Пәйғәмбәребеҙ теләнселәрҙе яратмаған һәм әйткән:
*“Әгәр берәйегеҙ, бау алып, утын бәйләме йыйып һата икән, Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә коло намыҫына тап төшөрмәҫ - ул, әлбиттә, теләнсенән өҫтөнөрәк”.*

(Бохари, Зәкәт, 53)



Һөйөклө Пәйғәмбәребеҙ әйткән:

“Биреүсе ҡул алыусы ҡулдан өҫтөн”.

(Бохари, Зәкәт, 18)

Пәйғәмбәр әфәндегә ансарҙарҙан бер кеше килә һәм саҙаҡа һорай. Пәйғәмбәребеҙ унан:

- Йортоңда ни ҙә булһа бармы? – ти.

- Эйе, япмам бар. Уның бер яртыһына ятамын, ә икенсе яртыһын ябынамын. Йәнә һыу эскән табағым бар, - ти был кеше.

- Бар, был әйберҙәреңде алып кил, - тиеп бойора Пәйғәмбәр.

Был кеше китә һәм әйтелгәндәрҙе килтерә. Пәйғәмбәр Әфәнде әйберҙәрҙе ала һәм тирә-яҡтағыларҙан һорай:

- Был әйберҙәрҙе һатып алырға теләүселәр бармы?

- Бер дирһәмгә уларҙы һатып ала алам, - тип яуап бирә бер кеше.

Пәйғәмбәр тағы ла берме, икеме тапҡыр һорай:

- Кем күберәк бирә?

Кемдер:

- Мин уларҙы ике дирһәмгә һатып ала алам, - тиеп яуап бирә.

Пәйғәмбәребеҙ уларҙы шул кешегә һата. Алынған ике дирһәмде әйберҙең хужаһына бирә һәм әйтә:

- Бер дирһәмгә балаларыңа ризыҡ һатып ал, ә икенсеһенә – балта һәм бау, утын ҡырҡып ташыр өсөн.

Был кеше, Пәйғәмбәр Әфәнде кәңәш иткәнсә, утын әҙерләп, уны һатыу менән шөғөлләнә башлай. Ун биш көндән һуң, Пәйғәмбәр Әфәндегә килә һәм ун дирһәм аҡса эшләгәнен, ул аҡсаның бер өлөшөн ашарға, ә икенсе өлөшөн кейемгә ҡулланғанын һөйләй. Шул саҡта Пәйғәмбәребеҙ әйтә:

- Нимә яҡшыраҡ: ошо рәүешле йәшәүме (тир түгеп эшләп), әллә Ҡурҡыныс Ҡиәмәт Көнөндә Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә алдында “саҙаҡа йыйыусы” тигән тамға менән тороумы? (Әбү Дауд, Зәкәт, 26).

# ПӘЙҒӘМБӘРЕБЕҘҘЕҢ ЙОМАРТЛЫҒЫ ҺӘМ УНЫҢ ЯРҘАМСЫЛЛЫҒЫ

Мохтаждарҙың хәленә инә белеүе, ярлы, етем, фәҡир һәм ҡыйын хәлдә ҡалғандарҙы хәстәрләүе Пәйғәмбәр Әфәндебеҙҙең иң күренекле сифаттарынан була. Әгәр берәү ауыр хәлгә тарыһа, шунда уҡ был турала һөйләргә Пәйғәмбәребеҙгә йүгергән. Ул һәр береһенә ярҙам итергә тырышҡан һәм унан ни генә һорамаһындар бер ҡасан да ярҙамдан баш тартмаған. Бер ҡасан да: «Юҡ» - тиеп әйтмәгән. Хатта, аҙ булһа ла - биргән. Әгәр бирергә бер ни ҙә булмаһа, һорауы менән килгән кешене йыуатырға тырышҡан.

Пәйғәмбәр әфәнде иң йомарт кеше булған. Барлыҡ ниғмәттәрҙең ысын хужаһы Аллаh Сүбхәнә вә Тәғәлә икәнен бер ҡасан да онотмаған. Фәҡир һәм мохтаждарҙың мәсьәләһе үҙенекенә ҡарағанда күберәк борсоған. Ас булғандар менән бүлешкән, шуға күрә бик һирәк яңғыҙы киске аш ашаған. Кемдең бурысы бар, шуларға ярҙам иткән, ҡайһы саҡ уларға бурыстарын түләшкән. Йомартлығының бер сағылышы – һөйгән кешеләренә бүләктәр биреп, уларҙы ҡыуандырған. Аллаh Илсеһе: *«Бүләктәр бирешегеҙ - бер-берегеҙҙе яратырһығыҙ»*, - тиеп кәңәш иткән. Үҙе лә дуҫтарын төрлө бүләктәр менән ҡыуандырған. Уға бүләк иткәндә ҡабул итеп алған, яуап итеп яҡшыраҡты бирергә тырышҡан. Хатта һатыусыға унан һатып алған тауарын бүләк иткәне булған. Бер тапҡыр Йәбир бин Ғабдулла үҙенең сикһеҙ мохтажлығы өсөн дөйәһен һатырға мәжбүр булған. Пәйғәмбәр дөйәне һатып алған һәм уны (дөйәне) кире Йәбиргә бүләк иткән.

Һөйөклө Пәйғәмбәребеҙ мосолмандарҙы йомарт булырға, мохтаждарға ярҙам итергә өндәгән, былай мөғәмәләнән Аллаh Сүбхәнә вә Тәғәләнең ҡәнәғәт булыуын аңлатҡан: *«Кем дә кем минең өммәтемдең берәйһенең ихтыяжын ҡәнәғәтләндерергә булышлыҡ итә, шул*



*минең ризалығыма лайыҡ булыр. Кем минең ризалығыма лайыҡ, шул Аллаһ Сүбхәнә вә Тәғәләнең ризалығына ирешә. Һәм Аллаһ Сүбхәнә вә Тәғәлә ҡәнәғәт булған кешеһен ожмах менән бүләкләр».*

Унын һөйләүенсә, мәрхәмәтле кешеләр был донъяла ла, әхирәттә лә бәхетле, ә ҡомһоҙҙар ике донъялыҡта ла ҡайғы-хәсрәткә дусар булырҙар. Йомартлыҡ Аллаһ Сүбхәнә вә Тәғәләгә, йәннәткә, кешеләргә яҡынайта: «Йомарт кеше - Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләгә, йәннәткә, кешеләргә яҡын кеше. Һаран кеше - Аллаһ Сүбхәнә вә Тәғәләнән, йәннәттән, кешеләрҙән йыраҡ, ә тамуҡҡа яҡынраҡ». Шундай йомартлыҡ һөйөклө Пәйғәмбәребеҙҙә булған, унын йөрәге кешеләргә ҡарата һөйөү, яҡшылыҡ һәм изгелек хистәре менән тулған. Ғүмере буйы ул шундай булған. Бик ҙур мөмкинлектәргә эйә булып та, тормошта ябайлыҡҡа һәм баҫалҡылыҡҡа өстөнлөк биргән.

**Һөйөклө Пәйғәмбәребеҙ әйткән:**

“Ике кешегә көнләшергә рөхсәт ителә: үҙенең мөлкәтен Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә юлында таратыусыға, Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә бүләкләгән белеменә ярашлы йәшәүсегә һәм дә уны башҡаларға өйрәтеүсегә”.

(Бохари, Ғилем, 15)

Бер мосолман ҡатыны Пәйғәмбәр Әфәндебеҙгә үҙ ҡулдары бәйләнгән джүббә (елән) бүләк итә. Ысынында ла бындай кейемгә ихтыяжы булған Пәйғәмбәр бүләкте ала ла үҙенең өйөнә табан йүнәлә. Джүббәне кейеп, ул мәсеткә инә. Джүббә сәхәбәләрҙең береһенә бик оҡшай һәм ул Пәйғәмбәр Әфәнденең йомартлығы тураһында белгәнгә лә һорай:

“О, Аллаһ Илсеһе! Ниндәй яҡшы джүббәгеҙ. Бүләк итмәҫһегеҙме икән миңә?”

Пәйғәмбәребеҙҙең унан башҡа джүббәһе булмаһа ла, баш тартмай һәм шунда уҡ үҙенән сисеп бүләк итә.

Башҡа сәхәбәләр Аллаһ Илсеһенән джүббәне һораған сәхәбәне оялта башлайҙар:

- Ни өсөн һин унан джүббәне һораның? Унын бит икенсеһе юҡ. Унын баш тартмағанын белмәнеңме ни?

Сәхәбә:

- Джүббәне кейеп йөрөр өсөн түгел, ә кәфенлегем булһын өсөн һорап алдым, - тиеп яуап бирә.

Был сәхәбә вафат булғас, уны Пәйғәмбәр бүләк иткән джүббәгә урайҙар.

(Бохари,Әҙәб, 39; Джәнаиз, 29)





# САҘАҠА



Саҙаҡа – тәнгә шифа ул,
саҙаҡа – йәнгә дауа.
Саҙаҡа биргән ҡулдарға
Хоҙай рәхмәте яуа.
Пакланһын тиһәм күңелем,
тапшырам мин саҙаҡа
Был изге эш, изге ғәмәл,
әүерелһен ғәҙәткә.
Үлгән олатайҙар рухын,
шат ҡылһын Раббым, тиеп,
Мохтаждарға саҙаҡа бир,
ҡан-ҡәрҙәштәрҙе һөйөп.

Күп бирҙем тиеп маҡтанма,
аҙ бирҙем, тиеп оял.
Табырһың һин шул саҡта,
йонсоу йөрәгеңә ял.
Биргән ҡул өҫтөн алғандан,
биргән ҡул – фәҡирләнмәҫ.
Саҙаҡа өләшкән йәндәр
керләнмәҫ, ҡәһәрләнмәҫ.
Артһын Мөхәммәт өммәте,
көсәйһен ислам дине –
Шулай тип биргән саҙаҡа
хәтәрҙән һаҡлар һине.

Хәмит Вәлиди

## ҺОРАУҘАР

### Белемебеҙҙе тикшерәбеҙ

Һөйләмдәрҙең дауамын табығыҙ.

- ❑ Кешенең нисап миҡтарындағы мөлкәте булһа,
- ❑ Алтын - көмөштән ҡырҡтан бер өлөшө,
- ❑ Үҙеңдең ейән-ейәнсәрҙәреңә
- ❑ Зәкәт биреү -
- ❑ Зәкәт мәктәп, хәстәхана, мәсет,
- ❑ Зәкәт - байҙарҙың артыҡ мөлкәтен
- ❑ Бай мосолмандарҙың мөлкәтенән бер өлөшөн мохтаждарға биреү -
- ❑ Биргән ҡул
- ❑ Алтын нисабы -
- ❑ Фытыр саҙаҡаһының күләме -

- ❑ кешене туйҙырыу өсөн бер көнлөк аҙыҡ, йәки аҡсалата эквивалент.
- ❑ зәкәт тип атала.
- ❑ алған ҡулдан өҫтөнөрәк.
- ❑ йәки 2,5% зәкәт итеп түләнә.
- ❑ 80,18 грамм.
- ❑ зәкәт бирелмәй.
- ❑ юлдар, күпер, ҡоҙоҡ һәм башҡа төҙөлөштәр өсөн бирелмәй.
- ❑ ғибәҙәт ҡылыу ул.
- ❑ мохтаждарға еткереү күпере ул.
- ❑ ул дини ҡанундар буйынса бай иҫәпләнә.



### Үҙебеҙҙе тикшерәбеҙ

**1. Зәкәт кемдәргә бирелмәй?**

а) Юлда ҡалғандарға

б) Ярлыларға

в) Бурысы булғандарға

г) Атай-әсәйгә

**2. Саҙаҡа, зәкәт, ҡорбан һәм фытыр саҙаҡаларында ниндәй уртаҡлыҡ бар?**

а) Ярҙамлашыу һәм терәк-таяныс булыу

б) Дөрөҫлөк һәм ғәҙеллек

в) Эш һөйөүсәнлек һәм шатлыҡ

г) Сабыр һәм бәрәкәт

3. **Тәүге кәрәк-яраҡтарға нимәләр инмәй?**

   а) Торлаҡ
   б) Шәхси транспорт
   в) Тауар
   г) Һөнәргә бәйле ҡоралдар

4. **Һарыҡ һәм кәзәнән нисап күләме нисек?**

   а) 40 б) 30 в) 20 г) 100

5. **Фытыр сәҙаҡаһы нимә булып тора?**

   а) Фарыз б) Вәжиб
   в) Сөннә г) Мөстәхәб

6. **Ҡайһы фекер дөрөҫ түгел?**

   а) Зәкәт һаранлыҡтан һәм мин-минлектән һаҡлай.
   б) Зәкәт мөлкәтебеҙҙе таҙарта һәм уны бәрәкәтләндерә.
   в) Ярҙамлашыу теләгеен уята һәм яратыуһөйөүҙе нығыта.
   г) Зәкәт байҙарҙың байлығын арттыра, фәҡирҙәрҙе лә нығыраҡ фәҡирлеккә төшөрә.

7. **Зәкәтте нимә менән түләмәйҙәр?**

   а) Аҡса
   б) Һарыҡ
   в) Йорт кәрәк-яраҡтары
   г) Һыйыр

8. **Зәкәт тураһында нимә дөрөҫ әйтелмәгән?**

   а) Зәкәт - байҙар өсөн фарыз.
   б) Зәкәт йылына бер тапҡыр бирелә.
   в) Зәкәт мөлкәттең ҡырҡтан бер өлөшөнән түләнә.
   г) Сирлеләр зәкәт түләмәй.



## Төшөп ҡалған һүҙҙәрҙе тултырабыҙ

**( мөлкәтендә / орлоҡҡа / һорамаған / таҙартабыҙ / йөрәгендең )**

- “Ҡулдарында йәшәр өсөн бер нәмәһе лә булмаған, әммә ләкин берәүҙән дә хәйер алмаған, үҙе лә ........... кешеләр - ысынлыҡта фәҡир һанала”.
- “Бай мосолмандарҙың ........... һораған һәм һорамағандарҙың да өлөшө бар”.
- “Үҙ мөлкәтен Аллаһ юлында сарыф иткән кеше бер бөртөктән ете башаҡ, һәр башаҡтан йөҙәр бөртөк уңыш биргән ........... оҡшар”.
- “Әгәр ........... йомшарыуын теләһәң, ярлы – мохтаждарҙы ашат, етемдәрҙе йыуат”.
- “Байҙарҙан зәкәт алып, мөлкәттәрен харамдан ........... һәм гонаһтарын йыуабыҙ”.




мөҡәддәс сәйәхәт

# ХАЖ

- Нимә ул хаж?
- Хаж беҙгә нимә бирә?
- Хаж менән бәйле урындар
- Мәккә һәм Мәҙинәләге иҫтәлекле урындар
- Хаждың фарыздары
- Хаж ғәмәле нисек ҡылына?
- Ғөмрә
- Пәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләмдең) хажы




# ЗӘМЗӘМ

Бер саҡ Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә Ибраһим пәйғәмбәргә (ғәләйһис-сәләм) ҡатынын һәм яңы тыуған улы Исмәғилде әлеге Мәккә ҡалаһы урынлашҡан ергә алып барырға ҡуша. Мәккә Йәмәндән Сириәгә илткән каруан юлында ятҡан ер була. Ул саҡта унда бер кем дә йәшәмәгән, сөнки бында ҡоп-ҡоро сүллек булған. Ибраһим пәйғәмбәр Аллаһ һүҙен тыңлай. Ҡатыны Хәжәрҙе һәм сабыйы Исмәғилде алып, ул юлға сыға. Оҙаҡ барғандан һуң, улар Мәккәгә килеп етә. Ибраһим пәйғәмбәр, ҡатынын һәм улын ошонда ҡалдырып, үҙе Дамаск ҡалаһына барырға ниәтләй. Уларға бер аҙ аҙыҡ, һыу ҡалдыра һәм юлға йыйына.

- Эй, Ибраһим!.. Һин беҙҙе был сүллектә ҡалдырып, ҡайҙа китәһең?.. Кемгә ҡалдыраһың һин беҙҙе?.. - ти Хәжәр, Ибраһимдың был ниәтенә аптырап. Әммә Ибраһим уға яуап бирмәй. Шунан Хәжәр тағы ла һорай:

- Һиңә Аллаһ ҡуштымы беҙҙе бында ҡалдырырға?..

- Эйе, - тип яуаплай Ибраһим.

- Улай булғас, бар, - тип ризалығын белдерә Хәжәр, - Аллаһ беҙҙе һаҡлар.

Күңелендә булған иман Хәжәргә үҙенең һәм сабыйының яҙмышын тулыһынса Аллаһҡа ышанып тапшырырға көс бирә.

Ибраһим пәйғәмбәр юлға сыға. Мәккә үҙәненән бер аҙ китә биргәс, бер убаға ҡалҡына ла, ҡулдарын күтәреп, Аллаһҡа өндәшә:

**- Әй, Раббыбыҙ, намаҙҙы дөрөҫ уҡыһындар өсөн, мин ғаиләмдең бер нисәһен Һинең Бәйтүл-Харам (Ҡәғбә) янындағы таҡыр ерҙә урынлаштырҙым. Кешеләрҙең күңелдәрендә уларға ҡарата мәрхәмәт урынлаштыр, емештәреңдән ризыҡ бир, зинһар. Өмөт итәм, улар шөкөр итәсәктәр**. (Ибраһим сүрәһе, 37-се аят).

Бер аҙҙан Хәжәрҙең аҙығы ла, һыуы ла бөтә. Ул хәлдән тая, уның күкрәк һөтө кибә. Сабыйы аслыҡтан һәм эҫенән йонсоп илай. Хәжәрҙе балаһының ғүмере өсөн ҡурҡыу биләп ала. Ул яҡын-тирәнән йүгереп һыу эҙләй башлай.

Ләкин күпме генә эҙләмәһен, бер нәмә лә табалмай. Исмәғилдең яңғыҙын ҡалдырып, ул яҡындағы Сафа убаһына күтәрелә. Берәй каруан күренмәҫме тигән өмөттә, тирә-яғына күҙ һала - уларға ярҙам итерҙәй бер кем күренмәй. Хәжәр, шулай Сафа һәм Мәрүә убалары араһында йүгереп йөрөй торғас, тамам хәлһеҙләнеп, улы янына килә.

Улын ҡалдырған ергә килеп еткәс, Хәжәр үҙ күҙҙәренә үҙе ышан-



май тора. Исмәғилдең аяҡтары янында ғына ер аҫтынан шишмә сығып ағып ята. Хәжәр, оло ҡыуаныс кисереп, бөйөк Аллаһҡа ҙур рәхмәттәр уҡый. Ул шишмәне таштар менән саҡ ҡына быуып ҡуя. Быны эшләгән саҡта ул: «Зәм!.. Зәм!.. (Туҡта!.. Туҡта!)» - тип өндәшә.

Хәжәр туйғансы һыу эсеп ала. Хәҙер инде уның әсәр һыуы, сабыйын туйҙырырға һөтө була. Шулай итеп, Ибраһимдың Аллаһҡа үтенесе ҡабул була. Хәжәрҙең сабыйын һаҡлап ҡалыу теләге ҙур булған өсөн, Аллаһ бүләк итеп ебәрә уларға ошо һыуҙы.

Бер саҡ Мәккә үҙәне янынан Дамасктан Йәмәнгә табан барыусы каруан үтә. Был караван Йөрхөм ҡәбиләһе кешеләренеке була. Алыҫтан уҡ улар үҙән өҫтөндә ҡоштар осҡанын күрә. Был ерҙә электән ҡоро сүллек булғанын белгән кешеләр быға бик аптырай - ҡоштар бит тик һыулы ерҙә генә йөрөй. Хәлде ентекләп белер өсөн, үҙәнгә бер кешене ебәрәләр. Был кеше барып ҡарап килгәс, үҙәндә шишмә ағып ятҡанын әйтә. Каруан шишмәгә табан йүнәлә. Хәжәр уларҙы ҡаршы ала. Ул кешеләргә ни кисергәндәрен һөйләп бирә. Каруандағы кешеләр шуны аңлай: Исмәғил - Аллаһтың рәхмәтен алған мөбәрәк бала. Улар был ерҙә ҡалып йәшәргә ҡарар итәләр. Хәжәрҙән быға рөхсәт һорайҙар. Хәжәр ризалығын бирә, тик Зәмзәм шишмәһенең хужаһы тик ул булырға тейешлеген әйтә.

Шулай итеп, Йөрхөм ҡәбиләһе Зәмзәм янында төпләнеп, унда ҙур булмаған ҡаласыҡ төҙөй. Ваҡыт үтеү менән, бында Мәккә ҡалаһы үҫеп сыға. Алыҫ юлдарҙан килгән каруандарҙың ял итеп китер урынына әйләнә был ер.

Ибраһим пәйғәмбәрҙең (ғәләйһис-сәләм) ялбарыуҙары һәм хөрмәтле Хәжәрҙең балаһын һаҡлау теләге өсөн, Аллаһтың бүләге була ул. Был бүләккә Хәжәр һәм уның артынан барыусылар барыһы ла лайыҡ була.

**Һөйөклө Пәйғәмбәребеҙ әйткән:**

“Зәмзәм һыуын кем ниндәй теләк менән эсә, шуның өсөн файҙалы ул. Сырхауҙан арынам тип эскәнгә дарыу булыр, һыуһап эскәндең һыуһынын ҡандырыр, асыҡҡандың тамағын туйҙырыр.
Зәмзәм - Ябраил асҡан шишмә,
Исмәғил һыу эскән урын”.

(Дәраҡутни, III, 354)

**Зәмзәм һыуын эсеү доғаһы:**

اَللّٰهُمَّ إِنِّى أَسْأَلُكَ عِلْمًا نَافِعًا وَرِزْقًا
وَاسِعًا وَشِفَاءً مِنْ كُلِّ دَاءٍ.

“Аллаһым, Һинән файҙалы ғилем, мул ризыҡ һәм һәр сирҙән шифа һорайым”.

(Дәраҡутни, III, 354)





## НИМӘ УЛ ХАЖ?

**Хаж** – йылдың айырым бер көндәрендә Ҡәғбә һәм уға яҡын изге урындарға ғибәҙәт ҡылыу ниәте менән барыу.

Аллаһу Тәғәлә бойора:

“Хажды һәм ғөмрәне Аллаһ риза булырлыҡ итеп үтәгеҙ!”

(Баҡара сүрәһе, 196-сы аят)

Һөйөклө Пәйғәмбәребеҙҙән һоранылар:

- Иң яҡшы ғәмәл ниндәй?

Пәйғәмбәребеҙ: - Аллаһҡа һәм Унын Пәйғәмбәренә инаныу, - тине.

- Ә унан һуң?

- Аллаһтың юлында йыһат ҡылыу.

- Ә унан һуң?

- Мәбрур (дөрөҫ ҡылынған) хаж.

(Бохари, Хаж, 4)

# ХАЖ БЕҘГӘ НИМӘ БИРӘ?

**ХАЖ**

- Эш һәм ҡыланыштарыбыҙҙы даими тикшереп, күҙәтеп торорға өйрәтә.
- Туғанлыҡ, дуҫлыҡ хистәрен нығыта, бер өммәттән икәнлегебеҙҙе төшөндөрә.
- Ғонаһтарҙан арындыра.
- Тормошобоҙҙо ыңғай яҡҡа үҙгәртә.





Хаж - насар ғәҙәттәрҙән арыныу һәм әхлаҡты яҡшыртыу өсөн гүзәл мөмкинлек тә ул. Ихрамда булған хажиға үҫемлектәрҙе өҙөү, энә менән тегелгән кейем кейеү, хуш еҫле майҙар һөртөү, тиргәш-талаш сығарыу ярамай. Уның өсөн яза ҡаралған. Хаж ҡылған саҡта, Аллаһтың ҡушҡанын теүәл үтәүҙе,тыйғанынан тыйылыуҙы, ғәҙәттәге көндәргә ҡарағанда, тағы ла ентекләберәк башҡарыу кәрәк. Былар барыһы ла **эшләгән эш - ғәмәлдәребеҙҙе бер тәртиптә тоторға өйрәтә**.



Һөйөклө Пәйғәмбәребеҙ әйткән:

*“Насар һүҙҙәр һөйләмәйенсә һәм оло гонаһтар ҡылмайынса хаж үтәгән кеше, әсәһенән яңы тыуған һымаҡ, гонаһһыҙ булып өйөнә ҡайтыр”.*

(Бохари, Хаж, 4)

Хаж көндәрендә телдәре, тән төҫтәре, милләте, сығыштары һәм мәҙәниәттәре айырмаһына ҡарамаҫтан, Ер шарының һәр ҡитғаһынан миллионлаған мосолман бер урынға йыйыла. Был донъяла яңғыҙ булмауҙарын һәм Ислам дине ҡанундары нигеҙендә йәшәргә ынтылыусы ҡәрҙәштәре барлығы тураһында беләләр. Улар менән танышалар, фекер алышалар.Финик емештәре һәм Зәмзәм һыуы менән бер-беренән һыйлайҙар. Шатлыҡ-ҡыуаныстары, ҡайғы-хәсрәттәре менән уртаҡлашалар. Бергәләп намаҙ уҡыйҙар, Ҡәғбәне урайҙар, Ғәрәфәт далаһында торалар. Кешеләрҙең дошманы булған шайтанды ҡәүҙәләндергән таш бағаналарға бергәләп таш аталар. Былар барыһы ла ҡәрҙәшлек хистәрен нығыта, тулы, **берҙәм, ойошҡан бер өммәттән икәнлегебеҙҙе төшөндөрә**.



Аллаһу Тәғәлә бойора:

*“Мосолмандар үҙ-ара ҡәрҙәш”.*

(Хужурәт сүрәһе, 10-сы аят)

Хажды үтәгәндә, Ғәрәфә далаһында баҫып тороу, тауаф, сәғи, шайтанға таш атыу, ҡорбан салыу һәм бик күп ғибәҙәттәр ҡылына. Был ғибәҙәттәр беҙгә сауап ҡаҙандыра һәм **беҙҙе ғонаһтарҙан арындыра**.

Һөйөклө Пәйғәмбәребеҙ әйткән:

*“Исламды кабул итеү, һижрәт кылыу һәм хажды үтәү элекке ғонаһтарҙы юйыр”.*

(Мөслим, Иман, 192)

Хаж – беҙгә рухи үҫеш биргән ғибәҙәт ул. Хаж мәлендә һәр ҡылған ғәмәл ғибәҙәт булып һанала. Тауафтар, намаҙҙар, Ҡөрьән уҡыу, зекер һәм доғалар Аллаһу Тәғәләгә даими хеҙмәт итеү атмосфераһын тыуҙыра. Былар барыһы ла аңыбыҙҙы, хистәребеҙҙе, уйҙарыбыҙҙы байыта, **йәшәйешебеҙҙе үҙгәртә**. Хаж бар асылыбыҙҙы уратып ала һәм бер тәрбиә бирә. Был йәһәттән, ул ғибәҙәт ҡылыу һәм тәрбиә алыу буйынса бер “семинар”ҙа булып тора. Шуға ла хаж ҡылғандарҙың яҡшы яҡҡа үҙгәреп ҡайтыуын күрәбеҙ.



Һөйөклө Пәйғәмбәребеҙ әйткән:

*“Мәбрур (дөрөҫ кылынған) хаждың әжере - йәннәт”.*

(Бохари, Ғөмрә, 1)



# ШӘКӘРЛЕ СӘТЛӘҮЕКТӘР

Атайым йыуынғыста ҡул-битен йыуып алды ла, кесәһенән ҙур ҡулъяулыҡ сығарып, яҡшылап һөртөндө. Пинжәген яурындарына һалып, тирләп ойошҡан сәстәрен һыпырып ҡуйҙы. Бүлмәгә ингәс, былай тине:

- Тимәк, һин дин дәресенән «бишле» алдың инде?..

- Эйе, хатта плюс менән «бишле», - тинем мин.

- Улай булғас, бына һиңә тәмлекәстәр, - тип, миңә кесәһендә тупайып торған төйөнсөктө сығарып бирҙе.

Был шәкәрле сәтләүектәр ине. Улар төрлө төҫтәләр: ҡыҙыл, һары, аҡ, йәшел, тик бары ла бер ҙурлыҡта. Тап уҡытыусыбыҙ Мозафар ағай һөйләгәнсә. Бар мосолмандарҙың да ҡәрҙәш булыуы тураһындағы теманы ул ошолай аңлатҡайны. Парта өҫтөнә пенал һалды ла, ул былай тине:

- Бына ошоно Ҡәғбә тип күҙ алдына килтерегеҙ... Ә бына был сәтләүектәр - Ҡәғбәне уратып йөрөгән мосолмандар. Күреүегеҙсә, улар төрлө төҫтә. Аҡ төҫтәгеһе - Рәсәй кешеһе ти, кәфеүән төҫөндәгеһе - Африканан, ал төҫтәгеһе - Американан килгән индеец. Һары төҫтәгеһен Ҡытайҙан, ә ҡыҙыл төҫтәгеһен Австралиянан килгән тип һанайыҡ. Бына, уларҙың һәр ҡайһыһы төрлө төҫтә булһа ла, эсынында бары ла бер, сөнки улар барыһы ла - мосолмандар һәм бер маҡсат менән килгәндәр. Бар мосолмандар ҙа ҡәрҙәштәр икәнен донъяға әйтергә теләйҙәр һымаҡ был төрлө төҫтәге кешеләр. Аллаһтың китабы шулай аңлата Исламдағы туғанлыҡты.

- Уларҙың төҫтәре төрлө булһалар ҙа, бары ла туғандармы? - тип һораны Ибраһим исемле малай.

Уҡытыусы өҫтәлдәге сәтләүектәрҙе Ибраһимға һондо: - Мә, ашап ҡара әле.

Ибраһим, уңайһыҙланып ҡына, сәтләүектәрҙе ашап ҡараны.

- Йә, әйт инде, уларҙың барыһының да тәме берме?.. Тоҙло йә әсеһе бармы улар араһында?.. - тип һораны уҡытыусы унан.

- Юҡ, уларҙың барыһының да тәме бер үк - шәрбәтле, - тине Ибраһим.

- Тимәк, төҫтәре төрлө булыуҙан уларҙың тәме үҙгәрмәй. Бына шулай уҡ мосолмандар ҙа. Тәндәре төрлө төҫтә булһа ла, милләте менән бер-береһенән айырылһалар ҙа, улар барыһы ла ҡәрҙәштәр - мосолмандар.

(М. Йәшәр Ҡандәмир)



## ХАЖ КЕМДӘР ӨСӨН ФАРЫЗ? ☺☺☺☺

- Аҡылы сәләмәт,
- Бәлиғ,
- Азат,
- Сәйәхәт өсөн тәне иҫән-һау,
- Әйләнеп ҡайтҡансы, хаж өсөн һәм ғаиләһен ҡарарға мөлкәте булған

һәм юлы имен - тыныс булған

һәр мосолманға → ғүмерендә бер тапҡыр → Хаж Фарыз ☺☺☺☺

Аллаһу Тәғәлә бойора:

“Хәленән килгән кешеләрҙе Аллаһ хажға барырға бурыслы итте”.

(Ғимран сүрәһе, 97-се аят)





## ҠӘҒБӘ ЮЛЫ

Ҡәғбә юлы яҡын түгел
Әммә йәнем яҡын уға,
Йәнем ҡайҙа – тәнем шунда
Булһын инде насип миңә.
Һине күреү – тауҙай бәхет.
Тәүәккәлләп юлға сығам.
Бахил булығыҙ, туғандарым!
Бахил булығыҙ, яҡындарым!
Тәүәккәлләп юлға сығам.
Йәнем ҡайҙа – мин дә шунда...






# ҠӘҒБӘТУЛЛАҺ

Ҡәғбәтуллаһ нисек пак булһа, беҙҙең йөрәктәр ҙә уның кеүек саф булыуы мотлаҡ. Хөрмәтле Ибраһим менән Исмәғил (ғәләйһимәс-сәләм) Ҡәғбәтулланы бысраҡтан таҙартҡан кеүек, беҙ ҙә йөрәктәрҙәге насар уйҙарҙан һәм бысраҡ хистәрҙән арынырға тейешбеҙ.

әғбәтуллаһ - Аллаһу Тәғәләбеҙгә ғибәҙәт ҡылыр өсөн Әҙәм (ғәләйһис-сәләм) тарафынан төҙөлгән иң беренсе ғибәҙәтхана ул. Нух (ғәләйһис-сәләм) заманындағы ҙур ташҡында (Туфан һыуында) ул һыу аҫтында ҡала. Диуарҙары емерелеп, нигеҙе юҡҡа сыға. Ибраһим пәйғәмбәр һәм улы Исмәғил (ғәләйһимәс-сәләм) Ҡәғбәтулланың урынын табып, уны яңынан элекке хәленә ҡайтарып төҙөйҙәр.

Ә ул хәл былай була. Ибраһим пәйғәмбәр ҡатыны Һәжәр менән улы Исмәғилде кеше булмаған Мәккә ерҙәрендә ҡалдырып китә. Ваҡыты-ваҡыты менән килеп хәлдәрен белә. Бер килгәнендә Бөйөк Аллаһтың, Ҡәғбәтулллаиы тергеҙергә, тигән әмере төшөрөлә. Ибраһим пәйғәмбәр менән улы Исмәғил пәйғәмбәр шунда уҡ Ҡәғбәне төҙөү эштәренә тотоналар. Әҙәм (ғәләйһис-сәләм) мәлендә төҙөлгән Ҡәғбәнең нигеҙен табып, диуарҙарын күтәрәләр. Исмәғил тауҙарҙан таш ташый, Ибраһим Ҡәғбәне төҙөй. Ошондай ҙа изге эште башҡарыу мөмкинлеге үҙҙәренә бирелгәненә шөкөр итеп, Аллаһҡа түбәндәге доғаларҙы ҡылалар:

«Эй, Раббым! Ҡабул ит беҙҙән! Һин ысынлап та, ишетеп, белеп тораһың бит! Раббым! Беҙҙе мосолман ит, беҙҙең нәҫелде мосолман өммәте ит,

ғибәҙәт ҡылыр урыныбыҙҙы күрһәт, беҙҙе Үҙең ярлыҡа! Ысынлап та, Һин Ярлыҡаусан, Рәхимле!

Раббым! Уларҙың үҙ араһынан Һинең аяттарыңды уҡырлыҡ, китап һәм хикмәттәр өйрәтерлек, уларҙы сафларлыҡ рәсүл булдыр! Ысынлап та, Һин Олуғ, Хикмәтле!» (Баҡара сүрәһе, 127-129-сы аяттар).

Диуарҙары ҡалҡып бөтөп, Ҡәғбә төҙөлөшө тамамланғас, Ябраил фәрештә килә һәм уларҙы Ҡәғбәне ете мәртәбә урарға һәм башҡа ғәмәлдәргә өйрәтә. Аллаһу Тәғәләгә бар булмышын тапшырып ғибәҙәт ҡылыусылар, рөкуғта тороусылар, сәждәгә китеүселәр өсөн Ҡәғбәтулланы таҙа тоторға бойора. Бына рухи һәм төрлө бысраҡтарҙан таҙарынған Ҡәғбәтуллаһ ғибәҙәт ҡылыу өсөн әҙер була. Бөйөк Аллаһ Ибраһим пәйғәмбәргә кешеләрҙе Хаж ғәмәленә саҡырырға бойора: «Кешеләргә хаж тураһында хәбәр ит. Улар һиңә йәйәү ҙә, төрлө тәрән үҙәктән сыҡҡанябыҡ малына (дөйәләргә) атланып та килер» (Хаж сүрәһе, 27-се аят).

> Ҡәғбәне емереүҙән ҡурҡҡандай, йөрәктәрҙе рәнйетеүҙән һаҡ булырға тейешбеҙ.

Ошо илаһи әмерҙән һуң, Ибраһим пәйғәмбәр(ғәс) кешеләргә хаж ғәмәлен үтәүҙе фарыз итеп иғлан итә. Ошо көндәрҙән алып мосолмандар, Раббыбыҙ ҡушҡанса, хаж бурысын үтәр өсөн Мәккәгә киләләр. Был ғәмәл Ахыры заман еткәнсе дауам итәсәк.





## ХАЖ МЕНӘН БӘЙЛЕ УРЫНДАР

- **Хаж** – бик күп ғәмәлдәр ҡылынған һәм дини символдарға бәйле булған ғибәҙәт урыны. Хаж ҡылыуҙы дөрөҫ үтәр өсөн, башта уны ентекле өйрәнер кәрәк.

- **Харам мәсет** - Ҙур майҙанда Ҡәғбәне уратып төҙөлгән мәсеткә әйтәләр. Уны икенсе төрлө «Харам Шәриф» тә тип атайҙар.



Һөйөклө Пәйғәмбәребеҙ әйткән:

“Харам мәсетендә ҡылынған намаҙ башҡа мәсеттәрҙә уҡылған намаҙҙарҙан йөҙ мең тапҡыр өҫтөн”.

(Ибн Мәджә, Сунан, I, 450)

Динебеҙ бер. Китабыбыҙ бер. Пәйғәмбәребеҙ бер. Ҡиблабыҙ - Ҡәғбәтуллаһ. Беҙ - бер өммәттәнбеҙ.





- **Ҡәғбә:** Ер йөҙөндә Аллаһу Тәғәләгә ғибәҙәт ҡылыр өсөн төҙөлгән беренсе ғибәҙәтхана. Бәйтуллаһ» һүҙенең мәғәнәһе - «Аллаһ йортон», ә инде «Ҡәғбә» - Аллаһҡа ғибәҙәт ҡылыу урынын аңлата.

Аллаһу Тәғәлә бойора:

“Хаҡтыр, әҙәмдәр өсөн һалынған беренсе ғибәҙәт йорто ул, Мәккәләге Ҡәғбә”.

(Ғимран сүрәһе, 96-сы аят)

- **Хәджәрүл-Әсүәд** - “Кара таш” тимәк. Был таш, Ҡәғбәнең көньяҡ-көнсығышында, пәйғәмбәр Ибраһим (ғәләйһис-сәләм) тарафынан урынлаштырыла. Ҡәғбәне тауаф ҡылыу ошо таштан башлана. Һәр әйләнгән түңәрәктән һуң уға “сәләм” бирелә.



Хәджәрүл-Әсүәдте сәләмләү - был донъялыкта Аллаһҡа хеҙмәт итер өсөн бирелгән антыбыҙҙы иҫкә төшөрә.

- **Ибраһим мәкамы** - Ибраһим пәйғәмбәр, Ҡәғбәне төҙөгән ваҡытта, юғарыға менеп-төшөп йөрөр өсөн ҡулланған таш ул. Ошо ташҡа баҫып, кешеләрҙе хаж ғәмәлен үтәргә саҡырған. Был урында уҡылған намаҙ бик ҡиммәтле һәм сауаплы һанала.



Аллаһу Тәғәлә бойора:

“Беҙ Ҡәғбәне, кешеләр бергә йыйылһын тип, именлек урыны иттек. Һеҙ ҙә Ибраһимдың мәкамын намаҙ уҡыу урыны итегеҙ”.

(Баҡара сүрәһе, 125-се аят)

Ибраһим пәйғәмбәр - Аллаһҡа буйһоноуҙа, ихласлыкта, дин өсөн көрәшеүҙә һәм гүҙәл әхлаҡта беҙҙең өсөн иң матур үрнәк.

- **Ғәрәфә** - хажға килеүселәрҙең Ғәрәфә көнө, Аллаһҡа үтенеү-ялбарыу урыны булған киң дала. Ғәрәфәт далаһындағы ҡалҡыулыҡ Джәбәлүр-Рахмә тип атала. Шул түбәлә атабыҙ Әҙәм һәм инәбеҙ Һауа осраша, Аллаһтан уларҙы ярлыҡауын һорайҙар. Ғәрәфә далаһында тороу - кешеләрҙең терелтелеп, ҡәберҙәренән ҡубарылып Мәхшәрҙә йыйылыуын хәтерләтә.



Һөйөклө Пәйғәмбәребеҙ әйткән:

“Хаж - Ғәрәфәлер”.

(Тирмизи, Хаж, 57)

**Мөҙҙәлифә** – Ғәрәфә менән Мина араһындағы урын. Байрам алдынан хажиҙар төндө шунда үткәрәләр.



Аллаһу Тәғәлә бойора:

“Ғәрәфә далаһынан төркөм булып Мәшғәри Харамға килгәс, Аллаһты зикер итегеҙ”.

(Бакара сүрәһе, 198-се аят)



**Мина** - Байрам көнө ҡорбан салынасаҡ, шайтанды кәүҙәләндергән бағанаға таш бәреләсәк урын. Ибраһим пәйғәмбәр үҙенең улын, Аллаһу Тәғәләгә ҡорбан итер өсөн, Минаға алып килә.

Минала атылған һәр таш - беҙҙең ғүмер буйы шайтан менән көрәшеүебеҙ символы.

**Сафа менән Мәрүә** – Ҡәғбәнән 200 метр көньяҡ-көнсығышта урынлашҡан ике түбәгә әйтәләр. Улар Харам мәсете эсендә урынлашҡан, аралары 350 метр.



Аллаһу Тәғәлә бойора:

“Шик юҡ, Сафа менән Мәрүә тауҙары Аллаһтың ғәләмәттәрелер. Кем хаж йә ғөмрә маҡсаты менән Ҡәғбәне зыярат итеп, улар тирәләй тауаф ҡылһа, уның гөнаһаһы булмаç”.

(Бакара сүрәһе, 158-се аят)

# БЕҘҘӘН СӘЛӘМ ӘЙТЕГЕҘ

Хаждың алыҫ юлдарына
Беҙҙән сәләм әйтегеҙ.
Төрлө телле халыҡтарға
Беҙҙән сәләм әйтегеҙ.

Хиджаз ере ҡомдарына,
Мосолмандар ағымына,
Һөйөү тулы күңелдәргә
Беҙҙән сәләм әйтегеҙ.

Боронғо Сафа түбәһенә,
Хөрмәтле Мәрүә убаһына,
Изге Ҡәғбә диуарына
Беҙҙән сәләм әйтегеҙ.

Шәфиғыбыҙ рәсүлгә,
Барса сәхәбәләргә,
Рәсүлебеҙ йортона
Беҙҙән сәләм әйтегеҙ.

Өмөт тулы йөҙҙәргә,
Йәштәр тулы күҙҙәргә,
Нур тулы ҡалаларға
Беҙҙән сәләм әйтегеҙ.

Иман юлдаштарына,
Тоғро ҡорҙаштарыма,
Хаҡ юлдан атлаусыға
Беҙҙән сәләм әйтегеҙ...

Гөлсәриә Әхмәтйәнова



# МӘККӘ ҺӘМ МӘҘИНӘЛӘГЕ ИҪТӘЛЕКЛЕ УРЫНДАР

## МӘККӘЛӘ БУЛЫУ УРЫНДАРЫ



- Хира мәмерйәһе: Ул Мәккәнең янындағы Нур тауында урынлашҡан. Ошонда Аллаһ Рәсүленә «Уҡы!», тигән беренсе аят төшөрөлә.

- Сәүер мәмерйәһе: Аллаһ Рәсүленең Мәккәнән Мәҙинәгә күскән ваҡыттағы өс көн йәшеренеп ятҡан урыны.



Мәккә мөшриктәре, Аллаһ Рә-сүле һәм уның юлдашы Әбү Бәкр (разыйаллаһу ғәнһү) эҙҙәре буйлап, Сәүер мәмерйәһенең эргәһенә киләләр. Мәмерйә эргәһендәге ағасҡа ҡоролған күгәрсен ояһы һәм ишектәге үрмәксе үргән ауҙы күреп, мөшриктәр мәмерйә эсенә инеп тормай, кире боролалар.

## МӘҘИНӘЛӘ БУЛЫУ УРЫНДАРЫ

Мәҙинә - Аллаһ Рәсүле күсеп килгән һәм шунда вафат булған изге ҡала. Аллаһ Илсеһе йәшәүенә лайыҡ булған был ҡала Әл-Мәҙинәтүл-Мүнәүүәрә исемен ала.

Мәккә мөшриктәре Аллаһ Рәсүлен үлтерергә мәкер ҡорғанда, Мәҙинә халҡы Уны шатланып: “Баш өҫтөбөҙҙә тулған ай тыуҙы!” - тип, йырлап ҡаршылайҙар. Ҡала халҡы Пәйғәмбәребеҙ һәм уның дуҫтары өсөн ишектәрен һәм йөрәктәрен киң аса. Улар Мәккә мосолмандары һәм Аллаһ Рәсүленә ярҙам итеүҙе үҙҙәре өсөн ҙур хөрмәт, тип һанайҙар. Байлыҡтары менән бүлешергә, хатта йәндәрен дә йәлләмәйәсәктәре хаҡында әҙерлектәрен белдерәләр. Шуның өсөн дә Мәҙинә “Һижрә ере”, ә Аллаһ Илсеһенә ярҙам иткәндәр “ансарҙар” тип йөрөтөлә.

**Һөйөклө Пәйғәмбәребеҙ әйткән:**

> “Кем миңә йөрәгендә зыярат итеүҙән башҡа уйы булмайынса килһә, Ҡиәмәт көнөндә минең шәфәғәтемә лайыҡ булыр”.
>
> (Тәбарани, Әүсат, V/275, 4542)

Мәҙинәгә китеп барғанда, күп итеп салауаттар әйтәбеҙ. Йәшел Көмбәҙ күренһә, салауат әйтеүҙе тағы ла арттырабыҙ. Йөрәктәребеҙҙәге һағыш, күҙҙәребеҙҙәге йәш менән, уға булған юҡһыныуҙы, бар булмышыбыҙ менән һиҙергә тырышабыҙ. Ансарҙарҙың берҙәмлеге һәм уларҙың Аллаһ юлында ғүмерҙәрен йәлләмәүҙәре хаҡында уйланыуҙар менән Мәҙинә урамдарында йөрөйбөҙ.

## МӘККӘЛӘ БУЛЫУ УРЫНДАРЫ

Хира мәмерйәһе: Ул Мәккәнең янындағы Нур тауында урынлашҡан. Ошонда Аллаһ Рәсүленә «Уҡы!», тигән беренсе аят төшөрөлә.

Сәүер мәмерйәһе: Аллаһ Рәсүленең Мәккәнән Мәҙинәгә күскән ваҡыттағы өс көн йәшеренеп ятҡан урыны.

Мәккә мөшриктәре, Аллаһ Рә-сүле һәм уның юлдашы Әбү Бәкр (разыйаллаһу ғәнһү) эҙҙәре буйлап, Сәүер мәмерйәһенең эргәһенә киләләр. Мәмерйә эргәһендәге ағаста ҡоролған күгәрсен ояһы һәм ишектәге үрмәксе үргән ауҙы күреп, мөшриктәр мәмерйә эсенә инеп тормай, кире боролалар.

## МӘҘИНӘЛӘ БУЛЫУ УРЫНДАРЫ

Мәҙинә - Аллаһ Рәсүле күсеп килгән һәм шунда вафат булған изге ҡала. Аллаһ Илсеһе йәшәүенә лайыҡ булған был ҡала Әл-Мәҙинәтүл-Мүнәүүәрә исемен ала.

Мәккә мөшриктәре Аллаһ Рәсүлен үлтерергә мәкер ҡорғанда, Мәҙинә халҡы Уны шатланып: “Баш өҫтөбөҙҙә тулған ай тыуҙы!” - тип, йырлап ҡаршылайҙар. Ҡала халҡы Пәйғәмбәребеҙ һәм уның дуҫтары өсөн ишектәрен һәм йөрәктәрен киң аса. Улар Мәккә мосолмандары һәм Аллаһ Рәсүленә ярҙам итеүҙе үҙҙәре өсөн ҙур хөрмәт, тип һанайҙар. Байлыҡтары менән бүлешергә, хатта йәндәрен дә йәлләмәйәсәктәре хаҡында әҙерлектәрен белдерәләр. Шуның өсөн дә Мәҙинә “Һижрә ере”, ә Аллаһ Илсеһенә ярҙам иткәндәр “ансарҙар” тип йөрөтөлә.

Мәсджидун-Нәбәуи: Аллаһ Рәсүле Мәҙинәгә килеү менән төҙөлгән иң беренсе мәсет. Мәсетте төҙөгәндә, Пәйғәмбәребеҙ үҙе лә ҡатнаша, яурындарында таш ташып, төҙөлөштә ярҙам итә.

Аллаһ Рәсүле ошо мәсеттә ун йыл сәхәбәләре менән уҡыған намаҙҙарға етәкселек итә. Был мәсеттә сәхәбәләр, Аллаһ Илсеһе менән әңгәмәләшеп, рухи үсеш алалар һәм ахыры заманға тиклем кешелеккә юл күрһәтеүсе йондоҙ булып ҡалалар.

Рауҙа–Мотаһһара: Аллаһ Рәсүленең ҡәбере был ерҙә. Уның өҫтөндә Йәшел Көмбәҙ олғашҡан. Пәйғәмбәребеҙҙең ҡәбере эргәһендә Әбү Бәкер һәм Ғүмәрҙең дә ҡәбере бар.



**Һөйөклө Пәйғәмбәребеҙ әйткән:**

“Харам мәсетенән башҡа,
минең мәсетемдә ҡылынасаҡ бер намаҙ
башҡа мәсеттәрҙә ҡылынасаҡ
мең намаҙҙан күпкә хәйерле”.

(Мөслим, Хаж, 94)



**Һөйөклө Пәйғәмбәребеҙ әйткән:**

“Үлемемдән һуң мине зыярат итеүсе, мине тере сағымда зыярат итеүсе кеүек”.

(Бәйхаки, Шуәбуль-иман, VI, 48)



Аллаһ Рәсүленең ҡәберен зыярат ҡылғанда, үзенде уның янына тере ваҡытта барған кеүек тотор кәрәк. Мәсжидүн-Нәбәүи мәсетенә өнһөз һәм зур хөрмәт, ихтирам менән инәбез. Рауза-Мотаһарға яҡынлашҡанда, Аллаһ Рәсүленә сәләм бирәбез һәм салауаттар әйтәбез. Әбү Бәкер һәм Ғүмәргә сәләм биреп, зыярат ҡылыуҙы тамамлайбыҙ.

- Баҡый ҡәберстаны - ул Мәсжидүн-Нәбәүи мәсетенән көнсығышта урынлашҡан. Бында Аллаһ Рәсүлен күргән, аралашҡан, әңгәмәләшкән, хөтбәләрен тыңлау бәхете тейгән һәм Ислам дине өсөн бар булмышын ҡорбан иткән меңәрләгән сәхәбә ерләнгән. Был зыяратта Рәсүлебеҙҙең ҡатындарының һәм ҡыҙҙарының, уның нәҫеленән булған Исламдың бөйөк кешеләренең дә ҡәберҙәре бар. Аллаһ Рәсүле, Баҡый ҡәберстанына килеп, мәрхүм мосолмандар рухына йыш ҡына доға ҡылған.

**Мәҙинәләге иҫтәлекле урындар:**



**Ҡуба мәсете** - Мәккәнән Мәҙинәгә күскән ваҡытта Аллаһ Рәсүле тарафынан төҙөлгән мәсет.



**Өхөд зыяраты** - Өхөт алышы шәһиттәре һәм Аллаһ Рәсүленең сәхәбәләре ерләнгән урын.



**Ете мәсет** - Мосолмандар Хәндәк яуында төркөм-төркөм намаҙ уҡығандар, шул ерҙәрҙә төҙөлгән мәсеттәр. Бынан тыш улар ҡарауыл башнялары хеҙмәтен дә үтәгәндәр.



**Ҡыбләтәйн мәсете** - Кибланың йүнәлешен Аҡса мәсетенән Ҡәғбәтуллаһ тарафына үҙгәртеү урыны.

# ХАЖДЫҢ ФАРЫЗДАРЫ

Хаж ғәмәлен үтәү өсөн → Ихрам, Ғәрәфәлә тороу, Ҡәғбәне тауаф ҡылыу → Фарыз

## ХАЖ ҠЫЛЫУ ӨСӨН ЙӨКЛӘМӘЛӘР

Хаж ҡылыу өсөн ТӨП ЙӨКЛӘМӘЛӘР бар. Улар ихрам, тауаф, вәҡфә, шайтанға таш менән бәреү, ҡорбан һәм сәс алдырыу.

Ихрамға ингәс, ихрамдың тыйыуҙарына иғтибарлы булыу кәрәк.

Кәфен кейеп, үлемгә һәр саҡ әҙерлегебеҙҙе күҙ алдына килтерәбеҙ.

Барыбыҙ ҙа бер иш ихрам кейемен кейгәс, Аллаһ алдында тигеҙбеҙ.

### 1. Ихрам

✍ **Ихрам** – хаж ниәте менән аҡ кейем кейеү. Ул энә менән тегелмәгән булырға тейеш. Көндәлек кейеп йөрөгән кейем урынына ихрам кейеме кейелә. Ихрамға ингәндә, ирҙәр кәүҙәләрен йәймә ҙурлығындағы ике ҡалыныраҡ аҡ туҡыма менән урайҙар. Был кейем ихрам тип атала ла инде.

Ҡатын–ҡыҙҙарға ихрамға инеү өсөн махсус кейем юҡ. Улар, Ислам дине ҡанундарына ҡаршы килмәгән, теләгән кейемдә кейә ала.



✍ Мәккә тирәләй “миҡат” тип аталған сиктәр бар. Мәккәгә табан йүнәлгән хажиҙар ошонда ихрамға инәләр.

Бөйөк Аллаһ хәләл менән харамдың сиктәрен билдәләгән кеүек, ихрамға инеү сиктәрен дә беҙгә күрһәткән.

Ул сиктәргә ни ҡәҙәр иғтибарлы булһаҡ, хәләл менән харамдың сиктәрен дә шул ҡәҙәр тоторға тейешбеҙ.

✍ Аллаһ Рәсүле тарафынан билдәләнгән миҡат сиктәре түбәндәгеләр:

Ҙүл-Хуләйфә, Джухфә, Ҙату Ғираҡ, Ҡарнүл-Мәнәзил һәм Йәләмләм. Хаж йәки ғөмрә ҡылыусылар ошо сиктәрҙе ихрамда үтергә тейештәр.

**Ихрамда булыусыларға тыйылған эштәр:**



Тырнаҡ ҡырҡыу,
☹



сәсте алыу һәм ҡыҫҡартыу,
☹



еҫле май һәм хушбуй ҡулланыу,
☹



Мәккә һәм уның тирәһендәге үҫемлектәрҙе өҙөү,
☹



энә менән тегелгән кейем кейеү тыйыла.
☹

Әгәр, ихрамда саҡта яңылышып, ошо тыйылғандарҙың береһен генә эшләһәк, мохтаждарға хәйер таратырға йәки ҡорбан салырға кәрәк.

Планеталар Ҡояш, электрондар йәҙрә тирәләй әйләнгән кеүек, фәрештәләр ҙә Аллаһтың әмерен үтәп, Ғәрш тирәләй әйләнә.

Беҙ ҙә Кәғбәне урағанда, Аллаһты зикерләйбеҙ.



**2. Тауаф**

✍ Кәғбәне ете тапҡыр урап сығыу «тауаф» тип атала.

✍ Кәғбәне бер тапҡыр урау «шаут» тип атала.





**3. Сәғи**

✍ Хаж йәки ғөмрә мәлендә Сафа һәм Мәрүә түбәләре араһында ете мәртәбә йөрөү. Сафанан Мәрүәгә дүрт, Мәрүәнән Сафаға өс тапҡыр үтелә был аралыҡ. Сәғи Сафанан башлана, Мәрүәлә тамамлана.



Ибраһим пәйғәмбәрҙең ҡатыны Һәжәр, ҙур ныҡышмалылыҡ һәм сыҙамлылыҡ менән, Сафа менән Мәрүә түбәләре араһында йүгереп йөрөп һыу эҙләй. Һәм улы Исмәғилдең аяҡ табандары аҫтында Зәмзәм һыуын таба. Аллаһтың ризалығына ирешер өсөн, беҙ ҙә, бар тырышлығыбыҙҙы һалырға, һәм әжерен тик Унан ғына көтөргә тейешбеҙ.



**4. Вәҡфә**

✍ Өйләнән ҡояш байығанға тиклем Ғәрәфә далаһы сиктәрендә тороу. Ул хаждың фарызы һанала.



Хисап көнөндә, барыһы ла ҡәберҙәренән тороп, Мәхшәр майҙанына йыйыла. Ғәрәфәлә баҫып тороу- ошо буласаҡ көн хаҡында иҫләтә. Аллаһ алдында тороп, ысын йөрәктән беҙҙең гонаһтарыбыҙҙы ярлыҡауын һорайбыҙ.



✍ Ғәрәфә далаһында торғандан һуң, хажиҙар Мөҙдәлифәгә йүнәләләр һәм шунда төндө уҙғаралар. Ошонда шайтанға бәреләсәк ваҡ таштарҙы йыялар. Иртәнге намаҙҙан һуң, доға ҡылына. Мөҙдәлифәлә үткәрелгән ошо ваҡыт “Мөҙдәлифә ваҡфәһе” тип атала.



Күҙ йәштәре һәм ихлас тәүбәләр менән таҙарынған йөрәк Аллаһты һоҡланыу һәм яратыу менән иҫләй. Ошо хистәр менән, беҙҙе Аллаһ юлынан ситләтергә тырышҡан шайтанға бәрер өсөн, Мөҙдәлифәлә таштар йыябыҙ. Аллаһты һәр саҡ хәтерҙә тотоп, Унын ҡушҡандары буйынса ғына йәшәргә тигән ниәтебеҙҙе тағы ла тәрәнерәк ныҒытабыҙ.



210

**5. Шайтанға таш бәреү**

Хажиҙар Ҡорбан байрамы көндәрендә өлкән, уртаса һәм бәләкәй шайтандарға таш бәрәләр.



Беҙҙең иң ҙур дошманыбыҙ булған шайтанға таш бәреп, уға һуғыш иғлан итәбеҙ. Артабан унан алыҫ торорға һәм уның ҡотҡоһона бирелмәҫкә үҙебеҙгә һүҙ бирәбеҙ.



**6. Хаж ҡорбаны**

Байрам көндәрендә, ихрамдан сығыр алдынан, шөкөр ҡорбаны салыу хажиҙарға вәжиб һанала.



Ибраһим пәйғәмбәр Минала улын ҡорбан итергә тейешлеге хаҡында Аллаһ әмерен ала. Улар икеһе лә Аллаһтың әмеренә һүҙһеҙ буйһона. Аллаһу Тәғәлә уларҙан кәнәғәт була һәм Исмәғил урынына һарыҡты ҡорбан итергә бойора.
Беҙ ҙә, Аллаһтың әмеренә буйһоноп, хаж ғәмәлен үтәйбеҙ. Беҙгә тормош биргән, төрлө ниғмәттәр менән бүләкләгән Аллаһҡа үҙебеҙҙең рәхмәтебеҙҙе белдереп, ҡорбан салабыҙ.



**7. Сәс алдырыу һәм ихрамдан сығыу**

Ихрамдан сығыу өсөн, сәсте алдырырға кәрәк. Ир-егеттәр сәсен ҡыҫҡарта йәки бөтөнләй ҡыра. Ә ҡатын-ҡыҙҙар сәс остарын ғына ҡыҫҡарталар.

Сәс алдырғандан һуң, ихрамға бәйле ҡайһы бер тыйыуҙар алына. Мәҫәлән, хушбуй һәм еҫле майҙар һөртөү рөхсәт ителә.

Ихрамға ингәндән алып башланған рухи һабаҡ тамамланды. Хаж мәлендә алған гүзәл ҡылыҡ һәм күнекмәләрҙе ғүмеребеҙҙең ахырына тиклем һаҡлайһы ғына ҡала.





211

# ХАЖ ҒӘМӘЛЕ НИСЕК ҠЫЛЫНА?

Хаж өс төргә бүленә. Ә хәҙер барыһынан да йышыраҡ ҡылынған Тәмәттуғ хажы тураһында һөйләшәйек. Тәмәттуғ хажында башта ғөмрә ҡылына, шунан хаж ғәмәле үтәлә.

1



- Миҡатта, ғөмрәне үтәр өсөн, ихрамға инәбеҙ.
- Ихрамға инер алдынан сәстәр ҡыҫҡартыла, тырнаҡтар ҡырҡыла, ғөсөл йә тәһәрәт алына.
- Ғөмрә ҡылыр өсөн ниәтләнәбеҙ.Тәлбиә әйтеп, доға уҡыйбыҙ.

2



- Мәккәлә Ҡәғбәне тауаф ҡылабыҙ.
- Тауафтан һуң, ике рәкәғәт намаҙ уҡыйбыҙ.



**ТӘЛБИӘ**

لَبَّيْكَ اَللَّهُمَّ لَبَّيْكَ لَبَّيْكَ لاَ شَرِيكَ لَكَ لَبَّيْكَ اِنَّ الْحَمْدَ وَالنِّعْمَةَ لَكَ وَالْمُلْكَ لاَ شَرِيكَ لَكَ

“Ләббәйк. Аллааһумма Ләббәйк. Ләббәйкә ләә шәриикә ләкә ләббәйк.
Иннәл-хәмдә үән-ниғмәтә ләкә үәл-мүлк. Ләә шәриикә ләк”.

“Бойор, Аллаһым, бойор! Әмереңә әҙермен. Бойор, һинең һис бер тиңдәшең юҡ. Бойор, Аллаһым, бойор! Һис шикһеҙ, бөтә маҡтауҙар бары тик һиңә. Бөтә ниғмәттәр һәм хакимлыҡ та һинеке. Һинең һис бер тиңдәшең юҡ!”

3



- Сафа менән Мәрүә араһында сәғи ҡылабыҙ.

4

- Сәсте ҡыҫҡартып йәки бөтөнләй ҡырып, ихрамдан сығабыҙ һәм көндәлек кейемебеҙҙе кейәбеҙ.
- Ғәрәфә көнөнә тиклем намаҙҙар уҡыйбыҙ, тауаф һәм башҡа ғибәҙәттәр ҡылабыҙ.

5

- Ғәрәфәгә китер алдынан, хаж ғәмәлен үтәр өсөн, ихрамға инәбеҙ.

6



- Ғәрәфә көнө Ғәрәфә далаһында вәкфә үтәйбеҙ.

7



- Ғәрәфәлә торғандан һуң, ҡояш байығас, Мөҙҙәлифәгә барып, шунда төндө уҙғарабыҙ.
- Шайтанға бәреләсәк таштарҙы Мөҙҙәлифәлә йыябыҙ.
- Ҡорбан байрамының тәүге көнөндә, таң атмаҫ элек, Мөҙҙәлифәлә вәкфә ҡылабыҙ һәм Минаға йүнәләбеҙ.

8



- Минала шайтанға таш ташлайбыҙ.

9



- Минала Ҡорбан салабыҙ.

10



- Сәс алдырабыҙ һәм ихрамдан сығабыҙ.
- Көндәлек кейемдәрҙе кейәбеҙ.

11



- Ҡәғбәгә барып, фарыз булып һаналған зыярат-тауаф ҡылабыҙ.

12

- Сафа һәм Мәрүә араһында сәғи ҡылабыҙ.

13

- Байрамдың икенсе, өсөнсө һәм дүртенсе көндәрендә лә шайтанға таш бәрәбеҙ.

- Мәккәнән китер алдынан хушлашыу тауафын үтәйбеҙ.

# ҒӨМРӘ

Ғөмрә – Тауаф менән сәғи ҡылыу, унан һуң сәс алдырып ихрамдан сығыу.

Ғөмрәне “бәләкәй хаж” тип тә атайҙар. Сөнки хаждың күп өлөштәре ғөмрә барышында үтәлә.

Кемдең ғөмрә ҡылырға хәленән килә, ғүмерендә бер тапҡыр булһа ла был ғәмәлде үтәү сөннәт һанала.

Ғөмрә өсөн айырым билдәләнгән ваҡыт юҡ. Йылдың теләгән бер мәлендә ҡылырға мөмкин. Тик Хаж ваҡытында, зөлхизә айының 9-нан алып 13-нә тиклем, Ғәрәфә көндәрендә һәм Ҡорбан байрамында аҡтарыу мәкруһ һанала.

## ҒӨМРӘ НИСЕК ҠЫЛЫНА?

- Миҡатта, ғөмрә ҡылыу ниәте менән, ихрамға инәбеҙ.
- Ҡәғбәтуллаһты тауаф ҡылабыҙ.
- Тауафтан һуң ике рәкәғәт намаҙ уҡыйбыҙ.
- Сафа менән Мәрүә араһында сәғи ҡылабыҙ.
- Сәғи ҡылғандан һуң, сәстәрҙе алдырып, ихрамдан сығабыҙ.

Ошоноң менән ғөмрә тамамлана.

Аллаһу Тәғәлә бойора:

“Хажды һәм ғөмрәне Аллаһ риза булырлыҡ итеп үтәгеҙ!”

(Баҡара сүрәһе, 196-сы аят)

Һөйөклө Пәйғәмбәребеҙ әйткән:

“Ғөмрә - икенсе ғөмрәгә тиклем ҡылынасаҡ гонаһтарға кәффарәт”.

(Бохари, Ғөмрә, 1)

Һөйөклө Пәйғәмбәребеҙ әйткән:

“Рамаҙан айында үтәлгән ғөмрәнең сауабы - хаж сауабына тиң”.

(Ибн Мәджә, Мәнәсик, 45)







# ХАЖДАН НИНДӘЙ БҮЛӘКТӘР АЛЫП ҠАЙТТЫҒЫҘ?

Осрашыу мәлендә Пакистандағы остаздары Мөхәммәт Икбәл Мәҙинәнән ҡайтҡан хажиҙарына күңел торошон сағылдырған һәм уны асыҡлаған түбәндәге һорауҙарҙы бирә:

- Һеҙ Мәккә Мөкәррәмәлә һәм Мәҙинә Мөнәүәрәлә булдығыҙ! Мәҙинәнең рухи баҙарынан нимәләр алып ҡайттығыҙ? Йөрәктәрегеҙҙе ниндәй байлыҡтар менән байыттығыҙ? Һеҙ алып ҡайтҡан түбәтәй, тәсбих, намаҙлыҡтар кеүек матди бүләктәр, ваҡыт үтеү менән иҫкерерҙәр һәм туҙырҙар. Мәҙинәнән рухығыҙға йәшәү биргән, бер ҡасан да иҫкермәй торған бүләктәр алып ҡайттығыҙмы? Алып ҡайтҡан бүләктәрегеҙ араһында Әбү Бәкерҙең (разыйаллаһу ғәнһү) хаҡлығы һәм тоғролоғо, Ғүмәрҙең (разыйаллаһу ғәнһү) ғәҙеллеге, Усмандың (разыйаллаһу ғәнһү) әҙәплелеге һәм йомартлығы, Ғәлиҙең (разыйаллаһу ғәнһү) Аллаһ юлында көрәшкә һәр саҡ әҙерлеге һәм ҡыйыулығы бармы? Бөгөнгө көндә күп бәлә һәм проблемаларҙан ыҙа сиккән Ислам донъяһын рухи байлығығыҙ менән илһамландыра алаһығыҙмы?

# Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмдең) хажы

## Хушлашыу Хажы (һижри 10-сы йылдың зөлхизә айы, миләди 632 йылдың март айы)

Аллаһ Рәсүле (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) үҙ ғүмерендә бер тапҡыр хаж ҡыла һәм үҙенең сәхәбәләренә уның үтәлешен ғәмәлдә күрһәтә.

Һижрәнең 10-сы йылында ҡылынған был хажда, төрлө ерҙәрҙә (Ғәрәфә, Мөздәлифә, Минала) халыҡҡа вәғәз менән мөрәжәғәт итә. Уның һөйләгән телмәрҙәре кешелек тарихы өсөн ҙур ҡиммәткә эйә. Төп тема булып кешенең хоҡуҡтары тора. Ул хоҡуҡтарҙа бар кешелек өсөн Исламдың дөйөм ҡанундарын ҡалдыра.

Үҙенең телмәрендә былай тип өндәшә: «Эй, кешеләр! Минең һүҙҙәремде иғтибар менән тыңлағыҙ! Белмәйем, бәлки, был урында башҡаса осраша алмаçбыҙ!» - тигән һүҙҙәре менән сәхәбәләре менән бәхилләшә. Шуның өсөн дә Аллаһ Илсеһенең (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) был хажын «хушлашыу хажы (вәда хажы)», ә унда һөйләгән телмәрен «хушлашыу хөтбәһе (вәда хөтбәһе)», тип атайҙар.

Һөйөклө Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) хушлашыу хажын түбәндәгесә ҡыла:

Һижрәнең 10-сы йылы зөлхизә айында хажға әҙерләнә башлай. Мосолмандарға ла хажға әҙерләнергә иғлан итә. Был саҡырыуға яуап итеп, Ғәрәп ярым утрауының һәр яғынан, төркөм-төркөм мосолмандар, Аллаһ Рәсүле (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) менән бергә хаж ҡылырға Мәҙинәгә ағылалар.

Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) һәм уның сәхәбәләре миҡат сиктәренә еткәс, ике рәкәғәт намаҙ уҡып, ихрамға инәләр, тәлбиә һүҙҙәрен әйтәләр. Беҙҙең һөйөклө Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) «ләббәйкә» һүҙҙәре менән, Аллаһтың әмерен үтәр өсөн, хаж ҡылырға килеүен хәбәр итә. Уның «ләббәйк» һүҙенә тирә-яҡтағы мосолмандар «ләббәйк» менән ҡушылалар.

Йөҙәр меңгә еткән ошо кешеләр ағымы, юлда өҫтәлә-өҫтәлә, ун көндән Мәккәгә килеп етә. Был зөлхизә айының дүртенсе көнөндә була. Аллаһ Рәсүле (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) меңәрләгән халыҡ төркөмөнөң уртаһында килә. «Аллаһу Әкбәр!» тигән шатлыҡлы ауаздан күк йөҙө яңғырап тора. Ул, Мәккәгә килеү менән, Ҡәғбәтуллаһты урап сыға. Тауафтан һуң, Ибраһим мәҡамында ике рәкәғәт намаҙ уҡый. Унан һуң Сафа менән Мәрүә түбәләре араһында сәғи ҡыла.

> Әй инсандар! Был көндәрегеҙ нисек мөҡәддәс булһа, был айҙарығыҙ нисек мөҡәддәс булһа, был ерҙәр нисек мөҡәддәс булһа, Раббығыҙға кире ҡайтыуығыҙға тиклем һеҙҙең йәндәрегеҙ һәм милкегеҙ шулай уҡ мөҡәддәстер һәм бер-берегеҙгә харамдыр.
>
> Хушлашыу хөтбәһенән

> Әй инсандар! Ҡатындарҙың хоҡуҡтарын һаҡлауҙа һаҡ булығыҙ һәм Аллаһтан ҡурҡығыҙ! Ҡатындар - һеҙгә Аллаһтың аманатылыр. Һеҙҙең ҡатындар өҫтөндә хаҡығыҙ булған кеүек, уларҙың да һеҙҙең өҫтөгөҙҙә хаҡтары бар.
>
> Хушлашыу хөтбәһенән

Бер-нисә көн Мәккәлә булып, зөлхизә айының һигеҙенсе көнөндә Минаға юллана.

Иртәгәһенә, Ғәрәфә көнө, ҡояш сығыу менән Минанан Ғәрәфәгә ҡуҙғала. Төш мәлендә үҙенең сатырынан сығып, Ҡасуа исемле дөйәһенә ултыра ла Ғәрәфә далаһының уртаһына күсә. Бында Ул бөтә кешелек донъяһына телмәр менән мөрәжәғәт итә. Һөйөклө Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) сығышын тыңлаусы кешеләр һаны яҡынса 124 мең тирәһенә етә. Был хөтбәһендә Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) мосолмандарға ғына түгел, бөтә кешелек донъяһына өндәшә. Кешелек донъяһының үҫеш юлына ҡағылған күп кенә мәсьәләләрҙе ҡуҙғата,

Ислам ҡанундарын урынлаштыра. Ғәрәфәлә өйлә һәм икенде намаҙҙарын берләштереп өйлә мәлендә уҡый.

Пәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) Ғәрәфәнән Мөздәлифәгә йүнәлгәндә, ҡояш әле сыҡмаған була.Мөздәлифәлә аҡшам менән йәстү намаҙҙарын берләштереп, йәстү мәлендә уҡый. Был төндө Ул Мөздәлифәлә үткәрә. Ҡорбан байрамының беренсе көнөндә, иртәнге намаҙҙан һуң, таң атмаҫ элек Минаға юл ала. Минала шайтанды көүҙәләндергән бағаналарға таш бәрә. Ҡорбан сала. Сәсен ҡырып, ихрам хәленән сыға. Артабан, Мәккәгә барып, хаждың фарыздарының береһе булған зыярат - тауафын ҡыла.

Ҡорбан байрамының ҡалған көндәрендә Аллаһ Рәсүле (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) Минала була, шайтанды көүҙәләндергән бағаналарға таш бәрә.Ҡорбан байрамының дүртенсе көнөндә,

> Әй инсандар! Раббығыҙ бер һәм атағыҙ бер! Бөтәгеҙ ҙә Әҙәмдәнһегеҙ. Әҙәм дә тупраҡтан. Аллаһ ҡаршыһында иң хәйерле һәм ҡиммәтле булғанығыҙ - Уның әмерҙәренә ҡаршы килеүҙән иң ныҡ ҡурҡҡанығыҙҙыр. Яҡшы аңлағыҙ: ғәрәптең ғәрәп булмағандан, ғәрәп булмағандың ғәрәптән, аҡ тәнленең ҡара тәнленән, ҡара тәнленең аҡ тәнленән һис өҫтөнлөгө юҡ. Өҫтөнлөк бары тик тәҡүәлектә. Мин вазифамды үтәнемме? Шаһит бул, Аллаһым!
>
> Хушлашыу хөтбәһенән

хушлашыу тауафын ҡылып, Мәккәнән Мәҙинәгә ҡайта.

Шулай итеп, Аллаһ Рәсүле (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) үҙе лә хаж ҡыла һәм мосолмандарға ла хаж ғәмәлен үтәү юлдарын өйрәтә.





Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмдең) эҙҙәре һәм аяҡ кейеме

# ЭҘЛӘП-ЭҘЛӘП ТАПҺАМ ЭҘЕҢДЕ

Эҙләп-эҙләп тапһам эҙеңде,
Эҙеңдең туҙанына һөртһәм йөҙөмдө,
Хаҡ насип әйләһә - күрһәм йөҙөңдө,
Йә Мөхәммәд, күңелем теләй һине.
Бер мөбәрәк сәфәргә булһа ла китһәм,
Ҡәғбә юлдарында ҡомдарға батһам,
Һөйөклө йөҙөңдө бер тапҡыр төшөмдә күрһәм,
Йә Мөхәммәд, күңелем теләй һине.
Бөртөк тә ҡалманы күңелемдә хәйлә,
Дөрөҫлөк менән керҙем был Хаҡ юлға,
Әбү Бәкер, Ғүмәр һәм Ғосман булһалар ҙа,
Йә Мөхәммәд, күңелем теләй һине.
Ғәли, Хәсән һәм Хөсәйен унда,
Һөйөү күңелдә, мөхәббәт йәндә,
Иртәгә мәхшәр көнө - Хаҡ ҡаршыһында,
Йә Мөхәммәд, күңелем теләй һине.
Ғәрәфә тауы беҙҙең тауыбыҙ,
Унда ҡабул була беҙҙең доғабыҙ,
Мәҙинәлә ята Пәйғәмбәребеҙ,
Йә Мөхәммәд, күңелем теләй һине.
Юныс данлар һине телдәрҙә,
Телдәр ҙә бөтәһе күңелдәрҙә,
Эҙләп-эҙләп һине сит илдәрҙә,
Йә Мөхәммәд, күңелем теләй һине.

Юныс ЭМРЕ

# ҺОРАУҘАР

## Белемебеҙҙе тикшерәбеҙ

Дөрөҫ яуаптарҙы билдәләгеҙ.

1. Хаж - йылдың айырым бер көндәрендә, ихрам хәлендә, Ҡәғбә һәм изге урындарға ғибәҙәт ҡылыу ниәте менән барыу. ☐ дөрөҫ ☐ хата
2. Ҙур майҙанда Ҡәғбәне уратып төҙөлгән мәсетте “Харам мәсет” тип әйтәләр. Уны икенсе төрлө “Харам Шәриф” тә тип атайҙар. ☐ дөрөҫ ☐ хата
3. Ҡәғбәтуллаһты ете тапҡыр урап сығыу “сәғи” тип атала. ☐ дөрөҫ ☐ хата
4. Ҡәғбәне бер тапҡыр урау “тауаф” тип атала. ☐ дөрөҫ ☐ хата
5. Ихрам, ижтимағи һәм матди хәлдәргә ҡарамаҫтан, Аллаһ алдында барыбыҙ ҙа бер тигеҙ икәнлекте һынландыра. ☐ дөрөҫ ☐ хата
6. Ғәрәфәлә баҫып тороу Хисап көнө, барыһы ла ҡәберҙәренән тороп, Мәхшәр майҙанында йыйыласаҡ көн хаҡында хәтергә төшөрә. ☐ дөрөҫ ☐ хата
7. Миҡат - ихрамһыҙ үтергә ярамаған сиктәр ул. ☐ дөрөҫ ☐ хата
8. Мәсджидүн-Нәбәүи Мәҙинә ҡалаһында урынлашҡан. ☐ дөрөҫ ☐ хата



## Үҙебеҙҙе тикшерәбеҙ

**1. Аллаһу Тәғәләгә ғибәҙәт ҡылыр өсөн ер йөҙөндә төҙөлгән беренсе ғибәҙәтхана?**

а) Мәсджидүн-Нәбәүи

б) Аҡса мәсете

в) Ҡәғбә

г) Ҡуба мәсете

**2. Хаждың фарыздарына нимә инә?**

а) Ҡәғбә тирәләй тауаф ҡылыу

б) Мөздәлифәлә вәҡфә ҡылыу

в) Шайтанға таш бәреү

г) Аллаһ Рәсүленең ҡәберен зыярат итеү

**3. Ихрамда нимә тыйылмай?**

а) Еҫле май, хушбуй ҡулланыу

б) Сәс алдырыу

в) Йоҡлау

г) Тырнаҡ ҡырҡыу

**4. Ниндәй ғөмрә хаж әжеренә тиң?**

а) Ҡорбан байрамындағы

б) Рамаҙан айындағы

в) Мөхәррәм айындағы

г) Йылдың эҫе мәлендәге

**5. Ҡәғбәне ете тапҡыр урау нимә тип атала?**

а) Вәҡфә б) Ихрам
в) Сәғи г) Тауаф

**6. Хаждың фарыздарына нимә инмәй?**

а) Ихрам
б) Ҡәғбәне тауаф ҡылыу
в) Мөздәлифәләге вәҡфә
г) Ғәрәфәттәге вәҡфә

**7. Аллаһ Рәсүленең хажы нисек атала?**

а) Фарыз хажы
б) Хушлашыу хажы
в) Оло (Әкбәр) хаж
г) Хушлашыу хөтбәһе

**8. Ҡәғбәне тауаф ҡылыуҙан, Сафа менән Мәрүә араһындағы сәғиҙән торған һәм хаж мәленән тыш үтәлгән ғибәҙәт нисек атала?**

а) Ғөмрә б) Хаж
в) Тауаф г) Ихрам

**9. Хаждың фарыз булыуына ниндәй шарт кәрәк түгел?**

а) Мосолман булыу
б) Бәлиғ һәм аҡыллы булыу
в) Ирекле булыу
г) 40 йәштән оло булыу

**10. Пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәд (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмдең) кәбере урынлашҡан ер нисек атала?**

а) Рауҙа-Мотаһһара
б) Ҡәғбә-Мүғәҙҙәмә
в) Аҡса мәсете
г) Хәджәрул-Әсүәд



## Төшөп ҡалған һүҙҙәрҙе тултырабыҙ

**( Зәмзәм / гонаһһыҙ / тере сағымда / ихрам / Ибраһим мәкамы / Ҡәғбә Мүғәҙҙәмә / Мина )**

1. Ибраһим пәйғәмбәр, Ҡәғбәне төҙөгән ваҡытта, юғарыға менеп-төшөп йөрөр өсөн ҡулланған һәм уға баҫып кешеләрҙе хаж ғәмәлен үтәргә саҡырған таш ............ тип атала.
2. Ибраһим улын Исмәғилде (ғәләйһиммәс-сәләм), Аллаһу Тәғәләгә ҡорбан итер өсөн алып килгән урын ............ тип атала.
3. Ҡәғбә эргәһендәге һәм Харам мәсете эсендәге изге шишмә ............ тип атала.
4. Хаж ҡылғанда кейә торған кейем ............ тип атала. Ул, ижтимағи һәм матди хәлдәренә ҡарамаҫтан, Аллаһ алдында барыбыҙ ҙа бер тигеҙ икәнлекте һынландыра.
5. Планеталар Ҡояш, ә электрондар йәҙрә тирәләй әйләнгән кеүек, мосолмандар ҙа, изге ҡоролма ............ тирәләй әйләнеп, Аллаһу Тәғәләгә ғибәҙәт ҡылалар.
6. Һөйөклө Пәйғәмбәребеҙ әйткән: “Үлемемдән һуң мине зыярат итеүсе, мине ............ зыярат итеүсе кеүек”.
7. Һөйөклө Пәйғәмбәребеҙ әйткән: “Насар һүҙҙәр һөйләмәйенсә һәм оло гонаһтар ҡылмайынса хаж үтәгән кеше, әсәһенән яңы тыуған һымаҡ, ............ булып өйөнә ҡайтыр”.





АЛЛАҺҠА БУЙҺОНОУСАНЛЫҠТЫҢ БИЛДӘҺЕ

# ҠОРБАН

- Нимә ул ҡорбан?
- Ҡорбан салыу безгә нимә бирә?
- Ҡорбан нисек салына?
- Нәҙер ҡорбаны
- Пәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) һәм ҡорбан





# ДУҪЛЫҠТЫ ҺЫНАУ

Ибраһим пәйғәмбәр (ғәләйһис-сәләм) бер саҡ төшөндә улы Исмәғилде ҡорбан итеүен күрә. Был төш уға бер нисә тапҡыр ингәс, Ибраһим пәйғәмбәр уны Аллаһтың теләге тип аңлай. Аллаһ Ибраһим пәйғәмбәргә ологайгас ҡына уны бүләк итә. Тимәк, хәҙер уны үҙенә ҡорбан итеп бирергә һорай. Исмәғил был ваҡытта инде матур егет булып үҫеп етә.

Ибраһим иңенә төшкән оло һынауҙы үтәү ниәте менән, улын алып, Мәккәнән Минаға юл тота. Барып еткәс, ул Исмәғилгә көн дә күргән төшөн һөйләй. Аллаһтың уларға оло һынау ебәргәнен аңлата.

- Улым, мин төшөмдә һине ҡорбан иткәнемде күрҙем. Ни әйтерһең һин быға?..

Атаһының һүҙҙәрен Исмәғил тыныс ҡабул итә. Аллаһ уға ғүмер биргән икән, тимәк, ҡасан кәрәк, шул саҡта кире ала уның ғүмерен. Аллаһҡа тулыһынса ышанып, ғүмерен уға тапшырырға әҙер икәнен әйтә ул атаһына.

- Атай, Аллаһ һиңә нимә ҡуша, шуны үтә. Аллаһ насип итеп, мин быны сабыр кисерермен.

Улының был һүҙҙәренә Ибраһим пәйғәмбәр бик ҡыуана. Тулҡынланыуҙан күҙҙәренә йәш тула. Улына булған һөйөүе күңелен биләй. Ошондай иманлы ул биргән өсөн Аллаһҡа рәхмәттәр уҡый.

Аллаһтың әмерен үтәргә ниәтләп, Ибраһим (ғәләйһис-сәләм) улын ергә һала һәм «Йә Аллаһым!.. Мин һинең бойороғоңдо үтәйем!..» - тип өндәшә. «Бисмилләһ» әйтеп, бысағын өҫкә күтәрә. Һәм шул саҡ Аллаһу Тәғәлә былай ти:

- Әй Ибраһим!.. Һин минең бойороғомдо үтәнең. Быың өсөн мин һинең улың урынына икенсе ҡорбанды һайланым. (Саффат сүрәһе, 102-107-се аяттар)



Ошо мәлдә Ябраил фәрештә, Аллаһ ҡушыуы буйынса, ожмахтан һарыҡ бәрәсен килтереп бирә. Оло ҡыуанысынан Ибраһим илап ебәрә һәм, улын ерҙән торғоҙа һалып, күкрәгенә ҡыҫа. Улын икенсе тапҡыр бүләк иткәне өсөн, Аллаһҡа рәхмәттәр уҡый. Шунан һуң Ябраил фәрештә килтергән һарыҡ бәрәсен ҡорбан итеп сала.

Бөйөк Аллаһ был хәл аша Ибраһим пәйғәмбәрҙең (ғәләйһис-сәләм) һәм уның ғаиләһенең Уға һәм бар фәрештәләргә тоғролоғон һынап ҡараған. Ибраһим һәм уның хөрмәтле улы Исмәғил (ғәләйһимәс-сәләм) Аллаһ ебәргән оло һынауҙы шикләнмәйенсә ҡабул итәләр һәм уны намыҫ менән үтәйҙәр.



# НИМӘ УЛ ҠОРБАН?

НИМӘ УЛ ҠОРБАН?

Ҡорбан байрамы көндәрендә ҡорбанға рөхсәт ителгән хайуанды салыу “ҡорбан” тип атала.

“Ҡорбан” салыу вәжиб һанала.

Ҡорбан салыу Ислам диненән алда ла йәшәп килә. Ибраһим пәйғәмбәр ҡорбан ителәсәк улы Исмәғил (ғәләйһиммәс-сәләм) урынына Аллаһ тарафынан ебәрелгән һарыҡты ҡорбан итә. Ошо мәлдән башлап, ер йөҙөндә булып киткән башҡа пәйғәмбәрҙәр ҙә был ғәмәлде үтәйҙәр. Улар уны үҙ халҡына өйрәтәләр һәм артабан да дауам итергә ҡушалар.

Аллаһ Рәсүле (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) был ғәмәлде беҙгә ҡасан һәм нисек үтәргә өйрәтте. Ҡорбан салыуыс уны бер ниндәй ҙә өҫтәлмә намаҙҙар, сәҙаҡалар һәм башҡа ғәмәлдәр менән алмаштыра алмай.

ҠОРБАН ҠАСАН САЛЫНА?

Ҡорбан салыу Ҡорбан байрамының 1-се, 2-се, йәки 3-сө көндәрендә атҡарыла. Байрамдың 3-сө көнө, ҡояш байығандан һуң, ҡорбан салынмаҫ.

**Аллаһу Тәғәлә бойора:**

“Раббың ризалығы өсөн намаҙ уҡы, ҡорбан сал!”

(Кәүҫәр сүрәһе, 2-се аят)

**Аллаһу Тәғәлә бойора:**

“Беҙ һәр өммәт өсөн ҡорбан салыуҙы тәртип иттек”.

(Хаж сүрәһе, 34-се аят)

**Һөйөклө Пәйғәмбәребеҙ әйткән:**

“Мөмкинлеге булып та ҡорбан салмаған кеше беҙҙең мәсеттәргә яҡын да килмәһен!”

(Ибн Мәджә, Әдахи, 2)





# ҠОРБАН САЛЫУ БЕҘГӘ НИМĞІӘ БИРӘ?

## ҠОРБАН

- Беҙҙе Аллаһҡа яҡынайта.
- Аллаһ ҡушҡандарҙы үтәүҙә тоғролоҡ һәм буйһоноусанлыҡты арттыра.
- Аллаһу Тәғәлә бирғән ниғмәттәрҙе башҡалар менән бүлешергә ғәҙәтләндерә.
- Бер-беребеҙгә терәк булыу, ярҙам итеү һәм һөйөү хистәрен нығыта.



Бөйөк Аллаһ үҙенең әмерҙәрен ихлас күңелдән үтәгәндәрҙе ярата. Ул Үҙенә ғибәҙәт ҡылғандар менән ҡәнәғәт була. Ҡорбан салып, беҙ Аллаһтың әмерен үтәйбеҙ. Ул беҙҙән риза була. Был ғибәҙәт **беҙҙе Аллаһҡа яҡынайта**, Уның алдында дәрәжәбеҙ күтәрелә.

Һөйөклө Пәйғәмбәребеҙ әйткән:

*“Әҙәм балаһының Ҡорбан байрамында Аллаһҡа яҡынайтҡан иң яҡшы ғибәҙәте - ҡорбан салыуы. Салынған ҡорбандың ҡаны ерғә тамып та өлгөрмәй, ә ҡорбан салыусының Аллаһ алдында дәрәжәһе күтәрелә. Шуның өсөн ҡорбандарығыҙҙы хуш күңел менән салығыҙ!”*

*(Тирмиҙи, Әдахи, 1)*



Ҡорбан беҙҙе **Аллаһу Тәғәлә биргән ниғмәттәрҙе башҡалар менән уртаҡлашырға ғәҙәтләндерә**. Иттең бер өлөшөн ярлыларға биреп, уларҙы ҡыуандырабыҙ. Ауыр йәшәгәндәрҙе был донъяла шатландырып, бәхетле булабыҙ һәм мәңгелек әхирәт өсөн әжер алабыҙ.

Бер мәл Аллаһ Рәсүленең (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) ғаиләһендә ҡорбан салалар. Ҡалаҡ һөйәгенән башҡа өлөштәре ярлылырға таратылып бирелә. Пәйғәмбәребеҙ ҡорбандан ниндәй өлөш ҡалыуын һорай. Мөьминдәрҙең әсәһе Ғәйшә ҡалаҡ һөйәге генә ҡалауын әйтә. Аллаһ Рәсүле уға әжере мәңгелек тормош бүләге буласағын иҫкәртеп былай ти: *“Ни өсөн һиңә, ҡалаҡ һөйәгенән башҡа бөтә өлөштәре лә беҙҙә ҡалды, тип әйтмәҫкә!?”*

(Тирмиҙи, Сифатул-Ҡиәмә, 33)

Беҙгә бирелгән ғүмер, байлыҡтар тик Аллаһтыҡы ул. Ибраһим пәйғәмбәр кеүек ҡорбан салып, бар нәмә Аллаһтан бирелгәнлеген һәм йөрәктәребеҙҙең тик уға ғына буйһонғанлығын тәрәнерәк аңлайбыҙ. Шулай итеп, ҡорбан **Аллаһ ҡушҡандарҙы тоғролоҡ һәм буйһоноусанлыҡ менән үтәү теләген арттыра**.



Аллаһу Тәғәлә бойора:

*“Эй, Ибраһим! Һин төшөңдә күргәнде раҫланың!.. Ысынлап та, асыҡ һынау булды был. Уның фидиәһен Беҙ оло ҡорбан менән ҡайтарҙыҡ”.*

(Саффат сүрәһе, 105-107-се аяттар)

Ҡорбан - ярлыларға ит менән ярҙам итеү ул. Ҡорбан - ярлылыҡ менән байлыҡ нигеҙендә барлыҡҡа килгән тәкәбберлекте һәм көнсөллөктө кәметә. Ҡорбан - ижтимағи ғәҙеллекте урынлаштыра. Ҡорбан - **бер-беребеҙгә ҡарата хөрмәтте, яратыуҙы һәм терәк булыуҙы, үҙ-ара ярҙам итеү теләген нығыта**.

Аллаһу Тәғәлә бойора:



*“Ашағыҙ уларҙың итен, бәхетһеҙ ярлыларҙы ла ашатығыҙ”.*

(Сура “аль-Хадж”, 28)





## ҠОРБАН КЕМДӘР ӨСӨН ВӘЖИБ?

- Аҡыл яғынан сәләмәт,
- бәлиғ булған,
- ирекле булған,
- юлсы булмаған,
- тормошо етеш һәм бай булған

һәр мосолманға

ҡорбан салыу вәжиб.
☺☺☺

## ҠОРБАН ӨСӨН ЯРАҠЛЫ ХАЙУАНДАР

- ✓ Ваҡ малдарҙан: **һарыҡ** һәм **кәзә**;
- ✓ Эре малдарҙан: **һыйыр** һәм **дөйә**.


бер йәше тулған
Һарыҡ

бер кеше исеменән генә салына.


бер йәше тулған
Кәзә

бер кеше исеменән генә салына.


ике йәше тулған
Һыйыр

бер кешенән алып ете кешегә тиклем бергәләшеп ҡорбан ҡыла алалар.


биш йәше тулған
Дөйә

бер кешенән алып ете кешегә тиклем бергәләшеп ҡорбан ҡыла алалар.

- ✓ Ҡорбан ителәсәк малдарҙың ағзалары теүәл, сәләмәт булырға тейеш.
- ✓ Физик кәмселектәре булған, күҙҙәре һуҡыр йәки тештәренең күп өлөшө етешмәгән мал ҡорбанлыҡҡа бармай.

# Ҡорбан нисек салына?

- Ҡорбанға тәғәйенләнгән малды интектермәй генә ҡорбан салыу урынына алып киләләр.
- Уның аяҡтарын бәйләп, башын ҡиблаға ҡаратып, һулаҡай ҡабырғаһына һалалар.
- Тәшрик тәкбире әйтелә.
- “Бисмилләһи, Аллаһу әкбәр” һүҙҙәре менән ҡорбанды салалар.

**Ҡорбан салғанда әйтелә:**

إِنَّ صَلاَتِي وَنُسُكِي وَمَحْيَايَ وَمَمَاتِي لِلَّهِ رَبِّ الْعَالَمِينَ

“Иннә салəәтии үә нусүкии үә мәхйәәйә үә мәмәәтии лилләәһи раббил - ғәәләмин”.

“Минең намаҙым, ғибәҙәттәрем, йәшәүем, үлемем тик барса ғәләмдең хужаһы булған Аллаһу Тәғәләм өсөндәр”. Был доғаны әйтеү - сөннәт һанала. ☺☺

**Тәшрик - тәкбире:**

اَللّٰهُ أَكْبَرُ اَللّٰهُ أَكْبَرُ لاَ إِلٰهَ إِلاَّ اللّٰهُ وَاللّٰهُ أَكْبَرُ

اَللّٰهُ أَكْبَرُ وَلِلّٰهِ الْحَمْدُ

“Аллаһу әкбәр, Аллаһу әкбәр! Ләә иләәһә илләллаһу үә Аллаһу әкбәр! Аллаһу әкбәр, үә лилләәһил - хәмд!”

“Аллаһ Бөйөк! Аллаһ Бөйөк! Унан башҡа илаһ юҡтыр! Аллаһ Бөйөк! Һәр төрлө маҡтау тик Аллаһ өсөндәр!”

Иң яҡшыһы - ҡорбан хужаһы ҡорбанды үҙе салһа. Был хоҡуҡты башҡа мосолманға тапшырырға ла була. Бындай осраҡта ҡорбан ителәсәк малдың баш осонда доғалар ҡылып торорға мөмкин.





## ҠОРБАН САЛҒАНДА НИМӘЛӘРГӘ ИҒТИБАР ИТЕРГӘ КӘРӘК?



- Ҡорбанды белгән кеше салырға тейеш.
- Ҡорбанлыҡ мал менән һаҡ мөғәмәлә итеү зарур.
- Мөмкинлек булғанда, күҙҙәрен берәй туҡыма киҫәге менән ҡаплап, аяҡтарын бәйләргә кәрәк.
- Үткер бысаҡ менән салырға.
- Ҡорбанлыҡ урынды бысратмаҫҡа.

## ҠОРБАН ИТЕ НИСЕК БҮЛЕНӘ?

- Ғәҙәттә, ҡорбан ите өс өлөшкә бүленә:
  - Бер өлөшө фәҡирҙәргә таратыла.
  - Икенсе өлөшө ҡунаҡтарҙы, туғандарҙы, күршеләрҙе һәм юлсыларҙы һыйлар өсөн ҡулланыла.
  - Өсөнсө өлөш үҙебеҙҙә ҡала.

Әгәр ҡорбан салыусы теләһә, ҡорбан итенең өс өлөшөн дә фәҡирҙәргә һәм ауыр йәшәгән кешеләргә тарата ала.

## ҠОРБАН МАЛЫНЫҢ ТИРЕҺЕН НИ ЭШЛӘТЕРГӘ?

☺ Ҡорбан малының тиреһе кемгә зәкәт тейешле, шул кешеләргә бирелә.

☺ Мәсеткә, мәҙрәсәгә һәм төрлө хәйриә ойошмаларына ла бирергә мөмкин.

☹ Беҙҙең дин хупламаған маҡсаттарҙа ҡулланырға ярамай.

# НӘҘЕР ҠОРБАНЫ ☺☺☺



✍ Нәҙер ҡорбаны - Аллаһу Тәғәлә ризалығын алыр өсөн ант ителгән ҡорбан ул. Был ҡорбан вәжиб һанала.

Нәҙер ҡорбаны ике төргә бүленә:

1. Ниндәйҙер шарттар менән бәйле нәҙер ҡорбаны:

➲ Мәҫәлән, беҙ: “Атайым һауығып сыкһа, ҡорбан салырмын”, - тип нәҙер әйтһәк, уның һауығып сығыуына тиклем был вәғәҙә вәжиб һанала.

2. Ниндәйҙер шарттар менән бәйле булмаған нәҙер:

➲ Мәҫәлән, беҙ: “Мин Аллаһ хаҡына ҡорбан килтерәм”, - тип әйтәбеҙ икән, был осраҡта нәҙер әйткәндән алып, был нәҙер беҙҙең өсөн вәжиб һанала.

## НӘҘЕР ҠОРБАНЫ ӨСӨН НИНДӘЙ МАЛ ЯРАҠЛЫ?

✓ Нәҙер ҡорбанына һарыҡ, кәзә, һыйыр һәм дөйә малдары яраҡлы.

⊗ Тауыҡ, әтәс һәм башҡа ҡош-ҡорттар ҡорбанға бармай.

## НӘҘЕР ҠОРБАНЫ ИТЕН НИСЕК ӨЛӘШЕРГӘ?

✓ Нәҙер ҡорбаны ите тулыһынса фәҡир һәм ауыр йәшәгән кешеләргә таратыла.

⊗ Кем нәҙер ҡорбанын салдырған, шул кешегә уның итен ашарға ярамай.

⊗ Шулай уҡ уның иренә йә ҡатынына, ата-әсәһенә, өләсәй-олатаһына, балаларына һәм ейән-ейәнсәренә лә ашарға ярамай. Бынан тыш ҡорбан малының тиреһен һәм эске ағзаларын да үҙҙәре ҡулланмай. Әгәр ҡулланған булһалар, хаҡын фәҡирҙәргә таратып биреү зарур.

# ҒАҠИҠӘ ҠОРБАНЫ ☺☺



✍ Ғаҡиҡә ҡорбаны - яңы тыуған бала өсөн Аллаһу Тәғәләгә рәхмәт йөҙөнән салына.

☺☺ Ғаҡиҡә ҡорбаны сөннәт һанала.

📖 Ғаҡиҡә ҡорбаны бала тыуғандан алып бәлиғ булғанға тиклем салына. Иң яҡшыһы - бала тыуғандың етенсе көнөндә үк салдырыу.

✓ Ғаҡиҡә ҡорбаны өсөн һарыҡ, кәзә, һыйыр һәм дөйә малдарын салалар.

✓ Ғаҡиҡә ҡорбаны итен салдырған кеше һәм яҡындары, туғандары ашайҙар.

# Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) һәм ҡорбан



Пәйғәмбәребеҙ ҡорбан ғибәҙәтенә ҙур әһәмиәт биргән. Мәҙинәгә күскәндән алып, ул йыл һайын ҡорбан салған. Үҙенең сәхәбәләрен дә был ғәмәлде үтәргә саҡырған. «Ҡорбан байрамы көнө бер ҡол да, Раббыһына яҡынлашыу өсөн, ҡорбан салыуҙан да гүзәл эш эшләй алмаҫ», - тигән Ул. Үҙе лә Аллаһу Тәғәләгә эскерһеҙ тоғролоҡ менән ҡорбан ғәмәлен үтәгән.

Үҙенең тәүге ҡорбанын Аллаһ Рәсүле һижриҙең икенсе йылында ҡылған. Мосолмандар менән был йылдағы Ҡорбан байрамы көндө ҙур асыҡ майҙанға намаҙ ҡылыу ниәтендә юллана. Намаҙҙан һуң, мосолмандарҙы ҡорбан салырға саҡырып, хөтбә һөйләй. Үҙе лә ике һарыҡ малын ҡорбан итеп сала. Беренеһен үҙ исеменән салһа, икенсеһен түбәндәге һүҙҙәр менән: «Йә Раббым! Ошо ҡорбан минең өммәтемдең был ғәмәлде үтәргә хәле етмәгән мосолмандары өсөн!» - тип ниәтләй. Ҡорбанлыҡ малдарҙы ергә һалғас, Аллаһ Рәсүле доға ҡыла: «Йөҙөмдө был һауа һәм ерҙе барлыҡҡа Килтереүсегә йүнәлдерҙем. Мин Аллаһҡа тиңдәш тотҡандарҙан түгел! Минең намаҙҙарым, ғибәҙәттәрем, ғәмәлдәрем, ғүмерем һәм үлемем - барса ғаләмдәрҙең Хужаһы булған, Уға һис тиңдәше булмаған Аллаһу Тәғәлә өсөндөр. Һәм мин Уға буйһоноусыларҙың тәүгеһелер. Был ҡорбан Һинең ризалығың өсөн! Йә Раббым! Минән һәм өммәтемдән ошо ҡорбандарҙы ҡабул ит!» Ошонан һуң ҡорбан сала. (Тирмизи, Әдахи, 22).

Беҙҙең һөйөклө Пәйғәмбәребеҙ Аллаһу Тәғәлә барлыҡҡа килтергән бөтә йән эйәләренә лә яҡшы мөғәмәләлә булырға ҡушҡан. Ҡорбанлыҡ малды ыҙалатып, уға насар мөнәсәбәттә булғандарҙы яратмаған.

**Һөйөклө Пәйғәмбәребеҙ әйткән:**

“Бөйөк Аллаһ бөтә тере йән эйәләре менән дә яҡшы мөғәмәлә итергә бойора. Әгәр уның йәнен алыу кәрәклеге булһа, ул малды ыҙалатмағыҙ. Ҡорбан салыусы бысағын яҡшы үткерләһен һәм ҡорбанлыҡ малды ыҙалатмаһын”.

(Мөслим, Сайд, 57)

Бер ваҡыт Аллаһ Рәсүле (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) һарыҡ малын ҡорбан итеүсене күрә. Ул кеше һарыҡты ергә һалған да, эргәһендә бысағын үткерләй башлаған. Малға былдай ҡаты мәрхәмәтһеҙ мөғәмәләне күреп, нык ҡәнәғәтһеҙлек кисергән Аллаһ Рәсүле: “Был меҫкен малды нисә тапҡыр үлтерергә йыйынаһың? Бысағыңды алдан үткерләп булмай инеме?” - тип асыуланған.

(Хәким, Мустәдрәк, IV, 231, 233)

# ҺОРАУҘАР

## Белемебеҙҙе тикшерәбеҙ

Дөрөҫ яуаптарҙы билдәләгеҙ.

1. Ҡорбан Аллаһҡа яҡынайыу һәм Уның ризалығын алыу өсөн салына. ☐ дөрөҫ ☐ хата
2. Һәр мосолман ғүмерендә бер тапҡыр ҡорбан салырға тиеш. ☐ дөрөҫ ☐ хата
3. Һарыҡ һәм кәзәне тик бер кеше, ә һыйыр һәм дөйәне бер кешенән алып ете кешегә тиклем ҡорбан ҡыла алалар. ☐ дөрөҫ ☐ хата
4. Кем нәҙер ҡорбанын салдырған, шул кешегә, уның иренә йә ҡатынына, ата-әсәһенә, өләсәй-олатаһына, балаларына һәм ейән-ейәнсәренә лә был ҡорбандың итен ашарға ярамай. ☐ дөрөҫ ☐ хата
5. Ҡорбан ите тулыһынса ярлы-фәҡирҙәргә таратылырға тейеш. ☐ дөрөҫ ☐ хата

## Үҙебеҙҙе тикшерәбеҙ

**1. Ҡорбан байрамы көндәрендә салынған ҡорбан мосолман өсөн нимә һанала?**

а) Фарыз б) Сөннәт
в) Вәжиб г) Мөбәх

**2. Ҡайһы пәйғәмбәрҙәр (ғәләйһис-сәләм) ҡорбан менән һыналды?**

а) Ибраһим һәм Исхаҡ
б) Дауыт һәм Сөләймән
в) Яҡуп һәм Йосоп
г) Ибраһим һәм Исмәғил

**3. Ҡорбан ҡылған кешегә нимә шарт түгел?**

а) мосолман булыу
б) аҡыл яғынан сәләмәт һәм бәлиғ булыу
в) һау булыу
г) бай булыу

**4. Ниндәй ҡорбан бала тыуған өсөн Аллаһу Тәғәләгә рәхмәт йөҙөнән салына?**

а) Ғаҡиҡә ҡорбаны
б) Адаҡ ҡорбаны
в) Нәҙер ҡорбаны
г) Һәди ҡорбаны

**5. Ҡорбан нимәгә ҡағылмай?**

а) беҙҙе Аллаһҡа яҡынайта
б) көндәлек тормошобоҙҙо тәртипкә һала
в) Аллаһ ҡушҡандарҙы үтәүҙә тоғролоҡ һәм буйһоноусанлыҡты арттыра
г) Ҡорбан беҙҙе Аллаһу Тәғәлә биргән ниғмәттәрҙе башҡалар менән уртаҡлашырға ғәҙәтләндерә

## Төшөп ҡалған һүҙҙәрҙе тултырабыҙ

**(Аллаһ өсөн / тулыһынса / тәҡүәлек / ыҙалатмаһын / ғибәҙәттәрем)**

1. Ҡорбан ........... байлыҡ һәм ғүмерең менән дә фиҙа ҡылыуҙың кәрәклеген иҫкәртә.
2. “Минең намаҙҙарым, ..........., ғәмәлдәрем, ғүмерем һәм үлемем тик Аллаһ өсөндөр”.
3. Нәҙер ҡорбаны ите ........... фәҡир һәм ауыр йәшәгән кешеләргә таратыла.
4. “…Ҡорбан салғанда малды яфаламағыҙ. Ҡорбан салыусы бысағын яҡшы үткерләһен һәм ҡорбанлыҡ малды ........... “
5. “Ҡорбандың ите лә, ергә тамған ҡаны ла Аллаһҡа барып етмәй. Уға тик беҙҙең ........... кенә кәрәк”.



# ҺОРАУҘАРҒА ЯУАПТАР

## “Ғибәҙәт” бүлеге

**Белемебеҙҙе тикшерәбеҙ - 19 бит**

1- Дөрөҫ 2- Хата 3- Хата 4- Дөрөҫ 5- Дөрөҫ

**Үҙебеҙҙе тикшерәбеҙ - 19 бит**

1- Г 2-Б 3-В 4- Г 5- В

**Төшөп ҡалған һүҙҙәрҙе тултырабыҙ - 20 бит**

1- Ғибәҙәтем 2- Ғибәҙәт 3- Ғәмәлдәр 4- Аллаһтың 5- Шөкөр /

## “Мөкәлләфтең ғәмәлдәре” бүлеге

**Белемебеҙҙе тикшерәбеҙ - 29 бит**

1- Дөрөҫ 2- Хата 3- Дөрөҫ 4- Дөрөҫ 5- Дөрөҫ

**Үҙебеҙҙе тикшерәбеҙ - 29 бит**

1- Б 2- Г 3- А 4- В 5- А

**Төшөп ҡалған һүҙҙәрҙе тултырабыҙ - 30 бит**

1- Мөкәлләф 2- Фарыҙ 3- Фарыҙ-ғәйн 4- Фарыҙ-кифая 5- Вәжиб 6- Мөәккәдә сөннәһе 7- Мөстәхәб 8- Мөбәх 9- Харам 10- Мәкруһ



## “Паҡлыҡ” бүлеге

**Белемебеҙҙе тикшерәбеҙ - 43 бит**

1- Дөрөҫ 2- Хата 3- Дөрөҫ 4- Хата 5- Дөрөҫ

**Үҙебеҙҙе тикшерәбеҙ - 39 бит**

1- А 2- А 3- В 4- Г 5- А

**Төшөп ҡалған һүҙҙәрҙе тултырабыҙ - 44 бит**

1- Яртыһы 2- Таҙа 3- Паҡланғандарҙы 4- Нәжес

## “Тәһәрәт” бүлеге

**Белемебеҙҙе тикшерәбеҙ 1 - 68 бит**

1- Дөрөҫ 2- Хата 3- Дөрөҫ 4- Хата 5- Дөрөҫ

**Үҙебеҙҙе тикшерәбеҙ 1 - 68 бит**

1- В 2- Г 3- В 4- Б 5- Г

**Төшөп ҡалған һүҙҙәрҙе тултырабыҙ 1 - 69 бит**

1- Өсәр тапҡыр 2- Сөннә 3- Мисүәк менән 4- Мәкруһ 5- Фарыҙ

### “Ғөсөл” бүлеге

**Белемебеҙҙе тикшерәбеҙ 2 - 69 бит**

1- Дөрөҫ 2- Дөрөҫ 3- Хата 4- Хата 5- Хата

**Үҙебеҙҙе тикшерәбеҙ 2 - 70 бит**

1- Б 2- А 3- Г 4- В 5- А

**Төшөп ҡалған һүҙҙәрҙе тултырабыҙ 3 - 70 бит**

1- Ауыҙ-танау 2- Фарыҙ 3- Сөннә 4- Мәкруһ 5- Тәйәммүм

### “Намаҙ” бүлеге

**Белемебеҙҙе тикшерәбеҙ 1 - 124 бит**

1- Дөрөҫ 2- Хата 3- Хата 4- Дөрөҫ 5- Хата 6- Дөрөҫ 7- Хата 8- Хата 9- Дөрөҫ 10- Дөрөҫ

**Белемебеҙҙе тикшерәбеҙ 2 - 124 бит**

1- Хата 2- Хата 3- Хата 4- Дөрөҫ 5- Хата 6- Хата 7- Дөрөҫ 8- Хата 9- Хата 10- Дөрөҫ

**Белемебеҙҙе тикшерәбеҙ 3 - 125 бит**



1- Дөрөҫ 2- Дөрөҫ 3- Дөрөҫ 4- Хата 5- Дөрөҫ

**Үҙебеҙҙе тикшерәбеҙ 1 - 126 бит**

1- Б 2- А 3- Б 4- Б 5- В 6- Б 7- В 8- Г 9- Б 10- Г 11- А 12- В 13- А 14- В 15- В

**Үҙебеҙҙе тикшерәбеҙ 2 - 127 бит**

1- Г 2- Б 3- А 4- Б 5- В 6- А 7- А 8- А 9- Б 10- Б

**Үҙебеҙҙе тикшерәбеҙ 3 - 129 бит**

1- Г 2- Г 3- Б 4- А 5- В 6- Б 7- В 8- В 9- А 10- Б

**Төшөп ҡалған һүҙҙәрҙе тултырабыҙ 1 - 130 бит**

1- Тәһәжжүдд 2- Сәтр ғәүрәт 3- Истикбал Ҡибла 4- Ҡыраәт 5- Сәждә

**Төшөп ҡалған һүҙҙәрҙе тултырабыҙ 2 - 130 бит**

1- Уң 2- Хөтбә 3- Тәшрик 4- Кифая 5- Има 6- Ғонаһ 7- Сәһү 8- Тиләүәт

## “Ураҙа” бүлеге

**Белемебеҙҙе тикшерәбеҙ - 157 бит**

1- Дөрөҫ 2- Дөрөҫ 3- Дөрөҫ 4- Хата 5- Хата 6- Хата 7- Хата 8- Дөрөҫ

**Үҙебеҙҙе тикшерәбеҙ - 157 бит**

1- А 2-Б 3-В 4- А 5- Б 6- В 7- Г 8- Б 9- А

**Төшөп ҡалған һүҙҙәрҙе тултырабыҙ - 158 бит**

1 - мәрхәмәтлелек, ярлыҡау 2 - сәләмәт 3 - алтмыш бер 4 - ҡаза 5 - нәҙер 6 - Ҡәҙер, ғәфү ит 7 - Раййән

## “Зәкәт” бүлеге

**Белемебеҙҙе тикшерәбеҙ - 187 бит**

Кешенең нисап миҡтарындағы мөлкәте булһа, ул дини ҡанундар буйынса бай иҫәпләнә.

Алтын - көмөштән ҡырҡтан бер өлөшө, йәки 2,5% зәкәт итеп түләнә.

Үҙеңдең ейән-ейәнсәрҙәреңә зәкәт бирелмәй.

Зәкәт биреү - ғибәҙәт ҡылыу ул.

Зәкәт мәктәп, хәстәхана, мәсет, юлдар, күпер, ҡоҙоҡ һәм башҡа төҙөлөштәр өсөн бирелмәй.

Зәкәт - байҙарҙың артыҡ мөлкәтен мохтаждарға еткереү күпере ул.

Бай мосолмандарҙың мөлкәтенән бер өлөшөн мохтаждарға биреү зәкәт тип атала.

Биргән ҡул алған ҡулдан өҫтөнөрәк.

Алтын нисабы - 80,18 грамм.

Фытыр саҙаҡаһының күләме - кешене туйҙырыу өсөн бер көнлөк аҙыҡ йәки аҡсалата эквивалент.

**Үҙебеҙҙе тикшерәбеҙ - 187 бит**

1- Г 2- А 3- В 4- А 5- Б 6- Г 7- В 8- Г

**Төшөп ҡалған һүҙҙәрҙе тултырабыҙ - 188 бит**

1 - һорамаған 2 - мөлкәтендә 3 - орлоҡҡа 4 - йөрәгеңдең 5 - таҙартабыҙ

## “Хаж” бүлеге

**Белемебеҙҙе тикшерәбеҙ - 219 бит**

1- Дөрөҫ 2- Дөрөҫ 3- Хата 4- Хата 5- Дөрөҫ 6- Дөрөҫ 7- Дөрөҫ 8- Дөрөҫ

**Үҙебеҙҙе тикшерәбеҙ - 219 бит**

1- В 2- А 3- В 4- Б 5- Г 6- В 7- Б 8- А 9- Г 10- А

**Төшөп ҡалған һүҙҙәрҙе тултырабыҙ - 220 бит**

1 - Ибраһим мәҡамы 2 - Мина 3 - Зәмзәм 4 - Ихрам 5 - Ҡәғбә Мүғәҙҙәмә 6 - тере сағымда 7 - гонаһһыҙ

## “Ҡорбан” бүлеге

**Белемебеҙҙе тикшерәбеҙ - 233 бит**

1- Дөрөҫ 2- Хата 3- Дөрөҫ 4- Дөрөҫ 5- Хата

**Үҙебеҙҙе тикшерәбеҙ - 233 бит**

1- В 2- Г 3- В 4- А 5- Б

**Төшөп ҡалған һүҙҙәрҙе тултырабыҙ - 234 бит**

1 - Аллаһ өсөн 2 - ғибәҙәттәрем 3 - тулыһынса 4 - ыҙалатмаһын 5 - тәҡүәлек



* * *